—Ki-ki-rikük! Ki-ki-rikük! Min — şah-ätäs, batşa ätäs, min — ḫan-ätäs, soltan-ätäs! — tip ḳısḳıra başlaġan, ti. — Sibärkäyẕärem, höyöklö ḳarabikälärem, sıbarbikälärem, aḳbikälärem! Äytegeẕse, don'yala maturẕarẕan matur kem matur, batırẕarẕan batır kem batır?

Şul tirälä yörögän tawıḳtar: ḳarabikälär, sıbarbikä-lär, aḳbikälär yügerä-yügerä yıyıldılar, ti, bınıñ yanına. Yıyıldılar ẕa ti, törlö yaḳtan yırlay ẕa başlanılar, ti.

— Ḳayẕa inde, ḳayẕa inde beẕẕeñ böyök ḫanıbıẕ menän tiñ bulıw. Ḳayẕa inde, ḳayẕa inde ul beẕẕeñ maḳtawlı şahıbıẕ, höyöklö batşabıẕ menän tiñläşerẕäy keşe? Yuḳ, yuḳ, yuḳ, yuḳ, inde ul, ḫanıbıẕ, soltanıbıẕ, hinän aḳıllı la, hinän matur ẕa, hinän batır ẕa yuḳ inde bıl don'yala!

Ätäs tağı la köslöräk itep:

— Ki-ki-rikük! Ki-ki-rikük! — tip ḳısḳırẕı la, ti, tağı horanı, ti, bılarẕan:
-Arıs̱lan tawışınan da köslöräk tawış tağı kemdä

**-12-**

bar? Kemdeñ ayağı ḳeüätleräk tä, kemdeñ keyeme zinnätleräk?

— Kemdeñ bulhın, hineñ keyemeñ zinnätleräk, padişahıbıẕ, hineñ ayaḳtarıñ timerẕän dä nıġıraḳ, soltanıbıẕ, hineñ tawışıñ arıs̱lan tawışınan da ġäyrätleräk, ḳeüätleḫanıbıẕ, — tip yırlaştılar, ti, tawıḳtar.

Ätäs mahayıwınan şartlarġa ette, ti. Şunan huñ kikregen taġı la yuġarıraḳ öyöp ebärẕe lä, ti:

— Ki-ki-ri-kük! Ki-ki-ri-kük! Ḳaraġıẕ äle, ḳatındar,(10)don’yala kemdeñ täẖete beyegeräk tä, kemdeñ başındaġı tajı zatlıraḳ? — tip horaġan, ti.

Tawıḳtar yügerä-yügerä beyek ḳoymanıñ yanına uḳ kildelär ẕä, ti, ḳuḳırayıp ultırġan ätäskä baştarın ëyep:

— Täẖettärẕän beyek hineñ täẖeteñ beyek, tajdarẕan zat(15)lı hineñ tajıñ zatlı! hin bit beẕẕeñ berẕän-ber şahıbıẕ,hin bit beẕẕeñ berẕän-ber padişahıbıẕ! — tip äyttelär, ti.

Şul arala äyẕän yıwan aşnaḳsı sıġıp, ayaḳ ostarına ġına bas̱ıp, ḳoyma yanına kilde lä ätäste eläkterep tä aldı, ti.

(20)Bına bälä! Bına ḳayġı!

Aşnaḳsı, bilenän bısaġın alıp, böyök şahtıñ başın sabıp öẕẕö lä, ti, maḳtawlı ẖandıñ zinnätle keyemdären yolḳḳolap taşlap, eñelmäs̱ soltandıñ itenän tämle hurpa beşerẕe, ti.

(25)Ä keşelär aşayẕar-aşayẕar ikän dä, aştı maḳtap:

— Ay-hay, tämle ikän bıl ätäs! Ay-hay, himeẕ ikän bılätäs! — tip äytälär ikän, ti.

## BİKBATIR HÄM BİKḲURḲAḲ

*A. Aliş*

(30)Ber balanıñ ap-aḳ ḳuyanı menän bik matur besäye bulġan. Ular üẕ-ara bik tatıw yäşägändär. Ḳuyan keter-keter itep ḳabıḳ kimergän, besäy sıpır-sıpır itep höt ëskän.

Besäy ber nämänän dä ḳurḳmay ikän, uġa bala Bikbatır tip isem ḳuşḳan, ḳuyan der-der kilep bötä nämänän dä şör-(35)läy, ḳurḳa ikän. Unı bala Bikḳurḳaḳ tip ataġan.

Bikḳurḳaḳ ber köndö stenala ḳot os̱kos nämä kürgän: (37)ḳolaḳtarı bik oẕon, mıyıḳtarı helkenep tora, üẕe kilep

-13-

(1)torop kilbätheẕ ikän. Ḳurḳıwınan ḳuyan ni ëşlärgä belmägän, bas̱ḳan urınınan ḳuẕġala almaġan. Yaray äle Bikbatır kilep etkän häm Bikḳurḳaḳḳa aẕmı-küpme kös ingän. «Ëy aḳılhıẕ, yülär, — tigän, — üẕ şäüläñdän üẕeñ ḳurḳıp tora-(5)hıñ da baha», — tigän. Bikḳurḳaḳtan rähätlänep kölgän. «Yaray äle hin kildeñ, Bikbatır, ḳurḳıwımdan min ülgän bulır inem», — tigän ḳuyan.

İkense vaḳıtta ḳuyan taġı la ḳurḳa töşkän, yöräge döp-döp tipkän, nimäler bik ḳıştırlay ikän. «H̱äẕer iẕän aştı(10)nan sıġır ẕa ḳıştırlawsı mine yotop ta ebärer,—tip uy-lay ikän ḳuyan. — Besäy ẕä ḳolaḳtarın torġoẕġan, ul da ḳurḳa, aẖırı»,— tip uylaġan ḳuyan. Şul saḳ nimäler şap itep döbörläp kitkän. Ḳuyan huşhıẕ yıġıla yaẕġan. Ä besäy, awıẕına nimäler ḳabıp, ḳuyan yanına kilgän. Kilgän dä: «Bına hi(15)ne ḳurḳıtıwsı nämä oşo inde», — tigän, ber bäläkäy genä nämäne ḳuyanġa kürhätkän. «Oşo bäläkäy genä nämä şul tiklem tawış sıġara alamı?» — tip, sısḳandı ḳuyan ġäjäplänep ḳaraġan.

Ösönsö tapḳır asıḳ işektän öygä ber ët kilep ingän häm (20)ḳatı itep örörgä kereşkän. Ḳuyan karawat as̱tına ḳasḳan. Ä Bikbatır iẕän urtahına sıġıp bas̱ḳan, ẕur kürenergä tırışıp, hırtın ḳabartḳan, ët höjüm ithä, unıñ bittären tırnarġa yıyınġan. Bildäle, ët uġa teymägän, işektän äkren •genä sıġıp hıẕġan. Ä Bikbatır üẕeneñ batırlıġı arḳahın-(25)da bıl bälänän dä bik os̱ta ḳotolġan.

## DUS̱TAR

*S. Äẕhämova*

Kis yaḳınlaşıp kilä ine. Yalan äylänähendäge külägälär yuẕonaya barẕı. Bına yalan ös̱töndäge ḳoyaş, ağastar artına tä(30)gärägändäy bulıp, küẕẕän yuġaldı. Külägälär barıhı bergä totaşıp yäyeldelär, urman ëse ḳarañġılana başlanı.

Könö buyı, kis etkände kötöp, ḳıwaḳ as̱tında yatḳan inä ḳuyan urmanda yöröp ḳaytmaḳsı buldı. Kitkän saḳta, ul üẕeneñ balaları Oẕonġolaḳ menän Keseräkkä äytte:

(35)— heẕ şunda ġına uynaġıẕ. Alıs̱ kitmägeẕ! Siẕäm üs̱ep ḳuyılana töşkäs, min üẕem urman menän tanıştırırġa alıp (37)sıġırmın. Uġa tiklem heẕ tiẕ yörörgä lä öyränerhegeẕ.

**-14-**

(1)Urınınan ḳuẕġalıp, ber-ike hikergäs, ul taġı artına äylänep:

— Oẕonġolaḳ, hin Keseräkte sitlätmä, — tip ḳısḳırẕı.Unan aġas arahına inep yuġaldı.

(5)Bıl ḳuyan balaları yaẕ könö ikehe ber vaḳıtta tıwġan bulhalar ẕa, berehe niñäler bigeräk bäläkäy ine. Şuġa kürä uġa äsähe Keseräk tip isem ḳuştı.

Äsäläre kitkäs, Oẕonġolaḳ menän Keseräk geü kilep ḳıwışıp yörörgä totondolar. Tüñäräk yalan äylänähendä yügerep (10)arıġas, ular ḳasandır yäşen huġıp awẕarġan imän töbönä barıp yal ittelär. Auġan aġastıñ üẕen inde küptän keşelär yaġırġa alıp kitkän. Ä töbö yalan urtahında ḳara ultırġıs şikelle bulıp torop ḳalġan ine.

— Äyẕä, şul töp aşa hikerep uynaybıẕ! — tine Oẕonġo- (15)laḳ, ber aẕ yal itkändän huñ.

— Äyẕä-ä! — tine Keseräk.

Ular hikerep uynarġa kereştelär. Yügerep-yügerep kilälär ẕä aġas töbö aşa — hop!

Şunan alıs̱ tügel yäm-yäşel yapraḳlı yükä aġası bar. (20) Unda ber inä turġay, oya yahap, yomortḳa halġan da şul yomortḳalarẕan bäläkäy turġayẕar moronlap sıḳḳandı kötöp ultıra ikän.

Turġay, ḳuyan balalarınıñ yügerep-hikerep uynaġandarın oyahınan kürep, hoḳlanıp ultırġan.

(25)—Bına oẕaḳlamay mineñ dä bäläkäs ḳoşsoḳtarım bulır. Ḳanat sıḳḳas, ular osorġa öyränerẕär, — tip uylapḳuyġan.

Şul vaḳıt Oẕonġolaḳ alıs̱tan yügerep kilep hikeräyem tigändä genä, aġas töbö ös̱töndä yatḳan käkre ḳoro sıbıḳ, ki-(30)nät ḳuẕġalıp, yartılaş ürä torẕo. Oẕonġolaḳ, ḳurḳınıp, ḳolaḳtarın torġoẕop, sitkä hikerẕe.

Başta äle ul ber nämä lä añlay almay aptırap torġan ine. Unıñ ḳoro sıbıḳ tip uylaġan nämähe ısınlap siẕämgä, töşkäs, añlanı. Ul — sıbıḳ tügel, aġıwlı ḳara yılan ikän.

(35)Ul arala ḳara yılan, siẕäm ös̱tönän şıwışıp, tup-tura älege turġay oyalaġan aġasḳa taban kitte.

Ös̱tän bını kürep torġan turġayẕıñ yöräge yarılırġa eteşte. Ul aḳıllı ḳoş yılandarẕıñ ġäẕäten belä ine. Bına ẖäẕer yılan unıñ oyahına ürmäläp mener ẕä yomortḳala-(40)rın hıtıp ëser!

**-15-**

(1)Turġay, bik borsolop, sıyıldap ḳısḳırẕı:

— Ḳotḳarıġıẕ!

Oẕonġolaḳ menän Keseräk ëşteñ nimälä ikänlegen añlap etkermänelär etkereüen. Şulay ẕa ıs̱ıldaġan ḳara yılandıñ (5)ḳoşḳa yawızlıḳ ëşlärgä yıyınıwın hiẕendelär.

— Nisek ḳotḳarırġa huñ ul ḳoşsoḳto? — tine Oẕonġolaḳ.

Keseräk:

— Tuḳta! Äsäy ḳaytıp kilmäy mikän? Min ḳarayım äle. Ul ḳaytha, beräy nämä uylap tabır, — tip, äsähe kitkän yaḳḳa saptı.

Oẕonġolaḳ:

— Yaray, hin ul yaḳḳa bar. Min bıl yaḳtan ḳarap kiläyem! — tip, yalandıñ ikense yaġına yügerẕe.

Keseräk hikerä-hikerä, yügerep aġastar arahına barıp ineügä, ayaġına nimäler ḳaẕalıp, ḳısḳırıp ebärẕe:

— Oy, oy, oy!

Ḳaraha, unda terpe yomarlanıp yatḳan ikän.

— Nimä şul saḳlı, küẕeñä aḳ-ḳara kürenmäy, aşıġıp sabahıñ? — tine terpe, Keseräkkä asıwlanıp.

Yügerep kilep, hulışı bötkän Keseräk uġa:

— Yılan! Yılan! — tip kenä äytä aldı.

Terpe:

— Tölkö ḳıwa ikän tip toram taġı! Ḳayẕa ul yılan, kürhät, — tigäs, Keseräk şatlanıp unı eyärtep kitte.

Ular bik vaḳıtlı barıp ölgörẕölär.

Terpe, yükä aġasına ürmäläp menergä yıyınġan yılandı küreügä, yügereüen ḳıẕıwlattı, vaḳ-vaḳ atlap, tiẕ genä barẕı la, yılan öṣtönä taşlanıp, unıñ muyınına teştären batırẕı. Arttaraḳ ḳalıp, bıl ẖälde ḳarap torġan Keseräk, terpe ösön ḳurḳıp, küẕẕären yomdo. Ul küẕen asḳanda, terpe yılandı bıwıp halġan ine inde.

Ul arala Oẕonġolaḳ ta, äsähen eẕläp taba almayınsa, älheräp ḳaytḳan ine. Yılandıñ ḳuẕġalmay huẕılıp yatḳanın kürgäs, ul da, irendären ḳıymıldatıp-ḳıymıldatıp, şaḳ ḳatıp torẕo.

— Fu! Şulmı ḳurḳḳan yılanıġıẕ? Fu! — tine terpeere genä.

Oyahında tının alırġa la ḳurḳıp ultırġan turġay şatlıġınan nimä eşlärgä belmäy sutıldanı:

**-16-**

—Räẖmät hiñä, terpe! Bıl yaḳşılıġıñdı ġümerẕä onotmam. Bälki ḳasan da bulha mineñ dä hiñä fayẕam teyer.

Terpe uġa ber ni tip tä yawap birmäne.

— İ meṣken ḳoşsoḳ! hin kemgä yarẕam itä alahıñ huñ?—tip awıẕ esenän genä pırẖıldap kolöp, üẕ yulına kitte.

Oẕaḳlamay turġayẕıñ ḳoşsoḳtarı buldı. Ular äle ber nämä lä eşläy belmäyẕär. Äsäyẕäre aẕıḳ alıp ḳaytḳandı kötöp, awıẕẕarın asıp, sıyıldaşıp tik yatalar ine.

Ber köndö turġay, ġäẕätensä, aẕıḳ eẕlärgä sıġırġa yıyınġas, yalanda uynap yörögän Oẕonġolaḳ menän Keseräkkä äytte:

— Ḳuyan ḳayẕar! Min yuḳta heẕ mineñ ḳoşsoḳtarġa küẕ-ḳolaḳ bulhaġıẕ ine. Ular bik tınġıhıẕẕar. Ḳolap töşöpimgänmägäyẕäre tip ḳurḳam, heẕ ularġa ḳısḳırġılap toro ġoẕ, oyanan baştarın sıġarıp huẕılmahındar, — tine.

Oẕonġolaḳ menän Keseräk:

— Yaray, yaray. Beẕ şunda yükä töböndä, genä uynarbıẕ.Ḳoşsoḳtarıñ ḳolap töşä

başlaha, yomşaḳ ayaḳtarıbıẕ menän totop alırbıẕ. Ergä töşöp imgänergä irek birmäbeẕ! —tinelär.

Turġay tınıslanıp osop kitte. Ber aẕ yöröp, aẕıḳ alıp ḳaytıp kileşläy, ul ber tölkönöñ şıpırt ḳına ḳıwaḳ artına yäşerengänen kürep ḳaldı.

— Kemde haġalap boṣto ikän bıl yawız? — tip borsolop yaḳ-yaġına ḳaranha, teker-teker atlap kilä yatḳan tanış terpene kürẕe.

Terpe hıwhaġan bulġan, küräheñ, yamġırẕan huñ tärän soḳorġa yıyılġan hıwġa taban bara ine. Tölkö şunı haġalap boṣḳan ikän. Ḳoro erẕä terpe, yomarlanıp yatıp, tölkögä bireşmähä lä, hıw ërgähe unıñ ösön ḳurḳınıs. Tölkö unı hıwġa tägärätep töşörä lä, terpe yäyelep yöẕä başlaw menän, unı bıwıp aşay ala.

Turġayẕıñ şunday ẖälde kürgäne bar ine. Ul şunda uḳ tübän töşöp äkren genä:

— Tölkönän haḳlan! Tölkö haġalay! — tip sıyıldap, terpeneñ öṣtönän osop kitte.

Terpe, kire borolop, bötä kösö menän yügerergä totondo. Tölkö ëşte añlaġansı, ul ällä ḳayẕa, sıtırman arahına ḳasıp ölgörgän ine inde. Ber aẕ bögärlänep yatḳandan huñ, ul siẕäm aṣtınan başın sıġarıp ḳaranı häm tölkönöñ bik

-17-

käyefheẕlänep, moronon hälenderep, ikense yaḳḳa hunarġa kitkänen kürep tınıslandı.

— Fu! Bına hiñä bäläkäy genä ḳoş! Tuḳta, barıp ẖäldären beläyem äle üẕẕäreneñ, — tip yalanġa taban atlap kitte.

Köndär ütte. Turġayẕıñ balaları la üṣtelär. Ḳanat sıġarıp, osorġa öyrändelär. Üẕ aldarına kön kürä başlanılar. Oẕonġolaḳ menän Keseräk tä ẕur ḳuyan buldılar. Tik ularẕıñ bereheneñ dä şul yalandan kitäheläre kilmäne. Terpe lä başḳa erẕä yäm tapmanı, haman ḳıştır-ḳıştır şul tirälä yörönö.

Ḳışın turġayẕarġa urmanda tuyınıp torou ḳıyın bulasaḳ ine. Şuġa kürä, köẕ eteü menän, ular, ḳayẕa bulha la, keşelär tora torġan ergä kitergä yıyınalar.

Terpe, Oẕonġolaḳ häm Keseräk şul yalan tirähendä ḳış larġa buldılar. Ular turġayẕarẕı:

— Yaẕ etkäs, taġı la bında kilegeẕ! Beẕ heẕẕe kötörböẕ!—tip oẕatıp ḳaldılar.

**Nİ ÖṢÖN ḲOMALAḲ BER ŞALḲANĠA İKE SÄLÄM ÄYTKÄN?**

*N. İṣänbät*

Şalḳan säfärgä sıġıp kitkän, ti. Bara torġas, elpeldäp kilgän ber ḳomalaḳḳa osraġan. Şalḳan uġa, iġtibarhıẕ, ġına:

— Niẖäl, iṣertkes! — tip äytep halġan. Ḳomalaḳ ta ḳa lışmaġan:

— Niẖäl, ḳorhaḳ küptergäs! — tip yawap birgän dä ütkän: dä kitkän.

Şalḳandıñ bıġa bik ẖätere ḳalġan, äsähenä ḳaytıp:

— Ḳomalaḳ mine mıṣḳıl itte, şulay tip äytte, bılay tip äytte, bik nıḳ ġärländem, — tip ilay-ilay zarlanġan, ti. Äsähe äytkän:

— Äyteüen äytkän dä, ay-hay, hin unıñ menän üẕeñ yaḳşılap iṣänläşteñme ikän? Äle urman bulıp urman da, hin uġa ni tip ḳıṣḳırhañ, ul da şulay hiñä yawap birä. hin bınan huñ osraġandarġa iñ ëlek üẕeñ yaḳşılap säläm bir, balam, — tip unı bik ögötlägän, ti.

Şunan oẕaḳ ta ütmägän, şalḳan taġı la säfärgä sıġıp

-18-

kitkän, ti. Bara torġas, tağı elpeldäp kilä yatḳan ḳomalaḳḳa osraġan, ḳaraha — älege lä bayağı tege ḳomalaḳ!

— Ässälämäğäläyküm, sälläle baş! — tip yaḳşılap yawap birgän ine, ḳomalaḳ ta uġa:

—Bäġäläykümässäläm! Tanhıḳ aş! — tip sälämlägän, ti. Şul.

**ÖS ḲIẔ**

*(*Tatar *ḫalıḳ äkiä*te*)*

Boron-boron zamanda, bulġan, ti, ber ḳatın. Unıñ bulġan, ti, berehenän-berehe sibär ös ḳıẕı.

Ḳıẕẕarımdıñ tamaḳtarı tuḳ, ös̱täre bötön bulhın tip, könö-tönö ëşlägän dä ëşlägän, ti, bıl ḳatın.

Unıñ ḳıẕẕarı bik hılıw, bik uñġan bulıp üs̱ep etkändär. Ber-ber artlı keyäügä lä kitkändär, ti.

Ber yıl ütkän, ike yıl ütkän, ös yıl ütkän. Şulay yaḳşı ġına yäşägändä, äsäläre awırıp kitkän. Yaḳın urmanda unıñ teyen dus̱ı bar ikän. Ḳatın teyende saḳırıp kiltergän dä:

— Teyen dus̱ım, bar äle, ḳıẕẕarıma äythänä, ḫälemde belergä kilhendär, — tigän.

Teyen şunda uḳ sığıp sapḳan.

Olo ḳıẕġa barġan. Ḳıẕ eẕ tastar taẕarta ikän.

— hay, bik barır inem dä, tastarẕı taẕartıp bötörähembar şul, — tigän ul.

Teyen bıġa bik asıwlanıp:

—Ulay bulġas, hin oşo tastarıñdan ġümereñä lä ayırılma,— tigän.

Ḳıẕ şunda uḳ tälmäryengä äylängän dä tastağı hıwġa sumġan, ti.

Teyen urtansı ḳıẕẕıñ täẕrähen ḳaḳḳan:

—hay, barır inem dä, yärminkägä eten ölgörtähem barşul, — tigän urtansı ḳıẕ.

Teyen uġa la bik asıwlanıp:

— Ulayha, bötä ġümereñ eten tuḳıp üthen! — tigän.

Urtansı ḳıẕ şunda uḳ ürmäksegä äüerelgän, ti.

Teyen täẕrä ḳaḳḳanda, kese ḳıẕẕıñ ḳamır basḳan sağıñkän. Ul ḳamırlı ḳuldarın da yıwıp tormaġan, äsähe yanına sığıp yügergän.

*"19. Sayfada rësim yër almaktadır"*

**-20-**

Teyen kese ḳıẕġa äytkän:

— Ëy höyöklö bala, — tigän, — ġümer buyı igelek kür,keşelärẕe bäḫetle it. Keşelär ẕä hine yaratır, yaḳşılığıñdı onotmas̱tar, — tigän.

(5)Kese ḳıẕ äsähen bik ḳaraġan. Üẕe lä räẖät yäşägän. Keşelär ẕä unı bik yaratḳandar, ti.

**BÜLÄK KEMGÄ?**

(Tatar ẖalıḳ äkuäte)

Ber mäl ḳoyaş yıldıñ dürt miẕgelen — köẕẕö, ḳıştı, yaẕ- (10);ẕı häm yäyẕe üẕenä saḳırıp alġan.

— heẕẕeñ ḳayhıġıẕ maturıraḳ, ḳayhıġıẕ ëştä batırı-raḳ? Şuġa büläk biräm, — tigän.

Ä büläk bik zatlı ikän — us tultırıp yondoẕ birergä uylaġan ḳoyaş.

(15)hüẕẕe köẕ başlay:

— Üẕegeẕ yaḳşı belähegeẕ, min bötä basıwẕarẕıñ uñışın -yıyẕım, bötä don'yanı altınġa kümdem. Koştarẕı yılı yaḳḳa oẕattım, balalarẕı mäktäpkä yıyẕım. Büläk miñä bulırġa teyeş!

(20)—Ällä mineñ ëşem aẕmı? — tigän yaẕ. — Min bötä ḳarẕarẕı irettem. Basıwẕarġa igen sästem, aġastarẕı yapraḳ yarẕırẕım, yalandı säskägä kümdem. Arala iñ maturı la, iñ ëşleklehe lä min! — tigän ul.

— Ëy, ëy, — tigän yäy, — mine tıñlaġıẕ äle. Min don'ya-(25)nı yäşellekkä kümäm, säskälär üs̱teräm, igendärẕe ölgörtäm, emeştärẕe beşeräm. Ällä min iñ maturıġıẕ tügelme?

— Artıḳ küp tügel mineñ ëş, — ti tıynaḳ ḳına ḳış. — Min erẕe yal itteräm, kilähe uñış ösöN ḳarẕar taşıyım, don'yanı ap-aḳḳa buyayım, balalarẕı sana, sañġı şvtuırġa (30)saḳıram. Min dä yämheẕ tügel, mineñ şırşılarımdı, ḳar börtöktäremde, mamıḳ bäs̱täremde yaratalar.

Tıñlap-tıñlap torġan da ḳoyaş, büläkte bıl dürtäüẕeñ berehenä lä birä almaġan. Yondoẕẕarẕı ul kükkä hipkän. «Ana barıġıẕġa la!» — tigän.

(35)Yondoẕẕarẕı yıldıñ ber miẕgele lä üẕenä ala almaġan. (36)Ular yaẕ ẕa, yäy ẕä, köẕ ẕä, ḳış ta balḳıp yanalar.

-21-

(1)YOMRO İKMÄK

(Rus ẖalıḳ äkuäte)

Äbey menän babay bik tatıw yäşägändär. Ber vaḳıt babay
äbeygä arap: (5)-Ḳarsıḳ, ikmäk beşerer ineñ? —tigän.

— Nimänän beşeräyem hun? On yuḳ bit.

— Ëy, ḳarsıḳ, köbö töbönän ḳırıp, bura möyöştärenän heperep ḳara, ber aẕ yıyılmas̱mı?

Äbey bäläkäy genä ḳanat menän köbö töbönän, bura möyöş(10)tärenän heperep, ber-ike us on yıyġan.

Äbey şul ondan yomro ikmäk beşergän häm täẕrä töbönä hıwıtırġa ḳuyġan.

İkmäk täẕrä töböndä tora torġas, kinät hike öştönä tägäräp töşkän, hike öştönän — iẕängä, iẕän buyınsa — işekkä, (15)unan, bus̱aġa aşa hikerep, öy aldına, öy aldınan tışḳı basḳıs̱ḳa, tışḳı basḳıstan işek aldına, işek aldınan uramġa sıġıp, yul buylap tägäräp kitkän.

İkmäk yul buylap tägäräp barġanda, ḳarşıhına ber ḳuyan kilep sıḳḳan: (20)—İkmäk, yomro ikmäk, min hine aşayım! — tigän uġa kuyan.

— hin mine aşama, ḳılıy ḳuyan, min hiñä yır yırlarmın,— tigän dä ikmäk, şunda uḳ

yırlarġa totonġan:

— Min — yomro ikmäk, yomro ikmäk, mine köbö töbönän (25)ḳırıp, bura töbönän heperep alınġan ondan, ḳaymaḳḳa iẕep, mayġa bas̱ıp beşerẕelär, täẕrä töböndä hıwıttılar. Min babayẕan da kittem, äbeyẕän dä kittem, hinän dä, ḳuyan, ḳıyın bulmas̱ kiteüe! — tigän dä üẕ yulına tägäräp kitep barġan. Ḳuyan unı kürep kenä ḳalġan...

yomro ikmäk haman tägäräüen dawam itkän.

Bına ber vaḳıt unıñ ḳarşıhına büre kilep sıḳḳan: (30)Yomro ikmäk, yomro ikmäk, min hine aşayım!

— hin mine aşama, horo büre, min hiñä yır yırlayım;

— Min — yomro ikmäk, yomro ikmäk, mine köbö töbönän (35)ḳırıp, bura töbönän heperep alınġan ondan, ḳaymaḳḳa iẕep, mayġa bas̱ıp beşerẕelär. Min babayẕan da kittem, äbeyẕän dä kittem, ḳuyandan da kittem, hinän dä, büre, ḳıyın bulmas̱ kiteüe! — tigän dä alġa tägärägän, büre unı tik kürep kenä (39)ḳalġan.

## -22-

(1)Yomro ikmäk haman tägärägän dä tägärägän. Bına ber vaḳıt unıñ ḳarşıhına ber ayıw kilep sıḳḳan.

— Yomro ikmäk, yomro ikmäk, min hine aşayım!

— Ḳayẕa ul hiñä, tayış ayaḳ, mine aşarġa! Min yomro (5)ikmäk, yomro ikmäk, mine köbö töbönän ḳırıp, buranan heperep alınġan ondan, ḳaymaḳḳa iẕep, mayġa bas̱ıp beşerẕelär, täẕrä töböndä hıwıttılar, min babayẕan da kittem, äbeyẕän dä kittem, ḳuyandan da kittem, bürenän dä kittem, hinän dä, ayıw, ḳıyın tügel kiteüe! — tigän, häm yomro ikmäk taġı la (10)alġa tägäräp kitkän, ayıw unı kürep kenä ḳalġan.

Yomro ikmäk haman tägärägän dä tägärägän: unıñ ḳarşıhına tölkö kilep sıḳḳan:

— İs̱änme, yomro ikmäk, hin nindäy güzälheñ?!

Uġa ḳarşı yomro ikmäk yırlay başlaġan:

(15)—Min — yomro ikmäk, yomro ikmäk, mine köbö töbönän ḳırıp, buranan heperep alġan ondan, ḳaymaḳḳa iẕep, mayġa bas̱ıp beşerẕelär, täẕrä töböndä hıwıttılar. Min babayẕan da kittem, äbeyẕän dä kittem, ḳuyandan da kittem, bürenän dä kittem, ayıwẕan da kittem, hinän dä, tölkö, ḳıyın tügel ki-(20)teüe!

— Nindäy yaḳşı yır!'—tigän tölkö. — Tik min, yomro ikmäk, ḳartayẕım inde, bik nasar işetäm: mineñ tanawım ös̱tönä ultırıp, taġı ber tapḳır yırlap kürhät äle. Ḳısḳırıbıraḳ yırla.

(25)İkmäk tölkönöñ tanawı ös̱tönä menep ultırġan da şul uḳ yırẕı ḳabatlaġan.

— Räẖmät, bik häybät yır ikän. Min taġı la tıñlarinem. Mineñ telem ös̱tönä ultırıp, huñġı tapḳır yırlası! — tigän tölkö häm telen sıġarġan.

(30)Yomro ikmäk aḳılhıẕlıġınan tölkönöñ tel ÖS̱TÖNÄ hikergän ikän, tölkö unı şunda uḳ yotop ebärgän.

### AYḲIYĠAḲ *(Nanay ẖalıḳ äkiäte)*

Boron-boron zamanda Samarẕar ırıwında La tigän ber (35)nanay yäşägän. Ayḳıyġaḳ isemle ḳıẕı la bulġan unıñ. Bik matur bulġan ul ḳıẕ. Bötähe lä unı bik yaratḳandar. Köndärẕeñ ber könöndä ḳayhıhılır: «Bötä tirä-yaḳta La ḳıẕınan (40)da sibäreräk ḳıẕ yuḳ!» — tip ḳuymahınmı.

**-23-**

(1)Bını işetkäs, Ayḳıyġaḳtıñ tübähe kükkä teygän. Ul käpräyep, ërelänep üẕeneñ yöẕön ḳararġa totonġan häm unı bik oḳşatḳan. Yä taẕartılġan tas töbönä, yä hıwġa ḳaray ẕa üẕ şäülähenä üẕe hoḳlanıp tik ultıra, ti.

(5)Ayḳıyġaḳ ber ëş tä ëşlämäy başlaġan, haman üẕ sibärlegenä üẕe hoḳlanıp tik ultıra ikän. Bötönläy yalḳawġa öylängän Ayḳıyġaḳ.

— Bar, ḳıẕım, hıw alıp ḳayt äle! — tigän äsähe uġa ber köndö.
(10)-Ä hıwġa yıġılham? — tigän Ayḳıyġaḳ.

— Botaḳḳa totonorhoñ, — tigän äsähe.

— Botaḳ hınha? — tigän Ayḳıyġaḳ.

— Ä hin nıġıraḳ toton, — tigän äsähe.

— Ḳulım tırnalha? — tigän Ayḳıyġaḳ.

(15)-Beyäläy key, — tigän äsähe.

— Beyäläy yırtılha? — tigän Ayḳıyġaḳ.

Ä üẕe haman eẕ tasḳa ḳaray, küẕẕären dä ala almay: «Ay-ay, bigeräk tä sibär inde üẕem!» — tip uylay.

— Ënä alırhıñ da, beyäläyeñde yamarhıñ, — tigän äsähe.

(20)—Ënä hınır bit, — tigän Ayḳıyġaḳ.

— Yıwanıraḳ ënä alırhıñ, — tigän äsähe.

— Barmaġıma ḳaẕalha, — tigän Ayḳıyġaḳ. Bılarẕıñ höyläşeüen kürşe ḳıẕı la tıñlap torġan ikän, — ul tüẕmägän:

— Üẕem genä barıp kiläyemse, apay, — tigän.

(25)Şulay itep, kürşe ḳıẕı yılġanan hıw taşıġan.

Ayḳıyġaḳtıñ äsähe ḳamır iẕgän, muyıl halıp, tämle ḳabartma beşergän. Ayḳıyġaḳ ḳabartmalarẕı küreügä:

— Äsäy, miñä ḳabartma bir äle!—tip ḳısḳırıp ebärgän.

— Ḳaynar şul ul, ḳulıñ beşer, — tigän äsähe.

(30)-Beyäläy keyermen, — tigän Ayḳıyġaḳ.

— Beyäläyeñ eüeş bit, — tigän äsähe.

— Ḳoyaşta kipterermen min ularẕı, — tigän Ayḳıyġaḳ.

— Ḳatıp kiter bit, — tigän äsähe.

— Iualap yomşartırmın, — tigän Ayḳıyġaḳ.

(35)—Ḳuldarıñ awırtır bit, — tigän äsähe. — Niñä hiñä ëşläp mataşırġa? Yä sibärlegeñ kämer. Ḳabartmanı min üẕ ḳuldarın ḳıẕġanmaġan kürşe ḳıẕına ġına biräm, — tigän.

Äsähe ḳabartmanı kürşe ḳıẕına birgän.

(40)Ayḳıyġaḳtıñ asıwı kilgän. Yılġa buyına töşöp kitkän

**-24-**

(1)bıl. hıwẕaġı şäülägä ḳarap tik ultıra ikän. Ä kürşe ḳıẕı yarġa ultırġan da ḳabartma

aşay... Ayḳıyġaḳ, könläşeüenä tüz̲ä almayınsa, huz̲ılıp-huz̲ılıp uġa ḳaray ikän, şul vaḳıt unıñ muyını oz̲onayġan da ḳuyġan. (5)Kürşe ḳız̲ı Ayḳıyġaḳḳa äytkän:

— Mä ḳabartma, Ayḳıyġaḳ, ikäü aşayıḳ, — tigän.

Ayḳıyġaḳtıñ asıwı kilgän. Barmaḳtarın tırpaytıp, ġärläneüenän ber aġarıp, ber kügärep ḳız̲ġa ḳulın heltägän. «Nisek inde ul, don'yala ber sibär ḳız̲, teşlängän ḳabartma-(10)nı aşahın, ti!» Ayḳıyġaḳ, hikerep torop, ḳuldarın şunday heltäp ebärgän, ḳuldarı şunda uḳ ḳanatḳa äüerelgändär.

— Käräkmäy miñä ḳabartma! Käräkmäy ḳa-ḳa-ḳa! Ḳıyġaḳ! — tip ḳısḳırġan Ayḳıyġaḳ. häm yarz̲a torop ḳala almaġan, ürhälänep hıwġa yıġılıp töşkän dä şunda uḳ ḳaz̲ġa(15)äüerelgän.

Üz̲e yöz̲ä, üz̲e ḳısḳıra, ti, ul:

— Ḳaḳ, min nindäy sibär! Ḳıyġaḳ, ḳıyġaḳ, ḳaḳ, minnindäy sibär! — ti ikän.

Nanaysa höyläşeüen onotḳansı yöz̲gän dä yöz̲gän Ayḳıy-(20)ġaḳ. Yöz̲ä torġas, bötä hüz̲z̲ärz̲e onotop bötörgän. Üz̲eneñ isemen genä onotmaġan, ti, ul.

Unı, don'yala ber sibär ḳız̲z̲ı, başḳa beräy keşe menän butamahından ösön, keşelärz̲e küreü menän: «Ayḳıyġaḳ! Ay-ḳıy-ġaḳ! Ay-ḳıy-ġaḳ!» — tip ḳısḳıra başlay, ti.

## (25)AYIU ḲIRMIŞḲAĠA NİÑÄ ÜSLE?

*J. Keyekbaev*

Tölkö ḳuyan balahın totop aşaġan da räh̲ätlänep yoḳlarġa yatḳan. İnde tämle yoḳlap kittem tigändä genä, täne äsetep hız̲laġanġa uyanıp kitkän. Ḳaraha, tänen ëre-ëre ḳırmışḳa (30)lar hırıp alġandar z̲a kümäkläp teşlärgä totonġandar, ti.

İnde nisek ḳotolorġa bıl yawız̲darz̲an?

Tölkö h̲äylä ḳorġan.

— Ḳırmışḳalar, dus̲tar, hez̲ niñä min bah̲ırḳayz̲ı yonsotahıġız̲? Niñä ḳanımdı ësähegez̲, hez̲gä unan ni fayz̲a?—(35)tigän ul, mes̲kengä halışıp.

Ḳırmışḳalar barıhı la ber awız̲z̲an, asıwlanıp: (37)—Yaray, Hin bında ḳuyan balahın totop aşaġanhıñ. Ä

**-25-**

(1)bez̲gä aşarġa käräkmäyme ni? Bez̲ nimä aşap tamaḳ tuyz̲ırayıḳ? — tigändär.

Şunan huñ tölkö ularġa:

— Dus̲ḳayz̲ar! Min hez̲gä ber urın öyrätäm. Ana anaw(5)taw itägendäge ÖÑÖNDÄ ayıw yoḳlap yata. Ul bik z̲ur, himez̲,KÖSLÖ. Ägär unıñ ḳanın ëshägez̲, hez̲ z̲ä ayıw keüek KÖSLÖ bulırhıġız̲, — tigän.

Ḳırmışḳalar ërkeleşep ayıw öñönä taban kitkändär. Öñ ësenä barıp inhälär, ayıw öñöndä räh̲ätlänep yoḳlap yata, ti.

(10)Ḳırmışḳalar ayıwz̲ıñ östönä yürmäläp menep kitkändär. Läkin his tä teş üterlek tügel, ti. Ayıwz̲ıñ yönö bik ḳalın, tölkö yönö keüek kenä tügel. Ni ëşlämäk käräk h̲äz̲er?

— Tuḳtaġız̲ äle, — tigän beräühe, — här berebez̲ ayıwz̲ıñyönön yolḳop alıp, şunıñ menän bildärz̲e nıġıraḳ bıwıp,(15)ısınlabıraḳ totonayıḳ.

Bıl käñäş ularz̲ıñ bötähenä lä oḳşaġan. Ular ayıw yönö menän bildären öz̲ölä yaz̲ġansı nıġıtıp bıwġandar. Şunan ayıwz̲ıñ yönö arahına inep, teşlärgä, ḳanın ësergä totonġandar.

(20)Bara torġas, ular ayıwz̲ı bötönläy hırıp alġandar, h̲atta morono ësenä lä inep kitkändär. Morono äsetä başlaġas, ayıw yoḳohonan uyanıp kitkän. Başta ġäjäplängän,

bik ḳurḳḳan.

— Ällä umartahın vatıp balın aşağan ösön, bal ḳorttarı üs alırġa kildelärme ikän? — tip uylaġan ul.

Läkin bal ḳorttarınıñ bezeldäüe işetelmäy. Öñ ëse ḳarañġı, küẕgä törthäñ dä kürenerlek tügel.

Ayıw, täneneñ äseteüenä sıẕay almay, öñönän kilep sıḳḳan häm er yırtıp ükerep ebärgän. İpläberäk ḳaraha, bötä er ös̱tön ḳırmıs̱ḳalar ḳaplap alġan. Asıwlanıp, ayıw ularẕı taparġa totonġan. Läkin bötähen dä ülterep bötä almaġan. Ayawhıẕ küptär şul. Aptırap tirä-yaġına ḳaraha, kübä ẕurlıḳ ḳırmıs̱ḳa iläüen kürep ḳalġan. Ḳırmıs̱ḳalar ërkeleşep, üẕenän un tapḳır ẕur-ẕur sıbıḳ, kipkän ülän höyräp, şunda kitä, ti.

— Ähä, bılarẕıñ oyahı şunda ikän. Tuḳta, köräktärenbiräyem äle min ularẕıñ, — tip, ayıw ḳırmıs̱ḳa iläüensapsıp tuẕẕırırġa kereşkän. Er menän tigeẕlägän. Yänä ber nisä iläüẕe iẕgelägän ul şulay.

Oşo ẖäldän huñ ayıwẕıñ kösö ḳırmıs̱ḳalarġa küskän.

## 26-

Ḳırmıs̱ḳalar, bildäre näẕegäyep, bik kösäyep kitkändär. Ä ayıw ḳırmıs̱ḳalarġa üsle bulıp ḳalġan. Ul äle lä, ḳırmıs̱ḳalar iläüen kürhä, ayaḳtarı menän unı sapsıp, er menän tigeẕ itep kitä ikän.

Ä hunarsılarġa şul ġına käräk. Ḳırmıs̱ḳa iläüe tuẕẕırılha, ul tirälä ayıw bar. Timäk, mıltıḳtı yäẕrä menän yahap, ḳul osonda ġına yörötörgä käräk.

### YALḲAW BESÄY

Boron-boron zamanda ber yalḳaw besäy yäşägän, ti. Besäy yalḳaw bulġas, ḳışḳılıḳḳa aẕıḳ äẕerlämägän. Bına ḳış etkän. Besäy uylana başlaġan: «Min bıl hıwıḳta asıġıp yäşägänse, dus̱tar ëẕlärgä kitäm!»

Yulda uġa tölkö osray.

— hawmı, besäy, ḳayẕa kitep barahıñ?-

Besäy dus̱ ëẕlärgä sıḳḳanın höyläp birä.

— Min hiñä bik yaḳın dus̱ bulırmın, — ti tölkö häm besäyẕe üẕenä alıp ḳayta. Tölkö kön hayın hunarġa yöröy, ä besäy, ẖäylä tabıp, öyẕä ḳala. Ber kön tölkö unı yänä hunarġa saḳırġan. Besäy, ẖäylä taba almaġas, telämäy genä torop kitä. Tölkö yügerep-yügerep sıs̱ḳan tota, ä besäy ḳarap tik ultıra, ti. Öygä ḳaytḳas, tölkö:

— hin miñä dus̱ tügelheñ, — tip, unı ḳıwıp sıġarıp ebärä.

Besäy taġı dus̱ ëẕläp kitä. Bara torġas, terpene osrata. Terpegä lä üẕeneñ ẖälen höyläy. Terpe dus̱ bulırġa rizalıḳ belderä. Şulay yaḳşı ġına yäşäp yatḳanda, ularẕıñ rizıġı bötä. Terpe besäyẕe hunarġa saḳıra. Besäy, yoḳlap yatḳan erenän telämäysä genä torop, terpe artınan kitkän. Terpe sıs̱ḳan tota, besäy ḳarap tik ultıra, ti.

Terpe uġa:

— İkense dus̱ ëẕlä! — ti.

Besäy kitä. Tän etä. Aġas başına menep yoḳlayım tihä, unda ökö ultıra, ti.

— hawmı, ökö apay. heẕẕä yoḳlap sıġırġa mömkinme? — ti besäy, yalınıp. Ökö uġa säy ëserä, ẖälen horaşa başlay. Besäy dus̱ ëẕläüe turahında höyläp birä. Ökö:

— Min hiñä yaḳşı dus̱ bulırmın, hıwıḳta yörögänse, bında ḳal.

## -27-

Ökö besäyẕe üẕendä ḳaldıra. İäy etä. Besäy haman ber nämä lä ëşlämäy. Ökö, hunarġa sıġıp, küp sısḳan totḳan. Besäy sısḳandı alam tihä, ökö uġa röẖsät itmäy. Besäy asıwlana. Ökö taġı hunarġa kitä. Besäy, üs itep, meyes başında yatḳan ökö balaların totop aşay, ti. Ökö hunarẕan ḳaytha, besäy ẕä, balaları la öyẕä yuḳ. Ökö bik nıḳ ḳayġıra.

— Yawız besäy yazahın alırġa teyeş! — tip, ökö besäyẕeëẕläp sıġıp kitä. Uġa tölkö osray. Ökö uġa üẕeneñ ẖälen höyläp birä.

—hin şul besäyẕe kürẕeñme? — ti ökö.

Tölkö uġa:

— Ul bında buldı. Dus̱ ëẕläy ine, min uġa dus̱ buldım.Ul yalḳaw, şuġa min unı ḳıwıp sıġarẕım.

Tölkö ökönö öyönä inderep, säy ëserep, oẕatıp ḳala. Ökö terpene lä osrata. Unda la şunday uḳ ẖäl bulġan ikän. Ökö, bara torġas, ber yalanġa kilep sıġa. Ḳayın ërgähendä ḳıwış kürä. Ul ḳıwıştı besänselär ëşlägän ikän. Ökö lä yal itergä uylay. Ḳıwışḳa inhä, yoḳlap yatḳan besäyẕe kürä. Ökö, •besäygä taşlanıp, unı öẕgäläy başlay. Besäy saḳ-saḳ ḳasıp ḳotola. Ḳuyı ülän arahında saḳ yäne sıḳmay yatḳan besäyẕe 'besänselärẕeñ berehe tabıp öyönä alıp ḳayta häm tärbiäläp ayaḳḳa bas̱tıra. Şul zamandan alıp besäy keşe yanında yäşäy başlaġan. Tik ẖäẕer ul yalḳaw tügel, könö-tönö sısḳan tota, ti. Üẕen ülemdän ḳotḳarġan ösön keşegä räẖmät äytä-äytä ẖeẕmät itä, ti. Şuġa kürä besäyẕe ololar ẕa, balalar ẕa yaratalar.

**KÄZÄ BÄRÄSE**

Boron-boron zamanda yäşägän, ti, äbey menän babay. Ular bik tatıw ġümer itkändär.

Bına halḳın yamġırlı köẕẕän huñ hıwıḳ ḳış kilgän. Bılarẕıñ utındarı bötkän.

Babay, bäläkäy sana höyräp, urmanġa kitkän. Ber hınıḳ ikmäk häm bäläkäy körşäkkä höt halıp alġan. Sanahına vaḳ botaḳtar teyägäs, ḳaytır yulġa sıḳḳan. Yañı yıl ḳarşılarġa ḳupşı ġına şırşı alġan. Yulda unıñ ḳolaġına käzä bäräseneñ tawışı salınġan. Babay tawış sıḳḳan yaḳḳa yünälgän. Barıp ḳaraha, aġas töböndä käzä bäräse yata, ti. Babay uġa höt ësergän, ikmäk aşatḳan. Bäräs ayaġına basḳan.

## -28-

Babay unı öyönä alıp ḳaytıp kitk'n. Äbeye bınıñ ösön bik ḳıwanġan. Şul köndän huñ käzä yort ẖayuanına äylängän.

**ZİRÄK ḲUYAN**

Boron-boron zamanda yäşägän, ti, ḳuyan. Unıñ ös balahı bulġan. Ber köndö ul urmanġa barırġa yıyınġan.Keskäyẕärenä: «İşekte bikläp ultırıġıẕ, sıġıp yörömägeẕ», — tigän.

Äsähe kitkäs, iñ bäläkäy ḳuyanġa küñelheẕ bula başlay. İlaġıhı kilä. Yäşel ülän ös̱tönän yügerhäñ, ḳoyaş nurẕarına irkälänhäñ ine, tip uylay. Apaları uynap arıp, yoḳoġa talıw menän, bäläkäy ḳuyan işekte haḳ ḳına asa la öyẕän sıġa.

Ber-ike az̠ım atlaw menän, unı börköt totop ala häm üz̠ oyahına osorop alıp kitä. Sabıyz̠arına: «Bäpestärem, hez̠gä ḳuyan alıp ḳayttım, aşağız̠!» — ti z̠ä üz̠e tağı hunarġa osa... Ḳuyan balahı ükhep ilay başlay.

— Niñä ilayhıñ? — tip horay ber börköt balahı.

— hez̠ ẖäz̠er mine aşayhığız̠ bit, — ti bäläkäy ḳuyan.

— Yaray, bez̠ hiñä teymäbez̠, — tip vägäz̠ä birä ikense börköt balahı.

Bına äsä börköt ḳaytıp inä.

— Ḳuyan ite tämle buldımı? — tip horay.

— Äsäy, bez̠ ḳuyanġa ḳağılmanıḳ, tere yänlek aşay almaybız̠. Ul öyönä ḳaythın, unı la äsähe kötäler, — ti äsänse börköt balahı.

Börköt balaların tıñlay. Ḳuyandı öyönä ḳaytarıp ebärä.

Yulda uġa tölkö osray. «Ä-hä, äläkteñme?» — ti. Ḳuyan balahı bar kösönä ḳasa başlay, yügerep barġanda, küz̠enä satalı aġas salına. Ḳuyan balahı, şul aġastıñ urtahınan ırġıp, arı elä. Ḳuyandı ḳıwıp kilgän tölkö lä, uylap tormayınsa, şul uḳ aġas urtahına hikerä, ämmä ḳıs̠ılıp ḳala.

Üz̠eneñ ziräklegenä üz̠e hoḳlana bäläkäy ḳuyan. Ul şulay öyönä is̠än-haw ḳaytıp etä.

## ÖYRÄKTÄR Nİ ÖSÖN KEŞEGÄ ËYÄLÄŞKÄN?

Boron zamanda öyräktär gel ḳırz̠a ġına yäşägän, ti. Ḳamışlı matur küldärz̠e haylap, üz̠z̠ärenä töyäk itkändär,bala sıġarġandar, şunan yılı yaḳtarġa kitkändär.

-29-

Yaz̠ġı ḳoyaş nurz̠arı ḳaynarlanıp, ḳar irep bötöwgä, ḳır öyräktäre tıwġan yaḳtarın hağınıp ḳaytıp ta etälär ikän. Oz̠on yäy buyı, tuyġansı yöz̠öp, sumıp, osop, küñelle yal itälär, ti. Bäpkälären yöz̠örgä, osorġa öyrätälär, oz̠on yulġa äz̠erläyz̠är. Köz̠ etep, aġastarz̠ıñ yapraḳtarı ḳoyolop bötöwgä, törköm-törköm yıyılıp höyläşä başlayz̠ar. Ḳır öyräktäre uñġan, tınġıhız̠ bulġan. Yıraḳ yulġa sıḳḳanda, yalḳawlıḳ his tä kileşä torġan ëş tügel şul.

Bına tağı yämle yaz̠ etkän. Kül boz̠z̠an ärselgän, harġayġan ḳamıştar arahınan yañıları moron törtöp sıḳḳan. Tälmäryendär yır yarışın başlaġan. Ber köndö arıġan, yonsoġan öyräktär törkömö külgä kilep töşkän. Ular tıwġan ilenä ḳaytıwġa bik şat. Ḳısḳırıp höyläşälär, kölöşälär. Ber-berehen uz̠z̠ırıp yarışıwsı tälmäryendär tuḳtap ber az̠ġa boşop yattılar, ti. Şunan inde is̠ke tanıştarın kürep, bayramdarın dawam itälär.

Tälmäryendär ber yaḳta:

Baḳ-baḳ-baḳ,
Matur şul tıwġan yaḳ!
Matur şul tıwġan yaḳ!
Baḳ, baḳ, baḳ-baḳ! — tip taḳmaḳlay, ti.

Öyräktär üz̠z̠ärenä:

Kräk-kräk, kräk-kräk,
Yöz̠öp ḳalırġa käräk.
Kräk-kräk, kräk-kräk,
hağındıḳ şul bigeräk.
Kräk-kräk, kräk-kräk! — tip ḳıwanışalar ikän.

Ber tälmäryen öyräktärz̠e bigeräk yarattı, ti, inde. Yaḳın[1] uḳ kilep, yırz̠arın tıñlap,

dus̲laşırġa uylay bıl. Öyräk-(30)tär başta tälmäryende suḳıp ḳurḳıtıp ta ḳarayz̲ar. Tik tege haman kitmägän, ti.

İnä öyräkteñ bäpkäläre sıġa. Bına şunda inde tälmäryen üz̲eneñ dus̲lıġın kürhätergä tırışḳan. Tämle-tämle seben-därz̲e, böjäktärz̲e totop, bäläkäy dus̲tarın hıylaġan. Ular (35)tälmäryendeñ hıylawına şunday öyrändelär, ḳayhı köndärz̲e az̲ıḳ ëz̲läp yöz̲örgä irenep, bötönläy oyanan sıḳmas̲ buldılar, ti. Ata-äsähe ni tiklem tartḳılaşmahın, ärlämähen, ḳolaḳtarına ëlmäy bäpkälär. Yöz̲örgä öyränhälär z̲ä, osorġa öyrä-(40)nä almanılar, ti.

**-30-**

(1)Oyala küp yatıwz̲an himereşep, awırayışıp kittelär. Ḳabattarın yünläp ḳıbırlata la almayz̲ar, ti.

Bigeräk tämle bıl az̲ıḳ, Bigeräk tämle bıl az̲ıḳ, —

(5)tip tälmäryende maḳtap, kilterep aşatḳanın kötöp tik yatalar ikän. huñġaraḳ «bıl az̲ıḳ» tip äytergä lä irenä başlaġandar, «bıjıḳ-bıjıḳ» tip kenä äytälär ikän.

Bına köz̲ etkän. Ḳır öyräktäre yılı yaḳtarġa kitergä yıyınġan. Ata öyräk menän inä öyräk, ni ëşlärgä lä belmäy, ḳa(10)bat-ḳabat kilep, balaların osorġa ögötlägändär. Bäpkäläre uylap ta birmägän, ata-äsähen tanımayz̲ar z̲a ikän. Ni ëşlähendär inde, ḳayġırışıp, ber törkömgä barıp ḳuşılıp osop kitälär tegelär.

Öyräk bäpkälärenä, üz̲z̲äre genä ḳalġas, taġı la räh̲äteräk (15)bulıp kitkän. Tik tınıslıḳtarı oz̲aḳḳa barmay, äle bıl, äle tege osousı ḳoştar, külgä töşöp, yal itep kitä, ti. Bötähe lä ber ük hüz̲z̲e höyläy:

Osayıḳ! Osayıḳ!
halḳından ḳasayıḳ!

(20)Tornalar:

Torayıḳ, torayıḳ!
Bik oz̲aḳ tormayıḳ! — tip, tiz̲ genä yal itep, tamaḳ tuyz̲ırıp osop kitälär, ti.

Ḳır ḳaz̲z̲arı:

(25)Ḳıyġaḳ, ḳıyġaḳ!
haw bul, tıwġan yaḳ!
Ḳaytırbız̲, ḳaytırbız̲, — tip ḳañġıldaşalar, ti.

Bıjıḳ-bıjıḳ,
Yöröyz̲är şunda mıjıp, — tip öyräktär yoḳo (30)aralaş mıñġırlap ärläy, ti, ularz̲ı.

Tälmäryen haman dus̲tarın ḳaranı, ti. Tik ber köndö, tändäre ḳaltırap, awırayıp, bötönläy hıw töbönän sıġa almaġan ul.

Öyräktär unı ëy köttölär, ëy köttölär, asıġışıp böttö(35)lär, osorġa talpınıp ḳaranılar, ti. Ḳayz̲a inde ul käüz̲ägä kös eteü! Şunan tez̲eleşep yar başına sıġalar. Asıḳḳan öy(37)räktär ḳarz̲ı suḳıp ḳarayz̲ar — tamaḳtarı tuymay. Aḳ ḳar-

**-31-**

(1)z̲ı yarıp, lapıldap artaban kitälär. Yalandı ütep, kilep ettelär, ti, ber yort yanına.

Ḳarahalar, işek aldı tulı nindäyẕer aḳ, ḳara, sıbar ḳoştar yöröy, erẕän em süpläy. As öyräktär emgä yabırılġan. (5)Tawıḳtarın ḳararġa sıḳḳan ḫuja, yabırılıp em süpläüse yat ḳoştarẕı kürgäs, aptırap ḳalġan. Şunan öṣtäp taġı la em halġan. Öyräktär unıhın da aşap bötkändär. Bötkändär ẕä, teẕeleşep yatıp, yoḳlap ta kitkändär. Ḫuja ularġa oya yahaġan da bikläp ḳuyġan. Şunan birle öyräktär keşelä yä-(10)şäy başlaġan, ti.

**BÜRE Nİ ÖSÖN AYĠA ḲARAP OLOY?**

Bınan küp yıldar ēlek ḳalın ḳara urmanda yäşägän, ti Bürebay. Ul bik yaḳşı küñelle, izgelekle, yaġımlı bulġan ikän. Urmandaġı bötä tereklek menän duṣ yäşägän, matur(15) yırlaġan Bürebay. Aḳlanġa sıġıp, yırlay başlaha, urmandaġı bötä yänlektär, ḳoş-ḳort yıyılıp tıñlaġan unıñ moñlo yırẕarın. Ḳılt itkän tawış ta işetelmäy ine, ti. Tik yır bötkäs kenä, bötähe lä därräü ḳul sabıp, Bürebayẕı maḳtap bötör älmayẕar ikän.

(20)-O-u-u, ülterẕeñ, Bürebay, — tip ükerep ilap, erẕä tägäräp yöröy, ti, Ayıw. hunarsılar atıp alıp kitkän äsähe iṣenä töşöp, tuḳtay almay ikän.

— Aḫ, nindäy tawış, — tip sutıldaşa ikän ḳoştar ẕa. Bürebayẕı bötähe lä maḳtay, danlay, ti. Tölköbikä genä ber(25) ni ẕä öndäşmäy ultıra. Ḫäyläkärlege öṣtönä bik könsöl dä bulġan, ti, ul. Uġa Bürebayẕıñ danı his tä oḳşamaġan. «Nisek tä bulha aḳılġa ultırtayım min bını. Ägär ẕä mägär şunı ēşläy almaham, isemem Tölköbikä bulmahın», — tip, yalpıldaḳ ḳoyroġon ergä ḳabat-ḳabat huġıp ala ikän. Könö-(30)tönö mäker uylap baş vatḳan. Şulay uylay torġas, tabılġan bit ḫäylähe.

Yaẕẕıñ iṣ kitkes küñelle, salt ḳoyaşlı ber könö ine, ti. Bürebay üẕe yaratḳan yırẕarẕı ḳabatlap, yañı yır öyränep ultırġan bulġan. Şawlap görläüektär aġa, yırlamay nisek (35)tüẕäheñ inde.

Şul vaḳıt aġastar arahınan, yomşaḳ ḳına baṣıp, yaġımlı (37)yılmayıp, Tölköbikä kilep sıḳḳan, ti. Ul, un hıġılıp,

**-32-**

(1)bişkä bögölöp, Bürebayġa yaḳınlaşıp, unı ẕurlap, ike ḳulın birep küreşkän.

— Bürebay, hineñ matur yırlawındı bötähe lä belä, min,dä bik yaratam. Tawışıñ şunday köslö, şunday moñlo. Oşo(5)ḫäbärẕe Ay ḳıẕı la işetkän. Bürebayẕıñ ber genä tapḳır bulha la miñä atap yırlaġanın işethäm, kire ergä ḳaytırinem, tip äytä, ti.— Tölköbikä şulay tigän dä urman ēsenälnep yuġalġan. Ber ḳatlı Bürebay ışandı la ḳuyẕı, ti.

Bına ḳoyaş taw artına töşöp yuġalġan. Küktä yañġıẕ Ay (10)ḳıẕı kürengän. Ul bik moñhou, ḫäsrätle bulıp kürengän Bürebayġa. Ul aḳlan urtahına sıġıp, Ayġa töbälep, üẕeneñ iñ matur, iñ moñlo ber yırın huẕıp ebärgän, ti. Tañ atḳansı, ber tuḳtawhıẕ yırlaha la, haman şulay moñhou yılmayıp torouın dawam itte, ti, Ay ḳıẕı. Ergä töşörgä uylamanı la, (15)ti. Bürebay: «Ay ḳıẕına mineñ bıl yırım oḳşamanı, aḫırıhı, irtägä taġı yırlarmın», — tip üẕen tınıslandırẕı, ti. Şul köndän alıp, ḳış timäy, yäy timäy, Ay ḳıẕına baġışlap, yırẕar yırlay ikän. Ä Ay ḳıẕı töşmäy ẕä töşmäy. Ḳayhı ber köndärẕä unı bolottar ḳaplap, kürenmähä, Büre-(20)bay, ḫäsrätenän ni ēşlärgä belmäy, urman buylap saba, üẕenä urın taba almay ikän. Tölköbikä ḫäyläheneñ barıp sıġıwına höyönöp, aġas artınan şıpırt ḳına küẕätä, ti, unı. Şulay yırlay torġas, Bürebayẕıñ tawışı böttölä ḳuyẕı, ti. Tölköbikä bıġa bik ḳänäġät buldı, ti. Ber köNdö kilep, Bürebayġa: (25)—Ḳara äle, hineñ tawışıñ bötkän bit. Tawışıñdı Ayalġan.

Bürebay, olouınan tuḳtap:

— Nimä ēşläyek inde ḫäẕer? Tawışımdı nisek kire horap alayım?

Tölkö oz̲aḳ ḳına uylanıp ultırġan bulıp, ḳoyroġo menän elp-yolp ergä huġıp ḳuyġan.

— İä, ḳoyroġom, yä yalbırım, yulın öyrät. — Ḳoyroġon ḳosaḳlap, ḳolaġına ḳuyıp tıñlap ultırġan buldı, ti, üz̲e. Tın almay küz̲ätte, ti.

-Bına buldı la, miñä tılsımlı ḳoyroġom bılay tine: doyu köndän başlap, gel yırla, şunan tawışıñ kire ḳaytır, — tigän dä Tölköbikä üz̲ yulına kitep tä barġan.

Bürebay ışanġan. Taġı la tırışıbıraḳ yırlaġan, ti, bıl, yırlaġan hayın, tawışı bötkän. Moño la yuḳ, köyö lä yuḳ. Tölkö taġı la kilgän, ti.

## -33-

—Tuġanḳayım, äyz̲ä beräy köndö bayram ütkärep alayıḳ,hin küptän urman h̲alḳı ösön yırlaġanıñ yuḳ. Ular hine bikhaġındı, — tip yuh̲alaġan. Bürebay şatlanıp riza bulġan.

Bına ber köndö bötä yänlektär z̲ä aḳlanġa yıyılıp, tüz̲emhez̲länep Bürebayz̲ıñ yırlaġanın kötälär, ti. Urtaġa sıġıp, yırlap ta ebärz̲e, ti, Bürebay. Tik ni ġäjäp? Ëlekke moñ urınına yämhez̲, yän öşötkäs olou ġına sıġa ikän. Aptırap ḳalġandar yänlektär. Ḳurḳa başlaġandar. Beräm-beräm şım ġına aḳlandı taşlap kitkändär. İñ berense Tölköbikä hıpırtḳan. Bürebay üz̲ensä yırlap bötöp, tirä-yaġına ḳaraha, ber kem dä yuḳ ikän. Maḳtaw Hüz̲z̲äre lä işetelmäy. Ul yügerep, yänlektärz̲e ëz̲läy başlaġan. Ḳayhıhına kilep hüz̲ ḳuşha la, öndäşmäy, baştarın basıp, tübän ḳarap ütälär, ti. Tora-bara Bürebayz̲ıñ yulında tap bulmas̲ ösön, ällä ḳayz̲an urap ütälär, ti. Bürebayz̲ıñ şunday asıwı kilgän. Şunan birle us̲al h̲oloḳlo yırtḳısḳa äylängän. Tik haman da üz̲en iñ şäp yırsı tip uylap, Ay ḳızın saḳırıp, tän urtahı etkäs, bötmäs̲ yırın huz̲a. Urman yöräkte öşötkäs h̲äsrätle, yämhez̲ tawış menän tula, ti.

**Nİ ÖSÖN SEBEN, SEREKÄY BER URINDA YÄŞÄMÄY?**

Boron-boron zamanda ber babayz̲ıñ öyöndä yäşägän, ti, seben menän serekäy. Ular bik dus̲ bulġandar. Seben bezeldäp yörögän, serekäy serkeldäp yörögän. Ber vaḳıt bılar bäh̲äsläşep kitkändär. -Yä, serekäy äyt, hin zıyanlıraḳmı, min zıyanlıraḳmı? — tip bezeldäp ebärgän, ti, seben.

— hin s-zıp-s-zıyan, s-zıp-sz-zıyan, — tip serkeldägän serekäy.

— İñ täm-m-le-lehe nim-m-m-mä? — tip horaġan seben. -S-s-säskä s-säye, säs-s-skä säye, — tigän serekäy.

— Şäkärhez̲-z̲-z̲ tüz̲-z̲-z̲mäyem, şäkär-hez̲-z̲-z̲ tüz̲-z̲-z̲mä-yem, — tigän seben.

Bäh̲äsläşkändär, bäh̲äsläşkändär bılar, ber-berehen eñä almaġandar. Babayz̲an horarġa bulġandar. Babay yoḳlap yata ikän. Üz̲e awız̲ın asıp h̲ırılday ikän. Seben babayz̲ı uyatırġa teläp, bez̲-bez̲-bez̲ tip bite buylap yörögän, awız̲ına inep sıḳḳan. Babay mıyıġın ġına helketep ḳuyġan. Uyanmaġan.

Serekäy serkeldäp tegeläy osḳan, bılay osḳan. Babayz̲ıñ

## -34-

mañlayına ḳunıp, ḳanın hura başlaġan. Babay hikerep torġan da serekäyz̲e ḳıwa başlaġan, seben meyes artına bos̲ḳan. Serekäy köskä ḳasıp ḳotolġan. Şuġa la ul kis bulġas, ḳarañġı töşkäs kenä, seben dus̲ınıñ h̲älen belergä kilä lä: — 3-zıyan, zı-

zıyan, — tip üsekläp osa ikän. Seben öndäşmäy, möyöşkä bos̲a, ä keşe serekäy tawışın işetep, bas̲tıra başlay.

### ĶOYaŞ MENÄN Ay

Boron-boron zamanda ķayz̲alır köläs yöz̲lö Ķoyaş yäşä-(10)gän, ti. Unıñ şayan ġına tiktormas̲ Ay isemle ķız̲ı bulġan. Ķoyaştıñ hänäre — keläm tuķıw ikän, ti. Kelämdärz̲eñ här bereheneñ üz̲ iseme bar, ä şular arahında iñ matur keläm «Er» tip atalġan.

Kelämdär yabay tügel, serle ikän: ularġa ike tapķır huķ(15)hañ, osalar z̲a kitälär, ti.

Ber mälde Ķoyaş, ëşenän tuķtaġas, aşaġan-ëskän dä yoķlarġa yatķan. Şunı ġına kötöp torġan Ay, tiz̲ genä kelämdär bülmähenä inep, bötä kelämdärgä lä ikeşär tapķır huġıp sıķķan. Ķaraha — kelämdär yuķ! Ay äsäheneñ asıwlanasaġın (20)hiz̲ep, tiz̲ genä «Er» keläme as̲tına ķasķan häm keläm menän bergä osop kitkän.

Ķoyaş, yoķohonan torġas, ķız̲ın üz̲ yanına saķıra başlaġan. Tik Ay haman äsähe yanına kilmäy z̲ä kilmäy, ti. Şunan äsähe borsolop ķız̲ın ëz̲lärgä kereşkän. Kelämdär arahına (25)inep ķasķandır, tip yıhanġa sıķha — kelämdäre lä, ķız̲ı la yuķ!

Şul vaķıttan birle Ķoyaş kön hayın, yoķohonan uyanġas ta, ķız̲ın ëz̲lärgä sıġa ikän, ti. Läkin ber nisek tä unı taba almay, sönki Ay, üz̲ ġäyeben belep, äsähe ëz̲lägän saķta keläm (30)as̲tına ķasa, tik äsähe yoķlarġa yatķas ķına sıġıp yöröy, ti. Ular ber-berehen haġınġandar, ķayġınan yöz̲z̲äre harġayġan. Äle haman Ķoyaş menän Ay osras̲a almay ikän.

### SİḪRİ MOÑ

Boron-boron zamanda ber ķara urman ësendä äbey menän (35)babay yäşägän, ti. Aşarz̲arına ikmäktäre, keyerz̲ärenä ke(36)yemdäre bulmaġan. Şulay yäşäp yatķanda, ularz̲ıñ ber ma-

-35-

(1)layz̲arı don'yaġa kilgän, ti. Ay üsähen kön üs̲ep, yıl üsähen ay üs̲ep, bıl bik batır häm köslö bulıp üs̲ep etkän, ti. Ķartayġan ata-äsähen ul üz̲e ķaray başlaġan, ti. hunarġa yörögän, yänlektärz̲eñ tirehen ul ikmäk-toz̲ġa almaştırıp alıp (5)ķayta torġan bulġan. Şulay itep, ular kön kürgändär, köndö töngä bäylägändär.

Şulay yäşäp yatķanda, ilgä z̲ur bälä kilä, ti. Kürşe batşa huġış asa. Uġa beräü z̲ä ķarşı tora almay, ti. Batşalıķtıñ bik küp as̲ıl, köslö egettäre baştarın(10) halġandar, ti.

Bına, bez̲z̲eñ egetkä lä yawġa kitergä vaķıt etkän, ti. Kiter aldınan atahı unı saķırıp alġan da ķuray birgän.

— Doşman ġäskäre yaķınaya başlaġas, os̲o. ķurayz̲ı uynarhıñ, — tigän, ti.

(15)Bına, doşmandarz̲ıñ ġäskäre yabırılıp kilä ikän, ti. Şul vaķıt eget ķuray tartıp ebärgän, ti. Unıñ tawışın işetkän doşman ġäskäre tuķtap ķalġan, ti. Bıl ķuray moñonda ḫalıķtıñ ah-zarı la, tıwġan töyäkteñ maturlıġı la bulġan. Bıl siḫri moñ ġäskär aldında kilgän doşman batşanıñ(20) da yörägenä ütep ingän. Ul üz̲eneñ ġäskären kire borop alıp ķaytırġa mäjbür bulġan, ti. Bıl ḫälde kürep torġan batşa bik HÖYÖNGÄN. Egetteñ üz̲en dä, unıñ ata-äsähen dä üz̲ yanına aldırġan. Ular üz̲ ġümerz̲äreneñ huñġı KÖNÖNÄ saķlı batşa harayında matur ġümer itkändär, ti.

### (25)TIÑLAUHIZ̲ ĶUYaN BALAHI

— Äsäy, uynarġa sıġayımmı? — tip horaġan Ķuyan malayı.

— Yuķ, ulım, sıķmayhıñ, bınday KÖNDÖ büre urmanġa hunarġa sıġırġa yarata,

— tigän äsähe.(30)-Äy-y, äsäy, bürenän tamsı la ķurķmayım min. Ber-ike-ös

— yügerz̲em. Ber-ike-ös — hikerz̲em. Büreneme huñ artımdan etkerz̲em. Sıġam-sıġam.

—Ulım, bäläkäsem mineñ, büre hin uylaġansa...
Läkin ulı äsäheneñ hüz̲en tıñlap tormanı, sıḳtı la sap(35)tı, ti.

Kön ḳoyaşlı, yılı. Üländär yäm-yäşel bulıp küz̲z̲eñ yawın ala. Urmanda şunday küñelle.
(38)Ḳuyan malayı şarḳıldap kölä-kölä hikergeläp uynay

**-36-**

(1)başlaġan. Şul saḳ kötmägändä kemder unı ḳış̲ıp totop alġan. Ḳuyan malayı, äylänep ḳaraġas, ërgähendä teştären şıġırlatıp torousı bürene kürgän.

— Äsäy! — Ḳuyan malayı äse itep ḳısḳırıp ebärgänen (5)hiz̲mäy z̲ä ḳalġan.

— Aşayım, aşayım hine, — tip, büre unıñ ërgähendä tıpırlap beyey başlaġan.

— Tuḳta, Bürebay. Min hiñä iş̲ kitkes ber nämä höyläyem. Şunan huñ aşarhıñ bäläkäste. — Büre ḳarşıhında (10) Ḳuyan malayınıñ äsähe tora ikän.

Büregä ḳız̲ıḳ bulıp kitä. Ä Ḳuyan malayı äsäheneñ şunday batır höyläşeüenä aptıray.

— Bürelär ḳuyandarz̲ı yaratmayz̲ar. Uġa mineñ ulım da,hez̲ z̲ä, min dä ġäyeple tügel. Läkin bez̲z̲eñ hez̲gä ber zıyanıbız̲(15)z̲a teygäne yuḳ.

Büre asıwlı yılmaya:

— hüz̲eñde ḳış̲ḳa tot. Mineñ hine tıñlarġa vaḳıtım yuḳ.

— hez̲z̲eñ ḳulda mineñ ulım. Küptän kürgänem yuḳ ine. Yaz̲ könö tölkölär urlap alıp kitkäynelär. Min hez̲gä ber ser (20)asa alam.

— Nindäy ser ul? — Büre haġayıp, tıñlay başlay. Ḳuyan malayın totḳan ḳulı ẖatta buşap kitä.

— Min hez̲z̲e yälläyem. Tölkölär hez̲z̲e ülterergä teläy. H̱äylä ḳora ular küptän.
(25)-Şunan, şunan. — Büre tüz̲emhez̲länep Ḳuyanġa yaḳınıraḳ kilä, — ẖatta Ḳuyan malayın ḳulınan ısḳındıra.

— Tölkölär mineñ balamdı aġıwlap hez̲z̲eñ yulġa sıġarıp ḳuyġan. Aşahaġız̲, ẖäz̲er ük üläsäkhegez̲, — tip şıbırlap ḳına öndäş̲ä Ḳuyan-äsä.

(30)Büre ışanır-ışanmaş̲ Ḳuyan malayına äylänep ḳarayım tihä, unan eldär iş̲kän. Aldına äylänhä, Ḳuyan-äsä ällä ḳasan bınan kitkän. Büre asıwınan şartlar sikkä etkän. Ä Ḳuyan malayı, äsähenä räẖmättär uḳıy-uḳıy, öyönä ḳaytıp etkän.

(35)**AYIU** MALAYI **NİÑÄ İLAUIN TAŞLANI?**

Ber urmanda bik eñmeş, ilaḳ Ayıw malayı yäşägän, ti. Kemdeñ nimä ëşlägänen kürhä, şunı horap ilay ikän. Aġas (38)başında sätläüek yarıwsı teyende kürgäs, min dä şunda me-

**-37-**

(1)nep sätläüek yaram tip, ös kön, ös tän ilaġan. Äsähe awnap yatḳan ber ḳoroġan aġas botaġına ultırtıp, teyendän horap sätläüek tottorġas ḳına tuḳtaġan, hikeränläp yırlap yöröwse Ḳuyan ḳız̲ıḳayın kürgäs, şulay hikergeläp yırlaġım kilä, (5)tip dulaġan.

— O-u-u, hikeräm, yırlayım. Niñä min ulay yırlay almayım? O-u-u.

— Ulıḳayım, tınıslanıp ḳına yırlap ḳara äle, hineñ tawışıñ unıḳınan da matur. Kil äle, kil. Ä hikereüeñ unan da beyegeräk. Kil, bäpesem, hikertep yörötäyem. Tup ta hindäy hikerä almay, — tip äsähe unı ögötläp maḳtağas, ul köskä tınıslanğan.

Ayıw malayı hayışḳandıñ şıḳrıḳlap osop yöröwen kürgäs, ällä nisä kön tuḳtay almay ükerä. — O-u-u, mineñ osḳom kilä, osḳom kilä!

Äsähe küpme ögötlämähen, irkälämähen, ıñğayğa kilmäy. Ayıw malayı tawışına beräü z̲ä yoḳlay almay. Bötäheneñ yänenä teyä bıl. Ḳoştar yıyılışıp käñäşläşälär z̲ä ḳawrıyz̲arz̲an ḳanat yahap, Ayıw malayına keyz̲erep,: taw başına menderep, osorop ebärälär.

Ayıw mal ayı. başta kölä-kölä räh̲ätlänep osop yöröy. Üz̲z̲äre yäşägän urmandı ber nisä uray, äsähenä ḳul bolğap sälämläp kitä. Osop yöröy torğas, yalḳıp kitä bıl. Asığa. Töşäyem tihä, ber nisek tä töşä almay. Bına totona ükerep ilarğa. Urmanda bötönläy tınıslıḳ bötä. Uğa törlösä öyrätep ḳısḳırıp ḳarayz̲ar. Üz̲ tawışına ber kemde lä işetmäy, osop yöröy birä, ti, Ayıw malayı.

Ḳayz̲andır taw börkötö kilep sığıp, Ayıw malayın eläkterep alğan. Nisek töşörgä käräklegen öyrätkän. Ayıw malayı ḳıwanıp ilawz̲an tuḳtağan. Ergä töşöw menän, ḳanattarın sisep taşlap, alpan-tolpan äsähe yanına yügergän. Şul köndän başlap ul başḳasa eñeşmäy, ilamay başlağan.

## ḲIRMIŞḲA GÖLDÖÑ ŞATLIĞI

Boron-boron zamanda, ḳara urman arahında ber bik matur aḳlan bulğan. Oşo aḳlan urtahında, yalbır ḳayın halḳınında ḳırmışḳa öyö ultırğan. Bıl öyz̲ä tatıw, eşsän ḳırmışḳalar yäşäy ikän. İrtän irtük neskä bildären tağı la nığıraḳ bıwıp, ḳırmışḳalar därräü eşkä totonalar. Öy-

-38-

zären yıyıştırıp, işek aldarın taz̲artıp, üz̲z̲ären tärtipkä kilterälär. Şunan inde törköm-törköm bulıp sılbırğa tez̲elep, urman huḳmaḳtarına yul totalar.

Oşo ḳırmışḳalar arahında matur Ḳırmışḳagöl tigän kızıkay z̲a bulğan, ti. Neskä bilen, tağı la neskäräk itep, ebäk bilbaw menän bıwıp alğan da başḳalar ıñğayına könö-tönö eşlägän, ti, ul da. Ḳoyaş sığıp, ḳoyaş bayığanın ḳarap tororğa la vaḳıtı ḳalmağan, ti.

Şulay köndär ütep kitkän. İşähe eldär işep, yawahı yamğırz̲ar yawğan, küsähe bolottar küsep, säskä atahı bötä ülän säskälänep ḳupşılanğan. Ḳırmışḳagölgä häm unıñ tuğandarına ikense yortḳa küsergä lä vaḳıt kilep etkän. Ḳustı-heñleläre räh̲ätlänep irkendä uynap üşhen ösön, ölkäneräk-täre üz̲ allı tormoş başlarğa teyeş. Kürşe aḳlanda küptän inde urın haylanğan. Unda yäşäüse böjäktär ḳırmışḳalarz̲ı tüz̲emhez̲lek menän köttö, ti.

Ber köndö ḳoyaş sıḳḳanda, iläü göj kilep uyanğan, här berehe yaḳındarı menän h̲uşlaşıp, töyönsöktären kütärep, işek aldına sıḳḳan, ti. Yäş kilendär balaların biläügä täräp alğan, ḳız̲z̲ar köyäntä-siläktären, egettär ḳamsıların alğan. Ḳırmışḳa göl dä äsähe, heñleläre menän h̲uşlaşıp, bildäre öz̲ölä yaz̲ıp, baz̲ıḳ ḳına atlap sığıp kitkän. Tik ilağıhı kilhä lä tüz̲gän ul.

Yul eñeldän bulmağan. Äle ḳorop ergä yatḳan ağastı aşa ütergä, äle yamğırz̲an huñ yıyılğan diñgez̲z̲ärz̲e urarğa käräk bulğan, ti. Ayaḳ astına ḳarap yöröy belmägän ber maḳtansıḳ tölkö saḳ ḳırmışḳalarz̲ı tapap kitmägän. Törlöhö törlö yaḳḳa ḳasıp ḳına ḳalğandar. Ḳırmışḳagöl oşo mäldä az̲aşḳan da ḳuyğan. Alda la, artta la ber kem dä kürenmäy ikän. Tegeläy yügergän, bılay yügergän, beräühe lä kürenmägän.

Ḳırmış̱ḳagölgä ḳıyın bulıp kitkän. Köyäntä-siläktären ergä ḳuyıp, aẕıraḳ ẖäl yıyıp alırġa bulġan. Şul vaḳıt unıñ ḳolaġına ber yır işetelgän.

Sıltır-sıltır,
(35)hıwım halḳın,
Sıltır-sıltır
Yırım ḳalhın.
Awıẕ itegeẕ hıwımdı,
(39)Yıwıġıẕ bit-ḳulıġıẕẕı.
Arıp-talıw onotolhon,
hıwıḳ heẕgä dawa bulhın.
Sıltır-sıltır, sıltır-sıltır.
Aẕaşḳandar yul taphındar,
Arıġandar, yonsoġandar
Yal itergä tuḳtalhındar.

**-39-**

(1)Ḳırmış̱ḳagöl därtlänep kitkän. Yır işetelgän yaḳḳa yul totḳan. Kilep ethä, köläs yöẕlä şayan Şişmäkäyẕe kürgän.

— Ëy, Ḳırmış̱ḳagöl, hawmı? Ni ëşläp torahıñ? Äyẕä mineñ menän yügeräbeẕ. Şayarırbıẕ, uynarbıẕ, yırlarbıẕ,— (5)tip sıltıraġan, ti, Şişmäkäy.

— Mi-mineñ ẖälem yuḳ, bik arınım, alış̱tan kiläm, aẕaştım. Yañı yortḳa küseneüse tuġandarım, duş̱tarımdan ayırıldım, — tigän Ḳırmış̱ḳagöl ilamhırap.

— Mineñ hıwımdı ës, ẖäẕer ḳaytır hiñä kös, — tigän (10)Şişmäkäy.

Ḳırmış̱ḳagöl hıw ësep alġan. Ḫäl ingän uġa. Taġı yulın dawam itergä uylaġan.

— Torop tor, Ḳırmış̱ḳagöl, min ẖäẕer duş̱tarımdı saḳıram, ular hiñä yarẕam iter, — tigän Şişmäkäy. Ul sıltı(15)ratıp kölöp ebärgän, tawışı bayaġınan da yaġımlıraḳ, maturıraḳ sıḳḳan. Säsköle bolondarẕan ebäk ḳanat kübäläktärosop kilgän.

Osoġoẕ, duş̱tarım,
Bolondan bolonġa,
(20)Yalandan yalanġa.
Yul tabıp biregeẕ
Aẕaşḳan yulsıġa.
Ḳıwanıp atlahın,
Yörömähen tal sıġıp.

Kübäläktär, säskänän säskägä, bolondan bolonġa osop ëẕläy orġas,Ḳırmış̱ḳa göldöñ tuġandarın kürep ḳalġandar, ti.- Ular yañı ġına kilep etep, öy halırġa yügereşep yöröy-(25)ẕär ikän. Tiẕ genä kilep, Ḳırmış̱ḳa göldö alıp kitkändär. Ḳırmış̱ḳagöl, Şişmäkäyġä räẖmät äytä-äytä, siläktären şifalı hıw menän tultırıp, kübäläktär artınan ëyärgän.

**ŞİŞMÄ TAUIŞI**

Boron-boron zamanda yäşägän, ti, ber äbey menän babay. (30)Ularẕıñ Ayhılıw isemle bik hılıw ḳıẕẕarı bulġan. Ayhılıw taw bitenän aġıp sıḳḳan şişmägä kön hayın hıw alırġa kilgän.

Şulay köndär ütä torġan. Ber köndö Ayhılıw hıwġa kilhä, şişmä urınında yuḳ, ti. Baş osonda üs̱ep ultırġan par (35)ḳayındı la kemder kis̱ep alıp kitkän. Ayhılıw ber aẕ aptı(36)rap baş̱ıp torġan da şişmä sıḳḳan urındı tayaḳ menän so-

*(40.sayfada resim yer almaktadır.)*

**-41-**

(1)ḳoy başlaġan, ti. Könö buyı ḳaẕġan ul urındı. Öygä hıwhıẕ ḳaytırġa yaramay bit inde.

Kiskä tiklem ëşlägäs, Ayhılıw yal itergä ultıra häm, üẕe lä hiẕmäş̱tän, yoḳlap kitä.

Töşöndä ul şişmäne kürä. «Mi-(5)neñ yaḳın dus̲tarımdı — ike ḳayındı yulawsılar mindekkä kis̲ep alıp kittelär, — ti ul. — Ular yuġalġas, ḳoş̲tar z̲a kilmäy başlanı. Yañġız̲ıma bik awır buldı häm min ularz̲ı ëz̲läp kittem. Tik berehen dä taba almanım, ḳayta torġan yulımdı la onottom, hiñä räh̲mät inde: mine" tabıp, yaḳtı (10)don'yaġa sıġarz̲ıñ».

Şişmä tawışına Ayhılıw tertläp uyanıp kitä. Ḳaraha, ısınlap ta, şişmä yañınan sıltırap aġıp yata. Ayhılıw künäktärenä tultırıp hıw ala la ḳaytırġa sıġa. «Ḳara äle, şişmälär z̲ä keşelär keüek ikän, — tip uylay ul. — Dus̲hız̲ (15)yäşäy almayz̲ar».

Oşo köndän huñ Ayhılıw, atahı menän kilep, şişmä buyına aġastar ultırtḳan, ti. Şişmä äle bulha, Ayhılıwġa räh̲mät äytep, aġıp yata ikän. Ä tirä-yaġındaġı aġastar üs̲ep ḳarurmanġa äylängän.

(20)ḲUYAN ḳız̲ı

horo Ḳuyandıñ üz̲e tös̲lö z̲ur ḳolaḳlı bik irkä, bik ḳäz̲erle ber ḳız̲ı bulġan. Ul unı bik yarata ikän.

Köndärz̲än ber köndö Ḳuyan irkä ḳız̲ına ör-yañı bıyma alıp ḳaytıp birgän. (25)— Mä, bäpesem, ayaḳtarıñ tuñmahın, hız̲lamahın, —tigän.

Ḳız̲ı bıl büläkte bik şatlanıp alġan. Äsähenä räh̲mättär äytkän. H̲äz̲er inde ul, yañı bıymanı keyep, räh̲ätlänep yöröy ikän. Läkin Ḳuyan ḳız̲ı yılı bıymaġa öyränmägän bul-(30)ġan. Ul ularz̲an bik tiz̲ tuyġan, halıp taşlaġan. Äsäyem tapmahın tip, ularz̲ı yäşerep ḳuyġan. Äsähe ularz̲ı ëz̲läp tabıp, balahına keyz̲ergän, ä ul halıp taşlaġan.

Yalan ayaḳ ḳar ös̲tönän dä, boz̲ ös̲tönän dä yügerä ikän. Ber kön buyı şulay yügergän, ikense köndö lä şulay yalan ayaḳ (35)yörögän. Ösönsö köndö inde aḳhay-aḳhay äsähe yanına kilgän.

— Äsäy, äsäy, mineñ ayaġım bik awırta! —tigän. Äsähe unıñ ayaḳtarına ḳaraġan da aptırap ḳalġan. (38)-Ḳız̲ım, yaḳtı yondoz̲om, hineñ ayaġıñ şeşkän bit,

**- 42-**

(1)tigän. «İnde ni ëşlärgä?» — tip uyġa batḳan Ḳuyan. «Bıl balanı ḳayz̲a alıp barırġa, nisek dawalarġa? — tip ḳayġırġan.

Şul vaḳıt nimäler ḳısḳırġan. Ḳuyan, aġas başına kütä(5)relep ḳaraha, teyende kürgän. Ul Ḳuyanġa:

— Ḳayġırma, tuġanḳay, yomşaḳ Ḳuyanḳay, ḳız̲ıñdıñayaġın bik tiz̲ töz̲ätep bula. Bınıñ ösön doktor Aybolitḳabarırġa, unan käñäş horarġa käräk, — tigän.

Teyen ḳuyanġa ısınlap bulışırġa, doktor Aybolittıñ (10)öyönä üz̲e iltergä bulġan.

Ḳuyan ḳız̲ın kütärgän dä doktor Aybolitḳa kitkän, teyen, aġastan aġasḳa hikerep, uġa yul öyrätkän.

Barıp ethälär, doktor Aybolittıñ ëşe bik küp, uġa urmandıñ törlö yırtḳıstarı dawalanırġa kilgändär ikän. «Bala(15)larz̲ı sirathız̲ ḳarayım min», — tigän doktor Aybolit. Ḳuyan ḳız̲ın doktor bülmähenä alıp ingändär, nimä menän awırıwın höyläp birgändär. Doktor Aybolit Ḳuyan ḳız̲ınıñ ayaġına darıwz̲ar hörtkän, şunan huñ Ḳuyan ḳız̲ına:

— Ayaġıñ töz̲älgäs, bıymalarıñdı inde halḳın köndärz̲ä(20)ber z̲ä halma, äsäyeñde tıñla, taġı nasar h̲äldä ḳalma,—tigän.

Ular, doktor Aybolitḳa bik z̲ur räh̲mättär äytep, öyz̲ärenä ḳaytıp kitkändär. Ös kön tigändä, Ḳuyan balahınıñ ayaġı töz̲älgän. Ul h̲äz̲er bıymahın ber z̲ä halmay keyep yöröy

ikän.

(25)**BUYAWSI ÖKÖ**

*T. Ġänieva*

Boron zamanda Uraliä tigän ildä ḳarġalar aḳ bulıp, ökölär bötä ḳoştar keüek, köndöz̲ osop yörögän, ti. Ökölärz̲eñ äle ġäjäp kürengän ber hänäre bulġan: ular tirä-yaḳta buyawsı (30)bulıwı menän dan totḳan. Ällä nindäy, ällä nindäy üländär-z̲än buyaw ḳaynatıp, ütenes menän kilgändärz̲eñ yomoşon ütär bulġan ökölär. Ul saḳta besnäk, hayıs̲ḳan, haralyın, käkük, ätäs-tawıḳtar, sıyırsıḳ, handuġas nindäy tös̲tä bulġandır, här ẖäldä, bögön bez̲ kürep belgän ḳoştarz̲ıñ tös̲-ḳiäfäte (35)älege lä bayaġı ökö-os̲tanıñ ës̲mäkärlegenä bäyle. Ḳoştarz̲ıñ ḳanat-ḳawrıyın ökö üz̲e telägänsä buyap sıḳḳan da, ular äle lä şul köyö yöröy, ti.
(38)Ökö-buyawsınıñ rässam hälätenän fayz̲alanıp, ḳoştarz̲ıñ

-43-

(1)bötähe lä tierlek üz̲ tös̲ön üz̲gärtep bötkändär. Ëlekkesä ap-aḳ köyö osop yörögän ḳarġa la bäẖeten hınap ḳararġa bulıp,, os̲taġa möräjäġät itkän.

— Ökö dus̲, — tigän ḳarġa, — bötä ḳoştar z̲a ëlekke ḳiä(5)fäten üz̲gärtep böttö, ä mine, totalar z̲a «aḳ ḳarġa, aḳ ḳarġa», tip üsekläyz̲är, ḳoş-ḳort arahına sıġır ämäl yuḳ, buyawlı ḳanattarın elpep, minän suḳış boralar, bılay yäşäüeḳıyın, mineñ dä ḳawrıyz̲ı buya äle.

Küz̲enä ḳalın bıyala küz̲lek keygän ökö ḳarġaġa hınap (10)ḳarap torġan da bılay tigän, ti:

— Ulay bik bötörönmä, ḳarġa äẖirät, hineñ suḳışıña,küz̲eñä horo tös̲ kileşer ine. Üz̲eñde tanımas̲hıñ da, bınakür z̲ä tor, bik hılıw bulasaḳhıñ, horo ḳarġa zerä matur' bula ul.

(15)«Ökönöñ os̲ta tigän danı sıḳḳan, — tip uylaġan ḳarġa,— ana bit, ëlek, yomortḳa urlayım, tip tönäkkä ingändä, ätäste tawıḳtarz̲an ayırıp ta bulmay ine, ẖäz̲er ḳalayıraḳ yörögän bula. Üz̲en ul, bälki, ḳoyroġo yäyġor tös̲önä buyalġas, tawis itep ẖis itäler, ämmä uġa tawis bulırġa yıraḳ äle, şulay(20)z̲a küz̲gä taşlana, huñġı vaḳıtta ayırıwsa ḳıyıwlandı. Yuḳḳa tügel, os̲o ökönöñ genä ës̲e. horo ḳarġa bulıp alham, miñä lä ḳıyıwlıḳ ös̲täler, ḳara erz̲ä ap-aḳ bulıp kürenep tä tormam».

— Min riza, — tip yawap birgän, ti ḳarġa ökögä. — horo (25)bulġas, horo bulhın, äyz̲ä. Tik buyawıñ eterlekme?

— Buyaw eterlek, — tigän ökö, — hiñä ney ällä ni küp buyaw z̲a käräkmäy.

— Nisek inde küp käräkmäy? — ti ikän bıġa ḳarġa, — hin inde buyawıñdı yällämä, ökö dus̲.

(30)Ökö z̲ur ḳaz̲anġa hıw tultırıp, as̲tına ut yaḳḳan, hıwġa buyaw halġan da bolġata-bolġata ḳaynata başlaġan. Oz̲aḳ ḳaynatḳan ul buyawın. Sabırhız̲ ḳarġa, ḳaz̲anġa küz̲ hala la, äz̲eräk kürenä bit, tip buyawz̲ı ös̲tätä birä, ti.

Nihäyät, ökö ës̲en tamamlaġan, usaḳtı hünderep, buyawlı (35)hıwz̲ı hıwıtḳan da, ḳarġaġa ḳaz̲anġa töşörgä ḳuşḳan. Ḳarġa iräyä birep, küz̲en yomop, älege tönätmägä sumġan. Tik... Kire kilep sıḳha, horonoñ äẖirätenä lä oḳşamaġan ḳara tös̲kä ingän dä ḳuyġan, ti. Arı huġılġan ḳarġa, bire huġılġan, tik ni ḳılhın, sara yuḳ. Külgä küz̲e töşhä, üz̲e lä ḳurḳır(40)lıḳ ḳara ḳarġa ḳarap tik tora, ti, bıġa.

## -44-

—Könöñ böttö, ökö, — tip ķarķıldaġan ķarġa yän asıwġa. — Mineñ küẕgä bütän kürenähe bulma! Ķar-r-r!

Ana şunan birle ķarġa ķaraġa äylängän, ä ökö, ķarġanıñ ķarġışınan ķurķıp, tän ķuyınına hıyınġan, ti. Buyaw, hü-rät töşöröw, rässamlıķ hänärẕären dä taşlaġan ul. Ķoştar ķarġaġa, ökönö ġäfü it, tip möräjäġät itep ķaraġan. Tik şunda uķ «ķar-r-r!» — tip ķarġana başlay ti bıl. Ä unıñ ķarķıldawına ķaraġanda, buyawhıẕ yöröweñ ẖäyerle tügelme ni?

### ÖS DUṢ

Boron-boron zamanda İrändek tawẕarındaġı ber mämeryälä yäşägän, ti, ös duṣ: Burhıķ, Terpe häm Sısķan. Bik tatıw torġandar, ti, bılar: yäy buyı yal belmäy ķışķa aẕıķ äẕerlägändär. Tamaķtarı tuķ bulġas, ķıştıñ ķatı buranı la, satlama hıwıġı la hiẕelmägän ularġa.

Bılarẕıñ duṣ yäşäüen kürep, Ayıw, Büre, Tölkö bik könläşkän, ti.

Berẕän-ber köndö ular üẕ-ara käñäşläşkändär ẕä ös duṣtıñ aẕıġın tartıp almaķsı bulġandar, ti.

Tölkö, ķupşı ķoyroġon bolġap, ẖäyläkär yılmayıp: «Ut törtäyek beẕ ularẕıñ öyönä!» — ti ikän.

Bıġa Büreneñ tamam asıwı kilgän:

— Aẖ, hin, käbäk baş! — tip ekergän, — ti, ul. — Ularẕıñ öyönä ut törtöp, nindäy baylıķtarın almaķsı bulahıñ?

Tölkö ķurķıp sawķalıķķa inep ķasķan, ti.

Ayıw menän Büre yuldarın dawam itkän. Burhıķ, Terpe häm Sısķandıñ öyönä bik aẕ ġına ara ķalġas, Büre: «hin, Ayıwẖan olatay, bik ķartayıp ta kitteñ. Teştäreñ dä ķoyolġan. Ėşläp ıẕalanmaṣhıñ inde: min säynärmen, hin kötöp to-rorhoñ da birgän höyäktärẕeñ elegen imerheñ», — ti ikän. Ayıw nıķ asıwlanıp, Büregä kiẕängän, ti. Tik ul äylängänse, tegenehe tabanın ġına yaltıratķan.

Ä Ayıw yuldaştarınıñ şulay ķomhoẕ bulġanına şul tiklem nıķ asıwlanġan, ti, ẖatta awırıp kitep, öñönä ķay-tıp yatırġa mäjbür bulġan.

Bına şunan huñ ul ķıştı öñöndä ütkärergä ġäẕätlängän ikän.

## - 45-

Ä ös duṣ — Burhıķ, Terpe, Sısķan — äle lä tatıw ġümer itälär, ti. Berẕäm bulġas, ber nindäy yänlek tä eñä almay,. ti, ularẕı.

### AYIU NİÑÄ ĶURĶA?

Ber keşe urmanġa utınġa barġan, ti. Utın ķırķıp arıġas, aġas töbönä yal itergä ultırġan ikän. Şul saķ unıñ ërgähenä ayıw kilgän.

— Ëy, keşe, äyẕä köräşäyek, — ti ikän ayıw.

Keşe ayıwġa ķaraġan da uyġa ķalġan.

«Şunday ẕur yırtķıs menän nisek köräşäheñ! Alġı ayaķtarı menän ber ķıṣha la, yäneñde alır bit bıl».

— Ä, yuķ, — tigän keşe, — niñä hineñ menän köräşep tororġa! Äyẕä, iñ ëlek kös

hınaşıp ḳarayıḳ!

— Ä nisek? — tip horaġan ayıw. Keşe balta alġan da
(15) aġas töbön yarġan, unıñ yarıġına säy ḳaḳḳan häm äytkän;

— Oşo aġas töbön ḳulıñ menän ḳayıra alhañ, köslö bulahıñ. Şul saḳ min hineñ menän köräşermen.

Ä ayıw, oẕaḳ uylap tormayınsa, ḳulın aġas yarıġına tıḳḳan. Keşe şul arala söyẕö baltahı menän huġıp ta sı(20)ġarġan.

Şul saḳ aġas töbö şart itep yabılıp, ayıwẕıñ ḳulı ḳıs̱ılıp ḳalġan. Timer ḳıs̱ḳısmı ni!

Ayıw aḳıra, ürhälänä, ä aġas töbönän ḳulın ala almay, ti.

— Yä, nisek? — ti keşe. — Mineñ menän köräşäheñme?

(25)-Yu-yuḳ! — tip aḳıra ayıw. — Köräşmäyem!

— Ana şul-şul! — tigän keşe. — Kös menän genä tügel, -aḳıl menän dä köräşep bula.

Keşe aġas töbönä taġı säy ḳaḳḳan, ayıw ḳulın tartıp :alġan da, artına la borolop ḳaramayınsa, urmanġa hıpırt-(30)ḳan.

Şunan birle ayıw keşenän ḳurḳa, ti.

## **YaLḲAU MENÄN ŞAYTAN**

Ber ata yalḳaw bulġan, ti. Ber ḳayẕa ëşlämägän, ber ḳayẕa uḳımaġan. Bar şöġölö: «Ëşlämäyensä genä, nisek itep anhat (35)yäşärgä ikän»,— tip ẖıyallanıp, köndär buyı buş yatıw bul-(36)ġan. Şulay ber köndö bıl ber küper töböndä ultıra, ti.

**-46-**

(1)—Ëẖ, şaytan, ḳayẕan aḳsa tabırġa inde? — tip äyteüe bulġan, «min bında, min bında» tigän tawış işeteleüe bulġan. Başın kütärep ḳaraha-a-a — aldında aġas ayaḳ, tus̱taḳ küẕ, käkre mögöẕ, yalbır säs şaytan tora, ti.

(5)-Nisek aḳsa tabırġa inde, tiheñme?

— Şulay tim şul.

— Unı tabıwı anhat ul. Oşo küperẕän ar'yaḳḳa sıḳ ta bir'yaḳḳa sıḳ, ar'yaḳḳa sıḳ ta bir'yaḳḳa sıḳ. Sıḳḳan hayın kes̱äñdäge aḳsañ ike märtäbä kübäyä barır.

(10)-Bula ul, — tigän yalḳaw, hikerep torop.

— Tik ber şartım bar şul. Küperẕän sıḳḳan hayın, egerme dürt tineñde miñä birä barırhıñ.

— Bula ul, — tigän yalḳaw, aşḳınıp.

Yalḳaw, yügerep küper aşa ar'yaḳḳa sıġıp, kes̱ähendäge (15)aḳsahın hanaha, ike tapḳırġa artḳan, ti. Ḳıwanısınan:

— Mä, egerme dürt tine hiñä, — tip şaytanġa tottorġanda kire yügergän. Kes̱ähendäge aḳsa yänä ike tapḳırġa işäygän. Şunıñ teüäl egerme dürt tinen yänä şaytanġa ırġıtḳan.

Yalḳaw küperẕän ösönsö tapḳır yügerep ütä lä, yänä şay(20)tandıñ ölöşön birep kitä. «Aḳsaġa ḳalay anhat bayıḳtım bılay bulġas. Äle yügerhäm, yänä alırmın äle», — tip aḳsahın hanap ḳaraha, ḳulına ni barı egerme dürt tin genä ëlägep sıḳḳan. Yalḳaw üẕenä-üẕe ışanmay, egerme dürt tinen ergä halıp torẕo la bişmäteneñ yäy buyẕarın tikşerep sıḳ−(25)tı, kes̱älären aḳtarıp böttö, ti, tabılmanı, ti, bütän ber tin dä. Ällä töşöp ḳalıp

böttö mikän, tip, küper yarıḳtarın ḳarap sıḳtı, ti, — yuḳ, tabılmanı. Şul arala ergä halıp torġan aḳsahınan da ḳolaḳ ḳaḳḳan. Unı şaytan ëläkterep alġan da tuṣtaḳ küẕen taṣıraytıp kölä-kölä kitep tä barġan, küẕẕän dä yuġalġan.

Yalḳawlanıp anhattı uylahañ, ana şulay bula ul. «Anhattı uylaġan äẕẕän buş ḳalġan» tigän hüẕ şunan ḳalġan, imeş, tiẕär. Şulaymılır, buşmılır—unı kem belä. H̱äẕer baş vatıp ḳaraġıẕ: şaytan menän osraşḳanġa tiklem yalḳawẕıñ aḳsahı küpme bulġan?

## -47-

### İKE KÜRŞE

Boron-boron zamanda ber yarlı ḳart menän ber bay kürşeläş yäşägän, ti. Ber köndö yarlı ḳart bay kürşehenä kilgän.

-Baẕarġa barırġa ine, beyäñde birep tor äle, kürşe, — tigän, ti, ḳart. Bayẕıñ yarlı ḳartḳa yawabı äẕer bulġan:

— Beyäm bögön öyẕä yuḳ. Ḳayẕalır sıġıp kitkän, — tigän. Şul mäldä bayẕıñ atı keşnäp ebärgän, ti.

— Aldayhıñ bit! Ana bit keşnäy. Üẕeñ dä işetep torahıñ, — tigän ḳart. Bay:

— Bäy, hin miñä ışanahıñmı, ällä beyägäme? — tip, üẕ hüẕen birmäy, ti.

Ḳart ḳaytırġa sıġa. Ḳaytıp barġan vaḳıtta şişma yanındaġı soḳor töböndä ul ber bäräs kürep ḳala. Bäräs, ëṣelä hıwhap-sarsap, kötöwẕän ayırılıp ḳalġan, ti. Ḳart aptırap tormaġan, unı totop bäylägän dä elkähenä halıp üẕenä alıp ḳaytḳan. Bay bını işetep, ber kön kürşehenä kilgän.

— hin soḳor töbönän mineñ bäräste tabıp alġanhıñ ikän. Kire ḳaytarıp bir, — tigän.

-hineñ bäräseñ mindä yuḳ. Bar ana soḳor töbönän ëẕlä,— tigän ḳart. Bay, kitergä borolġas, ḳoyma artında ġına bäräseneñ baḳırġanın işetkän.

— Aldaşahıñ bit, — tigän bay. — Ana laha baḳırẕı.

— hin miñä ışanahıñmı, ällä bäräskäme? — tigän dä ḳart şart itep işegen yabıp ḳuyġan.

### ḲARAḲTIÑ BÜRKE YANA

Ëlekke vaḳıtta beräüẕeñ atı yuġala. Kem urlaġanın asıḳlaw ösön, bötä ẖalıḳ ber urınġa yıyıla, horaşalar-horaşalar — ber ẕä äytkän keşe yuḳ. Şunan ẖalıḳtı yıyıp, yänä horaşa başlanılar, ti. horaşalar-horaşalar — beräü ẕä belmäy. Şul vaḳıt ber keşe hıbay sabıp kilä lä:

— Min ul keşene beläm. Urlaġanın üẕem kürẕem. Unıñbürkendä halam yana. Şul halamġa ut ḳapḳan, — tip horänhala.

Şunı işetkäs tä, ẖalıḳ arahında ultırġan beräü tota la bürken ḳaġa. Bötähe lä bını kürep ḳala. Unı şunda uḳ totop alalar ẕa horaşıp-tikşerep yazaġa tarttıralar.

## -48-

### ḲART ÄSÄ

Boron-boron zamanda üẕeneñ yañġıẕ ġına ulı menän ber ḳatın yäşägän. Unıñ ire yawẕa ülep ḳalġan bulġan, ti. Äsä üẕeneñ hawlıġın da, kösön dä yällämägän, ulın äẕäm itergä, uġa etemlek kürhätmäṣkä tırışḳan. Malay ber awırlıḳ ta kürmäy üṣep

etkän. Yäşe etkäs, kürşe awıldan käläş alġan.

Kilen kilgäs, ḳart äsägä kön bötkän. Ḳartayıp tik ayaḳ yulın ġına kürgän ḳäynähen kilen bulġan keşe hıyẕırmay başlaġan. Ḳart ḳäynä könö-tönö èşlägän: abına-hörönä iẕänen dä yıwġan, höyälle, taramış ḳuldarın taldırıp, köndär buyı yılġala ker sayḳaġan, tönön eyänen ḳaraġan. Eyäne unı bik yaratḳan. Ber aẕım da öläsähenän ḳalmay, äkiättär, yırẕar tıñlaġan. Äbey ẕä eyänen yaḳın kürgän, kükrägenä ḳıṣıp, küẕ yäştären kürhätmäy genä ilaġan. Kilene ajġırınıp yaḳtı yöẕön dä kürhätmägän. Üẕ ulı la ẖäẕer- uġa yat bulıp kürengän. Ber saḳ äbey bötönläy küẕẕän yaẕġan. Äbeyẕe altı yäşlek eyäne genä tärbiälägän: bit-ḳuldarın yıwẕırġan, tışḳa alıp sıḳḳan, yäşerep kenä aşarġa birä torġan bulġan. Ḳäynäheneñ èştän sıḳḳanın kürep, yäş ḳatın ber kön irenä:

—Äbeyẕe urmanġa alıp barıp taşla, — tip boyorġan.

İre riza bulmaha la, ögötläy torġas, bisähe kündergän.

Şunan huñ ir urmanġa barıp,, yañġıẕ ḳayın töbönä soḳor ḳaẕa. Soḳorẕoñ ös̱tön sıbıḳ-sabıḳ menän ḳaplay ẕa ḳaytıp äsähenä:

—Äsäy, min hine ḳoẕaġıyẕarıña ḳunaḳḳa alıp baram,—ti.

Ḳunaḳḳa tigän hüẕẕe işetkäs, malayı:

— Öläsäyem menän min dä baram, — tip dawlaşa başlay. Atahı ber ẕä riza bulmay. Ulı küẕ yäşen tügep ilay başlaġas, unı la ultırtıp ala. Ular urmanġa yul alġas, kilen şatlanıp ḳäynäheneñ artınan köl hibep ḳala. Tege ḳayın töbönä kilep etkäs, eget:

— Äsäy, kilep ettek, töş, — tigän.

Äbeyẕeñ ber-ike atlawı bula — soḳor èsenä töşöp tä kitä. Bını kürep orġan malay atahına:

— Atay, öläsäyem soḳorġa töştö bit, tiẕeräk sıġar! —tip ḳısḳırıp ebärä.

Tik atahı aşıḳmaġan. Köräk alġan da äsähenä:

—Äsäy, min hine oşonda kümep kitäm, — tigän.

**-49-**

Şul saḳ malay, atahınıñ körägenä yäbeşep, yän öẕgös tawış menän:

— Kümmä öläsäyemde! Teymä uġa! Ägär kümer bulhañ, üs̱käs, üẕeñde lä oşonda kümäsäkmen!—tip ḳısḳırıp ilarġatotonġan.

Atay keşe malayẕı tıñlamaġan, unı sitkä ètep ebärgän dä soḳorġa tupraḳ taşlarġa bulġan. Ber köräk tupraḳ taş-lawı bulġan — unan ap-aḳ ber kügärsen osop sıḳḳan. Ul ḳart äsä bulġan. Ul eyänenä aḳ bäẖettär teläp, ulı menän kilenenä ḳarġış äytep osop kitkän. Şuġa la malay bötä ġümere buyı bäẖetle bulġan, märẖämät belmägän äsähe menän atahı ḳart äsä ḳarġışınan don’yalıḳta bäẖet kürmäyensä ülep kitkändär. Äsähen ränyetep, ḳarġış alġan keşe yälsey almay şul ul.

**BER ÄSÄNEÑ ZARIḲḲANI**

Boron-boron zamanda yäşägän, ti, äbey menän babay. Bulġan, ti, ularẕıñ dürt balahı, häybät kenä yäşäp yatḳanda,, äbey ẕä, babay ẕa awırışa başlaġandar. Oẕaḳ ta yatmanı,, ti, babay don’ya ḳuyẕı, ti. Äbeye haman awırıy ẕa awırıy. Tüşäktän ḳalḳıp torop ultırır ẖäle yuḳ, ti. Äsäläre şunday ẖäldä bulha la, dürt balahınıñ, ismaham, berehe unı. ḳaramay, könö-tönö uynap tik yöröy, ti. Ḳart äsä hıwhap, tamaġı kibep, ber tamsı hıwġa zar bulıp yatḳanda la, berehe-ber kilep ẖälen belmäne, hıw birmäne, ti, dürt moñhoẕẕoñ.

Kön artınan kön ütkän. Äbeyẕeñ ẖäle köndän-kön awıraya. barġan. Ber köndö ul ẖälheẕ genä tawış menän balaların saḳırıp alġan da:

— Balaḳayẕarım, min küp yatmam. Don’ya üẕegeẕgä ḳalır... Şuġa tiklem hıw

kilterep ëserep torhağız̲sı! — tigän,, (30)inälep.

— Mä, ës! — tip berehe ber sümes hıw birz̲e lä, äsähen onotop, äylände lä uyınġa totondo, ti.

Köz̲ etkän. Äsä haman zarığıp tüşäktä yata. Ḳoştar tez̲eleşep yılı yaḳtarġa kitä başlaġan. Şunday köndärz̲eñ be(35)rehendä ḳart äsä kükkä ḳarap yattı-yattı la, ti: «Min dä oşo ḳoştar keüek ber ẖäsräthez̲ osalham ine... Ular osor-osorz̲ar z̲a beräy kül buyına yalġa tuḳtarz̲ar... Şunda, tuyġansı emhe-(38)nep, hıw ësep alırz̲ar... Şunan tağı osop kiterz̲är», — tip

## -50-

(1)uylandı, ti. Şulay ḳoştarġa ḳarap zarığıp yatha, ḳolağına şunday tawıştar işetelgändäy bula:

— Kil, äyz̲ä bez̲z̲eñ menän!

— Yatma zarığıp, osayıḳ bergäläşep!..

(5)Uġasa bınıñ öş̲tönä ber tun kilep töştö, ti. Äsä, awırıwın onotḳan keşeläy, ḳalḳıp torop şul tundı keygäyne— ḳoşḳa äüerelep, täz̲ränän osop sıḳtı la kitte, ti. Don'yaların onotop uynap yörögän balalarz̲ıñ berehe, bıl ẖälde kürep:

(10)—Äsäyebez̲ ḳoş bulıp osto! — tip ḳısḳırıp ebäreügä, ḳalġandarı la iş̲tärenä kilde, ti.

— Äsäy!

— Äsäkäyem!

— Kitmä, ḳaldırma bez̲z̲e! Mä hıw, mä hıw ës tuyġan (15)sı!..— tip, ḳayhıhı sümes, ḳayhıhı künäk totop, äsäläreneñ artınan yügerz̲e, ti. Äsäläre tuḳtamanı, ergä töşmäne, ti. Barı kük yöz̲önän:

— huñ inde, balaḳayz̲arım, bäẖil bulığız̲! — tigän moñhou tawışı ġına ḳayttı, ti, balalarına.

(20)Dürt malay dürt urında tägäräp yöröp ilanılar, ti. Baştarın taşḳa bärep, ḳanatıp böttölär, ti. Tik bik tä huñ bulġan şul. Şuġa la äsä ḳäz̲eren vaḳıtında beleü käräk. Az̲aḳ ükenmäs̲lek bulhın, balalar.

### YaLḲAU MALAY

(25)Boron-boron zamanda yäşägän, ti, ber yalḳaw malay. Äsähenän başḳa ber keşehe lä bulmaġan, ti, unıñ. Bıl yalḳaw aldındağı ikmäkte ıntılıp alırġa la irengän, ti. Äsä keşe, yalḳaw ulınan yalḳıp, yöz̲äp bötkän, ti.

Berz̲än-ber köndö butḳa beşergän dä bılay itkän: ike (30)taştabaḳ alıp, berehenä butḳanı äz̲ genä, ikensehenä küberäk halıp, berehen tupha töbönä, ikensehen ey aldına sığarıp ḳuyġan. Malayı ber zaman:

— Asıḳtım! — tip ḳısḳıra ikän.

— Tupha töböndä genä butḳa bar, ıntılıp ḳına aşa in-(35)de üz̲eñ, — tigän.

Ös tapḳır şulay ḳabatlanġan, ti. Ḳıyın bulha la, üz̲e alıp aşaġan malay butḳanı. Butḳa bik tämle toyolġan. (38)Malay:

**-51-**

—Tağı butḳa! — tigän.

— Tışta, bar sığıp aşa, — tigän äsähe.

Yalḳaw malay sıġa kilep tıştağı butḳanı la hıpırġan, ti. Üz̲e şunda uḳ yatıp yoḳlap kitkän. Äsähe ëstän işekte ëlep ḳuyġan. Töndä malay öşöp kitep torha, işek bikle, inep bulmay, ti.

— Äsäy, işekte as, — tip ḳısḳıra.

— Ëşkä öyränmäyensä, işekte asmayım. Ëşkä öyrän. Öyränmäyensä ḳaytıp kilähe bulma, — tip, äsähe indermägän, ti.

Malay, yoḳlarġa urın tapmaġas, kürşeläreneñ işegen şaḳıġan.

— Bında yalḳawz̲arġa urın yuḳ, — tigän uları la.

Malay il giz̲ep sığıp kitä. Küp er ütkän, küp tir tükkän, küp ëşlägän, küp hänär alġan. Küp vaḳıttar ütkäs, malay äsähenä äylänep ḳaytḳan.

— Äsäy, as inde işegeñde. Küp erz̲är ütep, küp tirz̲är tügep, küp hänärz̲är alıp ḳayttım, hiñä küp itep büläktär kilterz̲em, — tigän.

Äsähe şatlanıp işek asḳan. Oşo köndän başlap, äsäle-ullı räh̲ätlänep yäşäy başlaġandar, ti.

**TÖLKÖ MENÄN BÜZ̲ÄNÄ**

Ölgörgän arış arahında, arlı-birle pırıldap, ber büz̲änä osop yöröy ine, ti. Şunda, yaḳında ġına, külägälä älheräp bötkän ber as tölkö yata ine, ti. Büz̲änä kilde lä şul tölkönöñ ḳolağı osona ḳundı, ti. Tölkö, başın helkep, büz̲änäne ḳolağınan töşörz̲ö lä:

— Ber ḳabımġa etmäş başıñ menän bimazalap yörögän bulahıñ!—tip asıwlandı, ti.

— H̲ikmät z̲urlıḳtamı ni ul? Bına min bäläkäy genämen, ä şulay z̲a hine tuyġansı aşata alam. Ëşte h̲äylä menän ëşläy beleüz̲ä ul! — tip äytte, ti, büz̲änä.

— Kit bınan, küz̲ köyögö! Ni ëşläp inde büz̲änä tölkö saḳlı tölkönö tuyz̲ırġansı aşata alhın? — tip köldö, ti, tölkö.

—Işanmahañ, bına kür, h̲äz̲er min hine tuyz̲ıram, — ti büz̲änä. — H̲äz̲er min yul öştönä sığam, hin yul sitendä, arış arahında ḳasıp ḳına yat ta minän küz̲z̲äreñde almay küz̲ätep tor. Min pırıldap osop kitkändä gënä, hin, yuldağı az̲ıḳtı

**-52-**

alıp, bına şul urınġa kilerheñ dä tämläp torop aşarhıñ,— tip äytte, ti.

Tölkö yul sitenä yäşerenep yattı, büz̲änä arlı-birle säbälänep yöröy başlanı, ti. Şul vaḳıt iñbaştarına uraḳ halġan ber ir menän ber ḳatın kilä yata ikän. Ḳatını ḳulına ber töyönsök tä totop alġan. Ḳatın yulda yöröp yatḳan büz̲änäne kürep ḳala la:

— Ëy, atahı, ḳara äle bınaw büz̲änäne: şunday himez̲,h̲atta osa la almay! Totop alayıḳsı üz̲en, beşerep aşarbız̲.Büz̲änä ite bik tämle bul a. tiz̲är, — tip ḳısḳıra, ti.

Şunan bılar ikäüläp büz̲änäne totmaḳ bulalar. Ḳatın töyönsögön yul sitenä ḳuya la büz̲änäne baştıra başlay. Büz̲änä osmay z̲a, ḳasmay z̲a, tottormay z̲a. Şulay ḳıwıp yöröy torġas, inde totayım tigändä genä, büz̲änä pırıldap osop kitä. İr menän ḳatın awız̲z̲arın asıp torop ḳalalar. Tölkö lä, büz̲änäneñ osḳanın kürep, yul sitendäge töyönsöktö awız̲ına ḳabıp ala la bayağı urınġa kitä. Töyönsöktö asıp ḳaraha, ësendä tawıḳ ite ikän. Tölkö räh̲ätlänep aşay. Büz̲änä ḳarap tora. Ä tege irle-ḳatınlı uraḳsılar

buş ḳul menän üz̲ ëş-(20)tärenä kitälär.

Tölkö, aşap tuyġas:

— H̲ikmät, ısınlap ta, z̲urlıḳta tügel ikän şul, hineñḳeüek h̲äyläkär bulıwz̲a ikän, — ti. Şunan ul: — Yarar, büz̲änä dus̲, hin mineñ tamaḳtı tuyz̲ırz̲ıñ, bınıhı ösön räh̲(25)mät. H̲äz̲er hin mine ber räh̲ätländerep käldär z̲ä inde,—tigän.

Büz̲änä bını tıñlap:

— hine köldöröp ultırırġa h̲äz̲er mineñ vaḳıtım yuḳşul. Kis menän köldörörmön, h̲äz̲ergä hin oşonda yatıp yoḳ(30)la. Kiskä taban min hineñ yanıña kilermen, — tip, üz̲ ëşe
menän kitte, ti.

Kiskä taban tölkö uyanıwġa büz̲änä kilde lä:

— Äyz̲ä, tölkö dus̲, awız̲ıñ ḳolaġıña tiklem yırılġansı räh̲ätländerep köldöröp alıp ḳaytayım üz̲eñde, ëyär mineñ(35)arttan! — tigän.

Büz̲änä awlaḳ erz̲än genä ütep, äkren genä osop barz̲ı, tölkö ḳasıp-bos̲op ḳına atlap, unıñ artınan ëyärz̲e, ti. Bına ular, ırz̲ın artınan ġına ütep, ber awılġa, bayaġı uraḳsılarz̲ıñ yortona, kilep indelär, ti. Yort h̲ujahı ḳaz̲ıḳ os- (40)lay, bisähe hıyır hawa ine, ti. Tölkö ḳasıp ḳına küz̲ätä

**-53-**

(1)başlanı, büz̲änä ḳatındıñ hıyır hawġan erendä—ayaḳ as̲tında uralanıp yörönö, ti. Ḳatın büz̲änäne tanıp ḳalıp:.

— Ëy, atahı, ḳara äle, bez̲z̲e aşamlıḳhız̲ ḳaldırġanbayaġı büz̲änä yortoboz̲ġa kilgän, huġıp ülteräyek üz̲en! — tip(5)ḳısḳırz̲ı, ti.

İre ḳaz̲ıġı menän kiz̲ängäyne, büz̲änä hıyır mögöz̲önä kilep ḳundı, ti; yañınan kiz̲änep, hıyırz̲ıñ mögöz̲ön saḳ ḳına hındırmay ḳaldı, ti. hıyır, ḳurḳıp, hötlö künäkte tibep awz̲arz̲ı, ḳatın höt tügelgän ergä tayıp yıġıldı, ti. Büz̲änä-(10)ne tota almaġas, tege ir asıwlanıp ḳatının tuḳmap taşlanı, ti.

Tölkö, awız̲ı ḳolaġına tiklem yırılġansı, bıwını ḳatıp köldö, ti. Üz̲e köldö, üz̲e büz̲änäneñ h̲äylähen otop ultırz̲ı, ti.

(15)Bına şunan huñ, büz̲änänän öyränep, tölkö h̲äyläkär yänlek bulıp kitkän dä inde, tiz̲är.

## TÖLKÖ MENÄN BÜRE

Ber ḳart büre tölkönän:

— Nimä aşap bıl h̲ätle himerz̲eñ? — tip horaġan. Töl-(20)kö uġa:

— Kül buyındaġı mal-tıwar menän tuḳlanam, — tip yawap birgän.

— Ul maldarz̲ı nisek totahıñ? — tip horaġan ḳabattan büre. Tölkö:

(25)—Ḳamış arahına barıp yat ta äs̲täñä şatırlap kilep menmäyensä torma. Ul şatırlap kiler, yanıña kilgäs kenä totop al, — tigän. Büre tölkö öyrätkänsä ëşlägän: küz̲en yomop, ḳamış arahına barıp yatḳan.

Uġasa bulmay, tölkö ḳamışlıḳtıñ ber başına ut tör- (30)töp ebärgän. Ḳamış şatırlap yana-yana büregä yaḳınlaşḳan, büre haman yatḳan. Yata torġas, yöndäre yana başlaġan bınıñ. Sız̲ar h̲äle ḳalmaġas ḳına, büre küz̲en asḳan. Asha, yöndäre yanıp bötkän, tirehe şatırlap yana başlaġan, tirä-yaḳta ut, ti.

(35)Bıl arala tölkö, kälgä barıp awnap, tös̲ön üz̲gärtkän dä yar buyına kilep ultırġan. Ah̲ ta uh̲ bulıp, unıñ yanına büre sabıp kilgän.

(38)—H̱arap buldım, ẖäẕer ni ëşlärgä inde? — ti ikän büre.

**-54-**

(1) — Niñä ẖarap buldıñ? — tip horaġan tölkö.

— Ber ḳıẕıl tölkö aldap, ut törtöp kitte, — tip zarlanġan büre.

— Ä-ä-ä, ul ḳıẕıl TÖLKÖ mine lä aldap kitkäyne, — ti-(5)gän buldı, ti, tegenehe.

— İnde ni ëşläyem ikän? — tigän büre.

— he, aptırap torahıñ taġı. Boẕġa barıp awnaḳla! — tip aḳıl öyrätkän tölkö.

Büre boẕġa barġan da awnaḳlay başlaġan. Unıñ ite boẕġa (10)yäbeşep hıẕırılıp bötkän, üẕe şunda ülep kitkän, ti.

**ḲUYAN MENÄN ARIS̱LAN**

Boron-boron zamanda ber arıs̱lan bulġan. Başḳa yänlektär arıs̱landan bik ḳurḳıp ḳına yäşägändär. Ni ösön tihäñ, arıs̱lan ularġa ber ẕä kön kürhätmäy ikän, ḳayẕa osratha, (15)şunda tota la yıġıp aşay, ti, üẕẕären. Arıs̱lan yänlektärẕeñ beräühen totop aşaġan saḳta, bişäühe yöräge yarılıp ülä, ti. Ḳasıp ḳotolorġa his ber ämäl bulmaġan, ti, bıl yırtḳıstan.

Arıs̱landıñ şulay teñkägä teyeüenän täḳättäre ḳalma-(20)ġas, berẕän-ber köndö urmandaġı bulġan keyek-yänlektär yıyılışıp käñäş ḳorẕolar, ti.

— Bıl arıs̱lan bötörä bit beẕẕe, bılay bulha. Ul berebeẕẕe totop aşaġanda, bişäüebeẕ yöräge yarılıp ülä. Ni ëşläybeẕ ẖäẕer, aġay-ëne? — tip äytte, ti, tölkö.

(25)—Beẕ kön hayın yäräbä halayıḳ. Yäräbä kemgä sıḳha, şul arıs̱landıñ ḳorbanı bulır, — tip äytte, ti, ayıw.

Şulay itep, bılar kön hayın yäräbä halırġa buldılar, ti. Ular bıl ẖaḳta arıs̱landıñ üẕenä lä ẖäbär ittelär, ti.

Berense kön yäräbä ḳuyanġa sıḳtı, ti. Ḳuyan torop, yänlek(30)tärgä:

— Aġayẕar! Beẕgä bılay itep här vaḳıt arıs̱landıñ ḳorbanı bulıp üleü ber ẕä kileşkän ëş tügel. Beräy ẖäylä ḳorop, şunan ḳotolou yaġın ḳararġa käräk, — tip äytkän buldı, ti.

(35)Tölkö ḳuyandıñ hüẕen tıñlap torẕo la:

— Kit, ẖäsrät! hinme huñ ẖäylä ḳorop, arıs̱landı aldaryän! Beler-belmäs̱ teleñ menän ẖäbär höyläp torġan bulahıñ,(38)asıwımdı kilterep, — tip ärläp taşlanı, ti.

*( 55. sayfada resim yer almaktadır.)*

**-56-**

(1)Ḳuyan arıs̱lan yanına kitte, ti. Ber ẕä ḳabalanmanı, ti, bıl. Kötöp ultırġan arıs̱lan bik asıwlandı, ti, ḳuyanġa.

— Niñä ulay yay yöröyhöñ hin? Ata-babalarıñ yay yörömänelär zamanında, hin irtänsäk ük kilergä teyeş ineñ, ẖä(5)ẕer töş etep kilä, — tip ärläp taşlanı, ti, ḳuyandı.

Ḳuyan ḳurḳıp ḳına:

— Mine hiñä köndöẕgölökkä aşarġa ebärgäynelär, ikenseber ḳuyan hiñä irtänsäk kilergä teyeş ine. Kilä yatḳanda,yulda başḳa ber arıs̱lan osraġan da tege ḳuyandı totop aşa(10)ġan. Bına min dä, äle hiñä kilä yatḳanda, şul arıs̱lanġa tapbuldım. «Ḳayẕa barahıñ?» — tine. Min uġa: «Üẕemdeñ ẖujama — arıs̱lan aġay yanına baram», — tip yawap birẕem. Şulay tigäs, tege asıwlanıp ükerä başlanı: «Kem bında minän başḳa ẖuja bulırġa yöröy taġı?» — ti. Min unan köskä-(15)köskä genä ḳasıp ḳotoldom.

Şuġa kürä huñġa ḳalıp kildem, — tigän buldı, ti, ḳuyan.

Arıs̱lan ḳuyandan tegeneñ ḳayẕa yäşägänen horanı, ti.

— Ul bınan alıs̱ tügel, anaw yaḳta, — tip yawap birẕe, ti, ḳuyan.

—Äyẕä, alıp bar äle hin mine unıñ yanına. Min uġa kürhätäyem äle, bında kem ẖuja ikänen! — tip äytte, ti, arıs̱lan, asıwlanıp.

Ḳuyan aldan kitte, ti, unıñ artınan arıs̱lan töştö, ti. Bılar bik tärän ber ḳoẕoḳ yanına kildelär, ti.

—Bına oşo ḳoẕoḳtoñ ësendä ultıra tege yaman arıs̱lan, — tigän buldı, ti, ḳuyan ḳurḳıp ḳına.

Arıs̱lan ḳoẕoḳtoñ ësenä ḳaraha, ısınlap ta, tap üẕenä oḳşaġan ikense ber arıs̱landı kürẕe, ti.

Arıs̱lan ḳotoronop ükerä başlanı, ti.

— Dömöktöräyem äle bını! — tip ġäyrätlänep, ḳoẕoḳ ësenä hikerẕe, şunda şomborlap basttı la ülde, ti.

Şatlıġı ësenä hıymaġan ḳuyan, bıl ẖäbärẕe yänlektärgä tiẕeräk belderer ösön, hikerä-hikerä ḳaytıp kitte, ti.

**YÄŞ HUNARSI**

Boron zamanda bulġan, ti, ber hunarsı eget. Ber köndö hunarẕa yöröp yatha, ḳarşıhına büre kilep sıḳḳan. Eget unı atırġa itkän ikän, büre, telgä kilep, keşe tawışı me-nän:

**-57-**

—Mine ültermäs̱e, eget! — tip yalınġan. — Ḳasan da bul-ha ber könöñä yararmın.

Eget bürene ültermägän, arı kitkän.

Bara torġas, hunarsı egetkä ber börköt tap bulġan. Ul da keşe tawışı menän:

— Mine ültermä, eget! Ber könöñä yararmın, — tigän.

hunarsı eget arı kitkän. Kül sitenä barha, uġa hıwẕa yöẕöp yörögän ber altın balıḳ kürengän. Eget unı totop alayım ġına tigändä, balıḳ ta telgä kilep:

—Egetkäyem, zinhar, tere ḳaldır mine! — tip yalınġan. — hin ḳayẕa ġına bulıp, nindäy genä bälägä ḳalhañ da,yarẕamġa kilermen, — tigän.

Eget balıḳḳa la teymägän, arı kitkän.

Şulay bara torġas, ul alıs̱ta möryähenän tötön sıġıp torġan bäläkäy genä öy kürgän. Bıl öyẕä ber mäskäy äbey yäşäy ikän. Eget, şul öygä barıp, işegen asḳan da sälām birgän. Ä ḳarsıḳ:

— Şul sälämeñ bulmaha, urtalay öẕöp yotor inem! —tigän. Şunan ul egetteñ ḳayẕa barıwın horaşḳan, huñınan: — Min hiñä ber yomoş ḳuşam. Urmanda mineñ ös atımülän aşap yöröy, hin şularẕı tot ta bında kilter. Kilterä alhañ, ös ḳıẕımdıñ iñ hılıwın üẕeñä käläş itep birermen,ä kilterä almahañ, üẕeñä yaḳşılıḳ bulmas̱, — tigän.

hunarsı eget ḳarsıḳ kürhätkän urmanġa barġan. Tik tege attar uġa tottorou tügel, yaḳın da ebärmägändär, hunarsı arıp-talıp ber taş öştönä ultırġan da uyġa ḳalġan.

Şul erẕä älege büre unıñ yanına kilgän dä:

— Nimä uylayhıñ, eget? Nindäy ḳayġıñ bar? — tip horaġan.

—Uylanmas̱lıḳmı ni! Mäskäy äbey miñä bınaw ös attı totop kiltergä ḳuştı, ä min ularẕı tota almayım. Ḫäẕer inde ḳarsıḳ mine başhıẕ ḳaldırasaḳ, — tigän.

— Başḳa ḳayġıñ bulmaha, yuḳ ösön ḳayġırma, — tigän dä büre, küẕ asıpyomġansı, tege ös attı egetkä ḳıwıp kil-terep birgän. Bıl attar tege mäskäyẕeñ ḳıẕẕarı bulġan ikän.

Eget attarẕı etäkläp mäskäy äbeygä alıp barġan.

— Niñä uġa tottorẕoġoẕ? — tip ḳısḳırġan da ḳıẕẕarına, taġı la urmanġa sıġarıp ebärgän. Şunan egetkä işettermäy genä. — Ägär ul heẕẕe yänä totorġa barha, heẕ ḳoşḳa äylänegeẕ ẕä hawaġa osop kitegeẕ, — tigän.

## -58-

Şulay bulġan da. Eget ikense tapḳır attarẕı totorġa barġan ikän, ular ḳoşḳa öylängändär ẕä hawaġa osop kitkändär, hunarsı taġı la ilarġa totonġan. Bına şunda tege bör-köt kilep egetkä ḳoştarẕı totop birgän.

Mäskäy äbey ḳıẕẕarına taġı la ḳatıraḳ asıwlanġan.

— Ägär ul heẕẕe yänä totorġa barha, heẕ balıḳḳa äylänegeẕ ẕä, kük diñgeẕẕeñ töbönä töşöp, yöẕöp kitegeẕ, — tigän.

Mäskäy ösönsö tapḳır attarın totop kilterergä ḳuşḳan. Eget taġı la attarẕı bas̲tırıp alıp kitkän, inde totam tigändä genä, ular balıḳḳa öylängändär ẕä diñgeẕgä töşöp yöẕöp tö kitkändär. Eget yar başına ultırġan da uyġa batḳan. Şul erẕä älege altın balıḳ yar buyına kilep sıḳḳan da:

— Buşḳa ḳayġırma, eget, min hiñä yarẕam itermen, —tigän.

Şul erẕä ul üẕeneñ balıḳtarına boyoroḳ birgän: mäskäy äbeyẕeñ ös ḳıẕı, balıḳḳa äylänep, diñgeẕẕä yöẕöp yöröy. Şularẕı ëẕläp tabıġıẕ ẕa oşo egetkä biregeẕ!

Balıḳtar şunda uḳ ularẕı ëẕläp tapḳandar ẕa egetkä kilterep tä etkergändär. Ä mäskäy äbey egette eñep bulmawın kürgäs:

— Ös ḳıẕım arahınan telägäneñde haylap al! — tigän.

Eget unıñ iñ kese ḳıẕın haylarġa bulġan.

İkäüẕän-ikäü ḳalġas, ḳıẕ egetteñ ḳolaġına ġına:

— Beẕẕeñ äsäyebeẕ bik mäkerle: ul mine bıjır, bökrö ḳıẕġa äyländerer, urtansı apayımdı urta yäştärẕä yahar, äiñ ölkän apayımdı bötäbeẕẕän dä hılıw iter. Aldana kürmä! — tip bışıldaġan.

Mäskäy äbey ös ḳıẕın da egetteñ aldına bas̲tırġan da:

— Telägäneñde haylap al! — tigän. Ä eget, oẕaḳ uylap tormayınsa:

— Miñä bınaw bıjır, bökrö ḳıẕ bulha la yarar, — tigän.

Ḳarsıḳ ḳıẕẕarına taġı la ḳatıraḳ asıwlanġan:

— Aẖ, heẕ ẖäsrättär! Başıma bälä genä buldıġıẕ. Ḳulıġıẕẕan ber nämä lä kilmäy heẕẕeñ. Bına min üẕem totonayım äle, — tigän dä egetkä harayġa inergä ḳuşḳan. — Bar, harayẕaġı attı alıp sıḳ ta atlanıp yöröp kil!

Kese ḳıẕı yänä egetteñ ḳolaġına:

— Ul üẕe atḳa äüereläsäk, hin täüẕä ḳulıña timer suḳmar al; harayġa ineü menän, berẕe ḳundır üẕenä, hin atḳa atlanġas ta, ul inde hawaġa ırġıtırġa mataşır, ä hin timer

## -59-

suḵmar menän unıñ başına bir. Şul vaḵıtta at hine erẕä genä yörötör, — tigän.

Eget, ḵıẕ äytkänsä, ḵulına timer suḵmar totop, harayġa inep kitkän.

At unı tibäyem genä tigän saḵta, eget uġa suḵmar menän berẕe tondorop ta ölgörgän. Şunan inde harayẕan sıġır-sıḵmas̱tan atlanıp ta alġan. At üräpsep öy ḵıyıġı beyeklege hikergän. Ä eget şul saḵta suḵmar menän unıñ başına éläktergän. Şul erẕä at ergä töşkän dä ürle-ḵırlı Hikerep ḵaraġan, ämmä eget bireşmägän. Ber aẕ yörögäs, attı kire Harayġa inderep ḵuyġan.

Eget Harayẕan sıḵḵas ta, at ḵaytanan mäskäy äbeygä äüerelep, hiẕẕermäs̱tän genä ingän dä, başım awırta tip, meyes başına menep yatḵan.

Ḵarsıḵ, nindäy genä ẖäylä ḵormahın, egette ota almaġan. Kese ḵıẕın uġa käläş itep birergä tura kilgän.

### SÖYÄLBAY MENÄN UNIÑ TOLPARI

Boron ber awılda ber babay menän ber äbey yäşägän, ti. Ḵart köndärendä bılarẕıñ ber balahı bulġan. Uġa Söyälbay tigän isem ḵuşḵandar.

Söyälbay aylap tügel, könläp üs̱kän, ti. Ḵarttar uldarın bik yaratḵandar, ul ni telähä, şunı ütärgä äẕer torġandar. Ber köndö atahı Söyälbayġa üẕe hunarġa menep yörögän tolparın büläk itkän.

Berẕän-ber köndö, şulay bäẖetle genä torop yatḵanda, Sö-yälbayẕıñ äsähe ülep kitkän. Oẕaḵlamay atahı yäş ḵatın alġan. Bına şunan huñ Söyälbay ösön ḵara köndär başlanġan: ügäy äsähe unı ber ẕä yaratmaġan. Küpme genä yararġa tırışmahın, Söyälbay ber vaḵıtta la ügäy äsähenän yılı hüẕ işetmägän, unıñ yaḵtı sırayın kürmägän, başı yäberẕän sıḵmaġan.

Bınıñ menän genä ḵänäġät bulmayınsa, ügäy äsä Söyäl-bayẕı ẖatta ülterep ük taşlarġa bulġan. Şul uy menän ul ber köndö siẖırsı ḵarsıḵḵa barġan da:

—Söyälbayẕı ülterer ösön miñä beräy ämäl öyrät,— tigän.

—Bınıñ ösön täüẕä ireñde tolparın huyẕırırġa künder,

## -60-

şunan Söyälbaiẕı ülthereü awır bulmas̱, — tigän siẖırsı ḵarsıḵ.

— Şulay ẕa ni éşlärgä käräk huñ?

— İren, tolparın huyġas, iten beşerep Söyälbayġa aşatırhıñ. Şunan ul ike kön tigändä üler ẕä ḵuyır, — tigän.

Ügäy äsä,.öyönä ḵaytıw menän, irenän tolparın huyẕırıw ösön ẖäylä ḵora başlaġan. Bına ul ber köndö ilay ẕa ilay ikän. İre unan:

— Niñä bılay ilayhıñ, ni buldı? — tip horaġan.

—Bögön töndä ḵurḵınıs ber töş kürẕem. Beẕgä ap-aḵ haḵallı ber ḵart kilgän, imeş tä: «İreñ tolparın huymaha, üẕe üläsäk», — tip äytä, imeş, tim. Bına şuġa ilayım min. hinän başḵa nisek yäşärmen min? — tigän.

Bını işetep, ire bik ḵurḵḵan. İrtägä ük tolparẕı yıġıp huyırġa bulġan.

Bıl vaḵıtta Söyälbay at aẕbarı ërgähendä yöröy ikän, kemder uġa iseme menän öndäşkändäy bulġan. Ul äylänep ḵaraha, tolparı tora ikän, küẕenän möldöräp yäştäre aġa, ti. Yanına barha, tolpar telgä kilep: «Tıñla mine, Söyälbay! — tigän. — Bägen

töndä atayıñ bülmähenä in dä altın baldaġın al. Ul baldaḳ möyöştäge taḳta as̱tında bulır, — tigän. — hine lä, mine lä ültererġä itälär. İrtäġä mine aẕbarẕan sıġarġas ta, miñä kilep atlanırhıñ», — tigän.

İrtägehen irtänsäk Söyälbayẕıñ atahı tolparẕı-aẕbar(25)ẕan sıġarġan. Şunı ġına kötöp torġan Söyälbay uġa atlanıp ta alġan. Şunan tolpar ḳoştay osop, yort kärtähen aşa hikerep sıġıp, küẕẕän dä yuġalġan. Söyälbayẕıñ atahı menän ügäy äsähe tolparẕıñ ḳoyroġon ġına kürep ḳalġandar.

Söyälbay ügäy äsäheneñ mäkerle ẖäylähenän şulay ḳoto(30)lop ḳalġan, ti.

**KÖTÖÜSE ḲART**

Boron-boron zamanda ber kötöwse ḳart yäşägän. Bik ġalim keşe bulġan bıl ḳart. Üẕe ber bayġa biş yıl rättän kötöw kötkän ikän.

(35)Ber köndö bıl kötöwse ḳartḳa bay:

— hin nisä yıl rättän mineñ kötöwẕe köttöñ, şunıñ ẖa ḳına kötöwẕän ber harıḳ haylap al, — ti. Kötöwse ber ha-(38)rıḳtı haylap ala. Şul saḳta kötöwgä ber büre kilä, ul tup-

**-61-**

(1)tura ḳarttıñ, harıġına yäbeşä. Kötöwse bıġa bik aptırap ḳala:

— Mineñ üẕ ġümeremdä ber harıġım buldı, ä bayẕıñ nisämä yöẕ harıġı bar. hin mineñ harıġıma teyäheñ, — ti (5)ḳart.

— Min inde haylap tormanım, awıẕıma nindäye ëlägä,, şunı aşayım, — ti büre.

Şunan kötöwse bürегä:

(9)— Bına hiñä şunday şart, — ti, — bik aşaġıñ kilgäs,

**-62-**

(1)aşarhıñ inde. Tik bına hin küẕeñde yom da harıḳtarġa taban ös rät sap,—ti.

Büre, kötöwse ḳart äytkänsä, küẕen yomop, harıḳtarġa taban saba. Ber saba, ḳarttıñ harıġı ëlägä, ikense sabıwında (5)la şul uḳ harıḳḳa tap bula, ösönsö sabıwında la ḳarttıñ harıġın tota.

Şunan huñ kötöwse lä yaẕmışına riza bula:

— Yarar inde, hineñ rizıḳ ikän. Äyẕä, iten aşa, tik tirehen ḳaldırıp miñä bir, — ti.

(10)Büre kötöwse ḳart ḳuşḳansa ëşläy: harıḳtıñ iten aşay, tirehen ḳartḳa birä.

Kötöwse ḳart, tirene ḳultıġına ḳıstırıp, tayaḳḳa tayanıp, kötöwen kötöp yöröy birä.

Ber köndö bıl ḳarttıñ kötöwe yanınan yök teyägän keşe-(15)lär ütep baralar, ti. Ḳart yulawsılarẕı tuḳtata la:

— Min heẕgä ber tire birep ebäräyem äle. Şunı hatıp,aḳsahın kilterep tapşırhaġıẕ ine, — ti.

Yulawsılar tirene alıp kitälär, üẕẕäreneñ äyberẕären hatḳanda, tirene lä baẕarẕa yörötälär. Tik beräü ẕä almay. (20)Küp yöröy torġas, bılarġa ber eget:

— Tiregez̲gä besäy biräm, alışıġız̲, — ti. Bılar, tirene birep, besäyz̲e alalar z̲a ḳaytıp kitälär. Ber ḳalaġa kilep inhälär, bik olo tawış işetälär: uram tulı ḫalıḳ ilaşa.

—Nindäy tawış bıl? — tip horaşa yulawsılar.

— Bögön batşa ḳız̲ınıñ ḳolaġın sısḳan aşarġa teyeş, şuġa ḳarşı his ber ämäl yuḳ, — tip yawap birälär bılarġa.

— Bez̲ batşa ḳız̲ın küräyek äle, bälki ämälen tabırbız̲.

Kitälär bılar batşa harayına, säläm birep inälär.

İs̲änlek-hawlıḳ horaşḳas, batşaġa:

— Küpme altın biräheñ, ḳız̲ıñdı sısḳandan ḳotḳarabız̲, — tiz̲är.

— Ḳotḳara alhaġız̲, kösögöz̲ etkänse altın alırhıġız̲,— ti batşa. Bılar riza bulalar.

Ḳız̲ yoḳlarġa inep kitä. Yulawsılar şunda uḳ unıñ yöḳ-lay torġan bülmähenä besäyz̲e ebärälär.

İrtänsäk inep ḳarahalar, sısḳandar ülterelgän, ḳız̲ säp-sälämät. Batşa hüz̲endä tora, yulawsılarġa ber toḳ altın birä. Unı kütärergä äzmäüerz̲äy egettärz̲eñ kösö saḳ-saḳ etä, ti.

**-63-**

Altındı alıp ḳaytıp barġanda, egettärz̲eñ berehe:

— Altındı birmäyek. Ber kötöwsegä bıl bik küp bit,— ti. İkensehe:

— Ä väġäz̲ä? Ul, ḳayz̲a tire ḫaḳı, tip horar bit, — ti.

—Tirene alıwsı bulmanı la, taşlanıḳ, tip äyterbez̲,— ti tege eget. Altındı büleşergä bulalar. Şul saḳ aralarınan beräü:

— Altındı büleşähegez̲ büleşeüen dä, anaw yaḳtan ber ḳara bolot kilä bit äle, min şul bolottan ḳurḳam, äyz̲ägez̲, kire halayıḳ, — ti.

Altındı yıyıp toḳḳa halhalar, tege ḳara bolot yuḳḳa sıġa. Bılar taġı büleşep ḳarayz̲ar, tege bolot taġı la kilep sıġa. Altındı toḳḳa halhalar, bolot ḳabat yuġala. Yulawsılar ös rät şulay ëşläyz̲är, äsähendä lä tege ḳara bolot sıġa la tora.

Yulawsılar, altındı toḳḳa halıp, ḳaytıp kitälär. Ḳaytıp barġan yul ös̲tönä kötöwse ḳarşıġa sıġa. İs̲änlek-hawlıḳ horaşalar.

— İä, käsep nisek buldı? — tip horay babay.

—Bına hez̲gä ber toḳ altın, — tiz̲är yulawsılar.

— hez̲ altındı taba beldegez̲, ä bülä belmänegez̲, — ti kötöwse ḳart. Ul tegelärz̲eñ bötä ëşen belep torġan ikän. — Amanatḳa ḫıyanat itergä yaramay bit.

Ḳart altındı ala, yulawsılarġa küp itep ölöş sıġara. Kötöwse ḳart äle lä räḫät ġümer kiserä, ti.

## - 64 -

II klass

### OŞAĶSI

(Tatar ẖalıķ äkuäte)

Ber vaķıt arışlan awırıy başlaġan. Bötä yanuarz̠ar arışlandıñ ẖälen belergä kilgändär. Barı tölkö genä bulmaġan. Büre arışlan batşaġa:

—Ëy, batşam, tölkö hine batşa tip tä belmäy, ẖäl belergä kileü tügel, — tigän.

Şul arala tölkö lä kilep etkän. Uġa. büreneñ hüz̠z̠ären et- kergändär.

Arışlan, tölkönö kürep, bik ķatı asıwlanġan.

Tölkö äytkän:

—Ëy, soltanım, hüz̠emde äytergä ruẖsät it äle. Min şunıñ ösön huñġa ķaldım: hineñ awırıwıñdı işetkäs, darıw ëz̠läp, törlö yaķtarġa sabıp yörönöm. Darıw taba almanım,«ämmä bürene ülterep, unıñ yılı tirehenä uranıp yathañ,hawıġırhıñ tigän ẖäbär kilterz̠em.Arışlan şunda uķ bürene ültergän.

### ÖS HORAU

(Tatar ẖalıķ äkuäte)

Boron-boron zamanda yäşägän, ti, ber etem eget. Bar ine, ti, bınıñ ös öyö: unıñ berehe keşeneke, ikensehe kürşeneke, ti. Öyz̠ären halam menän yapķan ul, tayaw menän terätkän, ti.

Berz̠än-ber kön bına oşo eget ëş ëz̠läp sıġıp kitkän. Kön kitä, ti, bıl, tän kitä, ti. Şulay bara torġas, barıp etä, ti, igen säsep yöröwse ber keşe yanına. Eget äytä:

— Ëştäreñ şäp bulhın, uñıştarıñ mul bulhın, aġay keşe, — ti.

## -65-

— Şulay bulhın, ulım, — ti tege keşe. Şunan yulsı egettän horaşa başlay.—ayz̠an kiläheñ, ķayz̠a bara-hıñ? — ti. Eget:

— Ëş ëz̠lärgä sıķtım, aġay, — ti. İgense äytä:

—Yaray, eget, — ti, — ëş keşeheneñ — ëştä, yul keşeheneñ yulda bulıwı yaķşı, — ti. — Uylana-uylana barhañ, yulıñ ķışķaraķ bulır, min hiñä ber-ike ẖikmätle, hüz̠ äytäm, yawabın taba alhañ, kilep äyterheñ, — ti.

— Yaray, aġay, — ti eget, — äytep ķara, — ti. Tege keşe, tubalın aşıp, igen säsergä totona. Usın tultırıp orloķ ala la hibep ebärä.

— Bına ber tapķır sästem, bınıhı burısımdı tülärgä bulır, — ti. İkense märtäbä säsep ebärä lä: — Bına bınıhı burısķa birep torouım,—ti. Şunan ösöysö tapķır säsep ebärä lä: — Bınıhı ķäz̠erle ķunaķtar esen, — ti.

Eget uyġa ķala: «Bıl nimä bulır ikän?» — ti.

— Yaray, aġay, — ti eget, — hin miñä ber az̠ ġına uylarġa vaķıt bir, — ti.

— Uyla, uyla, ulım, — ti igense, şulay ti z̠ä igenen sä-sep kitä. Ozaķ ta ütmäy,

äylänep kilep etä lä egettän horay.

— Yä, ẖäl nisek, ulım, beräy nämä uylanıñmı? — ti.

— Aġay, — ti yulsı eget, — hineñ huñ ata-äsäläreñ barmı?

— Bar, — ti tege.

(25)—Yäş saġıñda ular hine tärbiälägänder bit? — ti eget.

— Tärbiälänelär, — ti igense.

— Ulayha, berense säskäneñ ularẕı tärbiäläü ösön buldı.

— Döröṣ äytäheñ, ulım, berensehen şulay burısımdı tülär ösön sästem.

(30)—hineñ ir balalarıñ barmı? — ti eget.

— Bar, — ti tege keşe.

— Ulay bulġas, ikense tapḳır säskäneñ, ısından da, burısḳa birep torou bula, ẖäẕergä hin balalarıñdı tärbiäläyheñ, aşatahıñ-ëseräheñ, ular hiñä burıslı bulıp ḳala-(35)lar,— ti.

— Bınıhın da bik döröṣ äytteñ, — ti igense.

— hineñ ḳıẕẕarıñ barmı? — tip horay eget.

— Bar.

(36)—Ular hineñ ḳäẕerle ḳunaḳtarıñ keüek kenä bit, üṣep
Z Zakaz 433

**-66-**

(1)eteü menän, hinän kitälär bit ular, — ti eget. — Ösönsö tapḳır säskäneñ ana şul ḳäẕerle ḳunaḳtarıñ ösön buldı, — ti. — Bik döröṣ äytäheñ, aḳıllı eget ikänheñ, — ti igense, egette maḳtap.

### (5)TAUIḲ, SISḲAN HÄM ḲOR

(Tatar ẖalıḳ äkuäte)

Tawıḳ, sısḳan häm ḳor bergä yäşäy başlaġandar. Ber kön tawıḳ arpa börtögö tapḳan da şatlıġınan ḳıtḳıldap (9)uḳ ebärgän.

**-67-**

(1)—Arpa taptım, arpa! Unı on itep tartırġa käräk. Arpanı tirmängä kem alıp bara? — tigän.

— Min barmayım, — tigän sısḳan.

— Min dä barmayım, — tigän ḳor.

(5)Ni ëşlärgä? Tawıḳ tirmängä üẕe kitkän, arpanı tarttırırġa.

— Ondo kem alıp ḳayta? — tip horaġan tawıḳ.

— Min alıp ḳaytmayım, — tigän sısḳan.

— Min dä alıp ḳaytmayım, — tigän ḳor.

Tawıḳ ondo öygä üz̲e alıp ḳaytḳan.

— İkmäkte kem bas̲a? — tip horaġan tawıḳ.

— Min bas̲mayım, — tigän sısḳan.

— Min dä bas̲mayım, — tigän ḳor. Tawıḳ, ondo üz̲e iz̲ep, ḳamır bas̲ḳan da:

— Meyes kem yaġa? — tigän.

— Min yaḳmayım, — tigän sısḳan.

— Min dä yaḳmayım, — tigän ḳor. Tawıḳ üz̲e yaġıp tomalaġan.

— Meyestä ikmäkte kem beşerä? — tigän.

— Min beşermäyem, — tigän sısḳan.

—Min dä beşermäyem, — tigän ḳor.

Tawıḳ ikmäkte lä üz̲e beşergän. Ḳabarıp, ḳız̲arıp beşkän ikmäktärz̲e ös̲tälgä sıġarıp tez̲gän dä:

— Ä ikmäkte kem aşar? — tip horaġan.

—Min, — tigän dä, ös̲täl artına kilep ultırġan sısḳan.

— Min dä aşayım, — tip, ḳor z̲a kilep ultırġan.

— Yuḳ inde, ëşlämägän — aşamay, — tigän tawıḳ.

BATIR ÄTÄS *(Tatar h̲alıḳ äkuäte)*

Boron-boron zamanda ber awılda yäşägän, ti, ber babay. Bıl babayz̲ıñ ber ḳız̲ı, ber käzähenän başḳa ber keme lä bulmaġan, ti. Bik yarlı bulġan ul.

Ḳız̲ käzäne kön buyına bolonda kötöp, kiskä taban ġına alıp ḳaytıp, işek aldına inderep yapḳan, ti.

Babay käzä yanına sıġıp:

— İä, käzäkäyem, könö buyına bolonda bulıp, nimä aşa nıñ, nimä ësteñ? — tip horay ikän.

Käzä bıġa:

**-68-**

—Ber yapraḳ aşanım da, ber ḳalaḳ samahı hıw ëstem,—tip yawap birgän, ti.

Ḳart, ber käzäne lä tuyz̲ırġansı aşatıp ḳayta almaġanhıñ, tip ḳız̲ına bik ḳatı asıwlanġan, ti.

İkense köndö ḳart bolonġa käzäne üz̲e alıp kitkän. Käzä, könö buyına bolonda yöröp, tuyġansı aşaġan, yal itep tä alġan, ti, taġı torop aşarġa totonġan. Babay, bını kürep, bik şatlanġan: «Yaray, üz̲em alıp kilgäs, bik räh̲ätlänep, tuyġansı aşanı äle bıl», — tip uylay ikän babay. Şulay tip uylaġan da tege babay, kis bulġandı la kötöp tormaġan, käzähen ḳaldırıp, öyönä ḳaytıp kitkän, ti.

Kis bulıp, ḳarañġı töşöwgä, käzä lä bolondan ḳaytıp kilgän, ti. Babay käzänän horay:

— Nih̲äl, käzäkäyem, könö buyına bolonda yörönöñ, nimä aşanıñ, nimä ësteñ? — ti.

Käzä uġa:

— Ber yapraḳ aşanım da, ber ḳalaḳ samahı hıw ëstem, —tip yawap birgän, ti.

Ḳarttıñ bıġa bik asıwı kilä. «Ġäyep ḳız̲z̲a tügel, bıl käzä üz̲e bik yalġansı h̲ayuan ikän», — ti. Şunan huñ babay: «Bıl yalġansı käzänän barıber ber räh̲ät tä

kürmäṣheñ», — tip uylay ẕa käzähen huyıp aşarġa bula. İkense köndö babay, käzäneñ ike mögöẕönän totop alıp, ayaḳtarın bäyläp hala. Babay bısaḳ alırġa tip öyönä inep kitkän arala käzä (25)ayaḳtarın ıṣḳındıra la sıġıp ḳasa.

Kitä bıl. Bara-bara barıp etä ber keskenä öygä. Bıl — ḳuyandıñ öyö ikän. Öygä inä. Öyẕä ber kem dä yuḳ. Ḳuyandıñ sıġıp kitkän vaḳıtı bulġan, ti. .

Ḳoyaş bayıp, ḳarañġı töşä başlawġa ḳuyan ḳaytıp inä. (30)İnhä, ni küẕe menän kürhen, tege käzä tür başına menep, mögöẕẕären tırpaytıp, haḳalın helketep ultıra, ti. Ḳuyan, bını kürep, bik ḳatı ḳurḳḳan da, aldına-artına ḳaramay, urmanġa taban torop sapḳan, ti.

Urmanġa barıp ineügä, ḳuyanġa osraġan, ti, ber büre. Bü-(35)rene küreü menän, ḳuyan ḳısḳırıp ilay başlaġan. Bını kürep, büre:

— Niñä ilayhıñ, hiñä ni buldı? — tip horay ikän. Ḳuyan bıġa:

(39)—Niñä ilamaṣḳa, könö buyına urmanda yöröp, öyömä

**-69-**

(1)ḳaytham, tür başında bik ḳurḳınıs ber nämä ultıra, küreü menän yörägem yarıla yaẕẕı, — ti.

Bını işeteü menän, büre, batırlanıp:

— Äyẕä kittek, beẕ unı ẖäẕer ḳıwıp sıġarırbıẕ, — ti.

(5)Kitälär. Ḳuyandıñ äyenä barıp eteü menän, büre üẕe lä ḳurḳa-ḳurḳa ġına işekte asa. Ḳarañġı äyẕä ẕur MÖGÖẕLÖ, oẕon haḳallı käzä başın küreü menän, büreneñ dä ḳoto osa, tiẕ genä öy işegen yaba la urmanġa ḳarap hıẕa. Ḳuyan unıñ artınan kitä. Ḳuyandıñ urmanġa barıp ineüe bula, bınıñ (10)ḳarşıhına lap-lop baṣıp kilä, ti, ber ayıw. Ayıwẕı küreügä, ḳuyan taġı ḳısḳırıp ilap ebärä:

— Ḳotḳarıġıẕ, ẖarap buldım, öyömä ḳurḳınıs ber nä-mä ingän, — ti.

Ayıw, bik batırlanıp:

(15)—Yuḳḳa-barġa ilap küẕ yäşeñde äräm itmä, beẕ unı ẖäẕer ḳıwıp sıġarırbıẕ, — ti ikän.

Kitälär. Ḳarañġı töşöwgä ḳuyan öyönä barıp etälär. Ayıw bik batırlanıp öy işegen asıp ebäreügä, hike öṣtönä menep ultırġan ẕur mögöẕlö, oẕon haḳallı käzäne küreü menän, bik (20)ḳatı ḳurḳıwġa töşä. Ayıw ẕa, ḳurḳıwınan aldına-artına ḳaramay, urmanġa saba. Ḳuyan — unıñ artınan..

Ḳuyandıñ urmanġa barıp ineüe bula, bıġa ber tölkö osray. Tölkö lä bik batırlanıp bara. Ḳarañġı bülmälä ḳuḳırayıp ultırġan käzäne küreü menän, tölkönöñ dä ḳoto osa: (25)sıġıp ḳasa bıl.

Ḳuyan ni ëşlähen, yort-eren ḳaldırıp sıġıp kitä urmanġa.

Tañ atıp, yaḳtıra başlawġa barıp etä bıl ber urman ḳarawılsıhınıñ öyönä. Ḳoyma başında ultıra ikän, ti, ber (30)ätäs. Ätäste küreü menän, ḳuyan taġı la ḳısḳırıp ilap ebä-rä, ti.

— Niñä ilayhıñ, ḳuyanḳay? — ti ätäs.

— Mineñ öyömä ber ḳurḳınıs nämä kilep ultırẕı, unı üẕem dä, büre menän ayıw ẕa, ẖatta tölkö lä ḳıwıp sıġara (35)almanı, — ti ḳuyan.

— Yuḳḳa ilama, ḳuyanḳay, äyẕä kittek, min hiñä yarẕam itermen, — ti ätäs.

Kitälär. Ḳuyandıñ öyönä barıp eteügä, ätäs ḳuyanġa äytä:

— Miñä öy işegen asıw ġına ḳıyın bulır, hin işekte(40)asıp, mine inderep ebärerheñ,

ķalġanın üzem belermen, — ti.

**-70-**

(1)Öy ërgähenä barıp eteü menän, ķuyan işekte asıp ebäreüe bula, ätäs öy ësenä inep, käzä mögözzäre arahına barıp ķuyıwı bula. Käzä başına ķuna la bıl suķıy başlay käzäneñ küzzären. Käzä ber ni zä ëşläy almay, sıġıp ķasa ķuyandıñ (5)öyönän. Ätäs unı bik alışķa tiklem ķıwıp bara. Şulay itep, batır ätäs ķuyandı aldaķsı käzänän ķotķarġan,ti.

**YaBALAĶ** *(Tatar halıķ äkuäte)*

Ber kön yabalaķ nisekter ber säpsekte totop aşamaķsı (10)bulġan. Säpsek uġa äytkän, imeş:

— Ëy, batır! İnde hin mine aşarhıñ, läkin şunı ġınaäytse: «hineñ isemeñ nisek? Üzemde totķan batırzıñ isemenbelep üläyem», — tigän.

Yabalaķ awızın asır-asmas ķına:

(15)—Mineñ isemem Yäfäläk, — tigän.

Säpsek:

— Yuķ, batır, ķolaġım bik işetmäy, ķısķırıbıraķ äytse, — tigän.

Şul saķta yabalaķ, awızın tulı asıp:

(20)—Mineñ isemem Yabalaķ, — tigän ikän, säpsek yabalaķawızınan ısķınıp osķan da kitkän, ti.

**KÄZÄ MENÄN HARIĶ**

*(Tatar halıķ äkuäte)*

Ëlekke zamanda, yäşägän, ti, ber babay menän äbey. Ular(25)zıñ bulġan, ti, ber atı, ber ügeze, ber käzähe menän ber harıġı.

Ķart bik uñġan, ber tuķtawhız ëşkä yöröy torġan ber keşe bulġan, ti. Ul könö-tönö ügezze ëşkä egä ikän. Ügez, tamam arıp, awıraya başlaġan. Tota la ügezze huya ķart. Ëlek-(30)ke zamanda kräştiändeñ tormoşo awır bit inde. Bıl ķarttı la yarlılıķ basķandan-basa bara. Aķsa käräk bula la, attı la hata bıl,

Käzä menän harıķ bını kürälär zä üz-ara höyläşälär: «Bezgä lä sirat eter, ahırı, ügezze huyzı, attı hattı, äyzä (35)bez ķasayıķ, bulmaha», —tizär. İrtä menän hujaları yoķo-

-71-

(1)nan torġansı sıġıp hızalar bılar. Käzä, mögözönä ëläkterep, ber toķ ta alıp sıġıp kitkän, ti.

Baralar-baralar bılar, ķarañġı la teşä başlay. Bik ķalın ber urman bula. Aġas töbönän ber büre başı tabalar (5)za: «Käräk bulır äle!» — tip, büre başın toķķa halıp alıp kitälär bılar.

Urman buylap bara torġas, ber ut yaķtıhı küräläр. Ut yanına barhalar, unda un büre ultıra ikän. Ular küp itep butķa beşergändär zä aşap ultıralar, ti. Käzä menän harıķ-(10)tı kürgäs, ber büre äytä: «Bezgä rizıķ üz ayaġı menän kilde, bıl käzä menän harıķtı butķanan huñ totop aşarbız», — ti.

Käzä ëşteñ ķayza barġanın añlap ala la, äse tawış menän ķısķırıp ebärä: «Yki-ki, miki-ki, toķtaġı büre başı un ike!» Şunan ul toķtaġı büre başın sıġarıp hanay (15)başlay:

«Ber büre başı, ike büre başı, ös büre başı», — tip şul ber büre başın öyländerä lä hanay, öyländerä lä hanay.

Bürelär bik ķatı ķurķıwġa töşälär. Şunan huñ ber z̲u-rırağı äkren genä torop sitkä hız̲a. Unı kötälär-kötälär z̲ä, ul ķaytmaġas, ikensehe, ösönsöhö... Şulay aķrın ġına ta-yalar bılar. Şulay itep, bürelär ber-ber artlı bötähe lä kitep yuġala, ti. Käzä menän harıķ tuyġansı butķa aşap, ut yanında yatıp yoķlayz̲ar, ti. İrtä menän torop: «Bılay ķasıp yöröp bulmas̲, bez̲z̲e genä as̲rarz̲ar äle», — tip uylap, h̲ujaları yanına ķaytalar. Äle haman şulay bergä yäşäyz̲är ikän, ti, bılar.

**KÄZÄ MENÄN HARIĶ ÄKİÄTE**

*Ġ. Tuķay*

Boron zaman ber ir menän ķatın torġan, Tormoştarı şaķtay ġına fäķir bulġan, As̲raġandar ber käzä menän ber harıķ, Bılar bulġan berehenän-berehe arıķ.Äytä ber kön ire: «Ķara bında, ķatın! Üz̲eñ yaķşı beläheñ bit besän h̲aķın, Kithen sıġıp bez̲z̲än käzä menän harıķ, Aşap yata yuķķa ġına ular az̲ıķ».

**-72-**

Ķatın künde, tine: «İrem, yarar, yarar,
Bıl ikäüz̲e ķıwmaķlıķķa bulhın ķarar,
Käzä menän harıķ h̲äz̲er kithen bez̲z̲än,
Ularz̲ı huñ as̲rap torop ni fayz̲a bar?»
Ni êşläy inde mes̲ken käzä menän harıķ?
Bulmay h̲uja ķuşķanına ķarşı torop,
İkehenä ber z̲ur ġına ķapsıķ tegep,
Kitte bılar ķırġa taban säfär sıġıp.
Kitte bılar. Bara haman bara, bara,
Kürenmäyz̲er küz̲z̲ärenä aķ häm ķara,
Bara bılar.Küpme barġas, alla belä,
Yul östöndä büre başın tabıp ala.
Ķurķa baştı ķuz̲ġatırġa käzä ķurķaķ,
Küptän inde ķurķaķlıķķa harıķ urtaķ.
Baş yanında bılar ikäü tora ķurķıp,
Äyteşälär ber-berenä: «hin tot, min tot».
Käzä äytä: «harıķ aġay, hin köslöräk»,
harıķ äytä: «hin, haķalbay ġäyrätleräk».
Büre başın ķulġa totop ķuz̲ġatırġa .
Yuldaştarz̲ıñ bereheneñ dä etmäy
yöräk.
Oz̲aķ torġas şunda käzä menän harıķ,
Büre başın totalmaysa ķuldar barıp.
Baştı ikäü totop ike ķolaġınan,
yünäldelär ķapsıķtarı êsekä halıp.

(25)Bara bılar, tuḳtamas̱tan haman bara,
Kürä ular alıs̱ tügel ber ut yana, Uttı
kürgäs, iptäşenä äytä harıḳ: «Äyẕä, käzä,
ḳunayıḳ bögön şunda barıp.
Ut yanına bürelär ẕä kilä almas̱tar,
(30)Beẕẕeñ unda bulġanlıḳtı belä almas̱tar»,
harıḳtıñ bıl käñäşenä käzä künde:
(32)«Äyẕä, iptäş, barhaḳ barayıḳ inde».

-73-

(1)Käzä, harıḳ ut yanına yaḳın barha, Mes̱keñdärẕeñ küẕ aldında bına nämä:Ös-dürt büre ultırġandar ḳarşı utḳa, Tırışıp, tırışıp beşerälär ular butḳa.(5)Käzä, harıḳ kürgäs bıl tamaşanı, Ḳaldı ḳurḳıp här bereheneñ yartı yäne: «İs̱änmehegeẕ, dus̱tar, büre äfändelär!» — Tiẕär bılar kürhätmäs̱kä ḳurḳıw ẖäle.Ḳıwanalar ös-dürt büre bını kürgäs, (10)Aldarına harıḳ menän käzä kilgäs: «Aşaybıẕ, — tip, — bıl ikäüẕe totabıẕ ẕa,Bına nisek it taptıḳ, — tip, — butḳabıẕġa».Käzä äytä: «Ḳayġırmaġıẕ, beẕẕä it küp, Ul it menän här ḳayhıbıẕ bulırbıẕ tuḳ! (15)Ni ḳarayhıñ? Tiẕ bul äle, tiẕ bul, harıḳ! Toḳtaġı büre başın kilter alıp».harıḳ şunda toġondaġı baştı ala, Bötä büre ḳurḳıwınan şaşıp ḳala. Ös-dürt büre ẖayran ḳalıp torġan saḳta,(20)Käzä haman ġäyrät säsä, asıwlana.Käzä äytä: «Mikikiki! Mikikiki!Toḳtaġı büre başı bit un ike! Aẖ, uñmaġan, yülär harıḳ, naẕan harıḳ, Bınan ẕurıraḳ büre başın kilter tabıp!»(25)harıḳ tiẕ añlap ala bıl aldaştı, Toḳtaġı ul alıp kilä şul uḳ baştı. Ös-dürt büre, ısınlap ta, ḳurḳışalar,Ber-berehenä küẕẕären yörötöşälär. Tügel ẖäẕer bürelärẕä aşaw ḳayġı, (30)Tiẕ-tiẕ genä bıl urındı taşlaw ḳayġı, «Nisek ḳasayıḳ? Nisek tabayıḳ ḳasıw yulın?» (32)här ber büre şuġa halġan bötä uyın.

**-74-**

(1)Torop äytä şul arala ölkän büre — Ḳartayġan häm küp ëştärẕe kürgän büre: «Tuḳtaġıẕ, — ti, — min tiẕ genä hıw kilteräm, hıw bik aẕ, beẕẕeñ butḳa beşer ḳoro».(5)Şulay itep, ölkän büre hıwġa kitä, Ḳaytmay läkin, oẕaḳ ḳına zaman ütä, Ḳaytmay büre, ëẕe lä yuḳ, es̱e lä yuḳ, Mäjles ẖalḳı arıp bötä kötä-kötä. Bürelärẕe taġı ḳatı ḳurḳıw bas̱tı,(10)Sönki ẖäẕer başlıḳtarı kitep ḳastı, Taġı berehe hıwġa taban kitte torop:«Tuḳtaġıẕ, min ëẕläp ḳaytayım», — tigän buldı.Mäġlüm inde, bıl büre lä kitä şulay, H̱äylä menän ḳasırġa yul asa şulay, (15)Ḳaytmay bıl da, ällä nisä säġät ütä, Mäjles ẖalḳı kötä, haman kötä, kötä. Ös-dürt büre berehe artınan ḳasa berehe, Ösönsöhö, unan huñınan

dürtensehe; Bılar ḳasḳas, käzä menän beẕẕeñ harıḳ (20)Kitä inde räḫätlänep, irek alıp.Ultıralar ayaḳ bökläp ḳarşı utḳa, Bılar inde tämläp kenä aşay butḳa, Aşap tuyıp, räḫät kenä, tınıs ḳına Käzä, harıḳ bıl töndären şunda ḳuna.(25)İrtä menän irtük torop, tañ atḳas ta, Ḳuldarında büre başı halġan toḳ, Tağı bılar urman buylap säfär kitte, Nimä yaẕayım? Äkiätem şunda böttö.

**AḲILLI TÖLKÖ**

(30) *(*Tatar ḫalıḳ äkuäte)

Ber vaḳıt arıs̱lan, tölkö, büre bergäläp hunarġa sıḳtılar, ti. Ber ḳır işäge, ber ḳır käzähe, ber burhıḳ totto-lar. Ularẕı büleşergä ultırẕılar. Arıs̱lan büregä bülergä (34)ḳuşḳan: «Ösäüebeẕgä bül bılarẕı!» — ti.

-75-

(1)Büre üẕenä ḳır işägen ala: «Bıl — miñä», — ti. Arıs̱lanġa ḳır käzähen birä: «Bıl — Arıs̱lan ağayġa», — ti. Tölkögä burhıḳtı birä. Arıs̱lan asıwlandı la büreneñ başın yara huḳtı, ti.

(5)Arıs̱lan tölkögä: «hin bül!» — tine, ti. Tölkö bülergä Totona. Ḳır işägen arıs̱lanġa birä: «Bınıhı irtänsäk aşarġa», — ti. Ḳır käzähen dä uġa birä: «Bınıhı töş aşarġa», — ti. Burhıḳtı birä lä: «Bınıhı kis aşarġa», — ti. Ösöhön dä arıs̱lanġa birä.

(10)Arıs̱lan tölkönän horay: «Bıl tiklem dörös̱ itep bülergä hine kem öyrätte», — tip. Tölkö büregä ımlap: «Bını başına ḳıẕıl bürek keygän öyrätte», — ti.

**ËŞ TABILDI**

Boron-boron zamanda yänlektär ber yort ḫujahına kilä(15)lär ẕä:

— Ḫuja, beẕgä ëş bir! — tiẕär. Sönki ularẕı tik yöröw yalḳıtḳan, imeş.

— Ä heẕ nimä ëşläy beläheğeẕ? — tip horay keşe.

— Min haban höräm, yök taşıyım, başıwẕa ëşläy (20)alam, — ti at.

— Min höt biräm, — ti hıyır.

— Min yön biräm, — ti harıḳ. Ä tawıḳ:

— Ä min yomortḳa halam.

(25)—Yaray, min heẕgä ëş biräm, — ti ḫuja.

— Ä beẕẕe irtänsäk kem uyatır huñ? — tip horay yänlektär.

Ätäs ḳısḳırıp ebärä:

— Min uyatırmın!

(30)Şulay itep, ularẕıñ här ḳayhıhına ëş tabılġan. Yänlektär keşelärgä fayẕa kilterä başlaġan, ti.

**AḲHAḲ ḲARĠA BÜLÄGE**

*T. Dayanova*

Boronġo zamandarẕa yäşägän, ti, Yämilä isemle ḳatın (35)menän Yomaġol tigän ir. Ular bik tatıw ġümer hörgän. Yort-(36)tarı sıyırsıḳ oyahı keüek bäläkäy, ıḳsım bulġan, baḳsala

## -76-

ẕur ber tiräk üs̱ep ultırġan. Yaẕ hayın tiräk başına ḳarġa oyalap, bala sıġarġan. H̱ujalar şul ḳarġa balalarına ḳarap höyöngän. Dörös̱, ḳarġa danlı ḳoş tügel. Läkin ul da yän ëyähe, er yöẕöndä ḳarġaġa la urın bulırġa teyeş. Yomaġol balsıḳtan körşäk, tus̱taḳtar ëşlägän, ä ḳatını bıl hawıt-habalarġa matur-matur yalan säskäläre töşörgän, hawıttarẕı igengä, höt-ḳatıḳḳa almaştırıp, ḳäẕimgesä tormoş kisergändär. Uldarı yä ḳıẕẕarı bulmawı ġına ularẕıñ küñelen öykäp torġan.

Ber köndö Yomaġol balsıḳtan bäpes hını äüäläp ḳuyġan. Küñel haġışı şulay köslö bulġan inde! Şıñġırap kipkän bäpes hının yämilä tän tös̱önä buyaġan, küẕ-ḳaş, iren, bit almaları keşeneke hımaḳ bulıp, balsıḳ hındı tere balanan ayırıw ẕa ḳıyın bulġan. Şunan ḳatın yürgäk tekkän, ir tal sıbıġınan maturlap-hırlap sängeldäk ürgän. Balsıḳ sabıyẕı ḳäẕerläp töröp bişekkä halıp ḳuyġandar. Köndär, aẕnalar ütkän... Yänheẕ bala yata birgän, ä tışta, şaw-gör kilep, yaẕ ẖököm hörgän. Ḳarġalar, bala sıġarıp, balaların tuyẕıra almay yöẕägän. Ber ḳoşsoḳ oyanan lap itep ḳolap töşkän, ti. Ḳarġalarẕıñ sır-sıw kileüenä yämilä ëşläp ultırġan erenän tışḳa sıḳḳan häm ayaġı^ ḳanatı hınġan ḳarġa balahın kürgän. Ḳatın, awıẕın ẕur asıp, äse ḳısḳırġan yän ëyähen yılı öyönä indergän.

Ayaḳ-ḳanattarın ḳabıḳ menän ḳıs̱ıp bäylägäs, ḳarġa ba-lahı tiẕ hawıḳḳan, şulay ẕa aḳhaḳ bulıp ḳalġan. Üẕe ziräk tä ikän äle. İr menän ḳatındıñ höyläşeüen otop, ẖatta ke-şesä höyläşä başlaġan, ti.

Ber köndö öyẕä ber üẕe genä ḳalġas, ḳarġa balahı säñgeldäk ërgähenä kilgän häm, başın ḳıyşaytıp, bäpeskä tekläp tora başlaġan. Balsıḳ bäpes ḳımşanmaġan da. Tüẕemlege bötkän ḳarġa äse itep: «Torrr!» — tip ḳısḳırıp ebärgän. Tawışḳa ingän äsä keşe:

— Bäpesebeẕ yänheẕ şul, Ḳaraḳay, — tigän. Yämiläneñküẕenän yul-yul yäştär tama, ti. Ḳarġanıñ bäläkäs kenä yörä-ge, ḳotḳarıwsıhın yälläp, hulḳ-hulḳ tipkän, ti.

Bäläkäs ḳarġa üẕeneñ uy-teläktären oẕaḳ yäşäp, küpte kürgän äsähenä höylägän. Ḳawırhındarına sal ingän ḳart ḳarġa, oẕaḳ uylanġas:

— Ulım,bäpeste tereltep bula! Tik ul ëşte başḳarır ösön batır yöräk, talmas̱ ḳanattar käräk.

## - 77-

— Äsäy, min ëşlärmen ul ëşte, tik hin miñä yulın öy-rät, — tip yarhıġan ḳarġa malayı.

— Ay, ulım, yul bik awır häm häläkätle. Bınan ete taw, ete diñgeẕ aşa yänşişmä urġıp sıġıp yata. Unda barır ösön ällä nisä ülem aşa uẕırġa käräk, ä hin köshöẕhöñ, — tigän äsä.

Şul köndän alıp bäläkäs ḳarġanıñ yörägendä batırlıḳ utı toḳanġan.

Nisek ithä itkän, Aḳhaḳ ḳarġa yulġa yıyınġan. Yomaġol, bäläkäy genä ike balsıḳ körşäk ëşläp, ḳarġanıñ täpäyenä as̱ḳan. Ḳarġa balahı tañ harıhı menän yulġa sıḳḳan. Unı Yomaġol, Yämilä häm inä ḳarġa oẕatıp ḳalġan.

Täüge ḳıẕıwlıḳ menän Aḳhaḳ ös kön, ös tän osḳan. Şunan ġına.üẕenä yal birgän. Osouınıñ higeẕense könöndä, ḳa-lın urman aşa ütep, ẕur aḳlan sitendäge ḳoro

tiräkkä ḳunġan. Artaban ḳorġaḳhıp kibep yatḳan erz̲är — ajdaha ere başlanġan. Şul aḳlan urtahında yänşişmä urġıp kilep sıġa la, ber az̲ aġıp barġas, yäyġor nurz̲arı balḳıtıp, yuḳḳa sıġa, ti.Ä şişmä yanında, z̲ur küz̲z̲ären aḳaytıp, ajdaha(20) yatḳan.

Bıl erz̲ärgä äz̲ämi zat tügel, ḳoş-ḳort ta ayaḳ bas̲maġan.

Aḳhaḳ ḳarġa aġas başında oz̲aḳ ultırġan. Ni h̲äl itergä huñ?..

Yaḳında ġına ökö uhıldap ḳuyġan. Aptıraġas, ḳarġa uġa (25)möräjäġät itä:

— Ġäfü itegez̲, äfändem, — tip baş èygän ul, — hez̲gä möräjäġät itergä röh̲sät itegez̲se, hez̲, moġayın, oşo urmanda küptän yäşäyhegez̲z̲er? Bıl yänşişmänän hıw alġan beräy yän èyähen h̲äterläyhegez̲me? -

(30)—Ëye... Bıl urmanda küpme yäşäganemdä lä onotḳanmın
inde... hıwġa kileüselär kü-ü-üp buldı... Ergä ḳara!

Şunda ġına ḳarġa şaltıraşıp öyölöp yatḳan äz̲äm häm yänlek höyäktären kürgän.

— Berehe lä miñä öndäşeüz̲e käräk tapmanı. Ägär öndäş-
(35)hälär, h̲äz̲erge köndä höyäktäre bında yatmas̲ ine. Miñä öndä
şeüse bulırmı tip, ällä nisä yıldar ömöt ittem, huñıraḳ
töñöldöm. Miñä hüz̲ ḳuşıwsı tik hin genä. yänşişmänän
hıw alıw seren min genä beläm. Ḳartayz̲ım inde, ägär ülhäm,
(39)serem dä üz̲em menän kitä tip ḳurḳam, — tigän.

## -78-

(1)—Seregez̲z̲e miñä sisegez̲se, h̲örmätle Aḳıl èyähe!—tip ütengän Aḳhaḳ ḳarġa.

— Kemgä genä sisergä ḳala huñ miñä seremde, — tip äsengän ökö.—Kürşe aḳlanda yäm-yäşel bulıp yomşaḳ ülän (5)üs̲er. Ul tılsımlı, is̲ertkes ülän. Şul ülände yıyıp kipterep, ajdahaġa èsereü yulın èz̲lärgä käräk.

Ä nisek, nindäy yuldar tabıp èserergä uġa?

— Yñ täüz̲ä ülän yıyayım, başḳa beräy aḳıl kilmäy bulmas̲, — tip uylaġan ḳarġa.

(10)Ber nisä kön èsendä ḳarġa eterlek ülän kipterep tä ölgörgän, ti. Aḳıl üz̲enän-üz̲e kilgän. Ajdahanan ürz̲ä, el başında Aḳhaḳ ḳarġa ḳızıw usaḳ yaḳḳan.

— Nindäy h̲uş es̲ sıġa huñ? — tip, ajdaha ḳomhoz̲lanıpes̲käy başlaġan. İnde ber az̲z̲an tärän yoḳoġa la kitkän, ti.(15)Ä ḳarġaġa şul ġına käräk tä. Tiz̲ genä osop barıp, täpäyz̲ärenä taġılġan bäläkäy körşäktärgä hıw tultırġan bıl. Ökömenän yılı h̲uşlaşıp, Aḳhaḳ ḳarġa ḳaytır yulġa sıḳḳan.Ḳaytıw — kileügä ḳaraġanda la awırıraḳ ikän. Ḳarġa balahı bik arıġan,ḳanattarı talġan.Şulay z̲a sıġıp kiteüe(20)nä ber ay tigändä, ḳaytıp etep, tıwġan yort tuphahına yı^ġılġan, ti.

Ḳanattarın yäyep, tomşoġon asıp, älheräp yatḳan yulsını Yämilä tañ menän kütärep öygä indergän. İñ täüz̲ä ḳoştoñ awız̲ına ber tamsı hıw tamız̲ġan. Ḳarġa küz̲en as̲ḳan. Bına (25)oz̲aḳ kötkän mäl kilep etkän. Balsıḳ bäpeste tere hıw menän ḳoyondorġandar.

Bına bäpes kerpektären elpeldätep, küz̲z̲ären asıp, şunan ayaḳ-ḳuldarın huz̲ıp kirelgän, ti. Şunan ike börtök teşen kürhätep yılmayġan, yämilä menän Yomaġol öson don'ya nur-(30)ġa sumġan. Ularz̲ıñ küñelen ḳırıp torġan yuşḳındıñ èz̲e lä ḳalmaġan. Aḳhaḳ ḳarġa bıl yaḳşı küñelle keşelärgä üz̲eneñ räh̲mäten ḳaytarġan, ularġa ḳıwanıs büläk itkän. İz̲gelek erz̲ä yatıp ḳalmay, tip tikkä genä äytmäy şul h̲alıḳ.

## HARIBAY

(35)Ḳasandır yäşägän, ti, ber äbey menän ber babay. Ularz̲ıñ harıbay tigän ètenän başḳa ber kemdäre lä bulmaġan. H̲ujalar unı bik yaratḳandar.: Läkin bına h̲uja-

larz̲ıñ balaları

-79-

tıwa. Şul köndän başlap, harıbayz̲ıñ ḳäz̲ere kitkän, h̲ujalar unı irkälämäy, hiräk aşata başlaġandar.

Berz̲än-ber köndö harıbay, h̲ujaġa ëyärep, urmanġa barġan. Unda bürene osratḳan.

—harıbay dus̲, ni buldı hiñä? Bik yabıḳḳanhıñ, boyoḳhoñ.

— Ëlek min h̲ujamdıñ berz̲än-ber ḳıwanısı inem. H̲äz̲er babayz̲ıñ ulı bar. Şunan huñ miñä kön böttö, — tigän harıbay.

—Ḳayġırma, yäy bulġas, hiñä räh̲ät bulır, — tigän büre.

Bına yäy kilep etkän. İgen ölgöröp, uraḳḳa töşkändär.

Äbey menän babay, balaların alıp, bas̲ıwġa sıḳḳandar. Ular igen urġandar, ä bala arba as̲tında yoḳlaġan, harıbay z̲a külägälä yatḳan.

Şul saḳ büre kilep sıḳḳan da balanı alıp kitkän. Bala ḳısḳırġan tawışḳa harıbay z̲a uyanġan, abalap örä-örä bürene ḳıwa başlaġan.

Tawışḳa äbey menän babay yügerep kilhälär — bala yuḳ. Ḳayġılarınan ilaşa-ilaşa, harıbay artınan kitkändär.

harıbay bürene ḳıwıp etep, balanı ḳotḳarıp, arba yanına alıp ḳaytḳan. Äbey menän babay bıġa bik şatlanġandar. Şunday yaḳşı ëtte bıġa tiklem aslı-tuḳlı totouz̲arı ösön ükengändär, harıbayz̲ı yaḳşı tärbiäläy başlaġandar.

**AḲSÄSKÄ**

*H̲. Şämsetdinova*

Boron-boron zamanda bulġan, ti, säskälär batşalıġı. Be-rehenän-berehe matur, berehenän-berehe näfis töştäge säskälär üs̲kän bıl batşalıḳta: ap-aḳ ebäktän keyengändäre lä, küz̲ yawın alıp torġan oz̲on harı alḳalıları la, kük tös̲öndäge zäp-zäñgär küz̲leläre lä. Matur, bay keyengändäre säskä batşahınıñ üz̲ ḳız̲z̲arı bulġan. Ular ber nämä lä ëşläy belmägändär, ütkän här keşegä üz̲z̲äreneñ zinnätle nämäläre menän maḳtanıp, ġämhez̲ räüeştä ġümer ütkärä torġan bulġandar.

Batşalıḳta yarlı säskä ḳız̲z̲arı la. bulġan. İrtä tañdan alıp kis ḳoyaş yuġalġansı ëşlägän ular. Batşa ḳız̲z̲arınıñ sästären taraġandar, küldäktären üteklägändär, ular ni ḳuş-

-80-

ha, şunı ëşlägändär. Bıl säskälärz̲eñ zatlı keyemdäre lä, as̲ıltaş baldaḳtarı la bulmaġan.

Yalsı ḳız̲-säskälär arahında ayırıwsa tırış Yaġımlıḳay tigän ber säskä yäşägän. İptäştärenä ḳarata bik iġti-barlı, yarz̲amsıl bulġan ul. Unıñ bıl sifattarın kön hayın kürep torġan Ḳoyaş hoḳlanıp, ḳız̲z̲ı ërgähenä saḳırġan. Läkin säskäneñ kükkä mengehe kilmägän. «Räh̲mät, Ḳoyaş, — tigän ul, başın ëyep, — min bit erz̲ä tıwz̲ım, erz̲ä üs̲tem, unan ayırılham, tamırz̲arım, kiber, tip ḳurḳam».

Ḳız̲-säskäneñ bıl hüz̲z̲ären işetkän Ḳoyaştıñ küz̲z̲ärenän yäş tamġan. «Min ber nämä lä ëşläy almayım, üz̲ ih̲tıyarıñ, Yaġımlıḳay, riza bulhañ, is̲täleḳḳä hiñä iñ yaḳtı, keşelär här irtä kürergä yaratḳan tös̲ömdöñ ber ölöşön ḳaldırır inem», — tigän. Şulay itep, Ḳoyaş egete, harı nurz̲arınıñ iñ yaḳtıhın ḳızġa büläk itkän. Säskäneñ yöz̲ö tulġan ay menän ber bulġan. Şunday uḳ tüñäräk, şunday uḳ hap-harı.

Batşa ḳız̲z̲arı, Yaġımlıḳayz̲ı kürep, bik ġäjäplängändär: «Ḳara hin unı, nindäy sibärlängän», — tip uylaġandar ular ëstän genä, ä inde ḳız̲z̲ıñ üz̲enä: «hin nindäy

yämheẕ(20)ländeñ, küldägeñ dä nindäy is̱ke», — tip kölgändär.

Bına ber köndö Ḳoyaştıñ kürşehe Tañ’eget kilgän säskälär batşalıġına. Bında ul üẕenä säskä haylap almaḳsı bulġan. Ämmä ularẕıñ küplegen, maturlıġın kürep, ẖayran ḳalġan. Ḳayhıhın üẕ itergä belmäy torġan. Şunda egetteñ (25)başına ber uy kilgän. Ul ḳıẕẕarġa oşonday şart ḳuya: aẕna vaḳıt ësendä ularẕıñ här ḳayhıhı üẕẕäre huḳḳan, sikkän kelämen kiltergä teyeş. Eget kelämdeñ ḳayhıhın iñ maturı tip taba, şunıñ ẖujahın haylay.

Yaġımlıḳayẕıñ da ḳatnaşḳıhı kilgän bıl bäygelä. Ke(30)lämen dä siger, tik bına nindäy küldäk keyep barır ul bayramġa? Ḳıẕ-säskä ömöthöẕlökkä birelep ultırġanda, unıñ iñ yaḳın dus̱ı, yäşel küldäkle Yapraḳḳay kilep ingän, «his tä ḳayġırma, kelämde üẕem iltep birermen», — tigän ul, dus̱ın yıwatıp.

(35)Säskä ëşkä totonġan. Kelämde huġa başlaw aldınan, ul eptärẕe, üẕeneñ yöẕöndäge Ḳoyaş büläge, hap-harı nurẕarġa manġan. Dus̱ ḳıẕẕarı, bını kürep: «Ay-hay, ay keüek yöẕöñdö äräm itäheñ», — tip tuḳtatıp ḳaraġandar. Ä Yaġımlıḳay tös̱−(39)tö yällämäy, eptär hap-harı bulġansı manġan. Kelämgä Tañ’-

-81-

(1)egette, unıñ dus̱ı Ḳoyaştı töşörgän. Küẕ yawın alıp torġan keläm ber töndä äẕer bulġan.

Ber aẕna vaḳıt ütep tä kitkän. Bildälängän köndö batşalıḳtıñ iñ matur aḳlanına irtän irtük allı-göllö säskälär (5)aġıla başlaġan, här kem üẕ os̱talıġın kürhätergä ıntılġan. Bigeräk tä batşa ḳıẕẕarı tırışḳan: egetteñ aldına äle ber kelämde, äle ikensehen yäygändär. Tañ’eget ularẕıñ bötähen dä ḳarap sıḳḳan: kelämdär matur, näfis ëşlängän, tik küñelgä oḳşaġanı ġına yuḳ.

(10)Eget oşolay moñhou ġına ber sittä bas̱ıp torġanda, dus̱tarı Yaġımlıḳayẕıñ kelämen yäyep ḳuyalar. Säskälär, kelämde kürep, ah itälär. Tañ’eget ḳarayım tip küẕen kütäreüe bula, utḳa beşkän keüek, kire sigenä.

«Keläm kemdeke?» — tip horay eget ḳıẕẕarẕan. Batşa (15)ḳıẕẕarı bötähe ber yulı tierlek: «Mineke, mineke!»—tip ḳısḳıralar. «Ul vaḳıtta, — ti eget, — miñä kelämde alıp biregeẕ».

Kem genä huẕılıp ḳaramay kelämgä, läkin berehe lä yaḳın kilä almay, ḳoyaş nurẕarı ularẕıñ ḳuldarın köyẕörä, küẕ− (20)ẕären ḳamaştıra.

Tañ’eget kelämdeñ ẖujahı bında yuḳlıġın añlay häm bötä batşalıḳḳa oran hala: ul keläm ẖujahın haylay.

Yaġımlıḳay, bılarẕıñ berehen dä belmäy-işetmäy, öyẕä-ultıra.Dus̱tarı unı etäkläp tierlek mayẕanġa alıp kilä- (25)lär.Säskä kelämgä taban atlay, häm ni kürhendär, ḳoyaş nurẕarı ḳıẕẕıñ yöẕönä küsä başlay. Bına Yaġımlıḳay kelämgä yaḳın uḳ kilep etä, häm Tañ’eget aldında ay yöẕlö ḳıẕẕı kürep tañ ḳala...Ä ḳıẕ, erẕän äkren genä kelämde kütärep, egetkä huẕa...

(30)Batşa ḳıẕẕarı ġärlektärenän er tişegenä inerẕäy bulalar. Ä bıl vaḳıtta eget ḳıẕġa ap-aḳ ebäk küldäk büläk itä.

Bolondarẕa yörögändä ap-aḳ küldäkle, hap-harı tulġan ay yöẕlö säskäne kürgänegeẕ barmı? Oşo inde ul Aḳsäskä.

**TERPEKÄY**

*D. Talhina*

Ķart şırşı urmanında ķurķınıs horo Büre yäşägän, (37)ti. Zur, tärtiphez bıl yän ëyähenän şörlämägän keyek bul-

**- 82-**

magan. Keyektär genä tügel, hatta agastar za unıñ aldında der ķaltırap torġandar, şuġa kürä uñayı tura kilgändä, Bürene töp başına ultırtıw yaġın ķarap ķına torġandar.

Şulay, berzän-ber köndö as Büre töşkö aşķa Terpene totorġa uylaġan. Äytergä käräk, ul vaķıttarza Terpeneñ tunı Ķuyan tunınan da yomşaġıraķ bulġan, ä ul üze ihä şul älege şikelle oslo moronlo, yaltırap torġan märyendäy küzle, bik ük şäp yügerä almay torġan ķısķa ayaķlı ber keyek ķiäfätendä kön kürgän.

—O-o-o! Bına ul ķayza täbiġätkä hozurlanıp ultıra!Zurıraķ keyek artınan hunarġa sıġırġa yalķaw kilgändä,hindäy yanuar za yarap ķala ul!

Bahır Terpekäy ķaltıranıp töşkän: bar kös-hälen yıyıp, yügerep kitkän. Tik unıñ ayaķtarı menän Bürenän ķasıp ķotolou mömkinme huñ?! Şırşılar arahında yurġa-laġan bulġan. Büre unıñ artınan totam da ķalmay ikän.

— O-ho-ho! Häzer totam hine! — tip ul Terpegä honolorġa ġına itkändä, östän yañġırawıķlı tawış işetep, tuķtap ķalġan.

—Yu-u-uķ! Totorġa irek birmäm!

— Kem ul hin? Kem ul min — Büre menän gäp hata? — horo yırtķıstıñ yäne köygän. Şul uķ vaķıtta unıñ hunarın bülderergä baznat itkän yän ëyähenä aptırap, başın öskä kütärgän.

Ä östä başı kükkä olġaşķan möhäbät Şırşı tora ikän. Ul köslö yöntäş ķuldarı mgenän Bürene eläkterep alġan da ber-ike helkep halıp atıp bärgän.

— Ä-ä-ä-hm-hm. — Ergä ķoyolġan Şırşı ënälärenä barıp töşkän Büre şıñşıp-şıñşıp, asıwlı Şırşı yanınan kitep barġan.

— Ah, hin, zıyanhız yän ëyähe! Ni ëşlärgä huñ hineñ menän? — Şırşı, Terpekäyze kütärep alıp, uġa ozaķ ķarap torġan. Bınday iġtibarzan Terpekäyzeñ küzenän ike börsök yäşe tägäräp töşkän. Ul:

—Rähmät hiñä, Şırşı aġay! Rähmät! — tip äyteüzän başķa ni tiergä lä belmägän.

— Rähmättän tun tegep bulmay! Ulay dereldämä! — Şırşı terpene hıypaġan häm üzensä tınıslandırırġa tırışķan. — Tuķta äle! Tun'tigändäy.:. — Ul Terpene ergä töşörgän.—Min Bürene, elkähenän eläkterep alıp bärgäs, ul mi-

- 83-

neñ ķoyolġan ënälärgä sänselep, awırtındı bit! — Şırşı ķapıl höyläneüzän tuķtap ķalġan.

— Nimä ähä? — Terpekäy, batırlıġı etep, şulay tip horaġan Şırşınan.

— Ähä! Ähä! Bına hineñ tunıñ da yomşaķ, ayaķtarıñ da ķısķa ġına. Doşmanıñdan

ḳotoloui hiñä bik nıḳ ḳıyın. Ähä tieüem şul. Bayağı Büre bit, mineñ ënälärgä sänselgäs, awırtınıwẕan ḫatta ilap ebärẕe. Ägär, tim, hineñ horo tunıña oşo ënälärẕe ḳaẕap ebärhäk, Büre moġayın da, hine totop aşawẕan baş tartır ine.

— Tunım yämheẕ bulmaṣmı huñ? — tip Terpekäy ikelänep kenä horaġan.

— İä baş, yä yäm! — tip ḳırt kiṣkän Şırşı.

— Baş, älbittä, ḳäẕerleräk, — tip rizalaşḳan Terpe.

Şul vaḳıttarẕan başlap Terpekäyẕe duṣtarı Ënäkäy tip yörötälär. Ä Büre menän Tölkö terpene totop aşaw turahında ḫatta uylap ḳına ḳaray ẕa almayẕar, sönki Terpegä ḳurḳınıs yanay başlaha, ul, ënälären tırpaytıp, yomarlanıp, yomġaḳḳa äylänä lä ḳuya.

## ḲARA TAUIḲ NİSEK AḲ BÄḪET TAPḲAN?

*Ä. Baḫitova*

Ber awılda, ti, boron,
Tıñlap kiñ dala yırın,
Bäläkäy genä yortta
Don'ya kötkän ber ḳortḳa.

Ḳortḳanıñ bar baylıġı —
Bulġan ḳara tawıġı.
Fayẕa kiltergän yortḳa —
Kön dä halġan yomortḳa.

Ä äbeyẕeñ yuḳ teşe,
Ḳoymaḳ ḳoyou — bar ëşe.
Yomşaḳ aştan tuymaġan,
Tawıġın da hıylaġan.

Muyını unıñ harılı,
Bik yaratḳan tarını.
Ul sitkä his kitmägän,
Gel äẕer em süplägän.

Ëşlämägän ber ëş tä,
Sıġarmaġan sebeş tä.
Şulay ul don'ya kötkän...
Kön artınan kön ütkän.

Ëşheẕ yatıp ber zaman
himergän ul bik yaman.
Küẕe lä nasar kürgän,
Tamaġın da may börgän.

Bora almaġan başın,
Aşay almaġan aşın.
Unan fayẕa ḳalmaġan,
Yomortḳa la halmaġan.



Ä ḫujahı ḳartḳortḳa
Kön dä kötkän yomortḳa.

— Yäşär könöm aẕ ḳaldı,
Ḫälem bik nasarlandı,
Tota almayım hine,
Sıġıp kit yorttan! — tine.

Ḫuja ḳıwġas, ni sara?
Kitkän tawıḳ, bisara,
Tik uramda ber ni yuḳ,
Bolot yöẕä, kön hıwıḳ.

İnde kön ütep bara,
Ul haman kitep bara.
Ä unı beräü ẕä, ti.
Saḳırmay: «Kil, äyẕä!»
—tip.

Tawıḳ küp er tapaġan,
Tik bäḫeten tapmaġan.
Asıġıp ütkän könö,
Ḳoyolop bötkän yönö.

Bäḫet kilmägän haman.
Yöröy torġas, ber zaman
Yul totḳan ber awılġa,
Osraġan ẕur dawılġa.

— Ëy dawıl, dawıl, —
(25)tigän,—
Min aslıḳtan integäm!
Ḳız̲ġan mine az̲ ġına,
Tarı hipse aldıma!

Köslögä ḳeüät birgän,
(30) Uñġandarġa därt. birgän
Ḳatı bäġerle dawıl —
(32) Unı tıñlaw ḳayz̲a ul

Totop tawıḳ ḳanatın,
Yuldan ebärgän atıp.
Tawıḳ osḳan soḳorġa,
Belmäy nisek sıġırġa.

«Yıġılıp ergä awmas̲ḳa,
Süpkä kümelep ḳalmas̲ḳa!»-
Tawıḳ şulay ant itte,
Öyölgän süpte tipte.

Tik kürgäs tä ber ḳortto,
Tiz̲ genä ḳabıp yotto.
Bına ġäjäp — kür inde,
Tarılar z̲a kürende.

Ah̲, ḳara, küpme az̲ıḳ! —
Tik ölgör genä ḳaz̲ıp.
Oşo erz̲eñ as̲tında
Yata ikän altın da,
Ülän dä, bıyala, taş —
Barı la ḳoş-ḳortḳa aş.

Ëy ḳaraḳay höyönä,
Ḳaytıp üz̲eneñ öyönä,
İäş1y başlaġan taġı,
Yal belmägän ayaġı.

Öyölgän süpte tipkän,
Tamam tuz̲z̲ırıp bötkän.
Ḳalmaġan ber tires̲ tä,
Oḳşap kitkän bıl ës̲ tä.

Kön ütkänen hiz̲mägän,
Ës̲tän ber z̲ä biz̲mägän.
Tik tamam h̲äldän tayġas,
Küz̲z̲äre tomalanġas,
Yoḳlarġa yata ikän,
Tora ikän bik irtän.

-85-

(1)Köylängän şulay ës̲tär,
Sıġarġan ul sebes̲tär.
Sebes̲täre em horay,
Ul ularġa yır yırlay:

(5)«Gel äz̲er em kötmägez̲,
Üz̲egez̲ z̲ä ëz̲lägez̲!
Tırış bulıġız̲ yäş̲tän,
Ḳurḳmaġız̲ his tä ës̲tän.

Yuḳḳa is̲egez̲ kitep,
Z̲ur tabış ömöt itep,
Sitkä kitmägez̲ ber z̲ä —
Bäh̲et ul oşo erz̲ä».

**YIL BABAYZ̲IÑ DÜRT ḲIZ̲I**

B. *Noġomanov*

İıl — ber yomġaḳ.
(10)hütelgändä
Miz̲gel hayın nur-biz̲äk,
Yıl yomġaġı Yıl babayz̲ıñ
Dürt ḳız̲ında — dürt biz̲äk.

**1.Ḳarhılıw menän Yaz̲hılıw**

(15)Aġastıñ altın alḳahı
Öz̲ölöp bötkäs elgä,
Yondoz̲ ileneñ ilsehe —
Ḳarhılıw töştö ergä.

Elep yöröp, tirä-yaḳḳa
Ap-aḳ ınyılar hipte,
Alḳahız̲ ḳalġan aġasḳa
Aḳ şälen bäyläp kitte.
Yıltır köz̲gö—tüñäräk kül,
Kil dä ḳupşılan h̲äz̲er.
Yılġır yılġa, — yuldı bıwma,
Küper z̲ä bına äz̲er.
Yondoz̲ ilsehe Ḳarhılıw
Uñġan da ikän üz̲e:
Äyterheñ, mamıḳ ës̲kerte —
Tigez̲ ergä taw öyz̲ö.
Bıjlap sana, sañġılarz̲a
Taw:şıwalar malayz̲ar.
Ḳıwanışıp, şaw-gör kilep,
Ḳarhılıwz̲ı maḳtayz̲ar.
Ëşsän dä ikän Ḳarhılıw:
Ultırıp ul on iläy,
Küñeldärz̲e elkenderep,,
Moñlo ġına köy köyläy..
Ḳaysaḳ şuḳlanıp, bäygegä
Saḳıra elber elde.
Ḳar tawz̲arın küserä ul,
Uylahañ, ġäjäp inde!..
Bına şulay ayz̲ar buyı
Ḳarhılıw bayram ḳorz̲o.
Ḳoyaş, il enän Yaz̲hılıw
Barın küz̲ätep torz̲o.

****

Ḳarşılar köndär z̲ä ette
Ḳoyaş ilsehen bına.
Yaz̲hılıw kilde, yul halıp,
Altın nurz̲arz̲an ġına.
Möläyem genä yılmayıp,
Ḳarhılıwġa ḳul huz̲z̲ı.
Börkä-börkä halḳın tının
Ḳarhılıw başlay hüz̲z̲e.

Ḳarhılıw:
Buran tuz̲z̲ırıp uynanım,
Yaptım ergä aḳ yurġan.

-86-

Ayz̲ar buyı tırışḳanım
Buşḳamı inde bulġan?
Ḳöz̲rätemdän ni ḳalır huñ,
Inyı ḳarz̲arım irer...

Ya z̲ h ı l ı u:
Ḳar tawz̲arı ḳeüätenän
Taşḳın hıwz̲ar gör kiler.
Borsolma artıḳ, Ḳarhılıw,
Küp hineñ fayz̲añ ergä.
Maturlıġıñ kire ḳaytır,
Dus̲ bulhaḳ ikäü bergä.

Ḳarhılıw:
Nisek inde?
Bınday h̲äldä
Ḳalır kem tınıs, tüz̲em?..
Dus̲lıḳta bar kös,
Kürkämlek,
H̲aḳ bulha ägär hüz̲eñ...

Ya z̲ h ı l ı u:
hüz̲em — altın. Bergä bulhaḳ,
Möġjizä bez̲z̲eñ ḳulda.
Keşelär hine haġınıp
Kötöp alırz̲ar yıl da.

* * *

«Ulayha, dus̲lıḳ!» —
Ḳarhılıw huz̲z̲ı ap-aḳ ḳuldarın...
İl buylap säfär sıḳtılar,
İzge bulhın yuldarı!
Ḳar tawın görläüek itep
Ḳuştılar moñlo yırġa.
Aġastarz̲ıñ şälen sisep,
Taḳtılar yänä hırġa.
Yäşärep kitte ujımdar,
Alġas ap-aḳ yurġanın.
Küpere kitkäs yılġanıñ,
Şaşıp tulḳın uynanı.

Asıldı siẕäm. Malayẕar
Aunahındar şatlıḳtan.
Küldeñ boẕẕarın vattılar—
Tonsoḳmahın balıḳtar.
Yaẕhılıw yulınan menep,
habanturġayẕar hayray.
Er yäşel keläm yabına,
Ä urman keyem haylay.
Traktorẕarẕıñ yırınan
Bas̱ıw ös̱tö gör kilä.
Küperep yatḳan buraẕnaġa
Tos orloḳtar kümelä.
Ḳarhılıw menän Yaẕhılıw
Arttıra erẕeñ ġämen.
Nur ẕa bulġas, hıw ẕa bulġas,
Biẕäy täbiġät yämen.
Ëy ḳıwanıs̱a keşelär:
Ḳarhılıwẕan bik uñdıḳ,
Bıyıl tuyġansı ëserẕe
Er-äsäbeẕgä dımdı.
Bas̱ıwẕarẕa igen bulıp,
Ḳarhılıw sıḳtı ḳalḳıp.
Tuġayẕarẕı ḳaplanı ul
Göl-säskä bulıp balḳıp.
Ḳarhılıw menän Yaẕhılıw
Ütkän er buldı ḫozur.
Ḳarhılıw birhä ḳöẕräten,
Yaẕhılıw ös̱täne nur.
Yäm häm yän öläşep ular
Bar ġäläm buylap ütä.
Täbiġättä Ḳarhılıwẕıñ
Ġümere dawam itä.

**2. Yäybikä menän Köẕbikä**

Yaẕhılıw erẕe yämlägäs,
Ḫuş es̱ säskälär hibep,

-87-

Ḳolas yäyep, nur börkötöp,
İäybikä kilde kölön.
Yügerep yöröp urman, ḳırẕı
Taġı la ul biẕäne.
Keşelärẕe yılġa, külgä
Kön hayın ul äyẕäne.
Räḫätlänep hıw ḳoyondo
Balalar, sır-sıw kilep.
Lagerẕa borġo uynanı,
Küñeldärgä därt birep.
İgense sıḳtı bas̱ıwġa
Mul uñış yawlar ösön,
Täjribä baḳsalarında
Tir tükte, birẕe kösön.
Tir tügelde, kös birelde,
Ḳoyaş ta gel balḳını.
Bas̱ıw, baḳsa emes̱täre
Ḳıwandırıp ḳalḳındı.
İäybikäneñ ḳöẕräteler,
Yaltlanı yäşen uynap.
Yamġır ḳoya — Bıl bik käräk,
Er sarsamahın hıwhap.
Emeş-eläk bıyıl uñġan:
Ḳayınlıḳta — börlögän;
Äyterheñ dä, söm-ḳara küẕ —
Ḳaraġat ta ölgörgän.
Ä eläge nindäy tatlı,
Auıẕẕa üẕe irey!
Kürse terpene! hırtına
Bäşmäktär ḳaẕap yöröy.
Seyäletaw itäktäre
Taġı ḳıp-ḳıẕıl tös̱tä,
Muyıl söm ḳara suḳtarın
Kütärep tora köskä.
Pomidorẕar habaġında
hutlanıp beşkän totaş.
Almalar näḳ İäybikäneñ
Bit almahına oḳşaş.

Tütäldärgä kilep ḳara,
Tupırlap yata ḳıyar.
İäybikäneñ tabınında
yäneñ telägän hıy bar...

***

İäybikäneñ ëşe ḳıẕıw,
Kön artınan kön uẕa.
Ḳayẕandır sıġıp, şayarıp,
halḳın el is̱ep ḳuya.
Niñä äle bolot aḳhıl?
Niñä yaltlamay yäşen?
Töndä ısıḳ töşhä, irtän
İäybikä hörtä yäşen.

Belä ul, tiz̲z̲än almaşḳa
Köz̲bikä kilä ergä.
Tıwġan erz̲än İäybikäneñ
Kitkehe kilmäy ber z̲ä.
Bına ber mäl mäktäptärz̲ä
Şawlatıp ez̲ ḳıñġıraw,
Köz̲bikä lä kilep ette,
(Buldı, ti, yulım uraw.
hüz̲ ḳuşa: — huñlamanımmı,
Ḫez̲mättäreñde kürämen,
Apaḳayım, İäybikä?
Uñġanhıñ ikän bik tä.
Uñıs̱tarı mul bulır.
Bas̱ıwz̲arz̲a igen üs̱kän,
Altın börtök—aşlıḳ menän
Kelättär bıyıl tulır.
Yıl babay yıyġan tabında
Osraşırbız̲ taġı la...
Köz̲bikä şulay, aşḳınıp,
Bas̱tı ḫez̲mät haġına.
Ul aşıḳtırz̲ı: İgense,
Yıy aşlıḳtı tiz̲eräk.
Kilähe yıl öson taġı

-88-

Ergä lä bit yal käräk.
Keşelär alsaḳ yılmaya,
Mullıḳtan bit ḳıwanıp.
İgene lä uñġan ikän —
Tos başaḳtar yıyıp alınġan.
Ḳäz̲erläp Tultırılġan buraġa...
Köz̲bikä yöröy maldarz̲ı
Ḳıwıp yılı ḳuraġa.
Köş-köş, ḳoşḳayz̲ar,
osoġoz̲, yılı yaḳ hez̲z̲e kötä.
yäybikä lä şul ḳoştarz̲ıñ
Ḳanattarında kitä.
Köz̲bikäbez̲, el uynatıp,
Yapraḳtar öz̲öp yöröy.
Urın biregez̲, ḳalḳır, ti,
Yaz̲ etkäs, yañı börö.
Ergä aḳ yurġan yabırġa
Saḳırz̲ı Ḳarhılıwz̲ı.
Yıl babay kilep, dürt ḳız̲ın
Olo tabınġa yıyz̲ı.
Emeş, yäşelsä, säskälär
Tulıp tora tabında.
Bötä niġmät — er büläge,
Ḫez̲mät emeşe bında.
Ḳuyılġan yomro ikmäk
Urtahına tabındıñ.
Ul ikmäktä Ḳarhılıwz̲ıñ
Aḳ saflıġı saġıldı.
Yaz̲hılıw hipkän ḫuş es̱tär
Taraldı tirä-yaḳḳa.
yäybikä uġa yäy buyı
Altın tös̱tären yaḳḳan.
Bar unda ilgä kös birgän
Köz̲bikäneñ ḳöz̲räte.
Şul ikmäktä yıl babayz̲ıñ
Dürt ḳız̲ınıñ ḫez̲mäte.

## 20)ḲOYaŞBİKÄ HÄM YaMĠIRBAY

*3. Ġiläjeva*

hawa tigän izge küñelle ḳatındıñ Ḳoyaşbikä isemle ḳı-z̲ı häm Yamġır isemle ulı bulġan, ti.

Ḳoyaşbikä aḳıllı, asıḳ yöz̲lö bulha, unıñ ḳustıhı Yam-ġır apahınıñ tap kirehe — üz̲ hüz̲le, ilaḳ, mıjıḳ bulġan, imeş. Ḳoyaşbikä üz̲eneñ ike tuġan aġahı ëşhöyär Tañ menän bergä uyanġan. Öyz̲äge ëşen bötörgändän huñ, säyäḫätkä sıġıp kitkän. Bigeräk tä Erz̲e üz̲ itkän ul. Sönki unda yäşäüse bö^ tä yän ëyäläre lä Ḳoyaşbikäne şatlanıp ḳarşı alġandar. Ayırıwsa balalar menän dus̱ bulġan. Yılġa buyında köndär buyına sır-sıw kilep yörögän balalar, az̲ ġına totḳarlanha la, Ḳoyaş apaların yuḳhınıp hamaḳlay başlayz̲ar:

Ḳoyaş apay, sıḳ, sıḳ,
Altın ḳalaḳ birermen,
Maylı butḳa birermen,
Altın ḳalaḳ — baz̲arz̲a,

Maylı butḳa — ḳaz̲anda...

-89-

Ä yalḳaw Yamġır, apahı säyäḫätkä sıġıp kitkändä,, bolot yurġanın yabınıp räḫätlänep yoḳlar bulġan. Ḳaysaḳ ul, irtäräk uyanıp, apahın ḳıwıp etkän dä:

— Niñä mine yañġız̲ ḳaldırıp kitteñ, miñä bi-i-k küñel hez̲, — tip üpkäläp mıġırlarġa totonġan.

Yamġırz̲ıñ käyefe kitep, şulay ilamhırap mıjıġan mä-lendä ayaz̲ köndä kinät kenä yamġır yawıp ütä, imeş.

Ber kön Ḳoyaşbikä apahı tüz̲mägän: «Ëy, ḳustım, ḳustım. Şulay hıtıḳ yöz̲lö, ilaḳ bulġanıñ ösön beräü z̲ä yaratmay bit üz̲eñde, hin ilay başlahañ, nindäy şat küñelle balalarz̲ıñ da käyeftäre kitä. Ana, küräheñme, aġas as̲tına inep,, hinän yäşerenep ultıralar», — tip ḳustıhın ärläp taşlaġan.

Apahınıñ hüz̲z̲ärenä Yamġırz̲ıñ bik ḫätere ḳalġan, ti. Ġärlegenän, bütänsä Ergä äylänep tä ḳaramas̲ḳa anttar itep, üpkäläp ḳaytıp kitkän, ti. Ḳustıhın ränyeteüenä Ḳoyaşbikä-bik ükengän. Nisek tä Yamġırḳayz̲ıñ käyefen kürergä tırışḳan, üz̲e menän bergä säyäḫät itergä saḳırġan. Tik malay hüz̲endä nıḳ torġan... Ä Ḳoyaşbikä här köndägesä säyäḫätkä yörögän. Bigeräk tä Erz̲e üz̲ kürgän ul. Költä-költä nurz̲arın hibep unı irkälägän. Ber az̲z̲an Erz̲ä ḳoroloḳ başlanġan. Yapraḳtar harġayġan, üländär kipkän. Keşelär z̲ä, börköwlektän nisek ḳotolorġa belmäy, täz̲rä ḳapḳastarın yapḳandar,, ëstän ḳalın-ḳalın ḳorġandar ḳorop ḳuyġandar... Bar tereklek, beräy keskäy genä bolot äs̲äre kürenmäyme, tigän ömöt menän kükkä baḳḳan. Bını kürep, işetep torġan Ḳoyaşbikä, bik nıḳ üpkäläp, üz̲z̲äre yäşägän Kük ilenä ḳaytıp kitkän. Ġäz̲ättägesä teşegep öndäşmäy ultırġan ḳustıhına bılay: tigän:

—Bar, ilaġım, Erz̲ä hine kötälär. Bötäheneñ dä telendäber ük hüz̲, — Yamġır z̲a Yamġır. Küptänme äle apayz̲ar, eñgäy z̲är, ḳız̲z̲ar, mineñ nurz̲arımdı totḳarlamahın tip, täz̲rälä ren kön dä taz̲artıp tora torġaynılar,ä bögön kilep oşo keşelär täz̲rälären,işektären ḳaplap ḳuyz̲ılar.

Apahınıñ bıl hüz̲z̲ärenän Yamġırz̲ıñ küñele üs̲ep kitkän. Ul, bar bulġan üpkähen onotop, tiz̲eräk Ergä aşıḳḳan.

Täbiġät Yamġırz̲ı ısınlap ta şatlanıp ḳarşı alġan. Urmandar, tawz̲ar, yılġalar, üländär, göldär kinänep ḳoyonġandar, Yamġırz̲ı maḳtaġandar. Balalar yırġanaḳtar kisep,

-90-

ber-berehenä hıw säsrätep uynap mäj kilgändär. Lıḳma hıw bulġan balaların här saḳ ḳırış ḫoloḳlo äsäläre lä tıymaġan, kirehensä, ularz̲ıñ sır-sıw kileüz̲ären ḳıwanıp ḳarap torġan. Yamġırz̲ı iñ ġäjäpländergäne şul bulġan: ḫatta yöz̲yäşär ḳarttar z̲a, uramġa sıġıp, sal haḳaldarın hıypap, Yamġırġa räḫmättär uḳıġandar. Bıl ḫälde kürep ul otoro şaşıp kitkän, kön timägän, tän timägän — yawġan da yawġan. Dımġa tuyınġan Er öz̲lökhöz̲ ḳoyġan yamġırz̲an şeşengän, üländär, yänlektär, ḳoştar küşekkän. Yılġalar, küldär yarz̲arınan sıġıp yalandarz̲ı, igen bas̲ıwz̲arın basḳan. Bar bulġan tereklek äle genä şatlanıp ḳarşı alġan Yamġırġa asıwlanġan. Bigeräk tä ḳoyaş nurz̲arın ütä yaratıwsı

boyz̲ay ^baş̲aḳtarına ḳıyın bulġan. Ular, Ḳoyaşbikä, Ḳoyaş apay, tip yalbarıp, tos baştarın kütärä almay ëyelgän, yaylap se-(15)regän. Bını kürgän keşelär Yamġırġa uġata ränyegän. Ḫatta küptän tügel genä Yamġırġa räḫmättär uḳıġan aḳ haḳallı ḳart ta:

— Ällä kükteñ töbö tişelgänme? Biz̲räläp ḳoyası, — tip huḳranġan.

(20)Yamġır bik ġärlängän. İlay-ilay apahı Ḳoyaşbikä ërgähenä ḳaytıp kitkän. Uġa üz̲eneñ üpkähen höyläp birgän. Ḳustıhınıñ hüz̲z̲ärenä Ḳoyaşbikä lä bik aptıraġan. Ġälämät keşelär yäşäy ikän ul Erz̲ä. Nisek inde ulay, üz̲z̲äre saḳırıp alalar z̲a, üz̲z̲äre ḳıwıp ebärälär. Törlösä faraz itep ḳa(25)raġandar, bäḫäsläşep tä kitkändär, tik ber fekergä lä kilä almaġandar. Aptıraġas, äsäläre hawa yanına barıp, bötähen dä uġa höyläp birgändär. Äsäläre ularġa bılay tigän:

— Ëy, balalar, balalar. Yäşhegez̲ şul äle, küp nämäne töşönöp etmäyhegez̲. Ḫäz̲er min hez̲gä Er keşelärenеñ ni ösön (30)asıwlanġandarın añlatıp biräm. Erz̲ä yäşäüse bar tereklek küz̲änäktärz̲än tora. Ular üs̲hen, yañı yän ëyähe tıwhın ösön, Ḳoyaşbikä ḳız̲ım, hineñ yılı nurz̲arıñ da, Yamġır ulım, hineñ şifalı tamsılarıñ da berz̲äy ük käräk. Ägär z̲ä kön dä ḳoyaş ḳız̲z̲ırha, Er kibä, tereklek häläk bula, ä inde ber (35)tuḳtawhız̲ yamġır ḳoyha, Er küpsey, üländär serey...

Oz̲aḳ höyläşep ultırġandar hawa, Ḳoyaş, Yamġır... häm, aḫırz̲a, ösöhö lä ber urtaḳ fekergä kilgändär, imeş: här nämä üz̲ vaḳıtında, üz̲ mälen, samahın belep kilgändä genä (39)ḳäz̲erle...

## -91-

### (1)ÖS İS̲ÄR TAZ̲ MENÄN BER AḲILLI ḲIZ̲

Ber tuġan ös taz̲ äkiät höyläşep ultırġandar. Äkiätte bülep, ular yanına ber ḳart kilep ingän. Taz̲z̲arz̲ıñ bik asıwz̲arı kilgän.

(5)—Niñä hin bez̲z̲eñ äkiätteñ ḳoyroġon öz̲z̲öñ? Nimä birep: ḳotolahıñ? Yäneñde biräheñme, ḳız̲ıñdı biräheñme? Ägär ḳız̲ıñdı birmähäñ, bez̲z̲än ḳotola almayhıñ!— tigändär.

Babay ḳız̲ın birergä riza bulġan.

Taz̲z̲ıñ iñ oloho ḳız̲z̲ı alırġa kitkän. Taz̲ barġanda, ḳız̲-(10)utın ḳırḳıp tora ikän.

— Ässälämäġäläyküm, ḳız̲ keşe! — tigän Taz̲.

— Bäġäläykümässäläm, taz̲ keşe! — tip sälämgä yawap ḳaytarġan, ti, ḳız̲.

— Min hine käläş itep alıp kitäm, — ti ikän Taz̲.

(15)—Bula ul, tik bına utındıñ ḳoyroġon totop tor, — ga ikän ḳız̲.

— Utındıñ ḳoyroġo bulamı, is̲är, — ti ikän Taz̲,

— hin üz̲eñ, äkiätteñ ḳoyroġon öz̲z̲öñ, tip atayımdı ḳurḳıtıp ḳaytarġanhıñ. Äkiätteñ ḳoyroġo bulamı ni, taz̲ ke-(20)şe? — tip, ḳız̲ Taz̲z̲ı kire ḳaytarıp ebärz̲e, ti.

Olo Taz̲ ḳaytḳas, urtansı Taz̲ kilde, ti. Taz̲ säläm birgän..

— Ässälämäġäläyküm, ḳız̲ keşe!

— Bäġäläykümässäläm, taz̲ keşe!

— Atayıñ öyz̲äme?

— Öyz̲ä.

(25)—Ni ëşläy?

— Sısḳan mögöz̲önän bısaḳ haplay.

— Bäy-bäy, sısḳandıñ mögöz̲ö bulamı ni ul? — tip aptıray ikän urtansı Taz̲.

— Sısḳandıñ mögöz̲ö bulmaġas, äkiätteñ ḳoyroġo bula-(30)mı, taz̲ keşe?! — tine, ti, ḳız̲.

Şulay itep, ikense Taẕ ẕa ḳıẕẕı ala almay ḳaytıp kitkän.

Bäläkäy Taẕ üẕeneñ aġayẕarına:

— Barhaġıẕ ẕa alıp kilä almayhıġıẕ, tip äyttem bit (35)inde min heẕgä. Bına ẖäẕer üẕem barıp alıp kiläyem äle, — tip sıġıp kitte, ti.

Kese Taẕ barġanda, tege hılıw ḳıẕ uramda tarı töyöp to-(38)ra ine, ti.

## - 92 -

(1)— Ässälämäġäläyküm, ḳıẕ keşe!

— Bäġäläykümässäläm, taẕ keşe!

— Kileñdä nisä börtök tarıñ bar, ḳıẕ keşe?

— Atıñdıñ yalı menän ḳoyroġonda nisä. börtök ḳılı (5)bulha, mineñ kilelä şunsa börtök tarı bar, taẕ keşe, — tip yawap ḳaytarẕı, ti, ḳıẕ.

Kese Taẕ ẕa ḳaytıp kitte, ti. Oşo urında äkiät tä tamam.

KES̱ÄL

(10)Ber ḳart üẕeneñ tanışına ḳunaḳḳa barġan. H̱uja unı kes̱äl menän hıylaġan. Ḳunaḳḳa bıl oḳşaġan. Bınday nämäne ġümerendä täü başlap ḳına kürgänlektän, unıñ nisek beşereleüen dä, isemen dä belmäy ikän. horaşırġa ḳıymaġan. Şulay ẕa bıl tämle aştıñ isemen bulha la belep ki-(15)tergä bulġan.

— Bıl nämäkäyẕeñ iseme nisek huñ? — tip horaġan.

— Unı kes̱äl tiẕär, — tigän ẖuja. Nisek beşereleüen dä höyläp birgän.

Ḳunaḳ ẖäterenä alıp ultırġan. Ḳaytḳas ḳatınımdan be-(20)şertermen, tip uylaġan. Üẕe, isemen onotop ḳuymayım tip, säy ëskändä lä, yoḳlarġa yatḳas ta:

— Kes̱äl, kes̱äl, — tip höylänä ikän. Keyengändä lä:

— Kes̱äl, kes̱äl, — tip keyengän. Atın da:

— Kes̱äl, kes̱äl, — tip ëyärlägän.

(25)Kiter aldınan ẖuja menän ẖuşlaşḳanda la, «is̱än bul!» tip äytähe urınġa, üẕe lä hiẕmäs̱tän:

— Kes̱äl bul! — tigän.

Ḳart, kes̱äldeñ isemen onotmas̱ boron ḳaytıp ḳalayım, tip atın yän-farman saptırġan. Üẕe haman at hikertkän ıñ- (30)ġayġa:

— Kes̱äl, kes̱äl, kes̱äl, kes̱äl, — tip bara ikän, ti.

Şulay häybät kenä ḳaytıp kilgändä, uylamaġan erẕä atı hörönöp kitkän dä, ḳart, ẖätere bülenep, «kes̱äl» hüẕen onotḳan. Şunan huñ, küpme genä baş vatha la, unı is̱enä töşörä (35)almaġan.

Ḳart ḳaytıp etkän. Ḳatını ḳapḳa asıp ḳarşı alġan.Ḳart käyefheẕlänep kenä ëyärenän töşkän dä boton huġıp, (38)küẕen yomop uylap ḳaraġan. Ḳatını:

## -93-

(1) — Ni buldı, ḳartım? Nindäy ḳayġı töştö? — tip horaġan. Ḳart:

— Tel osonda ġına tora, üẕen äytä almayım, — tigän.

— Nimä huñ ul?

(5) —Nimä ikänen belhäm, bılay aẕaplanmaġan da bulır inem...

Şulay tigän dä ḳart, atına menep, ḳaytḳan yulı menän kire sapḳan. Atı höröngän ergä barıp uylaha, is̱enä töşä bula, yänähe!

Ḳart, atı höröngän ergä barıp, ëyärenän töşkän dä:

— Bına oşonda ġına ẖäteremdän sıḳtı, bına oşondaġına! — tip üẕ aldına üẕe höylänep yöröy başlaġan. Uẕıp barıwsı ber yulsı bıl ẖälde kürep:

— Nimä yuġalttıñ, babay? — tip horaġan.

Ḳart ëşteñ dörös̱ön äytergä oyalġan.

— Ulay ẕur nämä tügel ine lä, bına oşonda ġına töşöp yuġaldı, — tigän bulġan.

— H̱atalanmayhıñmı babay, ëẕlägän nämäñ kes̱äñdä yatmaymı ikän? — tip horaġan yulsı. Ḳarttıñ yöẕö asılıp kitkän.

—Tas üẕe! Kes̱äl! Räẖmät, ulım, hiñä, is̱kä töşörgäneñä. Ḳunaḳta aşaġan «kes̱äl»de ëẕläy inem! — tigän.

Yulsı ber nämä lä añlamay ḳalġan. Ḳart atın etäklägän **Dä:**

— Kes̱äl, kes̱äl, kes̱äl, — tip ḳaytıp kitkän, ti.

## BAY MENÄN HAÑĠIRAU

Ber vaḳıt ber hañġıraw menän ber bay dus̱laşḳan, ti. Ular şul tiklem nıḳ dus̱laşḳan, ẖatta bötä tirä-yaḳ ẖalḳı ẖayran ḳalġan, ti.

Berẕän-ber köndö bay ḳapıl ġına awırıp kitä lä ayaḳtan yıġıla. Bını işetep, dus̱ınıñ ẖälen belergä bula, hañġıraw yulġa sıġa. Yulda kilä yatḳanında, dus̱ınan niẕär horaşırı, unıñ ni tip yawap birere ẖaḳında uylanıp bara ikän. İngäs tä ẖälen horaşırmın inde. Ä bay aġam: «H̱älem arıw äle»,—tier. Şunan nimä aşawın horarmın. Ul, moġayın: «Borsaḳ aşayım», — tier, tip uylay, ti hañġıraw. Ni ösön tigändä, üẕe borsaḳ yaratḳan, ti. Aẕaḳ kem dawalawın beleşermen inde. Ä aġam: «Fälän, fälän tabip», — tip äyter.

**- 94 -**

Unıñ dawahı kileşä torġan. Min uġa: «Yaray, yaray, ẖoẕay unıñ şifalı ḳuldarına ḳöẕrät birhen»,—tiermen.

Şulay uylanıp bara torġas, bay yortona kilep tä etkän, ti.

Bına hañġıraw öygä inä lä:

— Yä, bay aġay, ẖäleñ nisek? —tip horay. Bay:

— H̱älem bik nasar äle, dus̱ — ti. hañġıraw, aldan uylaġansa:

— Yaray, bik häybät bulġan, — ti. Bay ġäjäplänä, tik öndäşmäy, hañġıraw:

— Nimä aşayhıñ huñ? — tip horaġan bik ẖästärlekle tawış menän.

— Sañ ġına yotam.

— Yaray, yaray, bik häybät, aşay bir, şifahı teyer,— tip ẖuplaġan hañġıraw. Bayẕıñ bıġa asıwı kilä. Aẕaḳ hañġıraw kem dawalawın horay. Bay bar kösönä:

— Ġazrail! — tip ḳısḳıra la yän dä birä. Ä hañġıraw:

— Yaray, yaray, ẖoẕay unıñ şifalı ḳuldarına ḳöẕrät birhen, — ti. Şulay timäy nimä tihen, ber nämä işetmägäs ni.

Şunan bayẕıñ awıẕı ḳıbırlamas̱ bulġas: «Ber ẕä üpkälärlek hüẕ äytmägän hımaḳ inemse. Añlamas̱hıñ bıl bayẕar ẖalḳın», — tip aptırap ḳarap torġan-torġan da borolop sıġıp kitkän, ti.

## ḲABALAN KEŞE

Boron-boron zamanda ber äbey menän babay yäşägän. Babay bik ḳıẕıw, ötök keşe ine, ti. Ber köndö:

— Urmanġa baram da urmanġa baram, tiẕ ẕä tiẕ, — tip äbeyen aşıḳtırıp, teñkähenä

teyä, ti.

(30)Äbeye yaraştırġan aştı ḳabalan-ḳarhalan hoġonop, unan-bınan yıyınıp, balta urınına sümeste bilbawına ḳıştırġan da bıl kitep tä barġan. Äbey hıw hos̲ayım tihä, sümese yuḳ.

— Aha, babay alġandır, — tip yügerep sıḳha, babayı(35)baytaḳ er kitep ölgörgän.

— Babay, sümeste bir! — tip ḳısḳıra, ti, äbey.

(37)Unıhı, säy ës, tip äytä ikän, tip işetep:

**- 95 -**

(1)—Ëy, üz̲eñ ës tä. Bisälärz̲eñ şul inde. Säyz̲än başḳa nimä belä, — tip kitä genä birgän.

Urmanġa barıp, aġas töbönä ultırıp, tämäke töröp tart-tsan da, balta alam tihä, mä hiñä, sümes, ti, bilendä. Şunan (5)ni ëşlähen, kire ḳaytıwz̲an başḳa sara ḳalmaġan.

här ëşteñ üz̲ mäyele bula. Ḳabalan ëşlägän ëştän rät sıḳmay şul ul.

## BER ḲARTTIÑ ÖS ULI

Boron ber ḳart menän ber ḳarsıḳ yäşäp yatḳan. Ularz̲ıñ (10)ös ulı bulġan. Ber saḳ ḳart awırıp kitä lä, küp tä ütmäy, ülep ḳuya. Üler aldınan tüşäktä yatḳanda, ul üz̲eneñ uldarın saḳırıp ala la, vasıyattarın äytep, miras̲ın bülä.

— Bına hiñä, ulım, şul, bına hiñä, ulım, bıl, — tip;olo ulına — ber aġas koräk, urtansıhına — besäy, ösönsöhö-(15)nä halabaş birä.

Ḳarttı kümälär z̲ä malayz̲ar inäläre menän yäşäy başlayz̲ar. Ber kön üz̲-ara höyläşälär. Oloho äytä:

— Atayım miras̲ bülep ülgäyne, ber z̲ä fayz̲ahın kürmäy bez̲. Äyz̲ä, şularz̲ı alıp, don'ya giz̲ep sıġıp kitäbez̲, — ti.

(20)Ḳalġan malayz̲arġa şul hüz̲ etä ḳala:

— Äyz̲ägez̲.

— Äyz̲ägez̲, — tieşep, unıñ menän kileşälär.

İkense köndö malayz̲arz̲ıñ oloho, koräkte iñbaşına halıp, sıġıp kitä. Bara torġas, ber z̲ur ġına awılġa barıp etä. (25)Ëlekke vaḳıt költälärz̲e tüşäp halıp, sıbaġaş menän tuḳmap huġır bulġandar bit inde. Olo malay uram buylap kitep barġanda, şulay aşlıḳ huġıp, aşlıḳ taz̲artıp yatḳan keşelär yanına barıp sıġa. Töş vaḳıtı etkän bula. Aşlıḳ taz̲artıwsılar aşarġa kerergä bulalar.

(30)—Bik arıġanbız̲, säy ësep alabız̲. Bez̲ aşap sıḳḳansı,bez̲z̲eñ aşlıḳtı ḳarap tor äle, — tiz̲är malayġa. Olo malayriza bulıp torop ḳala. Öyölöp yatḳan boyz̲ayġa ḳarap tora-tora la, iñbaşınan aġas korägen alıp, elgärä başlay. Süptäre elgä osa, taz̲a boyz̲ay ḳıp-ḳız̲ıl bulıp ber öyömgä öyölä(35)bara. Ber az̲z̲an aşlıḳtı şulay elgärep bötä lä, köşöl ba şına menep, korägen ḳaz̲ap ḳuyıp, üz̲e yal itergä ultıra. Tege keşelär, aşap kilhälär, aptırap ḳalalar: süple aşlıḳ(38)urınında ḳıp-ḳız̲ıl bulıp taz̲a boyz̲ay öyölöp yata. Tirä-

**-96-**

(1)yaḳḳa ḳarayz̲ar, tege malayz̲an başḳa ber zat yuḳ. Köşöl başında nindäyz̲er aġas ḳaz̲alıp tora.

— hin taz̲arttıñmı? Nisek taz̲arttıñ? — tip horayz̲ar malayz̲an.

(5)—Min taz̲artmanım. Bına mineñ ḳoralım bar, şul taz̲arttı, — tip, korägen kürhätä

malay.

— hatmayhıñmı?

Malay aẕıraḳ inältkän bula. hatıwlaşıp ala la yöẕ täñkägä korägen hatırġa rizalaşa. Tege keşelär, şulay itep, (10)koräkte hatıp alalar. Yöẕ täñkäne ala la kinänep ḳaytıp kitä malay. Balam yünsel, tip, inähe lä şatlana. Aġas koräk menän igen elgäreü hänäre şunan ḳalġan, ti, ul.

Aġahınıñ yöẕ täñkä aḳsa alıp ḳaytḳanın kürgäs, urtansıhı la, kitäm, ti başlay. İnähe riza bula. Malay besäyen (15)ḳuyınına ḳıs̱tıra la sıġıp kitä. Oẕaḳ ḳına barġas, ber ḳalaġa etä. Ber öy yanında kümäk ḫalıḳ yıyılġan bula.Ul şunda bara.

— Bıl ḫätlem keşe niñä yıyılıp tora? — tip horay.

— Bında sısḳan tigän yanuarẕar yäşäy, ularġa kön dä (20)ber keşene aşarġa biräbeẕ, — tiẕär bıġa.

Bögön sirat ber bayẕıñ yañġıẕ balahına ikän. Malay:

— Ḳana, üẕem ḳalayım unıñ urınına, — tip horay.

Keşelär şatlanıp riza bulıp ḳaytıp kitälär. Tışta

(25)ber kem dä ḳalmay. Urtansı malay öygä inep kitä. İngäs, küp tä ütmäy, sısḳandar kilep sıġa. Malay ḳuyınınan besäyen sıġara la sısḳandarġa ebärä. Besäy tiẕ genä sısḳandarẕı ḳıwıp totop bıwa başlay. Beräüẕe bıwa, ikäüẕe... Bına barıhın da bıwıp taşlap, öyöp ḳuya.

(30)Kiskä taban keşelär kilälär. Malayẕı aşap bötörgändärẕer inde tip, ḳayġırışa, ti, bötähe lä. Kilhälär — malay işek aldında kölöp ḳarap ultıra. Ülgän sısḳandar öyömön kürep, yänä aptıray tege keşelär.

— Kem ülterẕe? — tip horayẕar malayẕan.

(35)— Mineñ arıs̱lanım bar. Şul ülterẕe.

— hat beẕgä.

— hatırġamı, yuḳmı? — tip elkähen tırnap, ikelängän

keşe bula la, aẕaḳ riza bulıp, yöẕ täñkägä hata.Aḳsanı

(39)halıp alıp, ayaġı ergä lä teymäy ḳaytıp kitä. Aḳsahın inä-

**-97-**

(1)henä birä. Balam yünsel, tip, inähe bınıñ da arḳahınan ḳaḳtı, ti. Yortta besäy totou yolahı şul saḳtan torop ḳaldı, ti.

halabaş alġan bäläkäy malay aġayẕarınıñ bayıp ḳayt(5)ḳanın kürep, säbälänä başlanı, ti. Şunan inähenän röḫsät horay ẕa ul da sıġıp kitä. Küp köndär bara. Ẕur ber urmandı ütä, taw artılıp, tuġayġa töşä, ber külgä barıp etä. Kül sitendäge ber aġasḳa yükäheneñ oson bäyläy ẕä işä başlay. Äẕeräk vaḳıt ütkäs, hıwẕan kül ëyäheneñ balahı kilep sıġa.

— Nişläyheñ?

— Bına ep işäm dä külde kükkä as̱am.

Kül ëyäheneñ balahı yügerep külgä töşöp kitä. Atahına bara la:

— Unda beräü oẕon-oẕon ep işä, külde kükkä as̱am, tip äy-(15)tä, — ti.

— Bar, hin uġa yügereşäyek, tip äyt. Ägär mine uẕhañ, külde as̱ırhıñ, tip äyt, — ti balahına kül ëyähe.

Kül ëyäheneñ balahı ös̱kä sıġa la malayġa şul hüẕẕärẕe äytä. Malay tıñlap tora la:

(20) — Mineñ ënem bar, şunı uẕhañ, beẕ ikäü yügereşäbeẕ, —ti. — hin ana tege

ḳıwaḳlıḳḳa bar. Min sıbırtḳı şartlatham, ul sığır, — ti.

Kül ëyäheneñ balahı malay kürhätkän ergä bara. Sıbırtḳı şartlağan tawışḳa ağas arahınan ḳuyan sığıp yügerä. Kül ëyäheneñ balahı unı ḳıwıp ḳaray, läkin uẕıw tügel, ḳıwıp ta etä almay, ẖäle bötöp, kül as̱tına töşä lä atahına is̱e kitep höyläy.

Atahı uğa:

— hin, äyẕä, köräşäyek, tip äyt, — ti. Kül ëyäheneñ balahı ös̱kä sığa la:

— Ağay, äyẕä köräşäyek, — ti.

— hi, mineñ menän köräşmäk bulahıñmı?! Mineñ-babayım bar, käkräyep bötkän. Ana tegendä, ağaslıḳta yata. Şunı eñä alhañ, ikäü köräşerbeẕ, — ti.

Kül ëyäheneñ balahı ağaslıḳḳa bara. Unda ayıw yatḳan bula. Ul bara la, yoḳlap yatḳan ayıwğa törtöp:

— Äyẕä, köräşäyek! — ti.

Ayıw hikerep torğan da, aşayım hine, tip ajğırıp ebärgän. Kül ëyäheneñ balahı bik nıḳ ḳurḳḳan, köskä ḳasıp ḳotolğan. Atahına barğan da höyläp birgän:

## -98-

— Ber ḳart babahı saḳ-saḳ ḳına aşamanı, — tigän.

Kül ëyähe bik aptırağan, ẕur ḳurḳıwğa ḳalğan. Aẕıraḳ uylap ultırğas, balahına äytkän:

— Aḳsa, altın biräyek. Bar, balam, belep kil äle, küpme horay ikän? — tigän.

Malay bını işetkäs, başınan ëşläpähen sisep kürhätkän:

— Bına oşo tulğansı, — tigän.

Kül ëyäheneñ balahı şatlanıp altın alırğa töşöp kitkän. Şul arala malay ëşläpäheneñ töbön tişkän dä as̱tına ẕur ber toḳ ḳuyğan. Ëy taşıy, ti, — ëşläpä ber ẕä tulmay, ti. Kül ëyähe lä, unıñ balahı la bik ẕur ḳurḳıwğa töşkändär. Nıḳışa torğas, ber saḳ toḳ lıḳa tulğan. Eget işkän ebe menän unıñ awıẕın nığıtıp bäylägän dä kül ëyäheneñ balahına:

— H̱äẕer bına oşono mineñ öygä alıp bar, — tigän.

Tege, ber toḳ altındı yökläp alıp aldan kitä, eget arttan ḳarap kilä. Aẕıraḳ barğas, yulda ber ẕur tirmän taşı osray. Kül ëyäheneñ balahı egettän horay:

— Ağay, bıl nimäkäy?

— İnäyemdeñ orsoḳ başı, — ti eget. Tağı bara birgäs, ber yıwan büränä osray.

— Ağay, bınıhı nimäkäy?

— İnäyemdeñ orsoğo, — tip yawap birä eget. Şunan bara birgäs, ber arḳan yata, ti.

— Ağay, bınıhı nimäkäy tağı?

— he, hıw meye, şunı la belmäy. İnäyemdeñ ilägän ebeG Kül ëyäheneñ balahı bik nıḳ ḳurḳıwğa töşä. «İnäheneñ orsoğo, orsoğonoñ başı, ilägän ebe şulay bulğas, üẕe ḳalay ikän?» — tip uylay.Tağı la aẕıraḳ barğas, alıs̱ta yaltırap ut kürenä: egetteñ öyönä etep kilälär. Kül ëyäheneñ balahı tağı la horay:

— Ağay, bıl nimäkäy?

— İnäyemdeñ küẕe, — tip yawap birä eget.

(35)Öygä eter saķta, yat nämäne kürep, ëttär abalap sıġa. Kül ëyäheneñ ulı ķurķıp ķala.

— Ķurķma-ķurķma, bılar inäyemdeñ bete, — ti eget.

Kül ëyäheneñ balahı bötönläy aptırap ķala.

Bına ular ikäüläşep öygä barıp inälär. Eget inähenä (40) äytä:

- 99-

(1) — İnäy, aş hal!

— İt yuķ bit, ulım.

— Nişläp? Kisä kilterẕem ber bärey, bögön ber bärey...

Bını işetkän kül ëyäheneñ balahı ber toķ altındı bı(5)raķtır ẕa öyẕän yügerep sıġıp kit! Artına ķaray-ķaray yügerä. Köskä ķaytıp yıġıla.

Äbey menän ulandarı bik bayıġıp yäşäp kitälär.

## ÄTÄS HÄM TÖRÖK SOLTANI

*(Mad'yar ẖalıķ äkuäte)*

(10)Don'yala ber yarlı ķatın yäşägän, ti. Unıñ berẕän-ber baylıġı — ätäse bulġan. Ber vaķıt ul, süp-sar arahında tibenep yörögändä, yartı almas kreytser ' tabıp alġan, ti.

Tap oşo mäl yaķında ġına török soltanı ütep barġan bulġan. Ul ätästeñ yartı almas kreytserın kürep ķalġan da:

(15)—Yartı almas kreytserıñdı miñä bir, — tigän.

Ätäs ķabarınġan, ķaġınġan da:

— Yuķ, birmäyem! Ul mineñ ẖujama la yarap ķalır, —tip yawap birgän.

Läkin török soltanı ätästän yartı kreytserẕı tartıp ala(20) la, unı öyönä alıp ķaytıp, ẖazinaları haķlanġan ergä yäşerep ķuya.

Ätäs, asıwlanıp, sitängä osop mengän dä:

— Kik-ri-kük! Török soltanı, mineñ yartı almas kreytserımdı kire bir! —tip hörän halġan.

(25)Ätästeñ tawışın işetmäş ösön, soltan üẕeneñ harayına inep biklängän dä ẖeẕmätselärenä bötä işektärẕe lä, täẕrälärẕe lä yaķşılap yabıp ķuyırġa ķuşķan.

Bınan huñ ätäs täẕrägä osop mengän, suķışı menän bıyalanı şaķıldata, ķanattarın ķaġa häm ķısķıra başlaġan:

(30)—Kik-ri-kük! Török soltanı, mineñ yartı almas kreytse-rımdı kire bir!

Török soltanı asıwlanġan häm ẖeẕmätsehenä:

— Ätäste totop ķoyoġa taşla! —tip boyorġan.

H̱eẕmätse ätäste ķoẕoķķa taşlaġan. Läkin ätäs unda la

(35)tınıs ķalmaġan:

---

K r e y ts e r — Avstro-Bengriyala boronġo vaķ aķsa.

## -100-

—hıw, hıw, mineñ äsemä tul, — tigän. Ḳoẕoḳtoñ hıwı ätästeñ ësenä inep bötkän.

Şunan ätäs yañınan török soltanınıñ täẕrähenä osop mengän dä:

—Kik-ri-kük! Török soltanı, mineñ yartı almas kreytse-rımdı kire bir! — tip ḳolaḳ yarırlıḳ itep ḳısḳırġan.

Soltan, ëlekkenän dä yaman asıwlanıp, ẖeẕmätsehenä:

— Bar, ätäste totop, yanıp torġan meyeskä ırġıt! — tigän.

Ḫeẕmätse ätäste totḳan da yanıp torġan meyeskä ırġıtḳan.

-101-

Tik ätäs üẕ hüẕen itkän:

— hıw, hıw! Minän ḳoyol, utḳa tügel, unı hünder.

Küẕ asıp yomġansı, hıw meyestäge uttı hündergän. Ätäs$_{g}$ ber ni bulmaġanday, taġı la täẕrägä osop ḳunġan:

—Kik-ri-kük! Török soltanı, mineñ yartı almas kreytse-rımdı kire bir!

Bıl yulı soltan tamam yarhıġan:

— Ḫeẕmätse, bar, ätäste tot ta umarta ësenä taşla, balḳorttarı kärägen birhendär!

Ḫeẕmätse ätäste totḳan da bal ḳorttarı yanına taşlaġan. Ä ätäs:

— Bal ḳorttarı, bal ḳorttarı! Mineñ ḳawırhındarım,ḳanattarım as̱tına yäşereneгеẕ!

Bal ḳorttarı ätästeñ ḳawırhındarı, ḳanattarı as̱tına inep tulġandar.

Ätäs taġı la török soltanınıñ täẕrähenä osop mengän:

— Kik-ri-kük! Török soltanı, mineñ yartı almas kreytse-rımdı kire bir!

Soltan artaban ätäste ni ëşlätergä lä belmägän.

—Ḫeẕmätse! — tip aḳırġan ul. — Bar, ätäste bında kilter!..

Ḫeẕmätse, ätäste totop, soltan ërgähenä alıp kilgän. Şul saḳ ätäs:

— Ḳawırhındar, ḳanatḳayẕar, bal ḳorttarın sıġarıġıẕ, ular török soltanınıñ kärägen birhendär!

Bal ḳorttarı yäşerengän erẕärenän osop sıḳḳandar ẕa-soltanġa taşlanġandar. Soltan ultırġan urınınan ırġıp; torġan, beyey häm ürle-ḳırlı hikerä başlaġan.

— Uy-uy, ḳähär huḳḳır ätäs! Unı ẖazinalarım yanına;alıp barıġıẕ, şunan üẕeneñ yartı almas kreytserın ëẕlägealhın!

Ätäste ẖazinalar haḳlana torġan ergä alıp barġandar. Unda ul üẕ yırın yırlaġan:

— Ḳorhaġım, ḳorhaġım, soltandıñ keşe talap yıyġayubötä aḳsaların üẕ äseñä al!

Ätästeñ ësenä török soltanınıñ aḳsalar tultırġan ös yalġaşı inep kitkän, ti.

Ätäs ularẕı öyönä alıp ḳaytıp ẖujahına tapşırġan. Tege ḳatın ularẕı bötä yarlılarġa taratıp birgän, ti.

- 102 -

## ÖS AYaḲLI BESÄY

Ber awılda ös sawẕagär yäşägän, ti. Ularẕıñ berehen Aḳhaḳal tip, ikensehen Mıyıḳhıẕ, ösönsöhön Yaltırbaş tip yörötkändär. Törlö tawarẕarẕı — keläm, şäl, ebäk, keyem, ha-uıt-haba häm başḳalarẕı — bıl ös sawẕagär ber kelättä haḳlaġan. Ular burẕarẕan bik ḳurḳḳandar, ti. Şuġa kürä lä baylıḳtarın haḳlarġa Ani isemle ber yarlını yallaġandar.

Läkin sawẕagärẕärgä bötönläy kötmägändä ḳaza kilgän: ḳelätkä sısḳandar ëyäläşep, tawarẕarẕı kimerä başlaġan. Bıl bälänän ḳotolou äsäñ ular ḳarawılsıġa beräy besäy hatıp alırġa ḳuşḳandar.

— Öyẕä mineñ üẕemdeñ besäyem bar, — tigän Ani, — şunı hatıp alıġıẕ.

— Niẖaḳ horayhıñ besäyeñä? — tigändär sawẕagärẕär Aniġa.

—Küp tügel, här ayaġı ösön berär kömöş aḳsa birhägeẕ, şul etkän.

Şul saḳ sawẕagärẕärẕeñ iñ oloho, iñ ḳomhoẕo, iñ ẖäylä-ḳäre — Aḳhaḳal hüẕ başlaġan.

— Äyt äle, Ani, besäyeñdeñ ayaġı dürtäüme?

— Dürtäü, — tip yawap birgän ḳarawılsı.

— Ä beẕgä ösäühe lä etkän. Yaḳşı besäy ös ayaḳlap ta sıs-çkan tota ala. Mä, hiñä ös kömöş aḳsa, bögön besäyeñde alıp kil, — tigän ul.

— Ulayha, besäyẕeñ dürtense ayaġı mineke bula inde? — tip horaġan Ani.

— Ëye, ëye, äyẕä, şulay bulhın! — tigändär ös ḳomhoẕ sawẕagär.

Ani besäyen kilterep kelätkä ebärgän.

Täüge köndä ük besäy bäẖetheẕlekkä osraġan: sısḳan baş(1) tırıp yörögändä käştänän yıġılıp töşkän dä ber ayaġın, hındırġan.

Bıl ẖälde işetkäs, sawẕagärẕär:

— Tiẕeräk doktorẕı kilter! — tip ḳısḳırġandar.

— Ḫäẕer baram, — tigän Ani. — Tik, ẖörmätle äfändelär, heẕẕeñ ḳayhıġıẕ doktorġa tülärgä aḳsa birer ikän?

— Min birmäyem, — tigän Aḳhaḳal. — Sönki min besäyẕeñ artḳı hul ayaġın hatıp aldım. Ä ul alġı uñ ayaġın hındırġan.

-103-

— Ä min artḳı uñ ayaġı ösön aḳsa birẕem, — tigän Mıyıḳhıẕ.

— Ä min alġı hul ayaġın hatıp aldım, — tip hüẕgä ḳuşılġan. Yaltırbay.

—Bılay bulġas, besäyẕeñ hınġan ayaġı Aniẕıḳı bulıp

-104-

sıġa, — tip hıġımta yahaġan Aḳhaḳal. — Doktorġa ul tülärgä teyeş.

Ani bäẖäsläşep tormaġan, besäyen toḳḳa halġan da ḳalaġa kitkän. Bında doktor

besäyẕe ḳaraġan, unıñ hınġan ayaġın nıġıtıp bäylägän dä:

— Bar ḳayt. Ber aẕnanan besäyeñ dürt ayaġına la basır, — tip Aniẕı ḳaytarıp ebärgän.

Ani besäyẕeñ ös ayaġın hatıwẕan kilgän ös kömöş aḳsahın doktorġa birgän dä ḳaytıp kitkän.

Ḳarañġı töşkäs, ḳarawılsı besäyẕe yänä kelätkä yapḳan. Bıl töndö sısḳandar bigeräk tä küp bulġan. Küräheñ ular besäyẕeñ ös ayaḳ menän ḳalġanın işetkändär. Ä meşken besäy, -ös ayaḳlap bulha la sısḳan artınan käştänän käştägä hikerep yörögändä, yanıp ultırġan may şämde yañılış awẕarıp ebärgän. İẕängä töşkän şämdän ut sıġıp, yanġın başlanġan, häm tiẕẕän kelätteñ dä, kelättäge tawarẕarẕıñ da kölö kükkä osḳan.

Bıl ḫälde işetkäs, sawẕagärẕärẕeñ säse ürä torġan. Ular ber tawıştan besäyẕe ġäyeplägändär.

—Yanġındı besäy sıġarẕı. Läkin besäygä beẕ dürt ḫuja. Şulay bulġas Ani yanġan baylıḳtıñ dürttän ber ölöşön beẕgä tülärgä teyeş, — tigändär.

— Mineñ yamawlı bişmätemdän başḳa baylıġım yuḳ, — tigän Ani. — Ḫörmätle äfändelär, heẕ minän ber ni ẕä ala almayhıġıẕ.

Sawẕagärẕär Aniẕı besäye.menän bergä sud'yaġa alıp barġandar.

Sud'ya ërgähenä kilgäs, Aḳhaḳal bılay tigän:

— Sud'ya äfände! hineñ ġäẕellegeñde bötä don'ya belä. Oşo besäy sısḳan baştırıp, şämde ḳolatḳan häm yanġın sıġıp, beẕẕeñ bötä tawar häläk buldı. Äytse, zinhar, zıyan «ösön besäyẕeñ ḫujaları ber tiñ tülärgä teyeşme, tügelme?

— Teyeş, — tigän sud'ya.

— İşetteñme, aḫmaḳ, ḫörmätle sud'ya nimä ti? — tip sawẕagärẕär Aniġa taşlanġandar. — Beẕgä aḳsa tülä, yuġihä üẕeñde ḳol itep alabıẕ.

Şul saḳ sud'ya besäyẕeñ hınġan ayaġın kürep ḳalġan.

— Ä ni ösön unıñ ber ayaġı bäylängän? İmgändeme ni?

— Sısḳan baştırġanda käştänän ḳolap hındırġaynı, — tigän Mıyıḳhıẕ.

— Doktor unı dawalanı inde.

-105-

—Aḳhaḳal , äytse, — tip horaġan yañınan sud'ya, -g- doktorġa hin küpme tüläneñ?

— Äfändem, besäyẕeñ hınġan ayaġı mineke tügel, şulay bulġas, min tülämänem.

— Ul saḳta Yaltırbaş tülägänder?

— O, ḫakim äfände, min besäyẕeñ ul ayaġın hatıp almaġaynım şul. Niñä yuḳḳa aḳsa äräm itergä?

— İḫtimal, doktorġa küpme aḳsa birgänen Mıyıḳhıẕ äyter?

Läkin unıhı la baş tartḳan:

— Yuḳ, yuḳ, min buşḳa aḳsa sıġarırġa yaratmayım. Besäyẕeñ hınġan ayaġı Aniẕıḳı, doktorġa ul üẕe tüläne.

— Añlaşıldı, — tigän sud'ya. — hınġan ayaḳḳa ḳarawılsı ḫuja bula inde.

— Şulay, şulay,— tip ḳısḳırġandar sawẕagärẕär.

— Ḳalġan ösöhö heẕẕekeme?

— Beẕẕeke, beẕẕeke!

— Ulayha, besäy şämde ḳolatḳanda ös ayaḳlap ḳına yörögän inde?

— Ëye, — tip rizalaşḳandar sawẕagärẕär.

— Ani heẕgä ber tin dä teyeş tügel, — tip ḫököm sıġarġan sud'ya.— Besäy sısḳandı ös ayaḳlap bas̱tırġan. Ä unıñ dürtense ayaġı, yäġni Ani ḫuja bulġanı, hunarẕa ḳatnaşmaġan. Şulay bulġas, sawẕaġär äfändelär, ḳazanı ös̱ögöẕ (25)büleşähegeẕ ẕä mine bütän bimazalap yörömägeẕ, — tip tegelärẕe sıġarıp ebärgän.

Ani, bıl ġäẕel ḫökömgä şatlanıp, besäyen kütärgän dä yırlay-yırlay öyönä ḳaytıp kitkän.

## ETEM TÖLKÖ

(30)Yaẕ köndäreneñ berehendä ayıw, büre, ët häm ḳuyan osraşḳandar. Ḳış könö beẕ öşönök, aẕıḳ tabıw ẕa ḳıyın buldı, tip üẕẕäreneñ awır tormoştarınan zarlanġandar.

— Äyẕä, bergäläp yäşäyek, şulay eñeleräk bulır, — tigän ayıw.

(35)Bötähe lä riza bulġandar häm urman urtahında ber aḳlanġa bäläkäy genä öy ḳorġandar ẕa şunda tora başlaġan(37)dar.





(1)Ber vaḳıt ayıw iptäş̱tärenä:

— Dus̱ḳayẕarım, ḳış̱ḳa äẕerlänergä vaḳıt, — tigän. —Beẕgä hıyır hatıp alırġa käräk. Ët unı kötör, hötön hawıp,ḳaymaġın beşhäk, kür ẕä tor, ḳış könö aşarġa beẕẕeñ ber(5)batman mayıbıẕ bulır.

İptäş̱täre ayıwẕıñ bıl käñäşen bik urınlı tapḳandar. Şul köndö ük baẕarġa barıp, üẕẕäre ültergän yänlektärẕeñ tirelären hatḳandar ẕa şunan kilgän aḳsaġa ber hıyır hatıp alġandar.

(10)Ët kön hayın hıyırẕı aḳlanġa sıġarıp kötä, ä büre kis menän hötön hawıp ala torġan bulġan. Ḳuyan hıyırġa aşatır öson üländeñ iñ yaḳşıhın ëẕläp taba, ä ayıw bötä ḫujalıḳ ëş̱tären başḳara ikän.

Yäy ütep, ḳara köẕ kilgän. Dus̱tar ḳış̱ḳa ber batman (15)harı may äẕerlägändär.

— Bıl mayẕı sarẕaḳḳa, ḳıyıḳ as̱tına ḳuyırġa käräk, —tigän ayıw. — Ḫäẕergä mayġa beräü ẕä teymähen. Ḳış etkäs,aẕlap-aẕlap alırbıẕ ẕa kartuf ḳurırbıẕ.

Bötähe lä, ayıw menän kileşep, harı may tultırılġan (20)batmandı sarẕaḳḳa kütärgändär ẕä yäşerep ḳuyġandar.

Köndärẕän ber kön, ular säy ësep ultırġanda, ḳapıl kemder täẕrä sirtkän. Ḳuyan işek asḳan.

İşek töböndä tölkö torġan: ul ber ḳulına ḳomġan totḳan, ti, ä üẕe bik yıwaş, bas̱alḳı kürenä ikän. Tölkö başın tü-(25)bän ëyep:

— hawmıhıġıẕ, ḳäẕerle dus̱ḳayẕarım? Ḫäyerle kis, —tip hawlıḳ horaş̱ḳan.

Ḫujalar unıñ menän is̱änläş̱kändär ẕä säy yanına saḳırġandar.

(30)Tölkö, öş̱täl ërgähenä ultırġas, äẕäple genä itep hüẕ başlaġan:

— Min yaḳtı don'yala yapa-yañġıẕ ḳalġan ber ükheẕ etem.Mine lä üẕegeẕẕeñ ġailägeẕgä alıġıẕsı.

— Yarar, hine üẕebeẕẕeñ ġailäbeẕgä alıw-almaw turahın(35)da bögön höyläşerbeẕ, — tigän uġa ayıw. — İrtägä yawabınalırġa kilerheñ.

Tölkö säy äsen ḫujalarġa räḫmät äytkän dä üẕ yulına kitkän.

—Alırġa käräk üẕen. Şunday äẕäple, bas̱alḳı ġına kü(40)renä, — tip ḳarar itkändär ḫujalar.

**-107-**

(1)İkense köndö irtänsäk tölkö tağı kilgän. Tegelär unı üẕẕäreneñ ġailähenä alırġa riza bulıwẕarı turahında' äytkändär, häm şul köndän başlap tölkö ular menän bergä yäşäy başlaġan.

(5)Ul üẕen bik äẕäple totḳan, häm, bötäheneñ dä hüẕen tıñlap, ni ḳuşhalar, şunı hüẕheẕ ütäy birgän. Ul ayıwġa, büregä, ëtkä genä tügel, ẖatta ḳuyanġa la bötä küñeldän yararġa tırışḳan.

Şulay baṣalḳı ġına yäşägändän huñ, tölkö ḳıyıḳ aṣ-(10)tında ber batman may yäşerelgänen hiẕep ḳalġan. Tölkö mayẕı bik yarata bit inde. Ul, beräügä lä hiẕẕermäyensä, bıl mayẕı ber üẕe aşağıhı kilgän.

Aẕaḳ kilep, ul ẖäylähen tapḳan: şunıñ ösön dä ẖäyläkär tölkö tiẕär bit unı.

(15)Kistärẕän ber kiste tölkö, hıltaw itep, ḳapḳa nıḳ biklängänme ikän, tip sığıp ḳararġa bulġan. Şul saḳ ul, uramġa sığıp, täẕrä sirtkän dä yat tawış menän:

— Etem tölkö öyẕäme? — tip horaġan.

— Äyẕä, öyẕä, ẖäẕer tıştan iner, — tip yawap ḳaytarġandar uġa.

— İngäs tä, äytegeẕ uġa, ẖäẕer ük beẕgä burhıḳ balahına isem ḳuşırġa barhın.

— Yarar, äyterbeẕ, — tip yawap ḳaytarġan-(20)dar öyẕän.

Tölkö, belmämeşkä halışıp, öygä ingän.

(25)—Tölkököy, yañı ġına beräü kilep, hine burhıḳ balahına isem ḳuşırġa saḳırẕı, — tigän ayıw.

— Ulay bulġas, barırġa käräk, — tigän tölkö.

Tölkö yähät kenä yıyınġan da öyẕän sığıp kitkän. Öyẕö ber äylänep sıḳḳan da, haḳlıḳ menän genä ḳıyıḳ aṣtına (30)hikerep menep, batmandağı mayẕı aşay ẕa başlaġan. Tuyġansı aşaġan ul. Tölkö şunda yatıp ber aẕ yal itkän dä öygä ingän.

— İä, ni menän hıylanılar üẕeñde? — tip horaġandarunan.

(35)Tölkö:

— Ḳurılġan ḳaẕ, beşerelgän tawıḳ ite, harı may menän,

— tip yawap birgän dä irendären yalap ḳuyġan.

— Nindäy isem ḳuştıñ? — tip horaġan ët.

(39) —Başbala, — tip yawap ḳaytarġan tölkö.

-108-

(1)İkense köndö lä tölkö, miñä tağı la isem ḳuşırġa barırġa käräk, tip sığıp kitkän dä, sarẕaḳḳa menep, mayẕı batmandıñ yartıhına tiklem aşaġan.

Ul ḳaytḳas, ḳuyan unan:

(5) — Yañı tıwġan balaġa nindäy isem ḳuştıñ? — tip horaġan.

— Urtansı, — tip yawap birgän tölkö.

Ösönsö köndö tağı la sarẕaḳḳa mengän häm bıl yulı mayẕı aşap bötörgän. Ul batmandı taẕartḳansı yalaġan da (10) öygä ingän.

— İä, nindäy isem ḳuştıñ? — tip horaġan unan ayıw.

— Kinyä, — tip yawap birgän tölkö.

Ḳış kilep etkän.

— İä, duşkayẕarım, ber aẕ may alıp inep, kartuf ķu-(15)rırğa käräk, — tigän ayıw.
İptäştäre bik şatlanıp:

— Äyẕä, ķurayıķ! — tigändär.

— Bar, tölkö, hin ber aẕ may alıp töş, — tigän ayıw.

Bötähe lä solanġa sıķķandar. Tölkö stena buylap sar(20)ẕaķķa menep ķaraġan da ķolap töşkän häm, menä almawına hıltaw tabırğa tırışıp:

— Bik beyek ikän şul, min unda menä almayım, — tipzarlanġan.

Ët tölkögä yarẕam itergä bulġan. Elkähenä baştırġan da (25)sarẕaķķa mendergän. Şul saķ tübändä torousılar tölkönöñ sıyıldap ķısķırġanın işetkändär.

— Bında ber nindäy may ẕa yuķ! Buş batman ġına tora!

Uġa berehe lä ışanmaġan. Şul saķ tölkö buş batmandı
tübängä tägärätep töşöröp ebärgän. Ķarahalar, batman, ısın(30)lap ta, buş ikän.

— Bıl mayẕı nindäy oyathıẕ aşanı ikän?— tip ükergän ayıw. — Ḫäẕer ük tabırğa käräk ul ķaraķtı!

Ķaraķtı nisek tabırğa huñ, tip oẕaķ baş vatķandar ular. Aẕaķ kilep, ayıw:

(35)—Äyẕä, ķıẕıw itep ut yaġayıķ ta üẕebeẕ ut tiräläp ul-.
tırayıķ. Mayẕı aşawsı bulha, ut ķıẕıwınan unıñ ësendä
ge mayı irep tışķa sıġır.

Ut yaġıp ebärgändär.

(39)Ut yanında ultıra torġas, ular, yılıġa oyop, yoķlap kit-

-109-

(1)kändär. Ķıştıñ täüge halķın köndäre bulġanlıķtan, ayıw bötähenän da ķatıraķ yoķlaġan.

Tik tölkö genä kerpek tä ķaķmaġan. Ul üẕeneñ bötä täne buylap may aķķanın kürgän. Oẕaķ uylap tormayınsa, üẕeneñ (5)ġäyeben ayıwġa awẕarırġa bulġan: bötä mayẕı öştönän hıpırıp alġan da ayıwġa hılaġan.

Yoķolarınan uyanġas, şunı küralär: bötähe lä ķop-ķoro, ä ayıwẕıñ bötä yönö maylı, ti.

— Mayẕı bına kem aşaġan ikän! — tip ķısķırġandar (10)yänlektär häm ayıwẕı yazalarġa uylaġandar.

— Aşıķmaġıẕ! Bında nindäy ẕä bulha ber ḫäylä bar!— tip ķısķırġan ayıw. — Uttı taġı la ķıẕıwıraķ yaġırġa la yañınan hınap ķararġa käräk.

Bötähe lä riza bulġan, tik tölkö genä, käräkmäy, bik ëşe, (15)tip ķarşı töşkän.

Tölkönöñ hüẕenä ķaramayınsa, taġı ķıẕıw ut yaķķandar ẕa ut tiräläy ultırġandar. Ayıw taġı la ġırıldap yoķlap kitkän. Ä büre, ët häm ķuyan yuramal yoķlaġanġa halışķandar. Ä tölkönän taġı la may sıġa başlaġan.

(20)Tölkö, başķa yänlektärẕeñ yoķlaġanın kürgäs tä, taġı la üẕeneñ öştöndäge mayẕı hıġıp alıp, ayıwġa hılarġa totonmahınmı! Büre, ķuyan häm ët bını kürep ķalġandar ẕa ķısķırıp tölkö öştönä taşlanġandar:

— Bına ķayẕa ikän ul ısın ķaraķ! Etmähä, yıwaş ķı(25)na etem bulıp ķılandı!

Şaw-şıwġa ayıw ẕa uyanġan. Uġa bötähen dä tükmäy-säsmäy höyläp birgändär.

— Min mayẕı aşaġanım yuķ! — tip aķlanırġa tırış ķan tölkö.

(30)Şul saḳ ular tölkönö totop bäylägändär z̲ä, uttı taġı la ḳız̲ıwıraḳ yaġıp, unı ut ös̲töndä totḳandar. May ut ös̲tönä tama başlaġan.

Şunan huñ ular tölkönö bik nıḳ tuḳmaġandar z̲a:

— H̲äz̲er ük üksäñde kütär! Äz̲eñ dä bulmahın! Bez̲z̲eñ ta(35)tıw ġailälä hiñä urın yuḳ! — tip ḳıwıp ebärgändär.

Tölkö ḳomġanın alġan da başı huḳḳan yaḳḳa kitep bar- (37)ġan.

-110-

## (1)ŞAYaN BESÄY

Boron-boron zamanda ber äbey menän babay yäşägän. Ularz̲ıñ şayan ḳara besäye bulġan, ti. Äbey besäyz̲e bik yaratḳan. Läkin äbey ḳartayıp ülep kitkän.

(5)Äbey ülgäs, besäyz̲e aşatır-ëserer keşe bulmaġan. Babay unı yaratmaġan. Besäyz̲eñ üz̲enä az̲ıḳ tabırġa tura kilgän. Besäy, kürşelärz̲eñ mögäräptärenä, kelättärenä töşöp, ularz̲ıñ may, ḳaymaḳtarın aşay häm höttären urlap ësä başlaġan.

(10)Berz̲än-ber vaḳıt kürşe ḳatını üz̲eneñ hötön ësep torġan besäyz̲e totop alġan da babayġa alıp barġan, ti.

— Bına, babay, besäyeñ! — tigän ul. — Telähäñ genä ni
ëşlät, tik ul ḳabat mineñ küz̲emä kürenmähen.

Kürşe ḳatındıñ bıl hüz̲z̲ären işetkäs, ḳart ni ëşlärgä lä belmägän. Besäyz̲eñ burlıġı turahında höyläp tä tora-(15)hı yuḳ, tik ḳart unı ülterergä ḳız̲ġanġan. Şunan ul besäyz̲e toḳḳa halıp alġan da urmanġa alıp kitkän.

Ber-ike kön ütkändän huñ ber urman yanındaġı tawz̲a besäyz̲e toġonan sıġarġan.

— Kürşelärgä küp kenä bälä-ḳaza kilterz̲eñ, mineñ yö(20)z̲ömdö ḳız̲arttıñ, oyathız̲! Bına h̲äz̲er, oşonda ḳalıp, üz̲ könöñdö üz̲eñ kür, — tigän dä ḳart ḳaytıp kitkän.

Mes̲ken besäy urmanda ḳalġan. Köndöz̲ besäygä bik küñelhez̲ bulġan, ä tän etkäs, ul bötönläy ḳurḳḳan. H̲atta hırtındaġı yöndäre tırpayıp kitkän. Ḳot os̲ḳos tawış menän mı (25)yawlap ebärgän ul. Tirä-yaġına ḳaray z̲a mıyawlay, ä üz̲eneñ küz̲z̲ärendä yäşel uttar yana, ti. Şulay itep yöröy torġas, uġa ber ḳuyan osraġan.

— Besäy, ḳayz̲a barahıñ? — tip horaġan unan ḳuyan.

— Mmyawu, mmyaw-u! Urmandaġı bötä yänlektärz̲e aşarġa (30)baram,— tip yawap birgän besäy.

Ḳuyan, ḳoto osop, mine lä aşap ḳuymahın tip, yän-farman sabıp kitkän.

Şulay ḳasıp barġanda, ḳuyan tölkögä tap bulġan.

— hiñä ni buldı, dus̲ḳayım? Niz̲än örktöñ? — tip ho(35)raġan tölkö. — Bılay alabarmanlanıp ḳayz̲a sabahıñ, ḳupşı ḳuyan?

(37) — Ana tege tawz̲a ber besäy yöröy. Ul: «Urmandaġı bötä

-111-

(1)yänlektärz̲e totop aşayım», — ti. Min şunan ḳasıp kitep baram...

— tipyawapḳaytarġan ḳuyan.

Bınday ḳurḳınıs h̲äbärz̲e işetkäs, tölkö lä şörläy töşkän.

(5)—Äyz̲ä bergä kittek! — tigän ul, häm ḳuyan menän ikäüläparı sapḳandar.

Oẕaḳ ḳına barġas, ularġa büre osraġan.

— Ḳayẕa barahıġıẕ, duṣ̱ḳayẕar?—tip horaġan büreularẕan.

Ḳuyan menän tölkö:

— Ana tegendä ber ḳurḳınıs besäy yöröy, ul urmandaġı bötä yänlektärẕe aşap bötörörgä teläy, — tip yawap birgändär.

Büre lä bik nıḳ ḳurḳḳan, häm ular artaban bergäläp kitkändär. Aẕaḳ kilep, ularẕıñ ḳarşıhına ayıw kilep sıḳḳan.

— Bılay, aḳ-ḳaranı kürmäy, ḳayẕa ḳabalanıp barahıġıẕ, duṣ̱ḳayẕarım? Ni buldı heẕgä? Artıġıẕẕan hunarsıḳıwıp kiläme ällä?

Ḳuyan, tölkö häm büre ber tawıştan:

— Beẕgä bik uṣ̱al besäyẕän genä ḳasıp ḳotolorġa käräk,—tip yawap ḳaytarġandar.

— Ä ḳayẕa ḳasḳanıbıẕẕı üẕebeẕ ẕäbelmäybeẕ.

— Ul vaḳıtta min dä heẕẕeñ menän baram, — tigän ayıw.

Ular dürtäüläp bik oẕaḳ sapḳandar. Şulay, ḳasıp bara torġas, arıp, ẖäldän tayıp, aġas külägähenä yal itergä tuḳtaġandar.

— İt beşerep, besäyẕe ḳunaḳḳa saḳırhaḳ, yaḳşı bulmaṣ̱mı ikän, duṣ̱tar? — tigän ayıw.

Bıġa bötähe lä riza bulġan. Ayıw it tabıp kiltergän, büre—hıwġa, tölkö utınġa kitkän, ä ḳuyan besäyẕe saḳırıp kilergä bulġan.

Ber aẕ vaḳıt üteügä, ayıw ber ügeẕẕe höyräp kiltergän, büre hıw alıp kilgän, tölkö utın taşıġan häm ular kümäk-läp it beşerergä totonġandar. İt küptän inde beşkän, ä ḳuyan menän besäy haman yuḳ ta yuḳ, ti.

Şul saḳ ular taġı ḳurḳıwġa töşkändär:

— Besäy ḳuyandı aşaġandır ẕa, ẖäẕer beẕẕeñ başıbıẕġaetergä kiläler, — tip uylap, här ḳayhıhı ḳayẕa ette şunda yäşenä başlaġan.

-112-

Ayıw beyek aġas başına menep kitkän, büre, ḳıwaḳ töböndä soḳor ḳaẕıp, şunda töşkän dä öṣ̱tön ḳoyolġan yapraḳtar menän ḳaplaġan, ä tölkö sıtır öyömö aṣ̱tına yäşerengän.

Ḳuyan besäyẕe üẕe täü kürgän urında tapḳan.

Ḳurḳıwınan ḳaltıranıp, ḳuyan besäygä yaḳın barmaġan, tik alıṣ̱tan ġına ḳısḳırġan:

— Ëy! Batır Mırawbay!..

Artıḳ şörlägänlektän ḳuyan başḳa ber hüẕ ẕä äytä al-maġan.

Besäy, ḳuyandıñ tawışın işetkäs, yäşel küẕẕären uġa teklägän dä tup-tura ḳuyanġa taban yügergän.

Ä ḳuyan: «Ul mine aşarġa kiläler!» — tip uylap, ḳurḳıp yıġılġan da ülgän.

Ä besäy arı sabıp kitkän. Şulay saba torġas, ul, tämle it eṣ̱en hiẕep, älege ayıw, büre häm tölkö ḳunaḳ kötkän ergä barıp sıḳḳan.

Besäy beşkän it yanına yügerep kilgän dä ḳomhoẕlanıp aşarġa totonġan. Läkin ayıw alıp ḳaytḳan ügeẕ ḳart bul-ġan, beşep etmägän it bik ḳatı ikän. Besäy ḳatı itte asıwlanıp, mırawlay-mırawlay aşay ikän.

Tölkö, besäyẕän ḳurḳıp, yaḳşıraḳ yäşerenergä uylap, borġolana torġas, sıtırġa ḳoyroġon ḳıṣ̱tırġan.

Besäy, şıtırlawẕı işetep, sısḳandır, tip uylaġan da şunda taşlanġan.

Ä tölkö, us̲al besäy mine öz̲gäläp taşlarġa kilä, tip uylap, eıtır öyömö as̲tınan sıġıp ḳasḳan, h̲atta ḳıs̲ılġan ḳoyroġo öz̲ölöp ḳalġan.

Ä besäy üz̲e tölkönän ḳurḳḳan: ḳıwaḳ töbönä atılġan häm tırnaġın şul erz̲ä yatḳan büreneñ başına batırġan.

Büre: «Ul mine aşarġa teläy!» — tip uylap, yäşerengän urınınan sıġıp ḳasḳan.

Besäy, bürenän ḳurḳıp, tege ayıw ultırġan aġas başına ürmäläp menep kitkän.

Ayıw, ürmäläp menep kilgän besäyz̲e kürep, ḳurḳıwınan görhöldäp ergä ḳolap töşkän.

Ä bıl yänlektärz̲eñ ḳoton alġan besäy, aġas başında ultırġan kileş, üz̲e saḳ tın ala ikän.

Ayıw, büre häm tölkö, aḳ-ḳaranı kürmäy, törlöhö törlö yaḳḳa ḳasıp kitkändär.

-113-

Ber az̲ vaḳıt ütkäs, ular osraşḳandar z̲a tärän yırın töbönä yal itergä ultırġandar. Ayıw tölkö menän bürenän:

— İä, hez̲ nisek tere ḳaldıġız̲? — tip horay, ti.

— Terelegen tere lä ul, tik ḳoyroġomdo ġına besäy öz̲öp alıp ḳaldı şul, — tip yawap ḳaytarġan tölkö.

— Min imen-haw ḳaldım, — tigän büre, — tik bına besäyz̲eñ tırnaġınan saḳ ülmänem: ul mañlay tiremde bötönläy hız̲ırıp aldı.

— Ä hineñ h̲äleñ nisek?

— Ä min tik besäy aġastan ḳolatḳan saḳta ḳabırġalarımdı ġına hındırz̲ım, — tip yawap birgän ayıw.

Ular şulay höyläşkändär z̲ä: «Yaray äle, bez̲ nisek bulha **la** tere ḳaldıḳ, ana, ḳuyan bötönläy kire ḳaytmanı», — tip uylaġandar.

Ä besäy üz̲eneñ z̲ur yänlektärz̲e şul tiklem ḳurḳıtḳanı äsen ularz̲an ḳısḳırıp kölör ine lä, üz̲e lä şörlägäyne şul.

## TAPḲIR ḲIZ̲

### I

Ḳalaġa biş saḳrım erz̲ä, ber awılda, yäşägän, ti, ber ḳart. İgen ikmägän, egä torġan ike ügez̲e, un biş yäştärz̲äge ber ḳız̲ı ġına bulġan bınıñ. Babay kön dä urmandan ber yök ḳoro utın alıp ḳayta ikän dä baz̲arġa iltep hata ikän, şunıñ menän kön kürep tora ikän.

Şulay köndärz̲än ber köndö babay ber yök utın teyäp ḳalaġa bara. Utın baz̲arına barıp kerhä, ḳarşıhına ber bay kilep sıġa bınıñ.

— Babay, utınıñdı hatahıñmı? — ti bay. Babay äytä:

— hatam, — ti.

— Ni h̲aḳ?

— Biş täñkä.

— Tulayım hatahıñmı? Babay äytä:

— Tulayım, — ti.

Bay: «Tulayım hatam», tip ös tapḳır äytterä lä;

— Äyz̲ä, etäklä ügez̲eñde, aḳsa öyz̲ä, — ti.

-114-

(1)Kitälär bılar. Bayz̲ıñ işek aldına barıp kerälär. İşek aldına barıp kergäs, h̲uja ḳapḳanı yabıp ḳuya. Unan öygä kerep biş hum aḳsa alıp sıġa la babayġa birä.

— Babay, ëşeñ böttö, äyz̲ä yüger, — ti. Şulay tip ba-(5)bayz̲ı bäläkäy ḳapḳanan etäkläp sıġarmaḳsı bula.

-115-

(1)Babay:

— Utındı buşatayıḳ, ügez̲z̲e alıp kitäm, — ti. Bay:

— Ügez̲, arba hineke tügel, min tulayım aldım, — ti. (5)Babay:

— Min riza tügel, äyz̲ä ḳazıyġa ', — ti. Kitälär bılar ḳazıyġa.

Barıp kergäs, ḳazıy:

— Ni yomoş menän kildegez̲? — ti. (10)Babay:

— Min bıġa utın hattım, ügez̲z̲e, arbanı birmäy, — ti. Ḳazıy bayġa:

— Niñä birmäyheñ? — ti. Bay:

(15)—Tulayım aldım min, — ti, — ös tapḳır äytterz̲em minunan, — ti.

Ḳazıy babayġa:

— Tulayım hatam, tip ös märtäbä äytteñme? — ti.

— Äyttem şul, — ti babay.

(20)—Ulay bulġas, babay, ġäyep itmä, min ġäz̲el h̲ököm itäm: utınıñ, arbañ, ügez̲eñ — bayz̲ıḳı bula, — ti ḳazıy.

Babay, biş täñkähen totop, ilay-ilay ḳaytıp kitä. Atahınıñ ilap ḳaytıwın ḳız̲ täz̲ränän kürep ḳala la:

— Atay, ni buldı hiñä? — tip ḳarşı sıġa. Öygä inälär (25)bılar. İngäs, ḳız̲ h̲älde horaşa, ä babay äytä:

— Ber bay mine aldanı, utınım, arbam, ügez̲em biş täñkägä kitte, ḳazıy z̲a unıñ hüz̲en dörös̲läne, — ti.

— Atay, ḳayġırma, — ti ḳız̲, — bez̲z̲eñ taġı ber ügez̲ bar bit äle, — ti. — Bögön utın teyäp töş tä irtägähen mi(30)ne alıp barırhıñ, üz̲em hatıwlaşırmın, hin sittäräk tororhoñ, — ti.

II

Babay, ügez̲z̲e egep, urmanġa barıp, ḳoro utın teyäp ḳayta. İrtägähen, ḳız̲ın ultırtıp, baz̲arġa kitä bıl. Utın (35)baz̲arına kergäs, babay sittäräk yöröy. Ḳız̲ yanına tege bay (36)kilep sıġa.

[1] Ḳazıy — h̲ököm iteüse, sud'ya.

-116-

(1)— Ḳız̲ım, utınıñdı hatahıñmı? — ti.

— hatam, h̲aḳı biş täñkä, — ti ḳız̲. Tege:

— Tulayım hatahıñmı? — ti. (5)Ḳız̲:

— Tulayım, tulayım, — ti. Bay:

— Äyẕä öygä, aḳsanı öyẕä birermen, — ti.

Öyönä kitälär. İşek aldına kergäs, bay ḳapḳanı yabala, öygä inep, biş hum aḳsa alıp sıġa. Unan ḳıẕġa:

— Mä! — tip ḳulın huẕa.

Ḳıẕ, bınıñ ḳulın nıġıtıp tota la:

— Bıl aḳsanı ḳulıñ menän birẕeñme? — ti. Tege:

— Ḳulım menän, — ti.

— Ḳulıñ menänme?

— Ḳulım menän.

Ḳıẕ ös märtäbä şulay äytterä. Şunan huñ bay ḳulın tartıp almaḳsı bula, ḳıẕ ebärmäy.

— Ḳulıñ mineke, riza bulmahañ, äyẕä ḳazıyġa, — ti.

Ḳazıyġa baralar bılar etäkläşep. Ḳazıy bılarẕan:

— Ni yomoş menän kildegeẕ? — tip horay.

Ḳıẕ:

— Utın hattım bıġa tulayım, — ti. — Bıl aḳsanı ḳulıñ menän birẕeñme, tip äytkäs, ḳulım menän birẕem, tine.Ös märtäbä äytterẕem. Şulay bulġas, ḳul mineke bulırġateyeşle, ḳazıy äfände.

Ḳazıy bayġa:

— Ḳulım menän birẕem, tip ös märtäbä äytteñme? — ti.

— Äyttem, — ti bay.

— Ulay bulġas, ḳulıñ bıl ḳıẕẕıḳı, ẖäẕer töbönän kiṣäm dä alıp biräm. Ḳulıñdı ḳıẕġanhañ, meñ täñkä aḳsa sıġarıp hal, — ti ḳazıy.

Bay meñ täñkä aḳsanı öṣtälgä sıġarıp hala, ġärip bulıp ḳalġıhı kilmäy.

-117-

## BORSAḲ ÖṢTÖNDÄGE PRİNTSESSA

*G. H̱. Andersen*

yäşägän, ti, ber prints. Uġa äylänergä vaḳıt etkän. Ul üẕenä käläş itep tik printsessanı, tik tegendäy-bındayẕı tügel, ä bına tigän ıp-ısın printsessanı ġına alırġa telägän.

Ul bötä er yöẕön äylänep sıḳḳan, şulay ẕa üẕenä käläş taba almaġan. Printsessalar küp bulġan da ul, läkin ḳayẕan beläheñ, ular ıp-ısın printsessalarmı, ällä tügelme?

Şulay itep, beẕẕeñ prints öyönä buş ḳul menän ḳaytḳan da ḳayġıra başlaġan: unıñ ıp-ısın printsessaġa öylängehe kilgän şul.

Ber zaman, kis bulġas, ḳatı dawıl kütärelgän. Yäşen yäşnägän, kük kükrägän häm künäkläp yamġır ḳoya başlaġan.

Ḳapıl ġına kemder ḳapḳa şaḳıġan, ḳart korol’ asırġa sıḳḳan.

Ḳapḳa aldında printsessa basıp tora ikän. Unıñ ḳiäfäten genä kürhägeẕ ine! hıw unıñ sästärenän küldägenä, küldägenän tufliẕarına yılġa bulıp aġa, ti. Bisaraḳay şul tiklem eüeşlängän bula, äyterheñ, unı ẖäẕer genä yılġanan tartıp sıġarġandar.

Şulay ẕa ul üẕen, min ıp-ısın printsessa, tip ışandıra ikän.

«Şulaymı, tügelme, beẕ unıhın kürerbeẕ», tip uylaġan koroleva, läkin ber kemgä ber hüẕ äytmägän. Ul yoḳo bülmähenä barıp, karawattan tüşäktärẕe häm mendärẕärẕe bötönläy alıp taşlaġan da ḳoro taḳta öṣtönä ber börtök borsaḳ halġan. Unan huñ borsaḳ

börtögön egerme tüşäk häm taġı gaga tigän ḳoştoñ mamıġınan yahalġan egerme yurġan menän (30)ḳaplaġan.

Bına şul urınġa printsessanı yoḳlarġa halġandar.

İrtänsäk unan: «Yaḳşı yoḳlanıñmı?» — tip horaġandar.

— Aẖ, bik nasar! — tigän printsessa. — Min tönö buyı küẕ ẕä yoma almanım! Alla belhen, nindäy urın buldı bıl! (35)Yomro taş öşs̱töndä yatam töşs̱lö toyoldo miñä, ä ẖäẕer mineñ bötä tänem kügärgän. Aẖ, min bik tä, bik tä nasar yoḳlanım!

Şunda unıñ ıp-ısın printsessa ikänlegenä här kem ışan(38)ġan.

-118-

(1)Bit ul egerme tüşäk häm egerme mamıḳ yurġan aşa la bäläkäs kenä borsaḳ börtögön toyġan! Tik ıp-ısın printsessanıñ ġına şul tiklem naẕlı bula alıwı mömkin.

häm prints uġa öylängän.

(5)Ä borsaḳ börtögön hiräk osrawsı äyberẕär haḳlana torġan urınġa iltkändär. Beräy keşe almaġan bulha, ul haman da şunda yatalır äle.

Ëye, bına nindäy ẖäldär ẕä bula don'yala!

**DYuYMOBOЧKA**

(10)*G. H̱. Andersen*

Yäşägän, ti, ber ḳatın, tik unıñ ber ẕä balaları bulmaġan. Ä ul keskenä genä balahı bulıwın bik teläy ikän. Bına ul siẖırsı ḳarsıḳ yanına barġan da:

— Min ḳıẕım bulıwın bik telär inem, — tigän. — hin (15)äytmäs̱heñme, ḳayẕan alırġa ikän miñä unı?

— Niñä äytmäs̱kä? — tip yawap birgän siẖırsı ḳarsıḳ. Bına hiñä ber börtök arpa. Bıl arpa bas̱ıwẕa üs̱kän, tawıḳtarġa aşata torġan arpa hımaḳ yabay arpa tügel, hin unı göl hawıtına ultırt, huñınan ni bulġanın üẕeñ kürerheñ.

(20)—Räẖmät hiñä! — tigän ḳatın häm siẖırsı ḳarsıḳḳa yartışar tinlek un ike aḳsa birgän.

Şunan huñ ul öyönä ḳaytḳan da arpanı göl hawıtına ultırtıp ḳuyġan. Ul unı ultırtıwı bulġan, arpa şunda uḳ habaḳ ta ebärgän. Ä habaḳtan tyul'pan hımaḳ ẕur matur (25)säskä üs̱ep sıḳḳan. Ämmä säskäneñ tajdarı, säskä atmaġan börö keüek, ber-berehenä hılaşıp toralar ikän.

— Nindäy güzäl säskä! — tigän ḳatın häm matur sıbartaj yapraḳtarın übep alġan.

Ul säskä tajdarın übeüe bulġan, börölä nimäler şart-(30)laġan da, säskä asılıp ta kitkän. Säskäneñ yäşel emeşlege ös̱töndä ber ḳıẕıḳay ultıra ikän. Ul bik bäläkäy, barı tik ber dyuym [1] oẕonloġonda ġına bulġan. Şulay itep, uġa Dyuymovoçka tip isem birgändär. Ästrẖan sätläüegeneñ ḳabıġı uġa säñgeldäk, zäñgär miläüşälär—tüşäk, ä rozanıñ taj (35)yapraġı yurġan bulġan. Töndä ul ḳabıḳta yoḳlaġan, ä köndör (36)ös̱täl ös̱töndä uynaġan. Ḳatın ös̱tälgä tärilkä menän hıw

[1] Dyunm — oẕonloḳ ülsäü berämege — 25 millimetr samahı.

-119-

ḳuyġan, ä tärilkä sitenä säskälär halġan, säskälärz̲eñ oz̲on habaḳtarı hıwz̲a ḳoyonġandar. Keskenä Dyuymovoçka öş̲ön hıwlı tärilkä üz̲e ber kül bulġan, häm ul şul kül buylap tyul'pandıñ taj säskähe yaprağında kämälä yörögän keüek yöz̲öp yöröy ikän. İşkäktär urınına unıñ ike ap-aḳ at

-120-

ḳılı bulġan. Dyuymovoçka üz̲eneñ matur kämähendä köndär buyı yöz̲öp yörögän, tärilkäneñ ber sitenän ikense sitenä yöz̲öp sıḳḳan da yırz̲ar yırlaġan. Unıñ tawışı keüek näfis tawıştı ber ḳasan da, ber kemdeñ dä işetkäne yuḳ ikän. Ber vaḳıt tändä, Dyuymovoçka üz̲eneñ säñgeldägendä yoḳlap yatḳanda, asıḳ täz̲ränän äygä bik z̲ur ber göbörlä baḳa kilep ingän, ul eüeş häm bik äşäke bulġan. Tup-tura öş̲tälgä hikerep töşkän dä ḳabıḳ ësenä, rozanıñ taj säskähe, yapraḳtarı aş̲tında Dyuymovoçka yoḳlap yatḳan ergä ḳaraġan.

—Bına bıl mineñ ulıḳayıma yaḳşı käläş bulır! —tigän göbörlä baḳa.

Ul ḳız̲ yoḳlaġan sätläüek ḳabığın ëläkterep alġan da täz̲rä aşa baḳsaġa hikerep töşkän.

Baḳsa aşa yılġa aġa ikän, ä unıñ yar buyında haz̲lıḳ bulġan. Bına şunda, haz̲ külägähendä, ḳart göbörlä baḳa üz̲eneñ ulı menän yäşägän. Ulı la eüeş häm bik äşäke — näḳ üz̲eneñ äsähe, ḳart göbörlä baḳa keüek bulġan.

Sätläüek ësendäge keskenä ḳız̲ıḳayz̲ı kürgäs:

— Baḳ, baḳ, baḳ, baḳ! — tip kenä äytä alġan ul.

—Tawışlanma hin! Uyatırhıñ da, unan ul bez̲z̲än ḳasıp kiter, — tigän ḳart göbörlä baḳa. — Ul bit aḳḳoş mamığınan da eñel. Yılġanıñ iñ urtahına, tomboyoḳtoñ kiñ yaprağına ultırtayıḳ äle unı — bınday bäläkäs ösön ul üz̲e ber utraw. Unan inde ul ber nisek tä ḳasa almaş̲. Ä min şul vaḳıt ësendä hez̲z̲eñ ösön külägälä yıynaḳ ḳına oya yaharmın.

yılġala tomboyoḳtar bik küp üş̲ä ikän; ularz̲ıñ kiñ yäşel yapraḳtarı hıwz̲a yöz̲öp yöröyz̲är. Yñ z̲ur yapraḳ yarz̲an başḳalarġa ḳaraġanda alış̲taraḳ bula. Göbörlä baḳa şul yapraḳ yanına yöz̲öp kilä lä ḳız̲ tınıs ḳına yoḳlap yatḳan sätläüek ḳabığın şunıñ öş̲tönä ḳuya.

İrtä menän irtük Dyuymovoçka uyana häm ḳapıl ġına üz̲eneñ tomboyoḳ yaprağı öş̲töndä ikänen kürä; ḳayz̲a ġına ḳaramahın, tirä-yaḳ hıw, ä yar alış̲tan äz̲ genä kürenep tora ikän. Dyuymovoçka bik ḳurḳa häm ilap ebärä.

Ä ḳart göbörlä baḳa, külägälä ultırıp, üz̲ öyön ḳamış, harı tomboyoḳtar menän biz̲äy — unıñ yäş kilengä bik yarağıhı kilä. Bötähe lä äz̲er bulġas, Dyuymovoçkanıñ karawa-tın alıp yoḳo bülmähenä ḳuyıw ösön, göbörlä baḳa üz̲eneñ äşäke malayı menän Dyuymovoçka ultırġan yapraḳ ërgähenä

-121-

yöẕöp kilä. Ḳart göbörlö baḳa, hıwẕa ḳıẕ aldına èyelep, bılay, ti:

— Bına mineñ ulım! Ul hineñ keyäüeñ bulır, beẕẕä külägälä heẕ unıñ menän bik yaḳşı yäşärhegeẕ.

—Baḳ, baḳ, baḳs-ba-baḳs, — tip kenä äytä ala ulı.

Göbörlö baḳalar ḳabıḳtı alalar ẕa yöẕöp kitälär, ä Dyuymovoçka yäşel yapraḳ öṣtöndä ber üẕe ḳala häm äsenep-äsenep ilay — unıñ äşäke göbörlö baḳa yanında ber ẕä torġoho häm unıñ eränges ulına keyäügä sıḳḳıhı kilmäy.

hıw aṣtında yöẕöp yörögän bäläkäy genä balıḳtar ulı menän göbörlö baḳanı kürälär häm unıñ Dyuymovoçka turahında höylägändären işetälär.

Ular keskäy kilende küreü ösön hıwẕan baştarın sıġaralar. Balıḳtar, Dyuymovoçkanı küreü menän, şunday sibär ḳıẕġa göbörlö baḳalar menän tororġa tura kilä inde, tip, unı bik ḳıẕġanalar. Bıġa yul ḳuyırġa yaramay! Bötä yılġa balıḳtarı Dyuymovoçka ultırġan tomboyoḳ yapraġı yanına yöẕöp kilälär ẕä yapraḳtıñ habaġın säynäp öẕälär.

Tomboyoḳtoñ yapraġı aġım menän aġıp kitä. Aġım köslö bula häm ḳıẕ ultırġan yapraḳ bik şäp aġa. Ḫäẕer göbörlä baḳa Dyuymovoçkanı ber nisek tä ḳıwıp etä almayasaḳ.

Ä Dyuymovoçka haman da alıṣḳaraḳ aġa, ḳıwaḳtarẕa ultırġan keskenä genä ḳoşsoḳtar uġa ḳarap hayrayẕar:

— Nindäy güzäl ostoḳ ḳına ḳıẕıḳay!

Matur aḳ kübäläk här vaḳıt Dyuymovoçka tirähendä pırıldap osop yöröy häm bına ul yapraḳḳa osop töşä — keskenä ḳıẕıḳay uġa bik oḳşaġan ikän. Şunda Dyuymovoçka üẕeneñ bilbawın sisep, ber oson kübäläkkä taşlay, ä ikensehen üẕeneñ yapraġına bäyläp ḳuya, yapraḳ taġı la şäberäk aġa başlay.

Ḳapıl ġına may ḳuñıẕı osop uẕa. Dyuymovoçkanı kürep ḳala la unı äläkterep tä ala häm aġasḳa barıp ḳuna. Ä yäşel tomboyoḳ yapraġı arı aġıp kitä, unıñ menän bergä kübäläk tä aġa: ul bit bäylänep ḳuyılġan bula, şuġa kürä ısḳına almay.

Ḳuñıẕ üẕen äläkterep, aġas başına osop kitkäs, meṣken Dyuymovoçka bik ḳurḳa. Läkin may ḳuñıẕınıñ iṣe kitmäy,, ul aġas başına, yuġarıġa menep ultıra, Dyuymovoçkanı tämle säskä hutı menän hıylay ẕa uġa: «hin may ḳuñıẕı keüek ük bulmahañ da, miñä bik oḳşayhıñ», — ti.

-122-

Ularga şul aġasta yäşäüse başḳa ḳuñıẕẕar ḳunaḳḳa kilälär. Ular Dyuymovoçkanı başınan ayaġına tiklem tikşerep ḳarayẕar, ä ḳuñıẕ ḳıẕẕarı härmägestären. hikertep ḳuyalar. — Unıñ ayaġı ikäü genä! — tiẕär ḳayhı beräüẕäre.

—Unıñ härmägestäre lä yuḳ! — tiẕär ikenseläre.

—Ul nindäy näẕek! Ul bötönläy keşe tügel! — tiẕär ösönsöläre.

Nihäyät, bötä ḳuñıẕẕar: «Ul bik yämheẕ!» — tigän fekergä kilälär.

Şunda Dyuymovoçkanı alıp kilgän may ḳuñıẕına la Dyuymovoçka bik yämheẕ bulıp kürenä başlay, häm ul unı üẕendä başḳa totmaṣḳa bula—telägän erenä kithen äyẕä. Ḳuñıẕ Dyuymovoçka menän ergä osop töşä lä unı aḳ säskägä ultırtıp ḳuya.

Dyuymovoçka säskälä ilap ultıra: üẕeneñ yämheẕ bulıwına ul bik ġärlänä. Ḫatta may ḳuñıẕẕarı la unı ḳıwıp ebärẕelär bit.

Dyuymovoçka bötä yäyẕe urmanda ber yañġıẕı ütkärä. Ul(20)üländän üẕenä säñgeldäk ürä lä şul säñgeldäkte, yamġır eüeşlätmähen ösön, ẕur ber tegänäk yapraġı as̲tına ëlep ḳuya. Tämle säskä balı aşay häm ısıḳ hıwı ësä, ısıḳ hıwın ul irtä menän yapraḳtarẕan taba.

Şulay itep, yäy ütä, köẕ ẕä uẕıp kitä. halḳın oẕon ḳış (25)yaḳınlaşa. Bötä ḳoştar ẕa kitälär, säskälär şiñä, ä as̲tında Dyuymovoçka yäşägän ẕur tegänäk harġayıp ḳoroy häm torba şikelle bögärlänä.

Dyuymovoçka halḳından ḳaltırana: unıñ küldäge yırtılıp, tetelep bötä, ul şunday keskenä genä, näfis kenä bu-(30)la — nisek tuñmahın?! Ḳar yawa başlay, ä beẕẕeñ ösön ber köräk ḳar nisek küp bulha, Dyuymovoçka ösön ber ḳar börtögö şul tiklem bula. Beẕ bit ẕur, ä unıñ buyı ni barı ber dyuym ġına. Dyuymovoçka ḳoroġan yapraḳḳa törönöp ḳaray, läkin ul bötönläy yılıtmay ikän, häm Dyuymovoçka üẕe lä (35)köẕgö yapraḳ keüek dereldäy.

Şunda inde Dyuymovoçka urmandan kitep, üẕenä ḳışlıḳ ösön urın ëẕläp ḳararġa bula.

Dyuymovoçka yäşägän urman artında ẕur bas̲ıw yäyelep (39)yata. Bas̲ıwẕaġı aşlıḳtı küptän inde yıyıp alġandar häm

-123-

(1)tik ḳoroġan ḳıs̲ḳa ḳamıldar ġına erẕän tırpayıp toralar ikän.

Bas̲ıwẕa urmanġa ḳaraġanda la hıwıġıraḳ bula häm mes̲kenkäy bötönläy tuña. Bına Dyuymovoçka ḳır sısḳanı öñö (5)yanına kilä; öñgä inä torġan yul ḳoroġan habaḳtar menän ḳaplanġan. Ḳır sısḳanı yılıla bay ġına yäşäy: unıñ keläte aşlıḳ menän şıġırım tulġan. Dyuymovoçka, ẖäyerse ḳıẕ şikelle, işek yanında tuḳtap ḳala häm üẕenä arpa börtögö bireüẕären horay — ike kön inde ul ber nämä lä aşamaġan (10)bula.

— İẖ, mes̲kenkäyem! — ti ḳır sısḳanı (ul bik yaḳşıküñelle ḳarsıḳ bula). — İä, kil yaḳınıraḳ, yılın da mineñ menän bergä aşa!

Dyuymovoçka oyaġa töşä, yılına häm tamaġın tuyẕıra. (15)Ḳarsıḳḳa ḳıẕ bik oḳşay, häm ul uġa bılay ti:

— Mindä ḳal ḳıs̲ḳa. Min hine tuyẕırırmın, ä hin mineñ öyömdö yaḳşılap yıyıştırırhıñ häm miñä äkiättärhöylärheñ — min äkiättärẕe bik yaratam.

Bına Dyuymovoçka ḳart sısḳan ḳuşḳan bötä ëştärẕe ëş-(20)läy başlay. Sısḳandıñ yılı öñöndä ul bik yaḳşı yäşäy.

— Oẕaḳlamay beẕgä ḳunaḳtar kiläsäk, — ti ber vaḳıtḳır sısḳanı. — Aẕnaġa ber tapḳır mineñ ërgämä kürşemkilep kitä. Ul bik bay häm miñä ḳaraġanda küp tapḳır yaḳşı tora. Unıñ er as̲tında ẕur öyö bar, häm ul matur ḳara(25)ẖätfä tun keyep yöröy. Sıḳ hin uġa keyäügä, ḳıẕıḳay! Unıñmenän inde hin ẖur bulmas̲hıñ. Tik şunıhı nasar, ul tomahuḳır, hine kürä almas̲. Yaray, unıñ ḳarawı, hin uġa üẕeñ belgän iñ yaḳşı äkiättäreñde höylärheñ.

Läkin Dyuymovoçkanıñ kürşegä ber ẕä keyäügä sıḳḳıhı (30)kilmäy — ul kürşe bit huḳır sısḳan bula.

Oẕaḳ ta ütmäy, huḳır sısḳan, ısınlap ta, ḳır sısḳanına ḳunaḳḳa kilä. Ul şunday ẕur, ġalim häm bay; unıñ tunı ẖätfänän häm bik matur bula.

huḳır sısḳandıñ öyö ḳır sısḳanınıḳına ḳaraġanda (35)egerme tapḳır ẕur bula. Unda

bik küp ẕur bülmälär häm oẕon-oẕon koridorẕar bula. Läkin ḳoyaş ber vaḳıtta la uġa ḳaramay, huḳır sısḳan ḳoyaştı ber ẕä yaratmay, ä säskälärẕe kürergä lä telämäy — ul bit ularẕı ber ḳasan da kürgäne bulmaġan.

Dyuymovoçkanı bıl ḳunaḳ ösön yırlatalar, ul ike yır

-124-

yırlay, häm şul tiklem matur yırlay, huḳır sısḳan şunda uḳ unı yarata başlay. Läkin ber hüẕ ẕä äytmäy — şunday däräjäle häm olo keşe bula inde ul.

Şunan huñ huḳır sısḳan üẕ öyönän alıp ḳır sısḳanınıñ oyahına tiklem er as̱tınan oẕon yul ḳaẕıy häm ḳır sısḳanı menän Dyuymovoçkanı oşo er as̱tı yulı buylap yörörgä saḳıra.

huḳır sısḳan awıẕına sörök utı ala, ḳarañġıla sörök utı şäm keüek yaḳtırta häm oẕon kiñ koridorẕı yaḳtırtıp aldan bara. Yartı yulda huḳır sısḳan tuḳtay ẕa bılay ti:

— Bında nindäyẕer ḳoş yata. Läkin heẕ unan ḳurḳmaġıẕ, ul ülgän.

Şunda huḳır sısḳan üẕeneñ kiñ morono menän tübälä tişek tişä lä er as̱tı yulına kön yaḳtıhı ütep inä, häm Dyuy-movoçka ülgän ḳarluġastı kürä. Bıl ḳanatlı, suḳışlı ısın ḳoş bula, ul küptän tügel, ḳış başında ġına ülgän häm huḳır sısḳan oyahına ḳolap töşkän bulha käräk.

Ülgän ḳoşsoḳtoñ ḳanattarı tänenä nıḳ yäbeşkän, ayaḳtarı häm başı mamıḳ ësenä yäşerengän. Mes̱ken ḳarluġas hıwıḳtan ülgänder inde. Dyuymovoçka unı bik ḳıẕġana, ul ḳoştarẕı bik yarata — ḳoştar bit uġa yäy buyı üẕẕäreneñ yırẕarın yırlanılar. Läkin huḳır sısḳan ḳarluġasḳa üẕeneñ ḳısḳa täpäyẕäre menän törtä lä bılay ti:

— Ḫäẕer inde bik sır-sıw kilä almas̱hıñ! Ëye, bına oşonday ḳoşsoḳ bulıp tıwırġa yaẕmahın! Ul barı şul sı-rıldawın ġına belä, ä ḳış ethä — nimä ëşläy ala huñ ul? halḳından häm aslıḳtan ülergä genä ḳala. Bına mineñ balalarıma ḳıştan ḳurḳırġa tura kilmäs̱.

— Ëye, ëye! — ti ḳır sısḳanı.

—Ul sırıldawẕan nindäy fayẕa bar huñ? İır menän tamaḳ tuyẕırıp bulmay, ḳış könö sırıldaw menän yılına almas̱hıñ.

Ä Dyuymovoçka öndäşmäy, läkin huḳır sısḳan menän ḳır -sısḳanı bıl ḳoşḳa arḳaları menän äylängäs, Dyuymovoçka ḳarluġas yanına ëyelä lä ḳawırhındarın hıpırıp, unıñ yomoḳ küẕẕärenän übä.

«Bälki yäy könö şunday matur itep sırıldaġan ḳarluġas şul üẕeler,—tip uylay ḳıẕ. — Ni tiklem şatlıḳ kiltergeñ hin miñä, yaġımlı ḳoşsoḳ».

Unan huñ huḳır sısḳan tübäläge tişekte tomalay ẕa ḳar-

-125-

sıḳ sısḳan menän Dyuymovoçkanı öyẕärenä oẕatıp ḳuya.'Töndä Dyuymovoçka yoḳlay almay. Ul urınınan tora, ḳoroġan habaḳtarẕan ẕur balas̱ ürä lä er as̱tı yulına barıp, ülgän ḳoşsoḳto balas̱ menän yabıp ḳuya. Unan huñ Dyuymovoçka sısḳandıñ öñönän kürenep torġan yomşaḳ mükte alıp kilä lä, ülgän ḳoşsoḳḳa yatırġa yaylıraḳ

bulhın ösön, şunan bäläkäy genä urın äẕerläy.

— Bäẖil bul, höykömlö ḳarluġas! — ti Dyuymovoçka. —Bäẖil bul! Yäy könö, aġastar äle yäşel bulġanda, ä ḳoyaşşunday yaḳşı yılıtḳanda, miñä şunday küñelle itep sırıldawıñ ösön räẖmät hiñä! — häm ul başın ḳoşsoḳtoñ kükrägenä ḳuya la ḳapıl ḳurḳıp kitä: ul ḳarluġastıñ kükrägendä nimäneñder tibeüen hiẕä. Bıl — ḳoşsoḳtoñ yöräge tibä başlay ikän — ul bötönläy ülmägän, ä tik hıwıḳtan ḳatıp ḳına ḳalġan bula. Ä ẖäẕer yılınġas, ul terelä.

Dyuymovoçka ḳurḳıwınan ḳaltıray — şunday bäläkäs ḳıẕ menän sağıştırġanda ḳoş bit ḳot osḳos ẕur nämä bula inde. Läkin şulay ẕa Dyuymovoçka añın yıya, ḳarluġastı balaş menän nıġıraḳ yaba, ä unan huñ yügerep ḳayta la üẕe yabınıp yoḳlay torġan bötnök yaprağı menän ḳarluġastıñ başın ḳaplay.

İkense töndö Dyuymovoçka tağı äkren genä ḳarluġas yanına kilä. Ḳarluġas inde bötönläy terelgän, läkin äle bik ẖälheẕ bula, ḳıẕġa ḳaraw ösön ul küẕẕären kös-ẖäl menän genä asa. Dyuymovoçka unıñ aldında sörök utı kis̱äge totop tora— unıñ başḳa fonarı bulmay.

— Räẖmät hiñä, höykömlö keskenäkäy! — ti awırıw ḳarluġas. — Min şunday yaḳşı yılındım! Tiẕẕän min bötönläy terelep etermen häm yañınan ḳoyaşḳa osop sığırmın.

—Aẖ, — ti Dyuymovoçka, — ẖäẕer şunday halḳın, ḳar yawa! Üẕeñdeñ yılı urınıñda ḳalhañ, yaḳşıraḳ bulır, ä min hine ḳararmın.

Dyuymovoçka, säskäneñ taj yapraḳtarına halıp, ḳarluġasḳa hıw häm ber nisä arpa börtögö kilterä. Ḳarluġas aşap-ësep ala la ḳıẕġa üẕeneñ nisek itep ḳara ḳıwaḳḳa huġılıp, ḳanatın imgäteüen häm başḳa ḳarluġastar mbnän bergä yılı yaḳtarġa kitä almay ḳalıwın höyläp birä. Ḳış bula, bik hıwıta, häm ul ergä yıġılıp töşä. Ḳarluġas başḳa ber ni ẕä is̱lämäy häm bında, er as̱tına, nisek kilep ëlägeüen dä belmäy.

-126-

Ḳarluġas bötä ḳıştı er as̱tında ütkärä, ä Dyuymovoçka unı tärbiäläy.

huḳır sısḳan da, ḳır sısḳanı la bıl turala ber nämä lä hiẕmäyẕär. Ular bit ḳoştarẕı bötönläy yaratmayẕar.

Yaẕ etep, ḳoyaş yılıta başlaġas, ḳarluġas osop kitä alhın ösön, Dyuymovoçka tübäläge huḳır sısḳan tişkän tişekte asa.

Ḳarluġas ḳıẕẕan: «Mineñ menän bergä osop kitäheñ kilmäyme? — tip horay. — Ultır äyẕä mineñ arḳama, häm beẕ yäşel urmanġa osorboẕ», — ti. Läkin Dyuymovoçka ḳart ḳır sısḳanın ḳıẕġana — üẕenän başḳa ḳarsıḳḳa bik küñelheẕ bulasağın belä ul.

— Yuḳ, min hineñ menän osop kitä almayım, — ti ḳıẕ ḳarluġasḳa.

— haw bul, haw bul, höykömlö ḳıẕıḳay! — tip sırılday ẕa ḳarluġas irkenlekkä osop sıġa.

Dyuymovoçka ḳoşsoḳtoñ kitkän yulına ḳaray häm unıñ küẕẕärenän yäş tägäräp töşä — bik yarata şul ul ḳoşsoḳto.

— Sır, sır, sır! —tip ḳısḳıra la ḳarluġas yäşel urmanġa kitep yuġala.

Ä Dyuymovoçka sısḳan oyahında ḳala. H̱äẕer ul bik nasar yäşäy. Ḳoyaşḳa sığırġa uġa bötönläy röẖsät itmäyẕär, ä ḳır sısḳanınıñ oyahı tirähendäge bas̱ıw beyek yıwan başaḳtar menän ḳaplana, häm ul Dyuymovoçkaġa ḳuyı urman keüek kürenä.

Bına ber vaḳıt ḳart huḳır sısḳan kilä lä Dyuymovoçkanı yawsılay.

— Yä, ẖäẕer hiñä birnä äẕerlärgä käräk, — ti ḳarsıḳsısḳan, — hin olo äfändegä keyäügä sıġahıñ, häm hineñ bötä(30)äybereñ dä eterlek bulırġa teyeş.

häm Dyuymovoçkaġa köndär buyı ep iläp ultırırġa tura kilä.

Ḳart sısḳan dürt ürmäksene yallay häm ular könö-tönö sısḳan oyahında törlö-törlö tuḳımalar tuḳıp ultıralar.

(35)Ä yıwan huḳır sısḳan här kiste ḳunaḳḳa kilä lä, tiẕẕän yäy üter, ḳoyaş erẕe ḳıẕẕırıwẕan tuḳtar häm er yañınan yomşarıp, köpşäklänep ḳalır, tip höylänep ultıra. Bına şunda inde ular tuy ütkärerẕär.Läkin Dyuymovoçka haman boyo-ġa häm ilay: unıñ ber ẕä yıwan huḳır sısḳanġa keyäügä sı (40)ġahı kilmäy.

-127-

(1)här irtä, ḳoyaş sıḳḳanda, häm här kis, ḳoyaş bayıġanda, Dyuymovoçka sısḳan öñönöñ aldına sıġa; ḳayhı saḳta el başaḳtarẕıñ ostarın ber yaḳḳa ëtä, häm uġa zäñgär kükteñ ber kis̱äge genä kürenep ḳala.

(5)«Nindäy yaḳtı, nindäy räẖät bında, irkendä», — tip uylay Dyuymovoçka häm här vaḳıt ḳarluġastı is̱enä töşörä; unıñ ḳoşsoḳto bik kürähe kilä, läkin ḳarluġas ber erẕä lä kürenmäy: ul alıs̱ta-alıs̱ta, yäşel urmanda osa ine bulha käräk.

(10)Bına köẕ etä. Dyuymovoçkanıñ birnähe äẕer bula.

— Dürt aẕnanan huñ hineñ tuyıñ!—ti Dyuymovoçkaġa ḳır sısḳanı. Läkin Dyuymovoçka ilap ebärä häm ës boşorġos huḳır sısḳanġa keyäügä sıġahı kilmäüen äytä.

— Yülärlek!—ti ḳarsıḳ-sısḳan.— Kirelänmä, yuġihä (15)min hine üẕemdeñ oslo teştärem menän teşläp alırmın. Ni ëşlägän hiñä huḳır sısḳan ir bulmas̱ḳa? Korol' ḳatınınıñ da unıḳı şikelle ḳara ẖätfä tunı yuḳ äle. Unan huñ, unıñ mögäräptäre lä buş tügel. Şunday keyäü ösön allaġa räẖmät äyt!

(20)Nihäyät, tuy könö kilep etä, häm huḳır sısḳan üẕeneñ käläşen alırġa kilä. Ḫäẕer inde Dyuymovoçkaġa huḳır sısḳan oyahına küsergä, tärän er as̱tında yäşärgä tura kiler, häm ber ḳasan da inde ul ḳoyaştı kürmäs̱ — huḳır sısḳan ber nisek tä uġa oyanan sıġıp yörörgä yul ḳuymayasaḳ. Ä mes̱ken (25)Dyuymovoçkaġa yaḳtı ḳoyaş menän mäñgegä hawbullaşıw şul tiklem awır bula, häm Dyuymovoçka huñġı tapḳır ḳoyaşḳa ḳaraw ösön tışḳa sıġa.

İgende inde bas̱ıwẕan yıyıp alġan bulalar, erẕän ëlekkesä tik ḳoroġan, başaḳhıẕ habaḳtar ġına sıġıp tora. Ḳıẕ (30)sısḳan oyahınan sitkäräk kitä lä ḳoyaşḳa taban ḳuldarın huẕa:

— Bäẖil bul, ḳoyaş, bäẖil bul!

Unan huñ ul keskenä genä ḳıẕıl säskäne kürä, unı ḳosaḳlay ẕa bılay ti:-

(35)—Ägär ẕä höykömlö ḳarluġastı kürhäñ, minän säläm tapşır hin uġa, säskäkäy!

Ḳapıl ġına unıñ baş osonda «Sır, sır, sır!» — tigän tawış yañġırap kitä.

Dyuymovoçka kütärelep ḳaray häm osop barıwsı ḳarlu- (40)ġastı kürä. Ḳarluġas ta ḳıẕẕı kürep ala häm bik şatlana,

-128-

ä Dyuymovoçka ilap ebärä lä ḳarluġasḳa üẕeneñ nisek yıwan huḳır sısḳanġa keyäügä sıġahı kilmäüen häm unıñ menän ber ḳasan da ḳoyaş töşmäy torġan tärän er as̱tında yäşärgä telämäüen höyläp birä.

—H̱äẕer inde halḳın ḳış kilä, — ti ḳarluġas, — hämmin yılı yaḳtarġa, alıs̱-alıs̱ḳa osam. Teläyheñme mineñ menän osorġa? Ultır mineñ arḳama, läkin üẕeñde bilbaw menännıḳ itep bäylä häm beẕ hineñ menän möẖäbbätheẕ huḳır sıs ḳan yanınan alıs̱ḳa, zäñgär diñgeẕ artına, ḳoyaş ḳıẕıwırak urınġa, gel yäy bulıp torġan häm güzäl säskälär üs̱känergä osop kiterbeẕ. Osayıḳ mineñ menän, höykömlö keskenäkäy! hin bit yaġımlı keskenäkäy! Min ḳarañġı, halḳın soḳorẕa tuñġan saḳta hin bit mineñ ġümeremde haḳlap ḳaldıñ.

—Ëye, ëye, min osam hineñ menän! — ti Dyuymovoçka.

Ul ḳarluġastıñ arḳahına ultıra, ayaḳtarın ḳoştoñ ḳoy. roġona huẕa la üẕen iñ ẕur ḳawırhınġa bilbaw menän bäyläp ḳuya.

Ḳarluġas kükkä uḳ şikelle kütärelä lä ḳarañġı urmandar, zäñgär diñgeẕẕär häm ḳar menän ḳaplanġan beyek,tawẕar öştönön osop kitä. Bında bik hıwıḳ bula, ä Dyuymovoçka ḳarluġastıñ ḳara ḳawırhındarı arahına inep yäşerenä lä üẕẕäre osḳan matur urındar menän hoḳlanıp barıw öson başın ġına sıġara. Bına yılı yaḳtarġa la kilep etälär! Bında ḳoyaş küpkä yaḳtıraḳ balḳıy, hawa beẕẕägegä ḳaraġanda ike ÖLÖŞ yuġarıraḳ bula, ä kanawẕar häm kärtälär yanında is̱ kitkes güzäl yäşel vinograd üs̱ä. Urmandarẕa limondar häm äflisundar beşä, mirta häm ẖuş es̱le bötnök es̱täre añḳıy, ä yuldarẕa şat şüñelle balalar yügereşälär häm ẕur sıbar kübäläktärẕe awlayẕar. Läkin ḳarluġas haman alıs̱-ḳaraḳ osa birä.

Bik matur zäñgär kül buyında, yäşel böẕrä aġastar urtahında, boronġo aḳ märmär haray tora. Unıñ beyek kolonnaların vinograd ḳıwaḳtarı solġap alġan, ä yuġarıla, tübä as̱tında, ḳoştar oya ḳoralar. Bına şul oyalarẕıñ berehendä yäşäy inde ḳarluġas

— Bına mineñ öyöm!—ti ḳarluġas. — Ä hin as̱ta üẕeñäiñ matur säskäne haylap al, min hine şunda ultırtırmın,häm hin bik yaḳşı yäşärheñ.

-129-

Dyuymovoçka bik şatlana, ẖatta säpäkäy sabıp ebärä.

As̱ta aḳ märmär kis̱äktäre yata: ber kolonnanıñ oso emerelep töşkän dä ös kis̱äkkä bülengän, märmär kis̱äktäre arahında ëre, aḳ säskälär üs̱ep sıḳḳan. Ḳarluġas töş̱ä lä ḳıẕẕı kiñ taj yapraġına ultırta. Läkin, bına ġäjäp ẖäl! Säskäneñ urtahında keskenä genä ap-aḳ, bıyala keüek ütä kürenmäle ber keşe ultıra. Unıñ ḳulbaştarında eñel ḳanattar helkenep tora, ä başında keskenä genä taj emelday. Buyġa ul beẕẕeñ Dyuymovoçkanan ẕur tügel. Ul ël’ftar korole bula.

Ḳarluġas säskä yanına osop kilgäs, ël’f bötönläy ḳurḳıp ḳala, ul şunday keskenä genä, ä ḳarluġas şunday ẕur! Läkin Dyuymovoçkanı kürgäs, ul bik şatlana — bınday sibär ḳıẕẕı äle unıñ ber ḳasan da kürgäne bulmay. Ul uġa baş ëyä lä isemen horay.

— Dyuymovoçka, — tip yawap birä ḳıẕ.

— Güzäl Dyuymovoçka, — ti Ël’f, — mineñ ḳatınım bulırġa telämäyheñme?

Dyuymovoçka şunda uḳ riza bula.

Şunda säskälärz̲än ël’ftar osop sıġalar häm Dyuymovoçkaġa büläktär kilterälär. İñ yaḳşı büläk siñertkäneke hımaḳ ütä kürenmäle ḳanat bula. Ularz̲ı Dyuymovoçkanıñ arḳahına bäyläp ḳuyalar, häm ul da h̲äz̲er säskänän säskägä osop yöröy ala. Şatlıḳ häm küñel asıwz̲ar is̲ kitkes şäp bula!

Ä ḳarluġas yuġarıla, üz̲eneñ oyahında, ultıra häm, sır-sır kilep, belgänensä hayrarġa tırışa.

Ḳarluġas ël’ftarġa ḳış buyı küñelle itep sırılday, ä halḳın ildärgä yaz̲ kilgäs,ul tıwġan ilenä äz̲erlänä başlay.

— haw bul, haw bul! — tip sırılday z̲a ḳarluġas yılıyaḳtarz̲an yañınan Daniyaġa osa.

Unda matur itep äkiättär höyläy belä torġan keşeneñ täz̲rähe ös̲töndä genä ḳarluġastıñ keskenä genä oyahı bula. Ḳarluġas şul keşegä Dyuymovoçka turahında höyläy, ä unan bıl h̲älde bez̲ z̲ä beldek.

-130-

## ÖS AYIU

L. Tolstoŭ

Berz̲än-ber köndö bäläkäy genä ber ḳız̲ıḳay urmanġa kitkän, ti. Urmanda yöröy torġas, bıl ḳız̲ıḳay az̲aşḳan,ḳay-tırġa yul z̲läy başlaġan, ti. Şunan urmandaġı yañġız̲ ber öygä barıp sıḳḳan, ti.

Öyz̲öñ işege şar asıḳ: ḳız̲ıḳay işektän ḳaraha, öy ësendä ber kem dä yuḳ, ti. Ḳız̲ öygä ingän. Bıl öyz̲ä ös ayıw yäşäy ikän. Bılarz̲ıñ berehe olo ayıw, unıñ iseme Mih̲aylo İvanıç, ti. Ul z̲ur, yalbır ayıw, ti. İkensehe inä ayıw bulġan, unıhı — bäläkäyeräk, iseme Nastas’ya Petrovna, ti.Ösönsöhö—ularz̲ıñ balahı bulġan, unıhınıñ iseme Mişutka ikän. Ayıwz̲ar berehe lä öyz̲ä yuḳ, ular urmanġa kitkän, ti.

Öyz̲öñ ike bülmähe bar ikän: berehe aşaw bülmähe, ikensehe yoḳo bülmähe, ti. Ḳız̲ıḳay täüz̲ä aşaw bülmähenä inä häm ös̲täldä es tus̲taḳ kürä. Tus̲taḳtarġa aş ḳoyolġan bula. Berensehe bik z̲ur tus̲taḳ — unıhı Mih̲aylo İvanıçtıḳı, ikensehe bäläkäyeräk tus̲taḳ — unıhı Nastas’ya Petrovnanıḳı; ösönsöhö zäñgär tus̲taḳ — unıhı Mişutkanıḳı. här tus̲taḳ yanında berär ḳalaḳ yata: berehe z̲ur, ikensehe bäläkäyeräk, ösönsöhö bäläkäy genä, ti.

Ḳız̲ıḳay täüz̲ä, iñ z̲ur ḳalaḳtı alıp, z̲ur tus̲taḳtaġı aştı tämläp ḳaray. Unan huñ, bäläkäyeräk ḳalaḳtı alıp, bäläkäyeräk tus̲taḳtaġı aştı awız̲ itä. Az̲aḳtan ul keskäy ḳalaḳtı alıp, zäñgär tus̲taḳtaġı aştı aşap ḳaraġan. Mişutkanıñ tus̲taġındaġı aş uġa bik tämle toyolġan.

Ḳız̲ıḳayz̲ıñ ultırġıhı kilgän.Ḳaraha, ös̲täl yanında ös ultırġıs tora. Berehe z̲ur, unıhı — Mih̲aylo İvanıçtıḳı; ikensehe bäläkäyeräk, unıhı — Nastas’ya Petrovnanı-ḳı; ösönsöhö bik bäläkäy, unıhına zäñgär mendär halınġan, bınıhı Mişutkanıñ ultırġısı ikän. Ḳız̲ıḳay başta z̲ur ultırġısḳa menep ultırġan, unan yıġılıp töşkän. Unan huñ bäläkäseräk ultırġısḳa ultırıp ḳaraġan, unıhı la ultırıw ösön yayhız̲ bulġan. Ah̲ır siktä ul iñ bäläkäy ultırġısḳa menep ultırġan. Bında ultırıw bik yäple toyolġan. Ḳız̲ıḳay şatlanıp, kölöp ebärgän. Ul zäñgär tus̲taḳtı alıp tubıġına ḳuyġan da aşarġa totonġan. Aştı bötönläy aşap bötkäs, ultırġısḳa ultırġan köyö bäüelä başlaġan.

-131-

(1)Ultırġıs vatılġan, ä ḳıẕıḳay iẕängä şatır-şotor yıġılıp töşkän.

Ul torop ultırġıstı kütärep ultırtḳan da ikense bülmägä ingän.

(5)Unda ös karawat tora ikän. Berehe ẕur, unıhı Miẖaylo İvanıçtıḳı. İkensehe bäläkäyeräk karawat, unıhı Nas-tas'ya Petrovnanıḳı. Ösönsöhö, iñ bäläkäy karawat, Mişut-kanıḳı bulġan. Ḳıẕıḳay başta ẕur karawatḳa yatıp ḳaray. Ul bik kiñ bula, unıhın oḳşatmay. Unan bäläkäserägenä (10)yatıp ḳaray, unıhı bik beyek bula. Şunan ul keskäy karawatḳa yatıp ḳaray, bınıhı unıñ buyına taman ġına bula. Ḳıẕıḳay şunda uḳ yoḳlap ta kitä.

Ayıwẕar asıġıp ḳaytıp inälär ẕä aşarġa ultıralar.

Ẕur ayıw üẕeneñ tuşṯaġın alıp ḳaraġas, yaman tawış me-(15)nän ükerep ebärgän:

— Mineñ tuşṯaḳtaġı aştı kem aşap ḳaraġan?!

Nastas'ya Petrovna la üẕeneñ tuşṯaġın ḳaray ẕa näẕege-
räk tawış menän:

— Mineñ tuşṯaḳtaġı aştı kem aşap ḳaraġan?!—tip(20)mıjıġan.

Ä Mişutka üẕeneñ buş tuşṯaġın kürgän dä näẕek kenä. tawış menän:

— Mineñ tuşṯaḳtaġı aştı kem aşap bötkän? — tip sıyıldaġan.

(25)Miẖaylo İvanıç üẕeneñ ultırġısın kürep, taġı yaman tawış menän ükerep ebärgän:

— Mineñ ultırġısḳa kem ultırġan, unı urınınan kem ḳuẕġatḳan?

Nastas'ya Petrovna üẕeneñ ultırġısına küẕ töşörgäs, (30)näẕegeräk tawış menän:

— Mineñ ultırġısta kem ultırġan, unı urınınan kem ḳuẕġatḳan? — tip ḳabatlaġan.

Mişutka üẕeneñ vatıḳ ultırġısın kürep:

—Mineñ ultırġısıma kem ultırġan, unı kem emergän?—(35)tip sıyıldap ḳısḳırġan bula ikän.

Ayıwẕar ösöhö lä yoḳo bülmähenä ingändär. Miẖaylo İvanıç uṯal
itep ükerep ebärgän:

— Mineñ urınġa kem yatḳan, unı kem bolartḳan?!

(39)Nastas'ya Petrovna näẕegeräk tawış menän:

-132-

(1)—Mineñ urınġa kem yatḳan, unı kem bolartḳan?! — tipḳısḳıra ikän.

Ä Mişutka, bäläkäs kenä şirlekkä başıp, karawatına mengän dä näẕek kenä tawışı menän ḳapıl äse itep ḳısḳı-(5)rıp ebärgän:

— Mineñ urınıma kem yatḳan?!

Şul arala ayıw balahı karawatta yoḳlap yatḳan ḳıẕıḳayẕı kürep ḳalġan da taġı la äseräk tawış menän sıyıl(10)darġa totonġan:

-133-

(1) — Bına ul! Tot, tot!

— Bına ul! Bına ul! A-y-y-y! Tot!

Ayıw balahı ḳız̲ıḳayz̲ı teşläp almaḳsı bula. Ḳız̲ıḳay tawışḳa küz̲en asıp ebärhä, ërgähendä ös ayıwz̲ı kürep ḳal- (5)ġan. Şunan bıl ḳız̲ıḳay hikerep torġan da täz̲ränän sıġıp» ta ḳasḳan. Ayıwz̲ar, ni h̯ätle yügerep ḳarahalar z̲a, unı ḳı-(7)uıp etä almaġandar.

**ORİJİNAL METİN “MASALLAR” :**

# ӘКИӘТТӘР



ӨФӨ
«КИТАП»
1992



-3-

(1) I класс

## БҮРЕ МЕНӘН КӘЗӘ

(Башҡорт халыҡ әкиәте[54])

Борон-борон заманда, ҡалын ҡара урманда йәшәгән, ти, бер ҡомһоҙ ас бүре. Ул бик яуыз булған. Яҡын-тирәләге (5) ауылдарға һис тә тынғы бирмәгән: йәй булһа, көпә-көндөҙ көтөүгә барып, һарыҡтарҙы күтәреп алып киткән. Ә ҡышын, төш һайын бер аҙбарға төшөп, һарыҡ, кәзәне ҡырған. Уның ҡомһоҙлоғо

[54] Башҡорт халыҡ әкиәттәре артабан айырып күрһәтелмәне.

шул тиклемгә еткән, хатта ул, бер һарыҡты тотоп ашау менән генә ҡәнәғәтләнмәй, аҙбарҙағы бөтә һарыҡты тамаҡлап сыға торған булған. Ауыл кешеләре, күҫәктәр күтәреп, күп тапҡырҙар уны ҡыуырға сыҡҡандар. Ләкин һис тә ҡыуып етеп, һуғып үлтерә алмағандар.

Шулай үткән бүренең йәш сағы. Бына ҡартлыҡ килеп еткән. Күҙҙәре лә насар күрә, аяҡтары ла әкрен йүгерә башлаған. Шуның менән бергә йөрәктәге элекке ҡыйыулыҡ та юғала барған. Хәҙер инде ул көпә-көндөҙ көтөүселәр алдынан һарыҡтар күтәреп китеү ғәҙәтен ташлаған. Ауылға ла бик һуң, таң алдынан, кешеләрҙең иң ҡаты йоҡоға киткән саҡтарында ғына бара башлаған. Шулай ҙа күп ваҡытта табышһыҙ ҡайтырға мәжбүр булған. Әллә бүре үҙе ҡурҡаҡҡа әйләнгән, әллә инде кешеләр уяуланғандар, уға һис тә һарыҡ ите ашарға тура килмәй башлаған. Аслыҡтан бүренең эсе эскә йәбешкән, күҙҙәре төпкә батҡан, йөндәре ҡойолоп, ялбырап ҡалған. Шулай ҙа ул, элекке ғәҙәтенсә, һәр төн һайын берәр һимеҙ һарыҡ тотоп ашау ниәте менән ауылға килгән.

Әбей менән бабай
Ғыр-ғыр йоҡлай,
Яндарында бер бәпес
Һикереп төшөп уйнай.
Аҙбарҙағы биш кәзә
Мырт-мырт көйшәй.

-4-

Һарайҙағы сыбар тай
Сыр-сыр кешнәй.
Соландағы ялбыр көсөк
Ләүек-ләүек өрә.
Биш кәзәнең береһен
Ашарға ине миңә!..—

тип йырлай-йырлай барған ул. Ләкин аҙбарҙың һалам түбәһен тишеп, эскә төшәм генә тигәндә, биш кәзә бер юлы баҡыра башлаған, сыбар тай кешнәп ебәргән, ялбыр көсөк өрөргә тотонған. Хужа, йоҡоһонан уянып, суҡмар күтәреп, бүрене ҡыуырға сыҡҡан. Ә ҡартайған, ҡурҡҡан ас бүрегә йәһәтерәк урманға ҡасыуҙан башҡа бер ни ҙә ҡалмаған.

— Тамаҡ әсән башыңды һәләк итеп ҡуйыуың бар. Бынан һуң ауылға бармайым, ҡуяндар япраҡ ашап көн күрәләр бит. Мин дә шулай итермен, — тип йыуата ул үҙ-үҙен. Ләкин көн һайын ҡан эсеп өйрәнгән йыртҡыс ҡан эсмәй түҙәме ни? Бүре киләһе төндө көскә генә көтөп еткергән. Таң етеү менән, тағы йырлай-йырлай ауылға китеп барған.

Әбей менән бабай
Ғыр-ғыр йоҡлай,
Аҙбарҙағы сыбар тай
Сыр-сыр кешнәй.

Яндарында бер бәпес
һикереп төшөп уйнай.
(20)Арандағы биш кәзә
Мырт-мырт көйшәй,
Соландағы ялбыр көсөк
Ләүек-ләүек өрә.
Биш кәзәнең береһен
Ашарға ине миңә...

Ләкин был юлы ла шулай ҡыуылып ҡайта.

— Былай астан үлеп, әрәм булыуың мөмкин, — тип уйлай башлаған бүре һәм ниндәй ҙә булһа берәй йәнлек тотоп ашау **(25)** уйы менән урман ҡыҙырырға сығып киткән. Шул саҡта ул бер бейек тау башына — ҡая ташҡа барып менгән. Ә ул ҡая таш өҫтөндәге кескәй генә бер өйҙә үҙенең биш бәрәсе менән бер кәзә ҡырҙа йәшәй икән. Бүре өйгә яҡын бер таш артына барып боҫҡан. Ә кәзә уны күрмәгән. Балаларына ишекте ныҡ (30) бикләп ултырырға, бер кемгә лә асмаҫҡа ҡушҡан да, ғәҙәтенсә, ҡырға, үлән ашап, һөт йыйып ҡайтырға сығып киткән.

— Әһә, — тигән ас бүре тештәрен шығырлатып, — хәҙер барам да хәйлә менән ишектәрен астырам. Ә унан һуң инде, рәхәтләнеп, бәрәс ите менән һыйланырға ғына ҡала...

Кәзә китеп, бер аҙ ваҡыт үткәс тә, ул өй янына килгән (35)һәм, ишекте бик ҡаты шаҡылдатып, ҡалын, йәмһеҙ тауыш менән ҡысҡырған:

(37) — Балаҡайҙарым, ишек асығыҙ, мин ҡайттым!..

**-5-**

(1)—Беҙҙең әсәй улай һөйләшмәй, — тигәндәр бәрәстәр. Ишекте асмағандар. Бүре аптырап ҡалған.

Нисек һөйләшә икән һуң ул?

Ул, ишекте астырыуға берәй хәйлә уйлап сығарыр әсен, (5)тағы баяғы таш артына барып ятҡан. Бер аҙҙан ул, ниҙер иҫенә төшкәндәй, ҡапыл һикереп торған да тағы өй янына килгән, һәм, ишекте әкрен генә шаҡылдатып, нәҙек кенә тауыш менән ҡысҡырған:

— Балаҡайҙарым, ишекте асығыҙ, мин ҡайттым!

— (10)Беҙҙең әсәй улай һөйләшмәй, — тигәндәр бәрәстәр. Ишекте асмағандар.

Бүре тағы ла аптырап ҡалған. «Яңы хәйлә табып булмаҫ-мы икән?» — тип уйлана-уйлана тағы таш артына барып ятҡан. Ҡарт бүре, баш ватып, төрлө хәйләләр уйлап ята торғас, (15)тағы ниҙер иҫенә төшөп, ҡыуанысынан олоп ебәргән.

— Инде минең тештәрҙән һеҙгә ҡотолоу юҡ, — тип уйлаған ул, кинәнеп. Өйҙөң ишеге төбөнә еткәс, бик килештерергә тырышып, бер-ике тапҡыр кәзә булып мыҡырлап ебәргән:

— Мә-ә-ә! Мәә-ә-ә! Балаҡайҙарым, ишек асығыҙ! Мин (20)ҡайттым...

— Беҙҙең әсәй улай һөйләшмәй, — тигәндәр бәрәстәр, тағы ла ишекте асмағандар.

Инде бөтөнләй аптырауға ҡалған бүре, бүтән хәйлә табыуҙан өмөт өҙөп, яңынан баяғы таш артына барып боҫҡан. (25)Шунда ятып, кәзәнең ҡайтыуын көтөргә, уның нисек итеп ишек астырыуын белергә уйлаған.

Бына бер ваҡыт ашап туйып, елендәрен һөт менән тултырып, төшкөлөккә балаларын ашатыу әсен, кәзә ҡайтып килгән. Ул, өй тупһаһына баҫып, күңелле итеп йырлап ебәргән:

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин йыйҙым.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин йыйҙым.

һөтлөгәндән һөт алдым,
Балтырғандан бал алдым,
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!

Бәрәстәр, йүгереп килеп, ишекте асып ебәргәндәр. Кәзә һикереп өйгә ингән. Ул балаларын һөйә-һөйә имеҙеп туйҙырған да, ишекте бер кемгә лә асмаҫҡа ҡушып, тағы ҡырға киткән.

— Әһә, булды, хәҙер ишекте нисек астырырға белдем, — тигән бүре, ҡыуанып.

**-6-**

Кәзә китеп бер аҙ торғас та, ул ишек төбөнә килгән дә тап кәзә кеүек йырлап ебәргән:

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин йыйҙым.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин йыйҙым.

һөтлөгәндән һөт алдым,
Балтырғандан бал алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!..

Бәрәстәр, әсәләре ҡайтҡан икән тип, ҡыуанышып, йүгереп килеп, ишекте асып ебәргәндәр. Шул саҡ ишек төбөндә тештәре ыржайған, йөндәре ҡабарып торған бүрене күреп, ҡот-тары осоп, тырым-тыраҡай ҡасып бөткәндәр. Ҡайһыһы мейес аҫтына йәшеренгән. Ләкин яуыз бүре уларҙы, берәм-берәм табып, боттарынан һөйрәп сығарып, ашап бөтөргән. Тик мейес аҫтына ҡасҡан иң кескәй бәрәсте генә таба алмаған ул. Ашап туйғас, бүре сығып киткән. Күп тә үтмәй, күңелле итеп йырлай-йырлай, кәзә ҡайтып килгән.

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин йыйҙым.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин йыйҙым.

һөтлөгәндән һөт алдым,
Балтырғандан бал алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!..

Ләкин уға инде бер кем дә ишек асмаған. Бер кем дә уй-нап-һикереп ҡаршы алмаған. Ул ишекте үҙе асып ингән дә илай-илай балаларын эҙләй башлаған. Мейес аҫтына йәшенгән кескәй бәрәс, әсәһен бүре тип белеп, бик оҙаҡ өндәшмәй торған. Ахырҙа, үҙ әсәһе икәненә тамам ышанғас ҡына, аҡы-рып илап, мейес аҫтынан килеп сыҡҡан.

— Бүре килде, әсәй, апайҙарымды ашап кнтте...

— Бүре?! Ах, ер йотҡоро!.. Ҡайҙан килеп сыҡҡан ул?!

— Эйе, әсәй, бүре...

— Ниңә һуң, балаҡайым, уға астығыҙ, ниңә әсәйегеҙҙең ҡушҡанын тыңламанығыҙ!..

— Ул һин булып инде шул, әсәй... Ул ниндәй ҡурҡыныс, ниндәй уҫал!.. Әсәй, мин ҡурҡам, мине йәшер...

Кәзә яңғыҙ балаһын ҡосаҡлаған да, урындыҡҡа ултырып, бик оҙаҡ илаған. Унан һуң был яуыз бүренән үс алыу әсән юлдар эҙләй башлаған.

— Туҡта, балаҡайым, иламайыҡ, — тигән ул бәрәсенә. — һин ошонда ултырып тор. Ә мин бынау ишек төбөндәге ике

иҙәнде асайым да баҙҙағы ҙур мискәгә һыу тултырайым. Ә иҙәнһеҙ урынды кейеҙ менән ҡаплап ҡуйырбыҙ. Унан һуң мин ҡырға киткән булырмын да өй артындағы ҡарағай артына йәшеренермен. Ҡомһоҙ бүре, һине ашайым тип, шунда уҡ килеп етер. һин уға ишек асырһың да йәһәт кенә артҡа, урындыҡ өҫтөнә һикерерһең, ул, һине тотам, тип ырғып, ошо кейеҙ өҫтөнә баҫыр ҙа, йығылып төшөп, мискәләге һыуға батыр. Шулай итеп, беҙ унан үс алырбыҙ.

–Юҡ, әсәй, мин ҡурҡам. Бүрегә ишек асмайым, — тип илаған бәрәс.

– Улай булғас, һинең бер ғәйепһеҙ апайҙарыңды ашаған яуыз бүрене яҙаһыҙ ҡалдырабыҙмы ни?! — тип асыуланған әсәһе.

«Ысынлап та, яуыз бүренән һис шикһеҙ үс алырға кәрәк», — тип уйлаған бәрәс һәм әсәһененең кәңәшенә күнгән. Ҡурҡмаҫҡа булған.

Бына бер ваҡыт кәзә баҙҙағы ҙур мискәгә һыу ташый башлаған. Мискәне мөлдөрәмә итеп тултырғас, иҙәндең асыҡ урынын кейеҙ менән ҡаплаған да үҙе, ҡырға киткән булып, өй артындағы ҡарағай артына йәшенгән, Ә теге бүре шунда уҡ килеп еткән һәм, тупһаға баҫып, кәзә булып йырлап ебәргән.

Бәләкәс бәрәс ишекте асҡан да, әсәһе өйрәткәнсә, артҡа, урындыҡ өҫтөнө һикергән. Бүре лә уның артынан ырғыған. Ләкин, урындыҡҡа етә алмай, тап кейеҙ өҫтөнә тура килеп, иҙән аҫтына төшөп киткән дә мискәләге һыуға сумған. Шул саҡ кәзә лә йәшенгән урынынан сығып, йүгереп ҡайтып ингән. Ә бүре ҡысҡыра-ҡысҡыра бата башлаған. Сөнки мискә бик тәрән, ситтәре йәбешеп сыҡҡыһыҙ шыуғалаҡ булған. Шуның өҫтәүенә, мискәләге һыу, тап йылғаның өйрөлмәкле тәрән ере шикелле, бүрене өйрөлтөп төпкә һөйрәй, йөҙөргә һис тә ирек бирмәй икән. -

— Ай, һыу билемдән булды, муйыныма етте. Инде ҡола ғымдан булды. Батып үләм... Кәзәкәйем, мине ҡотҡарып ҡына алһаңсы!.. Бынан һуң һинең үҙеңә лә, балаларыңа ла, хатта кәзә нәҫеленең береһенә лә теймәҫ инем. Дуҫ булыр инек, — тип ялынған бүре кәзәгә. Ә үҙе эстән: «Их, әгәр был һыу эсе нән тартып ҡына сығарһа, мин уны хәҙер үк өҙөп-йолҡоп ашап ташлар инем», — тип уйлаған.

Кәзә, әлбиттә, уның ялбарыуын ҡолағына ла элмәгән.

— Минең алма кеүек балаларымды ашап, мине ҡан илат-

Ҡанда рәхәт инеме?! Әйҙә, тонсоҡ, батып үл, был һиңә иң ғәҙел яза, — тигән.

Шулай итеп, ҡомһоҙ яуыз бүре, кәзәгә ялынып олой-олой батып үлгән.

Бынан һуң кәзә үҙенең кескәй бәрәсе менән ҡая таш өҫтөндәге бәләкәй өйөндә иркенләп, рәхәтләнеп йәшәй башлаған. Хәҙер инде уларҙы бер нәмә лә ҡурҡытмаған. Улар әле ошо көндә лә һаман шулай, таштан ташҡа һикереп, ҡырҙан ҡырға йүгереп, уйнап-көлөп, ғүмер итәләр, ти. Ҡара урман эсендәге ҡая таштар араһында кәзәнең күңелле йыры әле булһа яңғырап тора, ти.

## ҠУЯН МЕНӘН ТӘЛМӘРЙЕН

*(Рус халыҡ әкиәте)*

Көндәрҙән бер көндө ҡуян ҡайғыға төшкән: «Нисек кенә йәшәргә икән һуң был донъяла?- Берәү ҙә минән ҡурҡмай, берәү ҙә минән ҡасмай, барыһы ла мине ҡыйырһытыуҙарын ғына беләләр», — ти икән.

Уйлаған-уйлаған да ул ҡайғынан батып үлмәксе булған. Йылға ярына киткән.

Яр ситенә килһә, унда ҡарт тәлмәрйен йылынып ултыра икән. Бының килгәнен ишеткәс, ул суп итеп һыуға сумған.

Ҡуяндың эсенә йылы йүгергән инде, бик ҡыуанған был.

— Әһә! Минән дә ҡурҡыусы бар икән әле! — тигән ул һәм батмай ҡалған.

## АҠҺАҠ ӨЙРӘК

*(Украин халыҡ әкиәте)*

Борон заманда, йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Уларҙың бер балалары ла булмаған, ти.
Бер көн бабай:

-Киттек, әбей, урманға бәшмәк йыйырға! — тигән. Киткәндәр былар. Әбей шунда уҡ бер ҡыуаҡ төбөндә бер оя күргән, ә ояла өйрәк ултыра икән.

— Ҡара әле, ҡарт, өйрәк! — тигән ул.

-Өйгә алып ҡайтайыҡ, беҙҙә йәшәр, — тигән бабай.

Күтәреп ҡараһалар, бер тәпәйе имгәнгән.

Әкрен генә ояһы менән күтәреп алғандар ҙа өйҙәренә алып ҡайтҡандар. Өйрәкте өйҙә ҡалдырғандар, ә үҙҙәре яңынан бәшмәк йыйырға киткәндәр.

Кисен өйгә ҡайтһалар, ғәжәп хәл. Өй йыйыштырылған,, икмәк бешерелгән һәм кәбеҫтәнән аш бешерелеп ҡуйылған.

Улар күршеләренән:

— Өйҙө кем йыйыштырҙы, икмәкте, ашты кем бешерҙе икән? — тип һорағандар.

Бер кем дә белмәгән.

Икенсе көндө бабай яңынан, әбейен эйәртеп, бәшмәк йыйырға киткән. Кис менән әйләнеп ҡайтһалар, тағы ла бөтәһе лә йыйыштырылған, икмәк тә, аш та бешерелгән, әҙер.

Күршеләренән һорағандар.

Бер күрше ҡатыны:

— Бер ҡыҙҙың һыу алып килгәнен күрҙем. Шундай һөй көмлө ҡыҙ ине, тик аҙыраҡ аҡһай ине, — тигән.

Бабай менән әбей бик оҙаҡ уйланғандар:

— Кем булыр икән?

Әбей әйткән:

— Өйҙә, бәшмәк йыйырға барабыҙ тибеҙ ҙә, үҙебеҙ йәше ренәбеҙ. Кемдең хужа булып йөрөгәнен, исмаһам, күрербеҙ, — тигән.

һәм шулай эшләгәндәр ҙә. Бына улар өйҙән биҙрә-көйәнтә аҫҡан бер ҡыҙ сығыуын күрәләр. Шундай матур ҡыҙ, тик бер аҙ аҡһай икән. Ул ҡоҙоҡҡа киткәс тә, әбей менән бабай өйгә ингәндәр. Ҡараһалар, ояла өйрәк юҡ, тик ҡауырһындар ғына ята. Ояны алғандар ҙа мейескә ырғытҡандар. Ул шунда янып бөткән.

Ҡыҙ һыуҙы алып ҡайтҡан, әбей менән бабайҙы күреү менән, ояға ташланған. Ә оя юҡ. Ҡыҙ илап ебәргән.

Бабай менән әбей:

— Илама, ҡәҙерлем, беҙҙең ҡыҙыбыҙ, ғәзиз балабыҙ булырһың! — тип уны йыуатырға тырышҡандар.

-Әгәр мине күҙәтмәгән, оямды утҡа яҡмаған булһағыҙ,: ғүмер буйына һеҙҙә йәшәр инем, — тигән ҡыҙ. — Хәҙер теләмәйем инде! Бабай, миңә ҡолға менән орсоҡ яһап бирсәле, — тигән.

Бабай менән әбей илай-илай уны үҙҙәрендә ҡалырға күн дермәксе булғандар.

-Юҡ, — тигән ҡыҙ, — миңә ышанманығыҙ, артымдан ҡарап йөрөнөгөҙ, һеҙҙән китәм.

Бабай ҡыҙға ҡолға менән орсоҡ яһап биргән. Ҡыҙ ишек алдына ултырған да еп иләргә керешкән. Бына бер төркөм өйрәк осоп бара икән. Улар ҡыҙҙы күргәндәр ҙә ҡысҡырғандар;

Бына беҙҙең, ҡыҙыбыҙ,
Бына зифа буйыбыҙ!
Өй янында ултыра,
Гел беҙгә ҡарап тора,
Орсоғо зыр-зыр әйләнә,
Ҡолғаһы шырт-шырт килә,
Берәр ҡауырһын ташлайыҡ,
Осһон ул беҙҙең менән.

Ҡыҙ уларға яуап биргән:

Юҡ, осмайым һеҙҙең менән,
Туғанлыҡта булғанда,
Аяғымды имгәттем,
һеҙ мине ташланығыҙ,
һеҙ мине ҡалдырҙығыҙ!

Өйрәктәр уға берәр ҡауырһын ташлағандар ҙа юлдарын дауам иткәндәр. Икенсе өйрәк көтөүе осоп килә икән. Ҡыҙҙы күргәндәр ҙә ҡысҡырғандар:

Бына беҙҙең ҡыҙыбыҙ,
Бына зифа буйыбыҙ!
Өй янында ултыра,
Гел беҙгә ҡарап тора.
Орсоғо зыр-зыр әйләнә,
Ҡолғаһы шырт-шырт килә,
Берәр ҡауырһын ташлайыҡ,
Осһон ул беҙҙең менән!

Ә ҡыҙ яуабында:

Юҡ, осмайым һеҙҙең менән,
Туғанлыҡта булғанда,
Аяғымды имгәттем.
һеҙ мине ташланығыҙ,
һеҙ мине ҡалдырҙығыҙ!.

Былары ла берәр ҡауырһын ташлағандар. Өсөнсө төркөм бара икән. Ҡыҙҙы күреп, йырлап та ебәргәндәр:

Быna беҙҙең ҡыҙыбыҙ,
Бына зифа буйыбыҙ!
Өй янында ултыра,
Гел генә ҡарап тора.
Орсоғо зыр-зыр әйләнә,
Ҡолғаһы шырт-шырт килә.
Берәр ҡауырһын ташлайыҡ,
Осһон ул беҙҙең менән!

Былар берәр ҡауырһын ташлағандар. Ҡыҙ өйрәккә әйлән-гән дә осоп та киткән.

## ӘТӘС БАТША

Элекке заманда бер тауыҡ кетәгендә йәшәгән икән, ти, бер әтәс.

Был әтәс ишек алдында, түшен ҡабартып, яҡ-яғына ҡараң-ҡырап, эре генә атлап йөрөргә ярата икән, ти. Бер көндө шулай ҡуҡырайып йөрөгән-йөрөгән дә бер бейек ҡойма башына менеп баҫҡан, ти, ул.

—Ки-ки-рикүк! Ки-ки-рикүк! Мин — шаһ-әтәс, батша әтәс, мин — хан-әтәс, солтан-әтәс! — тип ҡысҡыра башлаған, ти. — Сибәркәйҙәрем, һөйөклө ҡарабикәләрем, сыбарбикәләрем, аҡбикәләрем! Әйтегеҙсе, донъяла матурҙарҙан матур кем матур, батырҙарҙан батыр кем батыр?

Шул тирәлә йөрөгән тауыҡтар: ҡарабикәләр, сыбарбикә-ләр, аҡбикәләр йүгерә-йүгерә йыйылдылар, ти, бының янына. Йыйылдылар ҙа ти, төрлө яҡтан йырлай ҙа башланылар, ти.

— Ҡайҙа инде, ҡайҙа инде беҙҙең бөйөк ханыбыҙ менән тиң булыу. Ҡайҙа инде, ҡайҙа инде ул беҙҙең маҡтаулы шаһыбыҙ, һөйөклө батшабыҙ менән тиңләшерҙәй кеше? Юҡ, юҡ, юҡ, юҡ, инде ул, ханыбыҙ, солтаныбыҙ, һинән аҡыллы ла, һинән матур ҙа, һинән батыр ҙа юҡ инде был донъяла!

Әтәс тағы ла көслөрәк итеп:

— Ки-ки-рикүк! Ки-ки-рикүк! — тип ҡысҡырҙы ла, ти, тағы һораны, ти, быларҙан:

-Арыҫлан тауышынан да көслөрәк тауыш тағы кемдә

(1)бар? Кемдең аяғы ҡеүәтлерәк тә, кемдең кейеме зиннәтлерәк?

— Кемдең булһын, һинең кейемең зиннәтлерәк, падишаһыбыҙ, һинең аяҡтарың тимерҙән дә нығыраҡ, солтаныбыҙ,(5)һинең тауышың арыҫлан тауышынан да ғәйрәтлерәк, ҡеүәтлеханыбыҙ, — тип йырлаштылар, ти, тауыҡтар.

Әтәс маһайыуынан шартларға етте, ти. Шунан һуң кикреген тағы ла юғарыраҡ өйөп ебәрҙе лә, ти:

— Ки-ки-ри-күк! Ки-ки-ри-күк! Ҡарағыҙ әле, ҡатындар,(10)донъяла кемдең тәхете бейегерәк тә, кемдең башындағы тажы затлыраҡ? — тип һораған, ти.

Тауыҡтар йүгерә-йүгерә бейек ҡойманың янына уҡ килделәр ҙә, ти, ҡуҡырайып ултырған әтәскә баштарын эйеп:

— Тәхеттәрҙән бейек һинең тәхетең бейек, таждарҙан зат(15)лы һинең тажың затлы! һин бит беҙҙең берҙән-бер шаһыбыҙ,һин бит беҙҙең берҙән-бер падишаһыбыҙ! — тип әйттеләр, ти.

Шул арала әйҙән йыуан ашнаҡсы сығып, аяҡ остарына ғына баҫып, ҡойма янына килде лә әтәсте эләктереп тә алды, ти.

(20)Бына бәлә! Бына ҡайғы!

Ашнаҡсы, биленән бысағын алып, бөйөк шаһтың башын сабып өҙҙө лә, ти, маҡтаулы хандың зиннәтле кейемдәрен йолҡҡолап ташлап, еңелмәҫ солтандың итенән тәмле һурпа бешерҙе, ти.

(25)Ә кешеләр ашайҙар-ашайҙар икән дә, ашты маҡтап:

— Ай-һай, тәмле икән был әтәс! Ай-һай, һимеҙ икән быләтәс! — тип әйтәләр икән, ти.

## БИКБАТЫР ҺӘМ БИКҠУРҠАҠ

*А. Алиш*

(30)Бер баланың ап-аҡ ҡуяны менән бик матур бесәйе булған. Улар үҙ-ара бик татыу йәшәгәндәр. Ҡуян кетер-кетер итеп ҡабыҡ кимергән, бесәй сыпыр-сыпыр итеп һөт эскән.

Бесәй бер нәмәнән дә ҡурҡмай икән, уға бала Бикбатыр тип исем ҡушҡан, ҡуян дер-дер килеп бөтә нәмәнән дә шөр-(35)ләй, ҡурҡа икән. Уны бала Бикҡурҡаҡ тип атаған.

Бикҡурҡаҡ бер көндө стенала ҡот осҡос нәмә күргән: (37)ҡолаҡтары бик оҙон, мыйыҡтары һелкенеп тора, үҙе килеп

-13-

торап килбәтһеҙ икән. Ҡурҡыуынан ҡуян ни эшләргә белмәгән, баҫҡан урынынан ҡуҙғала алмаған. Ярай әле Бикбатыр килеп еткән һәм Бикҡурҡаҡҡа аҙмы-күпме көс ингән. «Эй аҡылһыҙ, йүләр, — тигән, — үҙ шәүләңдән үҙең ҡурҡып тораһың да баһа», — тигән. Бикҡурҡаҡтан рәхәтләнеп көлгән. «Ярай әле һин килдең, Бикбатыр, ҡурҡыуымдан мин үлгән булыр инем», — тигән ҡуян.

Икенсе ваҡытта ҡуян тағы ла ҡурҡа төшкән, йөрәге дөп-дөп типкән, нимәлер бик ҡыштырлай икән. «Хәҙер иҙән аҫтынан сығыр ҙа ҡыштырлаусы мине йотоп та ебәрер,—тип уйлай икән ҡуян. — Бесәй ҙә ҡолаҡтарын торғоҙған, ул да ҡурҡа, ахыры»,— тип уйлаған ҡуян. Шул саҡ нимәлер шап итеп дөбөрләп киткән. Ҡуян һушһыҙ йығыла яҙған. Ә бесәй, ауыҙына нимәлер ҡабып, ҡуян янына килгән. Килгән дә: «Бына һине ҡурҡытыусы нәмә ошо инде», — тигән, бер бәләкәй генә нәмәне ҡуянға күрһәткән. «Ошо бәләкәй генә нәмә шул тиклем тауыш сығара аламы?» — тип, сысҡанды ҡуян ғәжәпләнеп ҡараған.

Өсөнсө тапҡыр асыҡ ишектән өйгә бер эт килеп ингән һәм ҡаты итеп өрөргә керешкән. Ҡуян карауат аҫтына ҡасҡан. Ә Бикбатыр иҙән уртаһына сығып баҫҡан, ҙур күренергә тырышып, һыртын ҡабартҡан, эт һөжүм итһә, уның биттәрен тырнарға йыйынған. Билдәле, эт уға теймәгән, ишектән әкрен •генә сығып һыҙған. Ә Бикбатыр үҙенең батырлығы арҡаһында был бәләнән дә бик оҫта ҡотолған.

## ДУҪТАР

*С. Әҙһәмова*

Кис яҡынлашып килә ине. Ялан әйләнәһендәге күләгәләр юҙоная барҙы. Бына ялан өҫтөндәге ҡояш, ағастар артына тәгәрәгәндәй булып, күҙҙән юғалды. Күләгәләр барыһы бергә тоташып йәйелделәр, урман эсе ҡараңғылана башланы.

Көнө буйы, кис еткәнде көтөп, ҡыуаҡ аҫтында ятҡан инә ҡуян урманда йөрөп ҡайтмаҡсы булды. Киткән саҡта, ул үҙенең балалары Оҙонғолаҡ менән Кесерәккә әйтте:

— һеҙ шунда ғына уйнағыҙ. Алыҫ китмәгеҙ! Сиҙәм үҫеп ҡуйылана төшкәс, мин үҙем урман менән таныштырырға алып сығырмын. Уға тиклем һеҙ тиҙ йөрөргә лә өйрәнерһегеҙ.

**-14-**

Урынынан ҡуҙғалып, бер-ике һикергәс, ул тағы артына әйләнеп:

— Оҙонғолаҡ, һин Кесерәкте ситләтмә, — тип ҡысҡырҙы. Унан ағас араһына инеп юғалды.

Был ҡуян балалары яҙ көнө икеһе бер ваҡытта тыуған булһалар ҙа, береһе ниңәлер бигерәк бәләкәй ине. Шуға күрә уға әсәһе Кесерәк тип исем ҡушты.

Әсәләре киткәс, Оҙонғолаҡ менән Кесерәк геү килеп ҡыуышып йөрөргә тотондолар. Түңәрәк ялан әйләнәһендә йүгереп арығас, улар ҡасандыр йәшен һуғып ауҙарған имән төбөнә барып ял иттеләр. Ауған ағастың үҙен инде күптән кешеләр яғырға алып киткән. Ә төбө ялан уртаһында ҡара ултырғыс шикелле булып тороп ҡалған ине.

— Әйҙә, шул төп аша һикереп уйнайбыҙ! — тине Оҙонғолаҡ, бер аҙ ял иткәндән һуң.

— Әйҙә-ә! — тине Кесерәк.

Улар һикереп уйнарға керештеләр. Йүгереп-йүгереп киләләр ҙә ағас төбө аша — һоп!

Шунан алыҫ түгел йәм-йәшел япраҡлы йүкә ағасы бар. Унда бер инә турғай, оя яһап, йомортҡа һалған да шул йомортҡаларҙан бәләкәй турғайҙар моронлап сыҡҡанды көтөп ултыра икән.

Турғай, ҡуян балаларының йүгереп-һикереп уйнағандарын ояһынан күреп, һоҡланып ултырған.

—Бына оҙаҡламай минең дә бәләкәс ҡошсоҡтарым булыр. Ҡанат сыҡҡас, улар осорға өйрәнерҙәр, — тип уйлапҡуйған.

Шул ваҡыт Оҙонғолаҡ алыҫтан йүгереп килеп һикерәйем тигәндә генә, ағас төбө өҫтөндә ятҡан кәкре ҡоро сыбыҡ, кинәт ҡуҙғалып, яртылаш үрә торҙо. Оҙонғолаҡ, ҡурҡынып, ҡолаҡтарын торғоҙоп, ситкә һикерҙе.

Башта әле ул бер нәмә лә аңлай алмай аптырап торған ине. Уның ҡоро сыбыҡ тип уйлаған нәмәһе ысынлап сиҙәмгә, төшкәс, аңланы. Ул — сыбыҡ түгел, ағыулы ҡара йылан икән.

Ул арала ҡара йылан, сиҙәм өҫтөнән шыуышып, туп-тура әлеге турғай ояланған ағасҡа табан китте.

Өҫтән быны күреп торған турғайҙың йөрәге ярылырға етеште. Ул аҡыллы ҡош йыландарҙың ғәҙәтен белә ине. Бына хәҙер йылан уның ояһына үрмәләп менер ҙә йомортҡаларын һытып эсер!

**-15-**

Турғай, бик борсолоп, сыйылдап ҡысҡырҙы:

— Ҡотҡарығыҙ!

Оҙонғолаҡ менән Кесерәк эштең нимәлә икәнлеген аңлап еткермәнеләр еткереүен. Шулай ҙа ыҫылдаған ҡара йыландың ҡошҡа яуызлыҡ эшләргә йыйыныуын һиҙенделәр.

— Нисек ҡотҡарырға һуң ул ҡошсоҡто? — тине Оҙонғолаҡ.

Кесерәк:

— Туҡта! Әсәй ҡайтып килмәй микән? Мин ҡарайым әле. Ул ҡайтһа, берәй нәмә уйлап табыр, — тип, әсәһе киткән

яҡҡа сапты.

Оҙонғолаҡ:

— Ярай, һин ул яҡҡа бар. Мин был яҡтан ҡарап киләйем! — тип, яландың икенсе яғына йүгерҙе.

Кесерәк һикерә-һикерә, йүгереп ағастар араһына барып инеүгә, аяғына нимәлер ҡаҙалып, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ой, ой, ой!

Ҡараһа, унда терпе йомарланып ятҡан икән.

— Нимә шул саҡлы, күҙеңә аҡ-ҡара күренмәй, ашығып сабаһың? — тине терпе, Кесерәккә асыуланып.

Йүгереп килеп, һулышы бөткән Кесерәк уға:

— Йылан! Йылан! — тип кенә әйтә алды.

Терпе:

— Ф-фу! Төлкө ҡыуа икән тип торам тағы! Ҡайҙа ул йылан, күрһәт, — тигәс, Кесерәк шатланып уны эйәртеп китте.

Улар бик ваҡытлы барып өлгөрҙөләр.

Терпе, йүкә ағасына үрмәләп менергә йыйынған йыланды күреүгә, йүгереүен ҡыҙыулатты, ваҡ-ваҡ атлап, тиҙ генә барҙы ла, йылан өҫтөнә ташланып, уның муйынына тештәрен батырҙы. Арттараҡ ҡалып, был хәлде ҡарап торған Кесерәк, терпе әсән ҡурҡып, күҙҙәрен йомдо. Ул күҙен асҡанда, терпе йыланды быуып һалған ине инде.

Ул арала Оҙонғолаҡ та, әсәһен эҙләп таба алмайынса, әлһерәп ҡайтҡан ине. Йыландың ҡуҙғалмай һуҙылып ятҡанын күргәс, ул да, ирендәрен ҡыймылдатып-ҡыймылдатып, шаҡ ҡатып торҙо.

— Фу! Шулмы ҡурҡҡан йыланығыҙ? Фу! — тине терпеэре генә.

Ояһында тынын алырға ла ҡурҡып ултырған турғай шатлығынан нимә эшләргә белмәй сутылданы:

—Рәхмәт һиңә, терпе! Был яҡшылығыңды ғүмерҙә онотмам. Бәлки ҡасан да булһа минең дә һиңә файҙам тейер.

Терпе уға бер ни тип тә яуап бирмәне.

— И меҫкен ҡошсоҡ! һин кемгә ярҙам итә алаһың һуң?—тип ауыҙ эсенән генә пырхылдап көлөп, үҙ юлына китте.

Оҙаҡламай турғайҙың ҡошсоҡтары булды. Улар әле бер нәмә лә эшләй белмәйҙәр. Әсәйҙәре аҙыҡ алып ҡайтҡанды көтөп, ауыҙҙарын асып, сыйылдашып тик яталар ине.

Бер көндө турғай, ғәҙәтенсә, аҙыҡ эҙләргә сығырға йыйын- ғас, яланда уйнап йөрөгән Оҙонғолаҡ менән Кесерәккә әйтте:

— Ҡуянҡайҙар! Мин юҡта һеҙ минең ҡошсоҡтарға күҙ-ҡолаҡ булһағыҙ ине. Улар бик тынғыһыҙҙар. Ҡолап төшөпимгәнмәгәйҙәре тип ҡурҡам, һеҙ уларға ҡысҡырғылап тороғоҙ, оянан баштарын сығарып һуҙылмаһындар, — тине.

Оҙонғолаҡ менән Кесерәк:

— Ярай, ярай. Беҙ шунда йүкә төбөндә, генә уйнарбыҙ.Ҡошсоҡтарың ҡолап төшә башлаһа, йомшаҡ аяҡтарыбыҙ менән тотоп алырбыҙ. Ергә төшөп имгәнергә ирек бирмәбеҙ! —тинеләр.

Турғай тынысланып осоп китте. Бер аҙ йөрөп, аҙыҡ алып ҡайтып килешләй, ул бер төлкөнөң шыпырт ҡына ҡыуаҡ артына йәшеренгәнен күреп ҡалды.

— Кемде һағалап боҫто икән был яуыз? — тип борсолопяҡ-яғына ҡаранһа, текер-текер атлап килә ятҡан таныш терпене күрҙе.

Терпе һыуһаған булған, күрәһең, ямғырҙан һуң тәрән соҡорға йыйылған һыуға табан бара ине. Төлкө шуны һағалап боҫҡан икән. Ҡоро ерҙә терпе, йомарланып ятып, төлкөгә бирешмәһә лә, һыу эргәһе уның әсән ҡурҡыныс. Төлкө уны һыуға тәгәрәтеп төшөрә лә, терпе йәйелеп йөҙә башлау менән, уны быуып ашай ала.

Турғайҙың шундай хәлде күргәне бар ине. Ул шунда уҡ түбән төшөп әкрен генә:

— Төлкөнән һаҡлан! Төлкө һағалай! — тип сыйылдап, терпенең өҫтөнән осоп китте.

Терпе, кире боролоп, бөтә көсө менән йүгерергә тотондо. Төлкө эште аңлағансы, ул әллә ҡайҙа, сытырман араһына ҡасып өлгөргән ине инде. Бер аҙ бөгәрләнеп ятҡандан һуң, ул сиҙәм аҫтынан башын сығарып ҡараны һәм төлкөнөң бик

-17-

кәйефһеҙләнеп, моронон һәлендереп, икенсе яҡҡа һунарға киткәнен күреп тынысланды.

— Фу! Бына һиңә бәләкәй генә ҡош! Туҡта, барып хәлдәрен беләйем әле үҙҙәренең, — тип яланға табан атлап китте.

Көндәр үтте. Турғайҙың балалары ла үҫтеләр. Ҡанат сығарып, осорға өйрәнделәр. Үҙ алдарына көн күрә башланылар. Оҙонғолаҡ менән Кесерәк тә ҙур ҡуян булдылар. Тик уларҙың береһенең дә шул яландан китәһеләре килмәне. Терпе лә башҡа ерҙә йәм тапманы, һаман ҡыштыр-ҡыштыр шул тирәлә йөрөнө.

Ҡышын турғайҙарға урманда туйынып тороу ҡыйын буласаҡ ине. Шуға күрә, көҙ етеү менән, улар, ҡайҙа булһа ла, кешеләр тора торған ергә китергә йыйыналар.

Терпе, Оҙонғолаҡ һәм Кесерәк шул ялан тирәһендә ҡышларға булдылар. Улар турғайҙарҙы:

— Яҙ еткәс, тағы ла бында килегеҙ! Беҙ һеҙҙе көтөрбөҙ!—тип оҙатып ҡалдылар.

## НИ ӨҪӨН ҠОМАЛАҠ БЕР ШАЛҠАНҒА ИКЕ СӘЛӘМ ӘЙТКӘН?

*Н. Иҫәнбәт*

Шалҡан сәфәргә сығып киткән, ти. Бара торғас, елпелдәп килгән бер ҡомалаҡҡа осраған. Шалҡан уға, иғтибарһыҙ, ғына:

— Нихәл, иҫерткес! — тип әйтеп һалған. Ҡомалаҡ та ҡалышмаған:

— Нихәл, ҡорһаҡ күптергәс! — тип яуап биргән дә үткән: дә киткән.

Шалҡандың быға бик хәтере ҡалған, әсәһенә ҡайтып:

— Ҡомалаҡ мине мыҫҡыл итте, шулай тип әйтте, былай тип әйтте, бик ныҡ ғәрләндем, — тип илай-илай зарланған, ти. Әсәһе әйткән:

— Әйтеүен әйткән дә, ай-һай, һин уның менән үҙең яҡшылап иҫәнләштеңме икән? Әле урман булып урман да, һин уға ни тип ҡысҡырһаң, ул да шулай һиңә яуап бирә. Һин бынан һуң осрағандарға иң элек үҙең яҡшылап сәләм бир, балам, — тип уны бик өгөтләгән, ти.

Шунан оҙаҡ та үтмәгән, шалҡан тағы ла сәфәргә сығып

-18-

киткән, ти. Бара торғас, тағы елпелдәп килә ятҡан ҡомалаҡҡа осраған, ҡараһа — әлеге лә баяғы теге ҡомалаҡ!

— Әссәләмәғәләйкүм, сәлләле баш! — тип яҡшылап яуапбиргән ине, ҡомалаҡ та уға:

—Вәғәләйкүмәссәләм! Танһыҡ аш! — тип сәләмләгән, ти.

Шул.

## ӨС ҠЫҘ

*(Татар халыҡ әкиәте)*

Борон-борон заманда, булған, ти, бер ҡатын. Уның булған, ти, береһенән-береһе сибәр өс ҡыҙы.

Ҡыҙҙарымдың тамаҡтары туҡ, өҫтәре бөтөн булһын тип, көнө-төнө эшләгән дә эшләгән, ти, был ҡатын.

Уның ҡыҙҙары бик һылыу, бик уңған булып үҫеп еткәндәр. Бер-бер артлы кейәүгә лә киткәндәр, ти.

Бер йыл үткән, ике йыл үткән, өс йыл үткән. Шулай яҡшы ғына йәшәгәндә, әсәләре ауырып киткән. Яҡын урманда уның тейен дуҫы бар икән. Ҡатын тейенде саҡырып килтергән дә:

— Тейен дуҫым, бар әле, ҡыҙҙарыма әйтһәнә, хәлемде белергә килһендәр, — тигән.

Тейен шунда уҡ сығып сапҡан.

Оло ҡыҙға барған. Ҡыҙ еҙ тастар таҙарта икән.

— һай, бик барыр инем дә, тастарҙы таҙартып бөтөрәһембар шул, — тигән ул.

Тейен быға бик асыуланып:

—Улай булғас, һин ошо тастарыңдан ғүмереңә лә айырылма,— тигән.

Ҡыҙ шунда уҡ тәлмәрйенгә әйләнгән дә тастағы һыуға сумған, ти.

Тейен уртансы ҡыҙҙың тәҙрәһен ҡаҡҡан:

—һай, барыр инем дә, йәрминкәгә етен өлгөртәһем баршул, — тигән уртансы ҡыҙ.

Тейен уға ла бик асыуланып:

— Улайһа, бөтә ғүмереңетен туҡып үтһен! — тигән.

Уртансы ҡыҙ шунда уҡ үрмәксегә әүерелгән, ти.

Тейен тәҙрә ҡаҡҡанда, кесе ҡыҙҙың ҡамыр баҫҡан сағы нкән. Ул ҡамырлы ҡулдарын да йыуып тормаған, әсәһе яны- на сығып йүгергән.



(1)Тейен кесе ҡыҙға әйткән:

— Эй һөйөклө бала, — тигән, — ғүмер буйы игелек күр,кешеләрҙе бәхетле ит. Кешеләр ҙә һине яратыр, яҡшылығыңды онотмаҫтар, — тигән.

(5)Кесе ҡыҙ әсәһен бик ҡараған. Үҙе лә рәхәт йәшәгән. Кешеләр ҙә уны бик яратҡандар, ти.

**БҮЛӘК КЕМГӘ?**

(Татар халыҡ әкиәте)

Бер мәл ҡояш йылдың дүрт миҙгелен — көҙҙө, ҡышты, яҙ- (10);ҙы һәм йәйҙе үҙенә саҡырып алған.

— һеҙҙең ҡайһығыҙ матурыраҡ, ҡайһығыҙ эштә батыры-раҡ? Шуға бүләк бирәм, — тигән.

Ә бүләк бик затлы икән — ус тултырып йондоҙ бирергә уйлаған ҡояш.

(15)hүҙҙе көҙ башлай:

— Үҙегеҙ яҡшы беләһегеҙ, мин бөтә баҫыуҙарҙың уңышын -йыйҙым, бөтә донъяны алтынға күмдем. Коштарҙы йылы яҡҡа оҙаттым, балаларҙы мәктәпкә йыйҙым. Бүләк миңә булырға тейеш!

(20)—Әллә минең эшем аҙмы? — тигән яҙ. — Мин бөтә ҡарҙарҙы иреттем. Баҫыуҙарға иген сәстем, ағастарҙы япраҡ ярҙырҙым, яланды сәскәгә күмдем. Арала иң матуры ла, иң эшлеклеһе лә мин! — тигән ул.

— Эй, эй, — тигән йәй, — мине тыңлағыҙ әле. Мин донъя-(25)ны йәшеллеккә күмәм, сәскәләр үҫтерәм, игендәрҙе өлгөртәм, емештәрҙе бешерәм. Әллә мин иң матурығыҙ түгелме?

— Артыҡ күп түгел минең эш, — ти тыйнаҡ ҡына ҡыш. — Мин ерҙе ял иттерәм, киләһе уңыш өсөН ҡарҙар ташыйым, донъяны ап-аҡҡа буяйым, балаларҙы сана, саңғы швтуырға (30)саҡырам. Мин дә йәмһеҙ түгел, минең шыршыларымды, ҡар бөртөктәремде, мамыҡ бәҫтәремде яраталар.

Тыңлап-тыңлап торған да ҡояш, бүләкте был дүртәүҙең береһенә лә бирә алмаған. Йондоҙҙарҙы ул күккә һипкән. «Ана барығыҙға ла!» — тигән.

(35)Йондоҙҙарҙы йылдың бер миҙгеле лә үҙенә ала алмаған. (36)Улар яҙ ҙа, йәй ҙә, көҙ ҙә, ҡыш та балҡып яналар.

## ЙОМРО ИКМӘК

(Рус халыҡ әкиәте)

Әбей менән бабай бик татыу йәшәгәндәр. Бер ваҡыт бабай әбейгә арап: -Ҡарсыҡ, икмәк бешерер инең? —тигән.

— Нимәнән бешерәйем һун? Он юҡ бит.

— Эй, ҡарсыҡ, көбө төбөнән ҡырып, бура мөйөштәренән һепереп ҡара, бер аҙ йыйылмаҫмы?

Әбей бәләкәй генә ҡанат менән көбө төбөнән, бура мөйөштәренән һепереп, бер-ике ус он йыйған.

Әбей шул ондан йомро икмәк бешергән һәм тәҙрә төбөнә һыуытырға ҡуйған.

Икмәк тәҙрә төбөндә тора торғас, кинәт һике өҫтөнә тәгәрәп төшкән, һике өҫтөнән — иҙәнгә, иҙән буйынса — ишеккә, унан, буҫаға аша һикереп, өй алдына, өй алдынан тышҡы баҫҡысҡа, тышҡы баҫҡыстан ишек алдына, ишек алдынан урамға сығып, юл буйлап тәгәрәп киткән.

Икмәк юл буйлап тәгәрәп барғанда, ҡаршыһына бер ҡуян килеп сыҡҡан: —Икмәк, йомро икмәк, мин һине ашайым! — тигән уға куян.

— һин мине ашама, ҡылый ҡуян, мин һиңә йыр йырлармын,— тигән дә икмәк, шунда уҡ йырларға тотонған:

— Мин — йомро икмәк, йомро икмәк, мине көбө төбөнән ҡырып, бура төбөнән һепереп алынған ондан, ҡаймаҡҡа иҙеп, майға баҫып бешерҙеләр, тәҙрә төбөндә һыуыттылар. Мин бабайҙан да киттем, әбейҙән дә киттем, һинән дә, ҡуян, ҡыйын булмаҫ китеүе! — тигән дә үҙ юлына тәгәрәп китеп барған. Ҡуян уны күреп кенә ҡалған...

йомро икмәк һаман тәгәрәүен дауам иткән.

Бына бер ваҡыт уның ҡаршыһына бүре килеп сыҡҡан: Йомро икмәк, йомро икмәк, мин һине ашайым!

— һин мине ашама, һоро бүре, мин һиңә йыр йырлайым;

— Мин — йомро икмәк, йомро икмәк, мине көбө төбөнән ҡырып, бура төбөнән һепереп алынған ондан, ҡаймаҡҡа иҙеп, майға баҫып бешерҙеләр. Мин бабайҙан да киттем, әбейҙән дә киттем, ҡуяндан да киттем, һинән дә, бүре, ҡыйын булмаҫ китеүе! — тигән дә алға тәгәрәгән, бүре уны тик күреп кенә ҡалған.

## -22-

(1)Йомро икмәк һаман тәгәрәгән дә тәгәрәгән. Бына бер ваҡыт уның ҡаршыһына бер айыу килеп сыҡҡан.

— Йомро икмәк, йомро икмәк, мин һине ашайым!

— Ҡайҙа ул һиңә, тайыш аяҡ, мине ашарға! Мин йомро (5)икмәк, йомро икмәк, мине көбө төбөнән ҡырып, буранан һепереп алынған ондан, ҡаймаҡҡа иҙеп, майға баҫып бешерҙеләр, тәҙрә төбөндә һыуыттылар, мин бабайҙан да киттем, әбейҙән дә киттем, ҡуяндан да киттем, бүренән дә киттем, һинән дә, айыу, ҡыйын түгел китеүе! — тигән, һәм йомро икмәк тағы ла (10)алға тәгәрәп киткән, айыу уны күреп кенә ҡалған.

Йомро икмәк һаман тәгәрәгән дә тәгәрәгән: уның ҡаршыһына төлкө килеп сыҡҡан:

— Иҫәнме, йомро икмәк, һин ниндәй гүзәлһең?!

Уға ҡаршы йомро икмәк йырлай башлаған:

(15)—Мин — йомро икмәк, йомро икмәк, мине көбө төбөнән ҡырып,
буранан һепереп алған ондан, ҡаймаҡҡа иҙеп, майға баҫып бешерҙеләр,
тәҙрә төбөндә һыуыттылар. Мин бабайҙан да киттем, әбейҙән дә киттем,
ҡуяндан да киттем, бүренән дә киттем, айыуҙан да киттем, һинән дә,
төлкө, ҡыйын түгел ки-(20)теүе!

— Ниндәй яҡшы йыр!'—тигән төлкө. — Тик мин, йомро икмәк, ҡартайҙым инде, бик насар ишетәм: минең танауым өҫтөнә ултырып, тағы бер тапҡыр йырлап күрһәт әле. Ҡысҡы-рыбыраҡ йырла.

(25)Икмәк төлкөнөң танауы өҫтөнә менеп ултырған да шул уҡ йырҙы ҡабатлаған.

— Рәхмәт, бик һәйбәт йыр икән. Мин тағы ла тыңларинем. Минең телем өҫтөнә ултырып, һуңғы тапҡыр йырласы! — тигән төлкө һәм телен сығарған.

(30)Йомро икмәк аҡылһыҙлығынан төлкөнөң тел ӨҪТӨНӘ һикергән икән, төлкө уны шунда уҡ йотоп ебәргән.

### АЙҠЫЙҒАҠ *(Нанай халыҡ әкиәте)*

Борон-борон заманда Самарҙар ырыуында Ла тигән бер (35)нанай йәшәгән. Айҡыйғаҡ исемле ҡыҙы ла булған уның. Бик матур булған ул ҡыҙ. Бөтәһе лә уны бик ятраҡандар. Көндәрҙең бер көнөндә ҡайһыһылыр: «Бөтә тирә-яҡта Ла ҡыҙынан (40)да сибәрерәк ҡыҙ юҡ!» — тип ҡуймаһынмы.

**-23-**

Быны ишеткәс, Айҡыйғаҡтың түбәһе күккә тейгән. Ул кәпрәйеп, эреләнеп үҙенең йөҙөн ҡарарға тотонған һәм уны бик оҡшатҡан. Йә таҙартылған тас төбөнә, йә һыуға ҡарай ҙа үҙ шәүләһенә үҙе һоҡланып тик ултыра, ти.

Айҡыйғаҡ бер эш тә эшләмәй башлаған, һаман үҙ сибәрлегенә үҙе һоҡланып тик ултыра икән. Бөтөнләй ялҡауға өйләнгән Айҡыйғаҡ.

— Бар, ҡыҙым, һыу алып ҡайт әле! — тигән әсәһе уға бер көндө. -Ә һыуға йығылһам? — тигән Айҡыйғаҡ.

— Ботаҡҡа тотонорһоң, — тигән әсәһе.

— Ботаҡ һынһа? — тигән Айҡыйғаҡ.

— Ә һин нығыраҡ тотон, — тигән әсәһе.

— Ҡулым тырналһа? — тигән Айҡыйғаҡ.

-Бейәләй кей, — тигән әсәһе.

— Бейәләй йыртылһа? — тигән Айҡыйғаҡ.

Ә үҙе һаман еҙ тасҡа ҡарай, күҙҙәрен дә ала алмай: «Ай-ай, бигерәк тә сибәр инде үҙем!» — тип уйлай.

— Энә алырһың да, бейәләйеңде ямарһың, — тигән әсәһе.

—Энә һыныр бит, — тигән Айҡыйғаҡ.

— Йыуанараҡ энә алырһың, — тигән әсәһе.

— Бармағыма ҡаҙалһа, — тигән Айҡыйғаҡ. Быларҙың һөйләшеүен күрше ҡыҙы ла тыңлап торған икән, — ул түҙмәгән:

— Үҙем генә барып киләйемсе, апа-й, — тигән.

Шулай итеп, күрше ҡыҙы йылғанан һыу ташыған.

Айҡыйғаҡтың әсәһе ҡамыр иҙгән, муйыл һалып, тәмле ҡабартма бешергән. Айҡыйғаҡ ҡабартмаларҙы күреүгә:

— Әсәй, миңә ҡабартма бир әле!—тип ҡысҡырып ебәргән.

— Ҡайнар шул ул, ҡулың бешер, — тигән әсәһе.

-Бейәләй кейермен, — тигән Айҡыйғаҡ.

— Бейәләйең еүеш бит, — тигән әсәһе.

— Ҡояшта киптерермен мин уларҙы, — тигән Айҡыйғаҡ.

— Ҡатып китер бит, — тигән әсәһе.

— Ыуалап йомшартырмын, — тигән Айҡыйғаҡ.

—Ҡулдарың ауыртыр бит, — тигән әсәһе. — Ниңә һиңә эшләп маташырға? Йә сибәрлегең кәмер. Ҡабартманы мин үҙ ҡулдарын ҡыҙғанмаған күрше ҡыҙына ғына бирәм, — тигән.

Әсәһе ҡабартманы күрше ҡыҙына биргән.

Айҡыйғаҡтың асыуы килгән. Йылға буйына төшөп киткән

**-24-**

был. һыуҙағы шәүләгә ҡарап тик ултыра икән. Ә күрше ҡыҙы ярға ултырған да ҡабартма ашай... Айҡыйғаҡ, көнләшеүенә түҙә алмайынса, һуҙылып-һуҙылып уға ҡарай икән, шул ваҡыт уның муйыны оҙонайған да ҡуйған. Күрше ҡыҙы Айҡыйғаҡҡа әйткән:

— Мә ҡабартма, Айҡыйғаҡ, икәү ашайыҡ, — тигән.

Айҡыйғаҡтың асыуы килгән. Бармаҡтарын тырпайтып, ғәрләнеүенән бер ағарып, бер күгәреп ҡыҙға ҡулын һелтәгән. «Нисек инде ул, донъяла бер сибәр ҡыҙ, тешләнгән ҡабартма-ны ашаһын, ти!» Айҡыйғаҡ, һикереп тороп, ҡулдарын шундай һелтәп ебәргән, ҡулдары шунда уҡ ҡанатҡа әүерелгәндәр.

— Кәрәкмәй миңә ҡабартма! Кәрәкмәй ҡа-ҡа-ҡа! Ҡыйғаҡ! — тип ҡысҡырған Айҡыйғаҡ. һәм ярҙа тороп ҡала алмаған, үрһәләнеп һыуға йығылып төшкән дә шунда уҡ ҡаҙға әүерелгән.

Үҙе йөҙә, үҙе ҡысҡыра, ти, ул:

— Ҡаҡ, мин ниндәй сибәр! Ҡыйғаҡ, ҡыйғаҡ, ҡаҡ, минниндәй сибәр! — ти икән.

Нанайса һөйләшеүен онотҡансы йөҙгән дә йөҙгән Айҡый-ғаҡ. Йөҙә торғас, бөтә һүҙҙәрҙе онотоп бөтөргән. Үҙенең исемен генә онотмаған, ти, ул.

Уны, донъяла бер сибәр ҡыҙҙы, башҡа берәй кеше менән бутамаһындар әсән, кешеләрҙе күреү менән: «Айҡыйғаҡ! Ай-ҡый-ғаҡ! Ай-ҡый-ғаҡ!» — тип ҡысҡыра башлай, ти.

## АЙЫУ ҠЫРМЫҪҠАҒА НИҢӘ ҮСЛЕ?

*Ж. Кейекбаев*

Төлкө ҡуян балаһын тотоп ашаған да рәхәтләнеп йоҡларға ятҡан. Инде тәмле йоҡлап киттем тигәндә генә, тәне әсетеп һыҙлағанға уянып киткән. Ҡараһа, тәнен эре-эре ҡырмыҫҡа лар һырып алғандар ҙа күмәкләп тешләргә тотонғандар, ти.

Инде нисек ҡотолорға был яуыздарҙан?

Төлкө хәйлә ҡорған.

— Ҡырмыҫҡалар, дуҫтар, һеҙ ниңә мин бахырҡайҙы йонсотаһығыҙ? Ниңә ҡанымды эсәһегеҙ, һеҙгә унан ни файҙа?—тигән ул, меҫкенгә һалышып.

Ҡырмыҫҡалар барыһы ла бер ауыҙҙан, асыуланып: (37)—Ярай, Һин бында ҡуян балаһын тотоп ашағанһың. Ә

**-25-**

беҙгә ашарға кәрәкмәйме ни? Беҙ нимә ашап тамаҡ туйҙырайыҡ? — тигәндәр.

Шунан һуң төлкө уларға:

— Дуҫҡайҙар! Мин һеҙгә бер урын өйрәтәм. Ана анау тау итәгендәге өңөндә айыу йоҡлап ята. Ул бик ҙур, һимеҙ,көслө. Әгәр уның ҡанын эсһәгеҙ, һеҙ ҙә айыу кеүек көслө булырһығыҙ, — тигән.

Ҡырмыҫҡалар эркелешеп айыу өңөнә табан киткәндәр. Өң эсенә барып инһәләр, айыу өңөндә рәхәтләнеп йоҡлап ята, ти.

Ҡырмыҫҡалар айыуҙың өҫтөнә йүрмәләп менеп киткәндәр. Ләкин һис тә теш үтерлек түгел, ти. Айыуҙың йөнө бик ҡалын, төлкө йөнө кеүек кенә түгел. Ни эшләмәк кәрәк хәҙер?

— Туҡтағыҙ әле, — тигән берәүһе, — һәр беребеҙ айыуҙыңйөнөн йолҡоп алып, шуның менән билдәрҙе нығыраҡ быуып,ысынлабыраҡ тотонайыҡ.

Был кәңәш уларҙың бөтәһенә лә оҡшаған. Улар айыу йөнө менән билдәрен өҙөлә яҙғансы нығытып быуғандар. Шунан айыуҙың йөнө араһына инеп, тешләргә, ҡанын эсергә тотонғандар.

Бара торғас, улар айыуҙы бөтөнләй һырып алғандар, хатта мороно эсенә лә инеп киткәндәр. Мороно әсетә башлағас, айыу йоҡоһонан уянып киткән. Башта ғәжәпләнгән, бик ҡурҡҡан.

— Әллә умартаһын ватып балын ашаған әсән, бал ҡорттары үс алырға килделәрме икән? — тип уйлаған ул.

Ләкин бал ҡорттарының безелдәүе ишетелмәй. Өң эсе ҡараңғы, күҙгә төртһәң дә күренерлек түгел.

Айыу, тәненең әсетеүенә сыҙай алмай, өңөнән килеп сыҡҡан һәм ер йыртып үкереп ебәргән. Иплəберәк ҡараһа, бөтә ер өҫтөн ҡырмыҫҡалар ҡаплап алған. Асыуланып, айыу уларҙы тапарға тотонған. Ләкин бөтәһен дә үлтереп бөтә алмаған. Аяуһыҙ күптәр шул. Аптырап тирә-яғына ҡараһа, күбә ҙурлыҡ ҡырмыҫҡа иләүен күреп ҡалған. Ҡырмыҫҡалар эркелешеп, үҙенән ун тапҡыр ҙур-ҙур сыбыҡ, кипкән үлән һөйрәп, шунда китә, ти.

— Әһә, быларҙың ояһы шунда икән. Туҡта, күрәктәренбирәйем әле мин уларҙың, — тип, айыу ҡырмыҫҡа иләүенсапсып туҙҙырырға керешкән. Ер менән тигеҙләгән. Йәнә бер нисә иләүҙе иҙгеләгән ул шулай.

Ошо хәлдән һуң айыуҙың көсө ҡырмыҫҡаларға күскән.

**-26-**

Ҡырмыҫҡалар, билдәре нәҙегәйеп, бик көсәйеп киткәндәр. Ә айыу ҡырмыҫҡаларға үсле булып ҡалған. Ул әле лә, ҡырмыҫҡалар иләүен күрһә, аяҡтары менән уны сапсып, ер менән тигеҙ итеп китә икән.

Ә һунарсыларға шул ғына кәрәк. Ҡырмыҫҡа иләүе туҙҙырылһа, ул тирәлә айыу бар. Тимәк, мылтыҡты йәҙрә менән яһап, ҡул осонда ғына йөрөтөргә кәрәк.

## ЯЛҠАУ БЕСӘЙ

Борон-борон заманда бер ялҡау бесәй йәшәгән, ти. Бесәй ялҡау булғас, ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ әҙерләмәгән. Бына ҡыш еткән. Бесәй уйлана башлаған: «Мин был һыуыҡта асығып йәшәгәнсе, дуҫтар эҙләргә китәм!»

Юлда уға төлкө осрай.

— һаумы, бесәй, ҡайҙа китеп бараһың?-

Бесәй дуҫ эҙләргә сыҡҡанын һөйләп бирә.

— Мин һиңә бик яҡын дуҫ булырмын, — ти төлкө һәм бесәйҙе үҙенә алып ҡайта. Төлкө көн һайын һунарға йөрөй, ә бесәй, хәйлә табып, өйҙә ҡала. Бер көн төлкө уны йәнә һунарға саҡырған. Бесәй, хәйлә таба алмағас, теләмәй генә тороп китә. Төлкө йүгереп-йүгереп сысҡан тота, ә бесәй ҡарап тик ултыра, ти. Өйгә ҡайтҡас, төлкө:

— һин миңә дуҫ түгелһең, — тип, уны ҡыуып сығарып ебәрә.

Бесәй тағы дуҫ эҙләп китә. Бара торғас, терпене осрата. Терпегә лә үҙенең хәлен һөйләй. Терпе дуҫ булырға ризалыҡ белдерә. Шулай яҡшы ғына йәшәп ятҡанда, уларҙың ризығы бөтә. Терпе бесәйҙе һунарға саҡыра. Бесәй, йоҡлап ятҡан еренән теләмәйсә генә тороп, терпе артынан киткән. Терпе сысҡан тота, бесәй ҡарап тик ултыра, ти.

Терпе уға:

— Икенсе дуҫ эҙлә! — ти.

Бесәй китә. Тән етә. Ағас башына менеп йоҡлайым тиһә, унда өкө ултыра, ти.

— һаумы, өкө апай. һеҙҙә йоҡлап сығырға мөмкинме? — ти бесәй, ялынып. Өкө уға сәй эсерә, хәлен һораша башлай. Бесәй дуҫ эҙләүе тураһында һөйләп бирә. Өкө:

— Мин һиңә яҡшы дуҫ булырмын, һыуыҡта йөрөгәнсе, бында ҡал.

## -27-

Өкө бесәйҙе үҙендә ҡалдыра. Иәй етә. Бесәй һаман бер нәмә лә эшләмәй. Өкө, һунарға сығып, күп сысҡан тотҡан. Бесәй сысҡанды алам тиһә, өкө уға рөхсәт итмәй. Бесәй асыулана. Өкө тағы һунарға китә. Бесәй, үс итеп, мейес башында ятҡан өкө балаларын тотоп ашай, ти. Өкө һунарҙан ҡайтһа, бесәй ҙә, балалары ла өйҙә юҡ. Өкө бик ныҡ ҡайғыра.

— Яуыз бесәй язаһын алырға тейеш! — тип, өкө бесәйҙеэҙләп сығып китә. Уға төлкө осрай. Өкө уға үҙенең хәлен һөйләп бирә.

—һин шул бесәйҙе күрҙеңме? — ти өкө.

Төлкө уға:

— Ул бында булды. Дуҫ эҙләй ине, мин уға дуҫ булдым.Ул ялҡау, шуға мин уны ҡыуып сығарҙым.

Төлкө өкөнө өйөнә индереп, сәй эсереп, оҙатып ҡала. Өкө терпене лә осрата. Унда ла шундай уҡ хәл булған икән. Өкө, бара торғас, бер яланға килеп сыға. Ҡайын эргәһендә ҡыуыш күрә. Ул ҡыуышты бесәнселәр эшләгән икән. Өкө лә ял итергә уйлай. Ҡыуышҡа инһә, йоҡлап ятҡан бесәйҙе күрә. Өкө, •бесәйгә ташланып, уны өҙгәләй башлай. Бесәй саҡ-саҡ ҡасып ҡотола. Ҡуйы үлән араһында саҡ йәне сыҡмай ятҡан бесәйҙе 'бесәнселәрҙең береһе табып өйөнә алып ҡайта һәм тәрбиәләп аяҡҡа баҫтыра. Шул замандан алып бесәй кеше янында йәшәй башлаған. Тик хәҙер ул ялҡау түгел, көнө-төнө сысҡан тота, ти. Үҙен үлемдән ҡотҡарған әсән кешегә рәхмәт әйтә-әйтә хеҙмәт итә, ти. Шуға күрә бесәйҙе ололар ҙа, балалар ҙа яраталар.

## КӘЗӘ БӘРӘСЕ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Улар бик татыу ғүмер иткәндәр.

Бына һалҡын ямғырлы көҙҙән һуң һыуыҡ ҡыш килгән. Быларҙың утындары бөткән.

Бабай, бәләкәй сана һөйрәп, урманға киткән. Бер һыныҡ икмәк һәм бәләкәй көршәккә һөт һалып алған. Санаһына ваҡ ботаҡтар тейәгәс, ҡайтыр юлға сыҡҡан. Яңы йыл ҡаршыларға ҡупшы ғына шыршы алған. Юлда унын ҡолағына кәзә бәрәсенең тауышы салынған. Бабай тауыш сыҡҡан яҡҡа йүнәлгән. Барып ҡараһа, ағас төбөндә кәзә бәрәсе ята, ти. Бабай уға һөт эсергән, икмәк ашатҡан. Бәрәс аяғына баҫҡан.

**-28-**

(1)Бабай уны өйөнә алып ҡайтып киткьн. Әбейе быныӊ әсән бик ҡыуанған. Шул көндән һуӊ кәзә йорт хайуанына әйләнгән.

## ЗИРӘК ҠУЯН

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, ҡуян. Уныӊ өс балаһы (5)булған. Бер көндө ул урманға барырға йыйынған.Кескәйҙәренә: «Ишекте бикләп ултырығыҙ, сығып йөрөмәгеҙ», — тигән.

Әсәһе киткәс, иӊ бәләкәй ҡуянға күӊелһеҙ була башлай. Илағыһы килә. Йәшел үлән өҫтөнән йүгерһәӊ, ҡояш нурҙарына иркәләнһәӊ ине, тип уйлай. Апалары уйнап арып, йоҡоға (10)талыу менән, бәләкәй ҡуян ишекте һаҡ ҡына аса ла өйҙән сыға.

Бер-ике аҙым атлау менән, уны бөркөт тотоп ала һәм үҙ ояһына осороп алып китә. Сабыйҙарына: «Бәпестәрем, һеҙгә (15)ҡуян алып ҡайттым, ашағыҙ!» — ти ҙә үҙе тағы һунарға оса... Ҡуян балаһы үкһеп илай башлай.

— Ниӊә илайһыӊ? — тип һорай бер бөркөт балаһы.

— һеҙ хәҙер мине ашайһығыҙ бит, — ти бәләкәй ҡуян.

— Ярай, беҙ һиӊә теймәбеҙ, — тип вәғәҙә бирә икенсе бөркөт балаһы.

(20)Бына әсә бөркөт ҡайтып инә.

— Ҡуян ите тәмле булдымы? — тип һорай.

— Әсәй, беҙ ҡуянға ҡағылманыҡ, тере йәнлек ашай алмайбыҙ. Ул өйөнә ҡайтһын, уны ла әсәһе көтәлер, — ти әсәнсе (25)бөркөт балаһы.

Бөркөт балаларын тыӊлай. Ҡуянды өйөнә ҡайтарып ебәрә.

Юлда уға төлкө осрай. «Ә-һә, әләктеӊме?» — ти. Ҡуян балаһы бар көсөнә ҡаса башлай, йүгереп барғанда, күҙенә саталы ағас салына. Ҡуян балаһы, шул ағастыӊ уртаһынан ырғып, ары елә. Ҡуянды ҡыуып килгән төлкө лә, уйлап торма-(30)йынса, шул уҡ ағас уртаһына һикерә, әммә ҡыҫылып ҡала.

Үҙенеӊ зирәклегенә үҙе һоҡлана бәләкәй ҡуян. Ул шулай өйөнә иҫән-һау ҡайтып етә.

## ӨЙРӘКТӘР НИ өсөн КЕШЕГӘ ЭЙӘЛӘШКӘН?

Борон заманда өйрәктәр гел ҡырҙа ғына йәшәгән, ти. Ҡа(35)мышлы матур күлдәрҙе һайлап, үҙҙәренә төйәк иткәндәр,ба-(36)ла сығарғандар, шунан йылы яҡтарға киткәндәр.

## -29-

Яҙғы ҡояш нурҙары ҡайнарланып, ҡар иреп бөтөүгә, ҡыр өйрәктәре тыуған яҡтарын һағынып ҡайтып та етәләр икән. Оҙон йәй буйы, туйғансы йөҙөп, сумып, осоп, күңелле ял итәләр, ти. Бәпкәләрен йөҙөргә, осорға өйрәтәләр, оҙон юлға әҙерләйҙәр. Көҙ етеп, ағастарҙың япраҡтары ҡойолоп бөтөүгә, төркөм-төркөм йыйылып һөйләшә башлайҙар. Ҡыр өйрәктәре уңған, тынғыһыҙ булған. Йыраҡ юлға сыҡҡанда, ялҡаулыҡ һис тә килешә торған эш түгел шул.

Бына тағы йәмле яҙ еткән. Күл боҙҙан әрселгән, һарғайған ҡамыштар араһынан яңылары морон төртөп сыҡҡан. Тәлмәрйендәр йыр ярышын башлаған. Бер көндө арыған, йонсоған өйрәктәр төркөмө күлгә килеп төшкән. Улар тыуған иленә ҡайтыуға бик шат. Ҡысҡырып һөйләшәләр, көлөшәләр. Бер-береһен уҙҙырып ярышыусы тәлмәрйендәр туҡтап бер аҙға боҫоп яттылар, ти. Шунан инде иҫке таныштарын күреп, байрамдарын дауам итәләр.

Тәлмәрйендәр бер яҡта:

Баҡ-баҡ-баҡ,
Матур шул тыуған яҡ!
Матур шул тыуған яҡ!
Баҡ, баҡ, баҡ-баҡ! — тип таҡмаҡлай, ти.

Өйрәктәр үҙҙәренә:

Ҡрәк-крәк, крәк-крәк,
Йөҙөп ҡалырға кәрәк.
Крәк-крәк, крәк-крәк,
һағындыҡ шул бигерәк.
Крәк-крәк, крәк-крәк! — тип ҡыуанышалар икән.

Бер тәлмәрйен өйрәктәрҙе бигерәк яратты, ти, инде. Яҡын[1] уҡ килеп, йырҙарын тыңлап, дуҫлашырға уйлай был. Өйрәктәр башта тәлмәрйенде суҡып ҡурҡытып та ҡарайҙар. Тик теге һаман китмәгән, ти.

Инә өйрәктең бәпкәләре сыға. Бына шунда инде тәлмәрйен үҙенең дуҫлығын күрһәтергә тырышҡан. Тәмле-тәмле себен-дәрҙе, бөжәктәрҙе тотоп, бәләкәй дуҫтарын һыйлаған. Улар тәлмәрйендең һыйлауына шундай өйрәнделәр, ҡайһы көндәрҙе аҙыҡ эҙләп йөҙөргә иренеп, бөтөнләй оянан сыҡмаҫ булдылар, ти. Ата-әсәһе ни тиклем тартҡылашмаһын, әрләмәһен, ҡолаҡтарына элмәй бәпкәләр. Йөҙөргә өйрәнһәләр ҙә, осорға өйрәнә алманылар, ти.

**-30-**

Ояла күп ятыуҙан һимерешеп, ауырайышып киттеләр. Ҡабаттарын йүнләп ҡыбырлата ла алмайҙар, ти.

Бигерәк тәмле был аҙыҡ, Бигерәк тәмле был
аҙыҡ, —

тип тәлмәрйенде маҡтап, килтереп ашатҡанын көтөп тик яталар икән. һуңғараҡ «был аҙыҡ» тип әйтергә лә иренә башлағандар, «быжыҡ-быжыҡ» тип кенә әйтәләр икән.

Бына көҙ еткән. Ҡыр өйрәктәре йылы яҡтарға китергә йыйынған. Ата өйрәк менән инә өйрәк, ни эшләргә лә белмәй, ҡабат-ҡабат килеп, балаларын осорға өгөтләгәндәр. Бәпкәләре уйлап та бирмәгән, ата-әсәһен танымайҙар ҙа икән. Ни эшләһендәр инде, ҡайғырышып, бер төркөмгә барып ҡушылып осоп китәләр тегеләр.

Өйрәк бәпкәләренә, үҙҙәре генә ҡалғас, тағы ла рәхәтерәк булып киткән. Тик тыныслыҡтары оҙаҡҡа бармай, әле был, әле теге осоусы ҡоштар, күлгә төшөп, ял итеп китә, ти. Бөтәһе лә бер үк һүҙҙе һөйләй:

Осайыҡ! Осайыҡ!

һалҡындан ҡасайыҡ!

Торналар:

Торайыҡ, торайыҡ!

Бик оҙаҡ тормайыҡ! — тип, тиҙ генә ял итеп, тамаҡ туйҙырып осоп китәләр, ти.

Ҡыр ҡаҙҙары:

Ҡыйғаҡ, ҡыйғаҡ!
һау бул, тыуған яҡ!
Ҡайтырбыҙ, ҡайтырбыҙ, — тип ҡаңғылдашалар, ти.

Быжыҡ-быжыҡ,
Йөрөйҙәр шунда мыжып, — тип өйрәктәр йоҡо аралаш мыңғырлап әрләй, ти, уларҙы.

Тәлмәрйен һаман дуҫтарын ҡараны, ти. Тик бер көндө, тәндәре ҡалтырап, ауырайып, бөтөнләй һыу төбөнән сыға алмаған ул.

Өйрәктәр уны эй көттөләр, эй көттөләр, асығышып бөттөләр, осорға талпынып ҡараныдар, ти. Ҡайҙа инде ул кәүҙәгә көс етеү! Шунан теҙелешеп яр башына сығалар. Асыҡҡан өйрәктәр ҡарҙы суҡып ҡарайҙар — тамаҡтары туймай. Аҡ ҡар-

**-31-**

(1)ҙы ярып, лапылдап артабан китәләр. Яланды үтеп, килеп еттеләр, ти, бер йорт янына.

Ҡараһалар, ишек алды тулы ниндәйҙер аҡ, ҡара, сыбар ҡоштар йөрөй, ерҙән ем сүпләй. Ас өйрәктәр емгә ябырылған. (5)Тауыҡтарын ҡарарға сыҡҡан хужа, ябырылып ем сүпләүсе ят ҡоштарҙы күргәс, аптырап ҡалған. Шунан өҫтәп тағы ла ем һалған. Өйрәктәр уныһын да ашап бөткәндәр. Бөткәндәр ҙә, теҙелешеп ятып, йоҡлап та киткәндәр. Хужа уларға оя яһаған да бикләп ҡуйған. Шунан бирле өйрәктәр кешелә йә-(10)шәй башлаған, ти.

## БҮРЕ НИ ӨСӨН АЙҒА ҠАРАП ОЛОЙ?

Бынан күп йылдар элек ҡалын ҡара урманда йәшәгән, ти,г Бүребай. Ул бик яҡшы күңелле, изгелекле, яғымлы булған икән. Урмандағы бөтә тереклек менән дуҫ йәшәгән, матур(15) йырлаған Бүребай. Аҡланға сығып, йырлай башлаһа, урмандағы бөтә йәнлектәр, ҡош-ҡорт йыйылып тыңлаған уның моңло йырҙарын. Ҡылт иткән тауыш та ишетелмәй ине, ти. Тик йыр бөткәс кенә, бөтәһе лә дәррәү ҡул сабып, Бүребайҙы маҡтап бөтөр әлмайҙар икән.
(20)-О-у-у, үлтерҙең, Бүребай, — тип үкереп илап, ерҙә тәгәрәп йөрөй, ти, Айыу. Һунарсылар атып алып киткән әсәһе иҫенә төшөп, туҡтай алмай икән.

— Ах, ниндәй тауыш, — тип сутылдаша икән ҡоштар ҙа. Бүребайҙы бөтәһе лә маҡтай, данлай, ти. Төлкөбикә генә бер(25) ни ҙә өндәшмәй ултыра. Хәйләкәрлеге өҫтөнә бик көнсөл дә булған, ти, ул. Уға Бүребайҙың даны һис тә оҡшамаған. «Нисек тә булһа аҡылға ултыртайым мин быны. Әгәр ҙә мәгәр шуны эшләй алмаһам, исемем Төлкөбикә булмаһын», — тип, ялпылдаҡ ҡойроғон ергә ҡабат-ҡабат һуғып ала икән. Көнө-(30)төнө мәкер уйлап баш ватҡан. Шулай уйлай торғас, табылған бит хәйләһе.

Яҙҙың иҫ киткес күңелле, салт ҡояшлы бер көнө ине, ти. Бүребай үҙе ятҡан йырҙарҙы ҡабатлап, яңы йыр өйрәнеп ултырған булған. Шаулап гөрләүектәр аға, йырламай нисек (35)түҙәһең инде.

Шул ваҡыт ағастар араһынан, йомшаҡ ҡына баҫып, яғымлы (37)йылмайып, Төлкөбикә килеп сыҡҡан, ти. Ул, ун һығылып,.

**-32-**

бишкә бөгөлөп, Бүребайға яҡынлашып, уны ҙурлап, ике ҡулын биреп күрешкән.

— Бүребай, һинең матур йырлауынды бөтәһе лә белә, мин,дә бик яратам. Тауышың шундай көслө, шундай моңло. Ошо хәбәрҙе Ай ҡыҙы ла ишеткән. Бүребайҙың бер генә тапҡырбулһа ла миңә атап йырлағанын ишетһәм, кире ергә ҡайтыринем, тип әйтә, ти.—Төлкөбикә шулай тигән дә урман эсенәлнеп юғалған. Бер ҡатлы Бүребай ышанды ла ҡуйҙы, ти.

Бына ҡояш тау артына төшөп юғалған. Күктә яңғыҙ Ай ҡыҙы күренгән. Ул бик моңһоу, хәсрәтле булып күренгән Бүребайға. Ул аҡлан уртаһына сығып, Айға төбәлеп, үҙенең иң матур, иң моңло бер йырын һуҙып ебәргән, ти. Таң атҡансы, бер туҡтауһыҙ йырлаһа ла, һаман шулай моңһоу йылмайып тороуын дауам итте, ти, Ай ҡыҙы. Ергә төшөргә уйламаны ла, ти. Бүребай: «Ай ҡыҙына минең был йырым оҡшаманы, ахырыһы, иртәгә тағы йырлармын», — тип үҙен тынысландырҙы, ти. Шул көндән алып, ҡыш тимәй, йәй тимәй, Ай ҡыҙына бағышлап, йырҙар йырлай икән. Ә Ай ҡыҙы төшмәй ҙә төшмәй. Ҡайһы бер көндәрҙә уны болоттар ҡаплап, күренмәһә, Бүре-бай, хәсрәтенән ни эшләргә белмәй, урман буйлап саба, үҙенә урын таба алмай икән. Төлкөбикә хәйләһенең барып сығыуына һөйөнөп, ағас артынан шыпырт ҡына күҙәтә, ти, уны. Шулай йырлай торғас, Бүребайҙың тауышы бөттөлә ҡуйҙы, ти. Төлкөбикә быға бик ҡәнәғәт булды, ти. Бер көНдө килеп, Бүребайға: — Ҡара әле, һинең тауышың бөткән бит. Тауышыңды Айалған.

Бүребай, олоуынан туҡтап:

— Нимә эшләйек инде хәҙер? Тауышымды нисек кире һорап алайым?

Төлкө оҙаҡ ҡына уйланып ултырған булып, ҡойроғо менән елп-йолп ергә һуғып ҡуйған.

— Иә, ҡойроғом, йә ялбырым, юлын өйрәт. — Ҡойроғон ҡосаҡлап, ҡолағына ҡуйып тыңлап ултырған булды, ти, үҙе. Тын алмай күҙәтте, ти.

-Бына булды ла, миңә тылсымлы ҡойроғом былай тине: дою көндән башлап, гел йырла, шунан тауышың кире ҡайтыр, — тигән дә Төлкөбикә үҙ юлына китеп тә барған.

Бүребай ышанған. Тағы ла тырышыбыраҡ йырлаған, ти, был, йырлаған һайын, тауышы бөткән. Моңо ла юҡ, көйө лә юҡ. Төлкө тағы ла килгән, ти.

## -33-

—Туғанҡайым, әйҙә берәй көндө байрам үткәреп алайыҡ,һин күптән урман халҡы әсән йырлағаның юҡ. Улар һине бикһағынды, — тип юхалаған. Бүребай шатланып риза булған.

Бына бер көндө бөтә йәнлектәр ҙә аҡланға йыйылып, түҙемһеҙләнеп Бүребайҙың йырлағанын көтәләр, ти. Уртаға сығып, йырлап та ебәрҙе, ти, Бүребай. Тик ни ғәжәп? Элекке моң урынына йәмһеҙ, йән өшөткәс олоу ғына сыға икән. Аптырап ҡалғандар йәнлектәр. Ҡурҡа башлағандар. Берәм-берәм шым ғына аҡланды ташлап киткәндәр. Иң беренсе Төлкөбикә һыпыртҡан. Бүребай үҙенсә йырлап бөтөп, тирә-яғына ҡараһа, бер кем дә юҡ икән. Маҡтау һүҙҙәре лә ишетелмәй. Ул йүгереп, йәнлектәрҙе эҙләй башлаған. Ҡайһыһына килеп һүҙ ҡушһа ла, өндәшмәй, баштарын баҫып, түбән ҡарап үтәләр, ти. Тора-бара Бүребайҙың юлында тап булмаҫ әсән, әллә ҡайҙан урап үтәләр, ти. Бүребайҙың шундай асыуы килгән. Шунан бирле уҫал холоҡло йыртҡысҡа әйләнгән. Тик һаман да үҙен иң шәп йырсы тип уйлап, Ай ҡыҙын саҡырып, тән уртаһы еткәс, бөтмәҫ йырын һуҙа. Урман йөрәкте өшөткәс хәсрәтле, йәмһеҙ тауыш менән тула, ти.

### НИ ӘСӘН СЕБЕН, СЕРЕКӘЙ БЕР УРЫНДА ЙӘШӘМӘЙ?

Борон-борон заманда бер бабайҙың өйөндә йәшәгән, ти, себен менән серекәй. Улар бик дуҫ булғандар. Себен безелдәп йөрөгән, серекәй серкелдәп йөрөгән. Бер ваҡыт былар бәхәсләшеп киткәндәр.

-Йә, серекәй әйт, һин зыянлыраҡмы, мин зыянлыраҡмы? — тип безелдәп ебәргән, ти, себен.

— һин с-зып-с-зыян, с-зып-сз-зыян, — тип серкелдәгән серекәй.

— Иң тәм-м-ле-леһе ним-м-м-мә? — тип һораған себен. -С-с-сәскә с-сәйе, сәс-с-скә сәйе, — тигән серекәй.

— Шәкәрһеҙ-ҙ-ҙ түҙ-ҙ-ҙмәйем, шәкәр-һеҙ-ҙ-ҙ түҙ-ҙ-ҙмә-йем, — тигән себен.

Бәхәсләшкәндәр, бәхәсләшкәндәр былар, бер-береһен еңә алмағандар. Бабайҙан һорарға булғандар. Бабай йоҡлап ята икән. Үҙе ауыҙын асып хырылдай икән. Себен бабайҙы уятырға теләп, беҙ-беҙ-беҙ тип бите буйлап йөрөгән, ауыҙына инеп сыҡҡан. Бабай мыйығын ғына һелкетеп ҡуйған. Уянмаған.

Серекәй серкелдәп тегеләй осҡан, былай осҡан. Бабайҙың

2 Заказ 433

**-34-**

маңлайына ҡунып, ҡанын һура башлаған. Бабай һикереп торған да серекәйҙе ҡыуа башлаған, себен мейес артына боҫҡан. Серекәй көскә ҡасып ҡотолған. Шуға ла ул кис булғас, ҡараңғы төшкәс кенә, себен дуҫының хәлен белергә килә лә: — З-зыян, зы-зыян, — тип үсекләп оса икән. Себен өндәшмәй, мөйөшкә боҫа, ә кеше серекәй тауышын ишетеп, баҫтыра башлай.

## ҠОЯШ МЕНӘН Ай

Борон-борон заманда ҡайҙалыр көләс йөҙлө Ҡояш йәшәгән, ти. Уның шаян ғына тиктормаҫ Ай исемле ҡыҙы булған. Ҡояштың һәнәре — келәм туҡыу икән, ти. Келәмдәрҙең һәр береһенең үҙ исеме бар, ә шулар араһында иң матур келәм «Ер» тип аталған.

Келәмдәр ябай түгел, серле икән: уларға ике тапҡыр һуҡһаң, осалар ҙа китәләр, ти.

Бер мәлде Ҡояш, эшенән туҡтағас, ашаған-эскән дә йоҡларға ятҡан. Шуны ғына көтөп торған Ай, тиҙ генә келәмдәр бүлмәһенә инеп, бөтә келәмдәргә лә икешәр тапҡыр һуғып сыҡҡан. Ҡараһа — келәмдәр юҡ! Ай әсәһенең асыуланасағын һиҙеп, тиҙ генә «Ер» келәме аҫтына ҡасҡан һәм келәм менән бергә осоп киткән.

Ҡояш, йоҡоһонан торғас, ҡыҙын үҙ янына саҡыра башлаған. Тик Ай һаман әсәһе янына килмәй ҙә килмәй, ти. Шунан әсәһе борсолоп ҡыҙын эҙләргә керешкән. Келәмдәр араһына инеп ҡасҡандыр, тип йыһанға сыҡһа — келәмдәре лә, ҡыҙы ла юҡ!

Шул ваҡыттан бирле Ҡояш көн һайын, йоҡоһонан уянғас та, ҡыҙын эҙләргә сыға икән, ти. Ләкин бер нисек тә уны таба алмай, сөнки Ай, үҙ ғәйебен белеп, әсәһе эҙләгән саҡта келәм аҫтына ҡаса, тик әсәһе йоҡларға ятҡас ҡына сығып йөрөй, ти. Улар бер-береһен һағынғандар, ҡайғынан йөҙҙәре һарғайған. Әле һаман Ҡояш менән Ай осраша алмай икән.

## СИХРИ МОҢ

Борон-борон заманда бер ҡара урман эсендә әбей менән бабай йәшәгән, ти. Ашарҙарына икмәктәре, кейерҙәренә кейемдәре булмаған. Шулай йәшәп ятҡанда, уларҙың бер ма-

## -35-

лайҙары донъяға килгән, ти. Ай үсәһен көн үҫеп, йыл үсәһен ай үҫеп, был бик батыр һәм көслө булып үҫеп еткән, ти. Ҡартайған ата-әсәһен ул үҙе ҡарай башлаған, ти. һунарға йөрөгән, йәнлектәрҙең тиреһен ул икмәк-тоҙға алмаштырып алып ҡайта торған булған. Шулай итеп, улар көн күргәндәр, көндө төнгә бәйләгәндәр.

Шулай йәшәп ятҡанда, илгә ҙур бәлә килә, ти. Күрше батша һуғыш аса. Уға берәү ҙә ҡаршы тора алмай, ти. Батшалыҡтың бик күп аҫыл, көслө егеттәре баштарын һалғандар, ти.

Бына, беҙҙең егеткә лә яуға китергә ваҡыт еткән, ти. Китер алдынан атаһы уны саҡырып алған да ҡурай биргән.

— Дошман ғәскәре яҡыная башлағас, ошо. ҡурайҙы уйнарһың, — тигән, ти.

Бына, дошмандарҙың ғәскәре ябырылып килә икән, ти. Шул ваҡыт егет ҡурай тартып ебәргән, ти. Уның тауышын ишеткән дошман ғәскәре туҡтап ҡалған, ти. Был ҡурай моңонда халыҡтың аһ-зары ла, тыуған төйәктең матурлығы ла булған. Был сихри моң ғәскәр алдында килгән дошман батшаның да йөрәгенә үтеп ингән. Ул үҙенең ғәскәрен кире бороп алып ҡайтырға мәжбүр булған, ти. Был хәлде күреп торған батша бик ҺӨЙӨНГӘН. Егеттең үҙен дә, уның ата-әсәһен дә үҙ янына алдырған. Улар үҙ ғүмерҙәренең һуңғы КӨНӨНӘ саҡлы батша һарайында матур ғүмер иткәндәр, ти.

## ТЫҢЛАУҺЫҘ ҠУЯН БАЛАҺЫ

— Әсәй, уйнарға сығайыммы? — тип һораған Ҡуян малайы.

— Юҡ, улым, сыҡмайһың, бындай КӨНДӨ бүре урманға һунарға сығырға ярата, — тигән әсәһе. -Әй-й, әсәй, бүренән тамсы ла ҡурҡмайым мин. Бер-ике-өс — йүгерҙем. Бер-ике-өс — һикерҙем. Бүренеме һуң артымдан еткерҙем. Сығам-сығам.

— Улым, бәләкәсем минең, бүре һин уйлағанса...

Ләкин улы әсәһененең һүҙен тыңлап торманы, сыҡты ла сапты, ти.

Көн ҡояшлы, йылы. Үләндәр йәм-йәшел булып күҙҙең яуын ала. Урманда шундай күңелле.

Ҡуян малайы шарҡылдап көлә-көлә һикергеләп уйнай

**-36-**

башлаған. Шул саҡ көтмәгәндә кемдер уны ҡыҫып тотоп алған. Ҡуян малайы, әйләнеп ҡарағас, эргәһендә тештәрен шығырлатып тороусы бүрене күргән.

— Әсәй! — Ҡуян малайы әсе итеп ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалған.

— Ашайым, ашайым һине, — тип, бүре уның эргәһендә тыпырлап бейей башлаған.

— Туҡта, Бүребай. Мин һиңә иҫ киткес бер нәмә һөйләйем. Шунан һуң ашарһың бәләкәсте. — Бүре ҡаршыһында Ҡуян малайының әсәһе тора икән.

Бүрегә ҡыҙыҡ булып китә. Ә Ҡуян малайы әсәһенең шундай батыр һөйләшеүенә аптырай.

— Бүреләр ҡуяндарҙы яратмайҙар. Уға минең улым да,һеҙ ҙә, мин дә ғәйепле түгел. Ләкин беҙҙең һеҙгә бер зыяныбыҙ ҙа тейгәне юҡ.

Бүре асыулы йылмая:

— һүҙеңде ҡыҫҡа тот. Минең һине тыңларға ваҡытым юҡ.

— һеҙҙең ҡулда минең улым. Күптән күргәнем юҡ ине. Яҙ көнө төлкөләр урлап алып киткәйнеләр. Мин һеҙгә бер сер аса алам.

— Ниндәй сер ул? — Бүре һағайып, тыңлай башлай. Ҡуян малайын тотҡан ҡулы хатта бушап китә.

— Мин һеҙҙе йәлләйем. Төлкөләр һеҙҙе үлтерергә теләй. Хәйлә ҡора улар күптән. -Шунан, шунан. — Бүре түҙемһеҙләнеп Ҡуянға яҡынырaҡ килә, — хатта Ҡуян малайын ҡулынан ысҡындыра.

— Төлкөләр минең баламды ағыулап һеҙҙең юлға сығарып ҡуйған. Ашаһағыҙ, хәҙер үк үләсәкһегеҙ, — тип шыбырлап ҡына өндәшә Ҡуян-әсә.

Бүре ышаныр-ышанмаҫ Ҡуян малайына әйләнеп ҡарайым тиһә, унан елдәр иҫкән. Алдына әйләнһә, Ҡуян-әсә әллә ҡасан бынан киткән. Бүре асыуынан шартлар сиккә еткән. Ә Ҡуян малайы, әсәһенә рәхмәттәр уҡый-уҡый, өйөнә ҡайтып еткән.

## **АЙЫУ** МАЛАЙЫ **НИҢӘ ИЛАУЫН ТАШЛАНЫ?**

Бер урманда бик еңмеш, илаҡ Айыу малайы йәшәгән, ти. Кемдең нимә эшләгәнен күрһә, шуны һорап илай икән. Ағас башында сәтләүек ярыусы тейенде күргәс, мин дә шунда ме-

**-37-**

неп сәтләүек ярам тип, өс көн, өс тән илаған. Әсәһе аунап ятҡан бер ҡороған ағас ботағына ултыртып, тейендән һорап сәтләүек тотторғас ҡына туҡтаған, һикерәнләп йырлап йөрөүсе Ҡуян ҡыҙыҡайын күргәс, шулай һикергеләп йырлағым килә, тип дулаған.

— О-у-у, һикерәм, йырлайым. Ниңә мин улай йырлай алмайым? О-у-у.

— Улыҡайым, тынысланып ҡына йырлап ҡара әле, һинең тауышың уныҡынан да матур. Кил әле, кил. Ә һикереүең унан да бейегерәк. Кил, бәпесем, һикертеп йөрөтәйем. Туп та һиндәй һикерә алмай, — тип әсәһе уны өгөтләп маҡтағас, ул көскә тынысланған.

Айыу малайы һайыҫҡандың шыҡрыҡлап осоп йөрөүен күргәс, әллә нисә көн туҡтай алмай үкерә. — О-у-у, минең осҡом килә, осҡом килә!

Әсәһе күпме өгөтләмәһен, иркәләмәһен, ыңғайға килмәй. Айыу малайы тауышына берәү ҙә йоҡлай алмай. Бөтәһенең йәненә тейә был. Ҡоштар йыйылышып кәңәшләшәләр ҙә ҡаурыйҙарҙан ҡанат яһап, Айыу малайына кейҙереп,: тау башына мендереп, осороп ебәрәләр.

Айыу мал айы. башта көлә-көлә рәхәтләнеп осоп йөрөй. Үҙҙәре йәшәгән урманды бер нисә урай, әсәһенә ҡул болғап сәләмләп китә. Осоп йөрөй торғас, ялҡып китә был. Асыға. Төшәйем тиһә, бер нисек тә төшә алмай. Бына тотона үкереп иларға. Урманда бөтөнләй тыныслыҡ бөтә. Уға төрлөсә өйрәтеп ҡысҡырып ҡарайҙар. Үҙ тауышына бер кемде лә ишетмәй, осоп йөрөй бирә, ти, Айыу малайы.

Ҡайҙандыр тау бөркөтө килеп сығып, Айыу малайын эләктереп алған. Нисек төшөргә кәрәклеген өйрәткән. Айыу малайы ҡыуанып илауҙан туҡтаған. Ергә төшөү менән, ҡанаттарын сисеп ташлап, алпан-толпан әсәһе янына йүгергән. Шул көндән башлап ул башҡаса еңешмәй, иламай башлаған.

## ҠЫРМЫҪҠАГӨЛДӨҢ ШАТЛЫҒЫ

Борон-борон заманда, ҡара урман араһында бер бик ма- тур аҡлан булған. Ошо аҡлан уртаһында, ялбыр ҡайын һалҡынында ҡырмыҫҡа өйө ултырған. Был өйҙә татыу, эшсән ҡырмыҫҡалар йәшәй икән. Иртән иртүк нескә билдәрен тағы ла нығыраҡ быуып, ҡырмыҫҡалар дәррәү эшкә тотоналар. Өй-

**-38-**

зәрен йыйыштырып, ишек алдарын таҙартып, үҙҙәрен тәртипкә килтерәләр. Шунан инде төркөм-төркөм булып сылбырға теҙелеп, урман һуҡмаҡтарына юл тоталар.

Ошо ҡырмыҫҡалар араһында матур Ҡырмыҫҡагөл тигән ҡыҙыҡай ҙа булған, ти. Нескә билен, тағы ла нескәрәк итеп, ебәк билбау менән быуып алған да башҡалар ыңғайына көнө-төнө эшләгән, ти, ул да. Ҡояш сығып, ҡояш байығанын ҡарап торорға ла ваҡыты ҡалмаған, ти.

Шулай көндәр үтеп киткән. Иҫәһе елдәр иҫеп, яуаһы ямғырҙар яуған, күсәһе болоттар күсеп, сәскә атаһы бөтә үлән сәскәләнеп ҡупшыланған. Ҡырмыҫҡагөлгә һәм уның туғандарына икенсе йортҡа күсергә лә ваҡыт килеп еткән. Ҡусты-һеңлеләре рәхәтләнеп иркендә уйнап үҫһен әсән, өлкәнерәк-тәре үҙ аллы тормош башларға тейеш. Күрше аҡланда күп тән инде урын һайланған. Унда йәшәүсе бөжәктәр ҡырмыҫҡаларҙы түҙемһеҙлек менән көттө, ти.

Бер көндө ҡояш сыҡҡанда, иләү гөж килеп уянған, һәр береһе яҡындары менән хушлашып, төйөнсөктәрен күтәреп, ишек алдына сыҡҡан, ти. Йәш килендәр балаларын биләүгә тәрәп алған, ҡыҙҙар көйәнтә-силәктәрен, егеттәр ҡамсыларын алған. Ҡырмыҫҡагөл дә әсәһе, һеңлеләре менән хушлашып, билдәре өҙөлә яҙып, баҙыҡ ҡына атлап сығып киткән. Тик илағыһы килһә лә түҙгән ул.

Юл еңелдән булмаған. Әле ҡороп ергә ятҡан ағасты аша үтергә, әле ямғырҙан һуң йыйылған диңгеҙҙәрҙе урарға кәрәк булған, ти. Аяҡ аҫтына ҡарап йөрөй белмәгән бер маҡтансыҡ төлкө саҡ ҡырмыҫҡаларҙы тапап китмәгән. Төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасып ҡына ҡалғандар. Ҡырмыҫҡагөл ошо мәлдә аҙашҡан да ҡуйған. Алда ла, артта ла бер кем дә күренмәй икән. Тегеләй йүгергән, былай йүгергән, берәүһе лә күренмәгән. Ҡырмыҫҡагөлгә ҡыйын булып киткән. Көйәнтә-силәктәрен ергә ҡуйып, аҙыраҡ хәл йыйып алырға булған. Шул ваҡыт уның ҡолағына бер йыр ишетелгән.

Сылтыр-сылтыр,
һыуым һалҡын,
Сылтыр-сылтыр
Йырым ҡалһын.
Ауыҙ итегеҙ һыуымды,
Йыуығыҙ бит-ҡулығыҙҙы.

Арып-талыу онотолһон,
һыуыҡ һеҙгә дауа булһын.
Сылтыр-сылтыр, сылтыр-сылтыр.
Аҙашҡандар юл тапһындар,
Арығандар, йонсоғандар
Ял итергә туҡталһындар.

## -39-

Ҡырмыҫҡагөл дәртләнеп киткән. Йыр ишетелгән яҡҡа юл тотҡан. Килеп етһә, көләс йөҙлә шаян Шишмәкәйҙе күргән.

— Эй, Ҡырмыҫҡагөл, һаумы? Ни эшләп тораһың? Әйҙә минең менән йүгерәбеҙ. Шаярырбыҙ, уйнарбыҙ, йырларбыҙ,— тип сылтыраған, ти, Шишмәкәй.

— Ми-минең хәлем юҡ, бик арыным, алыҫтан киләм, аҙаштым. Яңы йортҡа күсенеүсе туғандарым, дуҫтарымдан айырылдым, — тигән Ҡырмыҫҡагөл иламһырап.

— Минең һыуымды эс, хәҙер ҡайтыр һиңә көс, — тигән Шишмәкәй.

Ҡырмыҫҡагөл һыу эсеп алған. Хәл ингән уға. Тағы юлын дауам итергә уйлаған.

— Тороп тор, Ҡырмыҫҡагөл, мин хәҙер дуҫтарымды саҡырам, улар һиңә ярҙам итер, — тигән Шишмәкәй. Ул сылтыратып көләп ебәргән, тауышы баяғынан да ағымлыраҡ, матурыраҡ сыҡҡан. Сәскәле болондарҙан ебәк ҡанат күбәләктәросоп килгән.

Осоғоҙ, дуҫтарым,
Болондан болонға,
Яландан яланға.
Юл табып бирегеҙ

Аҙашҡан юлсыға.
Ҡыуанып атлаһын,
Йөрөмәһен талсығып.

Күбәләктәр, сәскәнән сәскәгә, болондан болонға осоп эҙләй орғас,Ҡырмыҫҡагөлдөң туғандарын күреп ҡалғандар, ти.- Улар яңы ғына килеп етеп, өй һалырға йүгерешеп йөрөй-ҙәр икән. Тиҙ генә килеп, Ҡырмыҫҡагөлдө алып киткәндәр. Ҡырмыҫҡагөл, Шишмәкәйгә рәхмәт әйтә-әйтә, силәктәрен шифалы һыу менән тултырып, күбәләктәр артынан эйәргән.

## ШИШМӘ ТАУЫШЫ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Уларҙың Айһылыу исемле бик һылыу ҡыҙҙары булған. Айһылыу тау битенән ағып сыҡҡан шишмәгә көн һайын һыу алырға килгән.

Шулай көндәр үтә торған. Бер көндө Айһылыу һыуға килһә, шишмә урынында юҡ, ти. Баш осонда үҫеп ултырған пар ҡайынды ла кемдер киҫеп алып киткән. Айһылыу бер аҙ аптырап баҫып торған да шишмә сыҡҡан урынды таяҡ менән со-

-40-



**-41-**

ҡой башлаған, ти. Көнө буйы ҡаҙған ул урынды. Өйгә һыуһыҙ ҡайтырға ярамай бит инде.

Кискә тиклем эшләгәс, Айһылыу ял итергә ултыра һәм, үҙе лә һиҙмәҫтән, йоҡлап китә. Төшөндә ул шишмәне күрә. «Ми-нең яҡын дуҫтарымды — ике ҡайынды юлаусылар миндеккә киҫеп алып киттеләр, — ти ул. — Улар юғалғас, ҡоштар ҙа килмәй башланы. Яңғыҙыма бик ауыр булды һәм мин уларҙы эҙләп киттем. Тик береһен дә таба алманым, ҡайта торған юлымды ла оноттом, һиңә рәхмәт инде: мине" табып, яҡты донъяға сығарҙың».

Шишмә тауышына Айһылыу тертләп уянып китә. Ҡараһа, ысынлап та, шишмә яңынан сылтырап ағып ята. Айһылыу күнәктәренә тултырып һыу ала ла ҡайтырға сыға. «Ҡара әле, шишмәләр ҙә кешеләр кеүек икән, — тип уйлай ул. — Дуҫһыҙ йәшәй алмайҙар».

Ошо көндән һуң Айһылыу, атаһы менән килеп, шишмә буйына ағастар ултыртҡан, ти. Шишмә әле булһа, Айһылыуға рәхмәт әйтеп, ағып ята икән. Ә тирә-яғындағы ағастар үҫеп ҡарурманға әйләнгән.

## ҠУЯН ҠЫҘЫ

һоро Ҡуяндың үҙе төҫлө ҙур ҡолаҡлы бик иркә, бик ҡәҙерле бер ҡыҙы булған. Ул уны бик ярата икән.

Көндәрҙән бер көндө Ҡуян иркә ҡыҙына өр-яңы быйма алып ҡайтып биргән. —Мә, бәпесем, аяҡтарың туңмаһын, һыҙламаһын, —тигән.

Ҡыҙы был бүләкте бик шатланып алған. Әсәһенә рәхмәттәр әйткән. Хәҙер инде ул, яңы быйманы кейеп, рәхәтләнеп йөрөй икән. Ләкин Ҡуян ҡыҙы йылы быймаға өйрәнмәгән бул-ған. Ул уларҙан бик тиҙ туйған, һалып ташлаған. Әсәйем тап-маһын тип, уларҙы йәшереп ҡуйған. Әсәһе уларҙы эҙләп табып, балаһына кейҙергән, ә ул һалып ташлаған.

Ялан аяҡ ҡар өҫтөнән дә, боҙ өҫтөнән дә йүгерә икән. Бер көн буйы шулай йүгергән, икенсе көндө лә шулай ялан аяҡ йөрөгән. Өсөнсө көндө инде аҡһай-аҡһай әсәһе янына килгән.

— Әсәй, әсәй, минең аяғым бик ауырта! —тигән. Әсәһе уның аяҡтарына ҡараған да аптырап ҡалған. -Ҡыҙым, яҡты йондоҙом, һинең аяғың шешкән бит, —

## -42-

(1)тигән. «Инде ни эшләргә?» — тип уйға батҡан Ҡуян. «Был баланы ҡайҙа алып барырға, нисек дауаларға? — тип ҡайғырған.

Шул ваҡыт нимәлер ҡысҡырған. Ҡуян, ағас башына күтә(5)релеп ҡараһа, тейенде күргән. Ул Ҡуянға:

— Ҡайғырма, туғанҡай, йомшаҡ Ҡуянҡай, ҡыҙыңдыңаяғын бик тиҙ төҙәтеп була. Бының әсән доктор Айболитҡабарырға, унан кәңәш һорарға кәрәк, — тигән.

Тейен ҡуянға ысынлап булышырға, доктор Айболиттың (10)өйөнә үҙе илтергә булған.

Ҡуян ҡыҙын күтәргән дә доктор Айболитҡа киткән, тейен, ағастан ағасҡа һикереп, уға юл өйрәткән.

Барып етһәләр, доктор Айболиттың эше бик күп, уға урмандың төрлө йыртҡыстары дауаланырға килгәндәр икән. «Бала(15)ларҙы сиратһыҙ ҡарайым мин», — тигән доктор Айболит. Ҡуян ҡыҙын доктор бүлмәһенә алып ингәндәр, нимә менән ауырыуын һөйләп биргәндәр. Доктор Айболит Ҡуян ҡыҙының аяғына дарыуҙар һөрткән, шунан һуң Ҡуян ҡыҙына:

— Аяғың төҙәлгәс, быймаларыңды инде һалҡын көндәрҙә(20)бер ҙә һалма, әсәйеңде тыңла, тағы насар хәлдә ҡалма,—тигән.

Улар, доктор Айболитҡа бик ҙур рәхмәттәр әйтеп, өйҙәренә ҡайтып киткәндәр. Өс көн тигәндә, Ҡуян балаһының аяғы төҙәлгән. Ул хәҙер быймаһын бер ҙә һалмай кейеп йөрөй икән.

### (25)БУЯУСЫ ӨКӨ

*Т. Ғәниева*

Борон заманда Уралиә тигән илдә ҡарғалар аҡ булып, өкөләр бөтә ҡоштар кеүек, көндөҙ осоп йөрөгән, ти. Өкөләрҙең әле ғәжәп күренгән бер һөнәре булған: улар тирә-яҡта буяусы (30)булыуы менән дан тотҡан. Әллә ниндәй, әллә ниндәй үләндәр-ҙән буяу ҡайнатып, үтенес менән килгәндәрҙең йомошон үтәр булған өкөләр. Ул саҡта беснәк, һайыҫҡан, һаралйын, кәкүк, әтәс-тауыҡтар, сыйырсыҡ, һандуғас ниндәй төҫтә булғандыр, һәр хәлдә, бөгөн беҙ күреп белгән ҡоштарҙың төҫ-ҡиәфәте (35)әлеге лә баяғы өкө-оҫтаның эшмәкәрлегенә бәйле. Ҡоштарҙың ҡанат-ҡаурыйын өкө үҙе теләгәнсә буяп сыҡҡан да, улар әле лә шул көйө йөрөй, ти.

(38)Өкө-буяусының рәссам һәләтенән файҙаланып, ҡоштарҙың

## -43-

бөтәһе лә тиерлек үҙ төҫөн үҙгәртеп бөткәндәр. Элеккесә ап-аҡ көйө осоп йөрөгән ҡарға ла бәхетен һынап ҡарарға булып,, оҫтаға мөрәжәғәт иткән.

— Өкө дуҫ, — тигән ҡарға, — бөтә ҡоштар ҙа элекке ҡиәфәтен үҙгәртеп бөттө, ә мине, тоталар ҙа «аҡ ҡарға, аҡ ҡарға», тип үсекләйҙәр, ҡош-ҡорт араһына сығыр әмәл юҡ, буяулы ҡанаттарын елпеп, минән суҡыш боралар, былай йәшәүеҡыйын, минең дә ҡаурыйҙы буя әле.

Күҙенә ҡалын быяла күҙлек кейгән өкө ҡарғаға һынап ҡарап торған да былай тигән, ти:

— Улай бик бөтөрөнмә, ҡарға әхирәт, һинең суҡышыңа,күҙеңә һоро төҫ килешер ине. Үҙеңде танымаҫһың да, бынакүр ҙә тор, бик һылыу буласаҡһың, һоро ҡарға зерә матур' була ул.

«Өкөнөң оҫта тигән даны сыҡҡан, — тип уйлаған ҡарға,— ана бит, элек, йомортҡа урлайым, тип төнәккә ингәндә, әтәсте тауыҡтарҙан айырып та булмай ине, хәҙер ҡалайыраҡ йөрөгән була. Үҙен ул, бәлки, ҡойроғо йәйғор төҫөнә буялғас, тауис итеп хис итәлер, әммә уға тауис булырға йыраҡ әле, шулайҙа күҙгә ташлана, һуңғы ваҡытта айырыуса ҡыйыуланды. Юҡҡа түгел, ошо өкөнөң генә эше. һоро ҡарға булып алһам, миңә лә ҡыйыулыҡ өҫтәлер, ҡара ерҙә ап-аҡ булып күренеп тә тормам».

— Мин риза, — тип яуап биргән, ти ҡарға өкөгә. — һоро булғас, һоро булһын, әйҙә. Тик буяуың етерлекме?

— Буяу етерлек, — тигән өкө, — һиңә ней әллә ни күп буяу ҙа кәрәкмәй.

— Нисек инде күп кәрәкмәй? — ти икән быға ҡарға, — һин инде буяуыңды йәлләмә, өкө дуҫ.

Өкө ҙур ҡаҙанға һыу тултырып, аҫтына ут яҡҡан, һыуға буяу һалған да болғата-болғата ҡайната башлаған. Оҙаҡ ҡайнатҡан ул буяуын. Сабырһыҙ ҡарға, ҡаҙанға күҙ һала ла, әҙерәк күренә бит, тип буяуҙы өҫтәтә бирә, ти.

Ниһәйәт, өкө эшен тамамлаған, усаҡты һүндереп, буяулы һыуҙы һыуытҡан да, ҡарғаға ҡаҙанға төшөргә ҡушҡан. Ҡарға ирәйә биреп, күҙен йомоп, әлеге төнәтмәгә сумған. Тик... Кире килеп сыҡһа, һороноң әхирәтенә лә оҡшамаған ҡара төҫкә ингән дә ҡуйған, ти. Ары һуғылған ҡарға, бире һуғылған, тик ни ҡылһын, сара юҡ. Күлгә күҙе төшһә, үҙе лә ҡурҡырлыҡ ҡара ҡарға ҡарап тик тора, ти, быға.

## -44-

—Көнөң бөттө, өкө, — тип ҡарҡылдаған ҡарға йән асыуға. — Минең күҙгә бүтән күренәһе булма! Ҡар-р-р!

Ана шунан бирле ҡарға ҡараға әйләнгән, ә өкө, ҡарғаның ҡарғышынан ҡурҡып, тән ҡуйыныңа һыйынған, ти. Буяу, һү-рәт төшөрөү, рәссамлыҡ һәнәрҙәрен дә ташлаған ул. Ҡоштар ҡарғаға, өкөнө ғәфү ит, тип мөрәжәғәт итеп ҡараған. Тик шунда уҡ «ҡар-р-р!» — тип ҡарғана башлай ти был. Ә уның ҡарҡылдауына ҡарағанда, буяуһыҙ йөрөүең хәйерле түгелме ни?

### ӨС ДУҪ

Борон-борон заманда Ирәндек тауҙарындағы бер мәмерйәлә йәшәгән, ти, өс дуҫ: Бурһыҡ, Терпе һәм Сысҡан. Бик татыу торғандар, ти, былар: йәй буйы ял белмәй ҡышҡа аҙыҡ әҙерләгәндәр. Тамаҡтары туҡ булғас, ҡыштың ҡаты бураны ла, сатлама һыуығы ла һиҙелмәгән уларға.

Быларҙың дуҫ йәшәүен күреп, Айыу, Бүре, Төлкө бик көнләшкән, ти.

Берҙән-бер көндө улар үҙ-ара кәңәшләшкәндәр ҙә өс дуҫтың аҙығын тартып алмаҡсы булғандар, ти.

Төлкө, ҡупшы ҡойроғон болғап, хәйләкәр йылмайып: «Ут төртәйек беҙ уларҙың өйөнә!» — ти икән.

Быға Бүренең тамам асыуы килгән:

— Ах, һин, кәбәк баш! — тип екергән, — ти, ул. — Уларҙың өйөнә ут төртөп, ниндәй байлыҡтарын алмаҡсы булаһың?

Төлкө ҡурҡып сауҡалыҡҡа инеп ҡасҡан, ти.

Айыу менән Бүре юлдарын дауам иткән. Бурһыҡ, Терпе һәм Сысҡандың өйөнә бик аҙ ғына ара ҡалғас, Бүре: «һин, Айыухан олатай, бик ҡартайып та киттең. Тештәрең дә ҡойолған. Эшләп ыҙаланмаҫһың инде: мин сәйнәрмен, һин көтөп то-роһоң да биргән һөйәктәрҙең елеген имерһең», — ти икән. Айыу ныҡ асыуланып, Бүрегә киҙәнгән, ти. Тик ул әйләнгәнсе, тегенеһе табанын ғына ялтыратҡан.

Ә Айыу юлдаштарының шулай ҡомһоҙ булғанына шул тиклем ныҡ асыуланған, ти, хатта ауырып китеп, өңөнә ҡай-тып ятырға мәжбүр булған.

Бына шунан һуң ул ҡышты өңөндә үткәрергә ғәҙәтләнгән икән.

## - 45-

Ә өс дуҫ — Бурһыҡ, Терпе, Сысҡан — әле лә татыу ғүмер итәләр, ти. Берҙәм булғас, бер ниндәй йәнлек тә еңә алмай,. ти, уларҙы.

### АЙЫУ НИҢӘ ҠУРҠА?

Бер кеше урманға утынға барған, ти. Утын ҡырҡып арығас, ағас төбөнә ял итергә ултырған икән. Шул саҡ уның эргәһенә айыу килгән.

— Эй, кеше, әйҙә көрәшәйек, — ти икән айыу.

Кеше айыуға ҡараған да уйға ҡалған.

«Шундай ҙур йыртҡыс менән нисек көрәшәһең! Алғы аяҡтары менән бер ҡыҫһа ла, йәнеңде алыр бит был».

— Ә, юҡ, — тигән кеше, — ниңә һинең менән көрәшеп торорға! Әйҙә, иң элек көс һынашып ҡарайыҡ!

— Ә нисек? — тип һораған айыу. Кеше балта алған да ағас төбөн ярған, уның ярығына сәй ҡаҡҡан һәм әйткән;

— Ошо ағас төбөн ҡулың менән ҡайыра алһаң, көслө булаһың. Шул саҡ мин һинең менән көрәшермен.

Ә айыу, оҙаҡ уйлап тормайынса, ҡулын ағас ярығына тыҡҡан. Кеше шул арала сөйҙө балтаһы менән һуғып та сығарған.

Шул саҡ ағас төбө шарт итеп ябылып, айыуҙың ҡулы ҡыҫылып ҡалған. Тимер ҡыҫҡысмы ни!

Айыу аҡыра, үрһәләнә, ә ағас төбөнән ҡулын ала алмай, ти.

— Йә, нисек? — ти кеше. — Минең менән көрәшәһеңме?

-Ю-юҡ! — тип аҡыра айыу. — Көрәшмәйем!

— Ана шул-шул! — тигән кеше. — Көс менән генә түгел, -аҡыл менән дә көрәшеп була.

Кеше ағас төбөнә тағы сәй ҡаҡҡан, айыу ҡулын тартып :алған да, артына ла боролоп ҡарамайынса, урманға һыпыртҡан.

Шунан бирле айыу кешенән ҡурҡа, ти.

### ЯЛҠАУ МЕНӘН ШАЙТАН

Бер ата ялҡау булған, ти. Бер ҡайҙа эшләмәгән, бер ҡайҙа уҡымаған. Бар шөғөлө: «Эшләмәйенсә генә, нисек итеп анһат йәшәргә икән»,— тип хыялланып, көндәр буйы буш ятыу булған. Шулай бер көндө был бер күпер төбөндә ултыра, ти.

# -46-

—Эх, шайтан, ҡайҙан аҡса табырға инде? — тип әйтеүе булған, «мин бында, мин бында» тигән тауыш ишетелеүе булған. Башын күтәреп ҡараһа-а-а — алдында ағас аяҡ, туҫтаҡ күҙ, кәкре мөгөҙ, ялбыр сәс шайтан тора, ти.
-Нисек аҡса табырға инде, тиһеңме?

— Шулай тим шул.

— Уны табыуы анһат ул. Ошо күперҙән аръяҡҡа сыҡ та бирьяҡҡа сыҡ, аръяҡҡа сыҡ та бирьяҡҡа сыҡ. Сыҡҡан һайын кеҫәңдәге аҡсаң ике мәртәбә күбәйә барыр.

-Була ул, — тигән ялҡау, һикереп тороп.

— Тик бер шартым бар шул. Күперҙән сыҡҡан һайын, егерме дүрт тинеңде миңә бирә барырһың.

— Була ул, — тигән ялҡау, ашҡынып.

Ялҡау, йүгереп күпер аша аръяҡҡа сығып, кеҫәһендәге аҡсаһын һанаһа, ике тапҡырға артҡан, ти. Ҡыуанысынан:

— Мә, егерме дүрт тине һиңә, — тип шайтанға тотторғанда кире йүгергән. Кеҫәһендәге аҡса йәнә ике тапҡырға ишәйгән. Шуның теүәл егерме дүрт тинен йәнә шайтанға ырғытҡан.

Ялҡау күперҙән өсөнсө тапҡыр йүгереп үтә лә, йәнә шайтандың өлөшөн биреп китә. «Аҡсаға ҡалай анһат байыҡтым былай булғас. Әле йүгерһәм, йәнә алырмын әле», — тип аҡсаһын һанап ҡараһа, ҡулына ни бары егерме дүрт тин генә эләгеп сыҡҡан. Ялҡау үҙенә-үҙе ышанмай, егерме дүрт тинен ергә һалып торҙо ла бишмәтенең йәй буйҙарын тикшереп сыҡ–ты, кеҫәләрен аҡтарып бөттө, ти, табылманы, ти, бүтән бер тин дә. Әллә төшөп ҡалып бөттө микән, тип, күпер ярыҡтарын ҡарап сыҡты, ти, — юҡ, табылманы. Шул арала ергә һалып торған аҡсаһынан да ҡолаҡ ҡаҡҡан. Уны шайтан эләктереп алған да туҫтаҡ күҙен таҫырайтып көлә-көлә китеп тә барған, күҙҙән дә юғалған.

Ялҡауланып анһатты уйлаһаң, ана шулай була ул. «Анһатты уйлаған әҙҙән буш ҡалған» тигән һүҙ шунан ҡалған, имеш, тиҙәр. Шулаймылыр, бушмылыр— уны кем белә. Хәҙер баш ватып ҡарағыҙ: шайтан менән осрашҡанға тиклем

ялҡауҙың аҡсаһы күпме булған?

## -47-

### ИКЕ КҮРШЕ

Борон-борон заманда бер ярлы ҡарт менән бер бай күршеләш йәшәгән, ти. Бер көндө ярлы ҡарт бай күршеһенә килгән. Баҙарға барырға ине, бейәнде биреп тор әле, күрше, — тигән, ти, ҡарт. Байҙың ярлы ҡартҡа яуабы әҙер булған:

— Бейәм бөгөн өйҙә юҡ. Ҡайҙалыр сығып киткән, — тигән. Шул мәлдә байҙың аты кешнәп ебәргән, ти.

— Алдайһың бит! Ана бит кешнәй. Үҙең дә ишетеп тораһың, — тигән ҡарт. Бай:

— Бәй, һин миңә ышанаһыңмы, әллә бейәгәме? — тип, үҙ һүҙен бирмәй, ти.

Ҡарт ҡайтырға сыға. Ҡайтып барған ваҡытта шишма янындағы соҡор төбөндә ул бер бәрәс күреп ҡала. Бәрәс, эҫелә һыуһап-сарсап, көтөүҙән айырылып ҡалған, ти. Ҡарт аптырап тормаған, уны тотоп бәйләгән дә елкәһенә һалып үҙенә алып ҡайтҡан. Бай быны ишетеп, бер көн күршеһенә килгән.

— Һин соҡор төбөнән минең бәрәсте табып алғанһың икән. Кире ҡайтарып бир, — тигән.

Һинең бәрәсең миндә юҡ. Бар ана соҡор төбөнән эҙлә,— тигән ҡарт. Бай, китергә боролғас, ҡойма артында ғына бәрәсенең баҡырғанын ишеткән.

— Алдашаһың бит, — тигән бай. — Ана лаһа баҡырҙы.

— Һин миңә ышанаһыңмы, әллә бәрәскәме? — тигән дә ҡарт шарт итеп ишеген ябып ҡуйған.

### ҠАРАҠТЫҢ БҮРКЕ ЯНА

Элекке ваҡытта берәүҙең аты юғала. Кем урлағанын асыҡлау әсән, бөтә халыҡ бер урынға йыйыла, һорашалар-һорашалар — бер ҙә әйткән кеше юҡ. Шунан халыҡты йыйып, йәнә һораша башланылар, ти. Һорашалар-һорашалар — берәү ҙә белмәй. Шул ваҡыт бер кеше һыбай сабып килә лә:

— Мин ул кешене беләм. Урлағанын үҙем күрҙем. Уныңбүркендә һалам яна. Шул һаламға ут ҡапҡан, — тип һөрәнһала.

Шуны ишеткәс тә, халыҡ араһында ултырған берәү тота ла бүркен ҡаға. Бөтәһе лә быны күреп ҡала. Уны шунда уҡ тотоп алалар ҙа һорашып-тикшереп язаға тарттыралар.

## -48-

## ҠАРТ ӘСӘ

Борон-борон заманда үҙенең яңғыҙ ғына улы менән бер ҡатын йәшәгән. Уның ире яуҙа үлеп ҡалған булған, ти. Әсә үҙенең һаулығын да, көсөн дә йәлләмәгән, улын әҙәм итергә, уға етемлек күрһәтмәҫкә тырышҡан. Малай бер ауырлыҡ та күрмәй үҫеп еткән. Йәше еткәс, күрше ауылдан кәләш алған.

Килен килгәс, ҡарт әсәгә көн бөткән. Ҡартайып тик аяҡ юлын ғына күргән ҡәйнәһен килен булған кеше һыйҙырмай башлаған. Ҡарт ҡәйнә көнө-төнө эшләгән: абына-һөрөнә изәнен дә йыуған, һөйәлле, тарамыш ҡулдарын талдырып, көндәр буйы йылғала кер сайҡаған, төнөн ейәнен ҡараған. Ейәне уны бик яратҡан. Бер аҙым да өләсәһенән ҡалмай, экиәттәр, йырҙар тыңлаған. Әбей ҙә ейәнен яҡын күргән, күкрәгенә ҡыҫып, күҙ йәштәрен күрһәтмәй генә илаған. Килене ажғырынып яҡты йөҙөн дә күрһәтмәгән. Үҙ улы ла хәҙер- уға ят булып күренгән. Бер саҡ әбей бөтөнләй күҙҙән яҙған. Әбейҙе алты йәшлек ейәне генә тәрбиәләгән: бит-ҡулдарын йыуҙырған, тышҡа алып сыҡҡан, йәшереп кенә ашарға бирә торған булған. Ҡәйнәһенең эштән сыҡҡанын күреп, йәш ҡатын бер көн иренә:

—Әбейҙе урманға алып барып ташла, — тип бойорған.

Ире риза булмаһа ла, өгөтләй торғас, бисәһе күндергән.

Шунан һуң ир урманға барып,, яңғыҙ ҡайын төбөнә соҡор ҡаҙа. Соҡорҙоң өҫтөн сыбыҡ-сабыҡ менән ҡаплай ҙа ҡайтып әсәһенә:

—Әсәй, мин һине ҡоҙағыйҙарыңа ҡунаҡҡа алып барам,—ти.

Ҡунаҡҡа тигән һүҙҙе ишеткәс, малайы:

— Өләсәйем менән мин дә барам, — тип даулаша башлай. Атаһы бер ҙә риза булмай. Улы күҙ йәшен түгеп илай башлағас, уны ла ултыртып ала. Улар урманға юл алғас, килен шатланып ҡәйнәһенең артынан көл һибеп ҡала. Теге ҡайын төбөнә килеп еткәс, егет:

— Әсәй, килеп еттек, төш, — тигән.

Әбейҙең бер-ике атлауы була — соҡор эсенә төшөп тә китә. Быны күреп орған малай атаһына:

— Атай, өләсәйем соҡорға төштө бит, тиҙерәк сығар! —тип ҡысҡырып ебәрә.

Тик атаһы ашыҡмаған. Көрәк алған да әсәһенә:

—Әсәй, мин һине ошонда күмеп китәм, — тигән.

**-49-**

Шул саҡ малай, атаһының күрәгенә йәбешеп, йән өҙгөс тауыш менән:

— Күммә өләсәйемде! Теймә уға! Әгәр күмер булһаң, үҫкәс, үҙеңде лә ошонда күмәсәкмен!—тип ҡысҡырып иларға тотонған.

Атай кеше малайҙы тыңламаған, уны ситкә этеп ебәргән дә соҡорға тупраҡ ташларға булған. Бер күрәк тупраҡ таш-лауы булған — унан ап-аҡ бер күгәрсен осоп сыҡҡан. Ул ҡарт әсә булған. Ул ейәненә аҡ бәхеттәр теләп, улы менән килененә ҡарғыш әйтеп осоп киткән. Шуға ла малай бөтә ғүмере буйы бәхетле булған, мәрхәмәт белмәгән әсәһе менән атаһы ҡарт әсә ҡарғышынан донъялыҡта бәхет күрмәйенсә үлеп киткәндәр. Әсәһен рәнйетеп, ҡарғыш алған кеше йәлсей алмай шул ул.

## **БЕР ӘСӘНЕҢ ЗАРЫҠҠАНЫ**

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Булған, ти, уларҙың дүрт балаһы, һәйбәт кенә йәшәп ятҡанда,, әбей ҙә, бабай ҙа ауырыша башлағандар. Оҙаҡ та ятманы,, ти, бабай донья ҡуйҙы, ти. Әбейе һаман ауырый ҙа ауырый. Түшәктән ҡалҡып тороп ултырыр хәле юҡ, ти. Әсәләре шундай хәлдә булһа ла, дүрт балаһының, исмаһам, береһе уны. ҡарамай, көнө-төнө уйнап тик йөрөй, ти. Ҡарт әсә һыуһап, тамағы кибеп, бер тамсы һыуға зар булып ятҡанда ла, береһе-бер килеп хәлен белмәне, һыу бирмәне, ти, дүрт моңһоҙҙоң.

Көн артынан көн үткән. Әбейҙең хәле көндән-көн ауырая. барған. Бер көндө ул хәлһеҙ генә тауыш менән балаларын саҡырып алған да:

— Балаҡайҙарым, мин күп ятмам. Донья үҙегеҙгә ҡалыр... Шуға тиклем һыу килтереп эсереп торһағыҙсы! — тигән,, инәлеп.

— Мә, эс! — тип береһе бер сүмес һыу бирҙе лә, әсәһен онотоп, әйләнде лә уйынға тотондо, ти.

Көҙ еткән. Әсә һаман зарығып түшәктә ята. Ҡоштар теҙелешеп йылы яҡтарға китә башлаған. Шундай көндәрҙең берәһендә ҡарт әсә күккә ҡарап ятты-ятты ла, ти: «Мин дә ошо ҡоштар кеүек бер хәсрәтһеҙ осалһам ине... Улар осор-осорҙар ҙа берәй күл буйына ялға туҡтарҙар... Шунда, туйғансы емһенеп, һыу эсеп алырҙар... Шунан тағы осоп китерҙәр», — тип

## -50-

уйланды, ти. Шулай ҡоштарға ҡарап зарығып ятһа, ҡолағына шундай тауыштар ишетелгәндәй була:

— Кил, әйҙә беҙҙең менән!

— Ятма зарығып, осайыҡ бергәләшеп!..

Уғаса бының өҫтөнә бер тун килеп төштө, ти. Әсә, ауырыуын онотҡан кешеләй, ҡалҡып тороп шул тунды кейгәйне— ҡошҡа әүерелеп, тәҙрәнән осоп сыҡты ла китте, ти. Донъяларын онотоп уйнап йөрөгән балаларҙың береһе, был хәлде күреп:

—Әсәйебеҙ ҡош булып осто! — тип ҡысҡырып ебәреүгә, ҡалғандары ла иҫтәренә килде, ти.

— Әсәй!

— Әсәкәйем!

— Китмә, ҡалдырма беҙҙе! Мә һыу, мә һыу эс туйғансы!..— тип, ҡайһыһы сүмес, ҡайһыһы күнәк тотоп, әсәләренең артынан йүгерҙе, ти. Әсәләре туҡтаманы, ергә төшмәне, ти. Бары күк йөҙөнән:

— Һуң инде, балаҡайҙарым, бәхил булығыҙ! — тигән моңһоу тауышы ғына ҡайтты, ти, балаларына.

Дүрт малай дүрт урында тәгәрәп йөрөп иланылар, ти. Баштарын ташҡа бәреп, ҡанатып бөттөләр, ти. Тик бик тә һуң булған шул. Шуға ла әсә ҡәҙерен ваҡытында белеү кәрәк. Аҙаҡ үкенмәҫлек булһын, балалар.

## ЯЛҠАУ МАЛАЙ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер ялҡау малай. Әсәһенән башҡа бер кешеһе лә булмаған, ти, уның. Был ялҡау алдындағы икмәкте ынтылып алырға ла иренгән, ти. Әсә кеше, ялҡау улынан ялҡып, йөҙәп бөткән, ти.

Берҙән-бер көндө бутҡа бешергән дә былай иткән: ике таштабаҡ алып, береһенә бутҡаны әҙ генә, икенсеһенә күберәк һалып, береһен тупһа төбөнә, икенсеһен ей алдына сығарып ҡуйған. Малайы бер заман:

— Асыҡтым! — тип ҡысҡыра икән.

— Тупһа төбөндә генә бутҡа бар, ынтылып ҡына аша инде үҙең, — тигән.

Өс тапҡыр шулай ҡабатланған, ти. Ҡыйын булһа ла, үҙе алып ашаған малай бутҡаны. Бутҡа бик тәмле тойолған. Малай:

**-51-**

—Тағы бутҡа! — тигән.

— Тышта, бар сығып аша, — тигән әсәһе.

Ялҡау малай сыға килеп тыштағы бутҡаны ла һыпырған, ти. Үҙе шунда уҡ ятып йоҡлап киткән. Әсәһе эстән ишекте элеп ҡуйған. Төндә малай өшөп китеп торһа, ишек бикле, инеп булмай, ти.

— Әсәй, ишекте ас, — тип ҡысҡыра.

— Эшкә өйрәнмәйенсә, ишекте асмайым. Эшкә өйрән. Өйрәнмәйенсә ҡайтып киләһе булма, — тип, әсәһе индермәгән, ти.

Малай, йоҡларға урын тапмағас, күршеләренең ишеген шаҡыған.

— Бында ялҡауҙарға урын юҡ, — тигән улары ла.

Малай ил гиҙеп сығып китә. Күп ер үткән, күп тир түккән, күп эшләгән, күп һөнәр алған. Күп ваҡыттар үткәс, малай әсәһенә әйләнеп ҡайтҡан.

— Әсәй, ас инде ишегеңде. Күп ерҙәр үтеп, күп тирҙәр түгеп, күп һөнәрҙәр алып ҡайттым, һиңә күп итеп бүләктәр килтерҙем, — тигән.

Әсәһе шатланып ишек асҡан. Ошо көндән башлап, әсәле-уллы рәхәтләнеп йәшәй башлағандар, ти.

## ТӨЛКӨ МЕНӘН БҮҘӘНӘ

Өлгөргән арыш араһында, арлы-бирле пырылдап, бер бүҙәнә осоп йөрөй ине, ти. Шунда, яҡында ғына, күләгәлә әлһерәп бөткән бер ас төлкө ята ине, ти. Бүҙәнә килде лә шул төлкөнөң ҡолағы осона ҡунды, ти. Төлкө, башын һелкеп, бүҙәнәне ҡолағынан төшөрҙө лә:

— Бер ҡабымға етмәҫ башың менән бимазалап йөрөгән булаһың!—тип асыуланды, ти.

— Хикмәт ҙурлыҡтамы ни ул? Бына мин бәләкәй генәмен, әә шулай ҙа һине туйғансы ашата алам. Эште хәйлә менән эшләй белеүҙә ул! — тип әйтте, ти, бүҙәнә.

— Кит бынан, күҙ көйөгө! Ни эшләп инде бүҙәнә төлкө саҡлы төлкөнө туйҙырғансы ашата алһын? — тип көлдө, ти, төлкө.

—Ышанмаһаң, бына күр, хәҙер мин һине туйҙырам, — ти бүҙәнә. — Хәҙер мин юл өҫтөнә сығам, һин юл ситендә, арыш араһында ҡасып ҡына ят та минән күҙҙәреңде алмай күҙәтеп тор. Мин пырылдап осоп киткәндә генә, һин, юлдағы аҙыҡты

# -52-

алып, бына шул урынға килерһең дә тәмләп тороп ашарһың,— тип әйтте, ти.

Төлкө юл ситенә йәшеренеп ятты, бүҙәнә арлы-бирле сәбәләнеп йөрөй башланы, ти. Шул ваҡыт иңбаштарына ураҡ һалған бер ир менән бер ҡатын килә ята икән. Ҡатыны ҡулына бер төйөнсөк тә тотоп алған. Ҡатын юлда йөрөп ятҡан бүҙәнәне күреп ҡала ла:

— Эй, атаһы, ҡара әле бынау бүҙәнәне: шундай һимеҙ,хатта оса ла алмай! Тотоп алайыҡсы үҙен, бешереп ашарбыҙ. Бүҙәнә ите бик тәмле бул а. тиҙәр, — тип ҡысҡыра, ти.

Шунан былар икәүләп бүҙәнәне тотмаҡ булалар. Ҡатын төйөнсөгөн юл ситенә ҡуя ла бүҙәнәне баҫтыра башлай. Бүҙәнә осмай ҙа, ҡасмай ҙа, тоттормай ҙа. Шулай ҡыуып йөрөй торғас, инде тотайым тигәндә генә, бүҙәнә пырылдап осоп китә. Ир менән ҡатын ауыҙҙарын асып тороп ҡалалар. Төлкө лә, бүҙәнәнең осҡанын күреп, юл ситендәге төйөнсөктө ауыҙына ҡабып ала ла баяғы урынға китә. Төйөнсөктө асып ҡараһа, эсендә тауыҡ ите икән. Төлкө рәхәтләнеп ашай. Бүҙәнә ҡарап тора. Ә теге ирле-ҡатынлы ураҡсылар буш ҡул менән үҙ эштәренә китәләр.

Төлкө, ашап туйғас:

— Хикмәт, ысынлап та, ҙурлыҡта түгел икән шул, һинеңҡеүек хәйләкәр булыуҙа икән, — ти. Шунан ул: — Ярар, бүҙәнә дуҫ, һин минең тамаҡты туйҙырҙың, быныһы әсән рәхмәт. Хәҙер һин мине бер рәхәтләндереп көлдәр ҙә инде,—тигән.

Бүҙәнә быны тыңлап:

— һине көлдөрөп ултырырға хәҙер минең ваҡытым юҡшул. Кис менән көлдөрөрмөн, хәҙергә һин ошонда ятып йоҡла. Кискә табан мин һинең янына килермен, — тип, үҙ эше менән китте, ти.

Кискә табан төлкө уяныуға бүҙәнә килде лә:

— Әйҙә, төлкө дуҫ, ауыҙың ҡолағыңа тиклем йырылғансырәхәтләндереп көлдөрөп алып ҡайтайым үҙеңде, эйәр минең арттан! — тигән.

Бүҙәнә аулаҡ ерҙән генә үтеп, әкрен генә осоп барҙы, төлкө ҡасып-боҫоп ҡына атлап, уның артынан эйәрҙе, ти. Бына улар, ырҙын артынан ғына үтеп, бер ауылға, баяғы ураҡсыларҙың йортона, килеп инделәр, ти. Йорт хужаһы ҡаҙыҡ ослай, бисәһе һыйыр һауа ине, ти. Төлкө ҡасып ҡына күҙәтә

## -53-

башланы, бүҙәнә ҡатындың һыйыр һауған ерендә—аяҡ аҫтында ураланып йөрөнө, ти. Ҡатын бүҙәнәне танып ҡалып:.

— Эй, атаһы, ҡара әле, беҙҙе ашамлыҡһыҙ ҡалдырғанбаяғы бүҙәнә йортобоҙға килгән, һуғып үлтерәйек үҙен! — тип ҡысҡырҙы, ти.

Ире ҡаҙығы менән киҙәнгәйне, бүҙәнә һыйыр мөгөҙөнә килеп ҡунды, ти; яңынан киҙәнеп, һыйырҙың мөгөҙөн саҡ ҡына һындырмай ҡалды, ти. Һыйыр, ҡурҡып, һөтлө күнәкте тибеп ауҙарҙы, ҡатын һөт түгелгән ергә тайып йығылды, ти. Бүҙәнәне тота алмағас, теге ир асыуланып ҡатынын туҡмап ташланы, ти.

Төлкө, ауыҙы ҡолағына тиклем йырылғансы, быуыны ҡатып көлдө, ти. Үҙе көлдө, үҙе бүҙәнәнең хәйләһен отоп ултырҙы, ти.

Бына шунан һуң, бүҙәнәнән өйрәнеп, төлкө хәйләкәр йәнлек булып киткән дә инде, тиҙәр.

### ТӨЛКӨ МЕНӘН БҮРЕ

Бер ҡарт бүре төлкөнән:

— Нимә ашап был хәтле һимерҙең? — тип һораған. Төлкө уға:

— Күл буйындағы мал-тыуар менән туҡланам, — тип яуап биргән.

— Ул малдарҙы нисек тотаһың? — тип һораған ҡабаттан бүре. Төлкө:

—Ҡамыш араһына барып ят та әҫтәңә шатырлап килеп менмәйенсә торма. Ул шатырлап килер, яныңа килгәс кенә тотоп ал, — тигән. Бүре төлкө өйрәткәнсә эшләгән: күҙен йомоп, ҡамыш араһына барып ятҡан.

Уғаса булмай, төлкө ҡамышлыҡтың бер башына ут төртөп ебәргән. Ҡамыш шатырлап яна-яна бүрегә яҡынлашҡан, бүре һаман ятҡан. Ята торғас, йөндәре яна башлаған бының. Сыҙар хәле ҡалмағас ҡына, бүре күҙен асҡан. Асһа, йөндәре янып бөткән, тиреһе шатырлап яна башлаған, тирә-яҡта ут, ти.

Был арала төлкө, күлгә барып аунап, төҫөн үҙгәрткән дә яр буйына килеп ултырған. Ах та ух булып, уның янына бүре сабып килгән.

—Харап булдым, хәҙер ни эшләргә инде? — ти икән бүре.

## -54-

— Ниңә харап булдың? — тип һораған төлкө.

— Бер ҡыҙыл төлкө алдап, ут төртөп китте, — тип зарланған бүре.

— Ә-ә-ә, ул ҡыҙыл төлкө мине лә алдап киткәйне, — тигән булды, ти, тегенеһе.

— Инде ни эшләйем икән? — тигән бүре.

— һе, аптырап тораһың тағы. Боҙға барып аунаҡла! — тип аҡыл өйрәткән төлкө.

Бүре боҙға барған да аунаҡлай башлаған. Уның ите боҙға йәбешеп һыҙырылып бөткән, үҙе шунда үлеп киткән, ти.

## ҠУЯН МЕНӘН АРЫҪЛАН

Борон-борон заманда бер арыҫлан булған. Башҡа йәнлектәр арыҫландан бик ҡурҡып ҡына йәшәгәндәр. Ни әсән тиһәң, арыҫлан уларға бер ҙә көн күрһәтмәй икән, ҡайҙа осратһа, шунда тота ла йығып ашай, ти, үҙҙәрен. Арыҫлан йәнлектәрҙең берәүһен тотоп ашаған саҡта, бишәүһе йөрәге ярылып үлә, ти. Ҡасып ҡотолорға һис бер әмәл булмаған, ти, был йыртҡыстан.

Арыҫландың шулай теңкәгә тейеүенән тәҡәттәре ҡалмағас, берҙән-бер көндө урмандағы булған кейек-йәнлектәр йыйылышып кәңәш ҡорҙолар, ти.

— Был арыҫлан бөтөрә бит беҙҙе, былай булһа. Ул беребеҙҙе тотоп ашағанда, бишәүебеҙ йөрәге ярылып үлә. Ни эшләйбеҙ хәҙер, ағай-эне? — тип әйтте, ти, төлкө.

—Беҙ көн һайын йәрәбә һалайыҡ. Йәрәбә кемгә сыҡһа, шул арыҫландың ҡорбаны булыр, — тип әйтте, ти, айыу.

Шулай итеп, былар көн һайын йәрәбә һалырға булдылар, ти. Улар был хаҡта арыҫландың үҙенә лә хәбәр иттеләр, ти.

Беренсе көн йәрәбә ҡуянға сыҡты, ти. Ҡуян тороп, йәнлектәргә:

— Ағайҙар! Беҙгә былай итеп һәр ваҡыт арыҫландың ҡорбаны булып үлеү бер ҙә килешкән эш түгел. Берәй хәйлә ҡороп, шунан ҡотолоу яғын ҡарарға кәрәк, — тип әйткән булды, ти.

Төлкө ҡуяндың һүҙен тыңлап торҙо ла:

— Кит, хәсрәт! һинме һуң хәйлә ҡороп, арыҫланды алдарйән! Белер-белмәҫ телең менән хәбәр һөйләп торған булаһың, асыуымды килтереп, — тип әрләп ташланы, ти.

**-55-**



## -56-

Ҡуян арыҫлан янына китте, ти. Бер ҙә ҡабаланманы, ти,, был. Көтөп ултырған арыҫлан бик асыуланды, ти, ҡуянға.

— Ниңә улай яй йөрөйһөң һин? Ата-бабаларың яй йөрөмәнеләр заманында, һин иртәнсәк үк килергә тейеш инең, хәҙер төш етеп килә, — тип әрләп ташланы, ти, ҡуянды.

Ҡуян ҡурҡып ҡына:

— Мине һиңә көндөҙгөлөккә ашарға ебәргәйнеләр, икенсебер ҡуян һиңә иртәнсәк килергә тейеш ине. Килә ятҡанда,юлда башҡа бер арыҫлан осраған да теге ҡуянды тотоп ашаған. Бына мин дә, әле һиңә килә ятҡанда, шул арыҫланға тапбулдым. «Ҡайҙа бараһың?» — тине. Мин уға: «Үҙемдең хужама — арыҫлан ағай янына барам», — тип яуап бирҙем. Шулай тигәс, теге асыуланып үкерә башланы: «Кем бында минән башҡа хужа булырға йөрөй тағы?» — ти. Мин унан көскә-көскә генә ҡасып ҡотолдом. Шуға күрә һуңға ҡалып килдем, — тигән булды, ти, ҡуян.

Арыҫлан ҡуяндан тегенең ҡайҙа йәшәгәнен һораны, ти.

— Ул бынан алыҫ түгел, анау яҡта, — тип яуап бирҙе, ти, ҡуян.

—Әйҙә, алып бар әле һин мине уның янына. Мин уға күрһәтәйем әле, бында кем хужа икәнен! — тип әйтте, ти, арыҫлан, асыуланып.

Ҡуян алдан китте, ти, уның артынан арыҫлан төштө, ти. Былар бик тәрән бер ҡоҙоҡ янына килделәр, ти.

—Бына ошо ҡоҙоҡтоң эсендә ултыра теге яман арыҫлан, — тигән булды, ти, ҡуян ҡурҡып ҡына.

Арыҫлан ҡоҙоҡтоң эсенә ҡараһа, ысынлап та, тап үҙенә оҡшаған икенсе берарыҫланды күрҙе, ти.

Арыҫлан ҡотороноп үкерә башланы, ти.

— Дөмөктөрәйем әле быны! — тип ғәйрәтләнеп, ҡоҙоҡ эсенә һикерҙе, шунда шомборлап батты ла үлде, ти.

Шатлығы эсенә һыймаған ҡуян, был хәбәрҙе йәнлектәргә тиҙерәк белдерер әсән, һикерә-һикерә ҡайтып китте, ти.

## ЙӘШ ҺУНАРСЫ

Борон заманда булған, ти, бер һунарсы егет. Бер көндө һунарҙа йөрөп ятһа, ҡаршыһына бүре килеп сыҡҡан. Егет уны атырға иткән икән, бүре, телгә килеп, кеше тауышы менән:

## -57-

—Мине үлтермәҫе, егет! — тип ялынған. — Ҡасан да бул-һа бер көнөңә ярармын.

Егет бүрене үлтермәгән, ары киткән.

Бара торғас, һунарсы егеткә бер бөркөт тап булған. Ул да кеше тауышы менән:

— Мине үлтермә, егет! Бер көнөңә ярармын, — тигән.

һунарсы егет ары киткән. Күл ситенә барһа, уға һыуҙа йөҙөп йөрөгән бер алтын балыҡ күренгән. Егет уны тотоп алайым ғына тигәндә, балыҡ та телгә килеп:

—Егеткәйем, зинһар, тере ҡалдыр мине! — тип ялынған. — һин ҡайҙа ғына булып, ниндәй генә бәләгә ҡалһаң да,ярҙамға килермен, — тигән.

Егет балыҡҡа ла теймәгән, ары киткән.

Шулай бара торғас, ул алыҫта мөрйәһенән төтөн сығып торған бәләкәй генә өй күргән. Был өйҙә бер мәскәй әбей йәшәй икән. Егет, шул өйгә барып, ишеген асҡан да сәләм биргән. Ә ҡарсыҡ:

— Шул сәләмең булмаһа, урталай өҙөп йотор инем! —тигән. Шунан ул егеттең ҡайҙа барыуын һорашҡан, һуңынан: — Мин һиңә бер йомош ҡушам. Урманда минең өс атымүлән ашап йөрөй, һин шуларҙы тот та бында килтер. Килтерә алһаң, өс ҡыҙымдың иң һылыуын үҙеңә кәләш итеп бирермен,ә килтерә алмаһаң, үҙеңә яҡшылыҡ булмаҫ, — тигән.

һунарсы егет ҡарсыҡ күрһәткән урманға барған. Тик теге аттар уға тотороу түгел, яҡын да ебәрмәгәндәр, һунарсы арып-талып бер таш өҫтөнә ултырған да уйға ҡалған.

Шул ерҙә әлеге бүре унын янына килгән дә:

— Нимә уйлайһың, егет? Ниндәй ҡайғың бар? — тип һораған.

—Уйланмаҫлыҡмы ни! Мәскәй әбей миңә бынау өс атты тотоп килтерергә ҡушты, ә мин уларҙы тота алмайым. Хәҙер инде ҡарсыҡ мине башһыҙ ҡалдырасаҡ, — тигән.

— Башҡа ҡайғың булмаһа, юҡ әсән ҡайғырма, — тигән дә бүре, күҙ асыпйомғансы, теге өс атты егеткә ҡыуып килтереп биргән. Был аттар теге мәскәйҙең ҡыҙҙары булған икән.

Егет аттарҙы етәкләп мәскәй әбейгә алып барған.

— Ниңә уға тотторҙоғоҙ? — тип ҡысҡырған да ҡыҙҙарына, тағы ла урманға сығарып ебәргән. Шунан егеткә ишеттермәй генә. — Әгәр ул һеҙҙе йәнә тоторға барһа,һеҙҡошҡаәйләнегеҙ ҙә һауаға осоп китегеҙ, — тигән.

# -58-

Шулай булған да. Егет икенсе тапҡыр аттарҙы тоторға барған икән, улар ҡошҡа өйләнгәндәр ҙә һауаға осоп киткәндәр, һунарсы тағы ла иларға тотонған. Бына шунда теге бөр-көт килеп егеткә ҡоштарҙы тотоп биргән.

Мәскәй әбей ҡыҙҙарына тағы ла ҡатыраҡ асыуланған.

— Әгәр ул һеҙҙе йәнә тоторға барһа, һеҙ балыҡҡа әйләнегеҙ ҙә, күк диңгеҙҙең төбөнә төшөп, йөҙөп китегеҙ, — тигән.

Мәскәй өсөнсө тапҡыр аттарын тотоп килтерергә ҡушҡан. Егет тағы ла аттарҙы баҫтырып алып киткән, инде тотам тигәндә генә, улар балыҡҡа өйләнгәндәр ҙә диңгеҙгә төшөп йөҙөп тө киткәндәр. Егет яр башына ултырған да уйға батҡан. Шул ерҙә әлеге алтын балыҡ яр буйына килеп сыҡҡан да:

— Бушҡа ҡайғырма, егет, мин һиңә ярҙам итермен, —тигән.

Шул ерҙә ул үҙенең балыҡтарына бойороҡ биргән: мәскәй әбейҙең өс ҡыҙы, балыҡҡа әйләнеп, диңгеҙҙә йөҙөп йөрөй. Шуларҙы эҙләп табығыҙ ҙа ошо егеткә бирегеҙ!

Балыҡтар шунда уҡ уларҙы эҙләп тапҡандар ҙа егеткә килтереп тә еткергәндәр. Ә мәскәй әбей егетте еңеп булмауын күргәс:

— Өс ҡыҙым араһынан теләгәнеңде һайлап ал! — тигән.

Егет уның иң кесе ҡыҙын һайларға булған.

Икәүҙән-икәү ҡалғас, ҡыҙ егеттең ҡолағына ғына:

— Беҙҙең әсәйебеҙ бик мәкерле: ул мине быжыр, бөкрө ҡыҙға әйләндерер, уртансы апайымды урта йәштәрҙә яһар, әиң өлкән апайымды бөтәбеҙҙән дә һылыу итер. Алдана күрмә! — тип бышылдаған.

Мәскәй әбей өс ҡыҙын да егеттең алдына баҫтырған да:

— Теләгәнеңде һайлап ал! — тигән. Ә егет, оҙаҡ уйлап тормайынса:

— Миңә бынау быжыр, бөкрө ҡыҙ булһа ла ярар, — тигән.

Ҡарсыҡ ҡыҙҙарына тағы ла ҡатыраҡ асыуланған:

— Ах, һеҙ хәсрәттәр! Башыма бәлә генә булдығыҙ. Ҡулығыҙҙан бер нәмә лә килмәй һеҙҙең. Бына мин үҙем тотонайым әле, — тигән дә егеткә һарайға инергә ҡушҡан. — Бар, һарайҙағы атты алып сыҡ та атланып йөрөп кил!

Кесе ҡыҙы йәнә егеттең ҡолағына:

— Ул үҙе атҡа әүереләсәк, һин тәүҙә ҡулыңа тимер суҡмар ал; һарайға инеү менән, берҙе ҡундыр үҙенә, һин атҡа атланғас та, ул инде һауаға ырғытырға маташыр, ә һин тимер

**-59-**

суҡмар менән уның башына бир. Шул ваҡытта ат һине ерҙә генә йөрөтөр, — тигән.

Егет, ҡыҙ әйткәнсә, ҡулына тимер суҡмар тотоп, һарайға инеп киткән.

Ат уны тибәйем генә тигән саҡта, егет уға суҡмар менән берҙе тондороп та өлгөргән. Шунан инде һарайҙан сығыр-сыҡмаҫтан атланып та алған. Ат үрәпсеп өй ҡыйығы бейеклеге һикергән. Ә егет шул саҡта суҡмар менән уның башына элəктергән. Шул ерҙә ат ергә төшкән дә үрле-ҡырлы һикереп ҡараған, әммә егет бирешмәгән. Бер аҙ йөрөгәс, атты кире һарайға индереп ҡуйған.

Егет һарайҙан сыҡҡас та, ат ҡайтанан мәскәй әбейгә әүерелеп, һиҙҙермәҫтән генә ингән дә, башым ауырта тип, мейес башына менеп ятҡан.

Ҡарсыҡ, ниндәй генә хәйлә ҡормаһын, егетте ота алмаған. Кесе ҡыҙын уға кәләш итеп бирергә тура килгән.

## СӨЙӘЛБАЙ МЕНӘН УНЫҢ ТОЛПАРЫ

Борон бер ауылда бер бабай менән бер әбей йәшәгән, ти. Ҡарт көндәрендә быларҙың бер балаһы булған. Уға Сөйәлбай тигән исем ҡушҡандар.

Сөйәлбай айлап түгел, көнләп үҫкән, ти. Ҡарттар улдарын бик яратҡандар, ул ни теләһә, шуны үтәргә әҙер торғандар. Бер көндө атаһы Сөйәлбайға үҙе һунарға менеп йөрөгән толпарын бүләк иткән.

Берҙән-бер көндө, шулай бәхетле генә тороп ятҡанда, Сө-йәлбайҙың әсәһе үлеп киткән. Оҙаҡламай атаһы йәш ҡатын алған. Бына шунан һуң Сөйәлбай әсән ҡара көндәр башланған: үгәй әсәһе уны бер ҙә яратмаған. Күпме генә ярарға тырышмаһын, Сөйәлбай бер ваҡытта ла үгәй әсәһенән йылы һүҙ ишетмәгән, уның яҡты сырайын күрмәгән, башы йәберҙән сыҡмаған.

Бының менән генә ҡәнәғәт булмайынса, үгәй әсә Сөйәл-байҙы хатта үлтереп үк ташларға булған. Шул уй менән ул бер көндө сихырсы ҡарсыҡҡа барған да:

—Сөйәлбайҙы үлтерер әсән миңә берәй әмәл өйрәт,— тигән.

—Бының әсән тәүҙә иреңде толпарын һуйҙырырға күндер,

## -60-

шунан Сөйәлбаиҙы үлтереү ауыр булмаҫ, — тигән сихырсы ҡарсыҡ.

— Шулай ҙа ни эшләргә кәрәк һуң?

— Ирен, толпарын һуйғас, итен бешереп Сөйәлбайға ашатырһың. Шунан ул ике көн тигәндә үлер ҙә ҡуйыр, — тигән.

Үгәй әсә,.өйөнә ҡайтыу менән, иренән толпарын һуйҙырыу әсән хәйлә ҡора башлаған. Бына ул бер көндө илай ҙа илай икән. Ире унан:

— Ниңә былай илайһың, ни булды? — тип һораған.

— Бөгөн төндә ҡурҡыныс бер төш күрҙем. Беҙгә ап-аҡ һаҡаллы бер ҡарт килгән, имеш тә: «Ирең толпарын һуймаһа, үҙе үләсәк», — тип әйтә, имеш, тим. Бына шуға илайым мин. Һинән башҡа нисек йәшәрмен мин? — тигән.

Быны ишетеп, ире бик ҡурҡҡан. Иртәгә үк толпарҙы йығып һуйырға булған.

Был ваҡытта Сөйәлбай ат аҙбары эргәһендә йөрөй икән, кемдер уға исеме менән өндәшкәндәй булған. Ул әйләнеп ҡараһа, толпары тора икән, күҙенән мөлдөрәп йәштәре аға, ти. Янына барһа, толпар телгә килеп: «Тыңла мине, Сөйәлбай! — тигән. — Бәген төндә атайың бүлмәһенә ин дә алтын балдағын ал. Ул балдаҡ мөйөштәге таҡта аҫтында булыр, — тигән. — Һине лә, мине лә үлтерергә итәләр. Иртәгә мине аҙбарҙан сығарғас та, миңә килеп атланырһың», — тигән.

Иртәгеһен иртәнсәк Сөйәлбайҙың атаһы толпарҙы-аҙбарҙан сығарған. Шуны ғына көтөп торған Сөйәлбай уға атланып та алған. Шунан толпар ҡоштай осоп, йорт кәртәһен аша һикереп сығып, күҙҙән дә юғалған. Сөйәлбайҙың атаһы менән үгәй әсәһе толпарҙың ҡойроғон ғына күреп ҡалғандар.

Сөйәлбай үгәй әсәһенең мәкерле хәйләһенән шулай ҡотолоп ҡалған, ти.

### КӨТӨҮСЕ ҠАРТ

Борон-борон заманда бер көтөүсе ҡарт йәшәгән. Бик ғалим кеше булған был ҡарт. Үҙе бер байға биш йыл рәттән көтөү көткән икән.

Бер көндө был көтөүсе ҡартҡа бай:

— Һин нисә йыл рәттән минең көтөүҙе көттөң, шуның хаҡына көтөүҙән бер һарыҡ һайлап ал, — ти. Көтөүсе бер һарыҡты һайлап ала. Шул саҡта көтөүгә бер бүре килә, ул туп-

**-61-**



тура ҡарттың һарығына йәбешә. Көтөүсе быға бик аптырап ҡала:

— Минең үҙ ғүмеремдә бер һарығым булды, ә байҙың нисәмә йөҙ һарығы бар. Һин минең һарығыма тейәһең, — ти ҡарт.

— Мин инде һайлап торманым, ауыҙыма ниндәйе эләгә, шуны ашайым, — ти бүре.

Шунан көтөүсе бүрегә:

— Бына һиңә шундай шарт, — ти, — бик ашағың килгәс,

## -62-

ашарһың инде. Тик бына һин күҙеңде йом да һарыҡтарға табан өс рәт сап,—ти.

Бүре, көтөүсе ҡарт әйткәнсә, күҙен йомоп, һарыҡтарға табан саба. Бер саба, ҡарттың һарығы эләгә, икенсе сабыуында ла шул уҡ һарыҡҡа тап була, өсөнсө сабыуында ла ҡарттың һарығын тота.

Шунан һуң көтөүсе лә яҙмышына риза була:

— Ярар инде, һинең ризыҡ икән. Әйҙә, итен аша, тик тиреһен ҡалдырып миңә бир, — ти.

Бүре көтөүсе ҡарт ҡушҡанса эшләй: һарыҡтың итен ашай, тиреһен ҡартҡа бирә.

Көтөүсе ҡарт, тирене ҡултығына ҡыҫтырып, таяҡҡа таянып, көтөүен көтөп йөрөй бирә.

Бер көндө был ҡарттың көтөүе янынан йөк тейәгән кеше-ләр үтеп баралар, ти. Ҡарт юлаусыларҙы туҡтата ла:

— Мин һеҙгә бер тире биреп ебәрәйем әле. Шуны һатып,аҡсаһын килтереп тапшырһағыҙ ине, — ти.

Юлаусылар тирене алып китәләр, үҙҙәренең әйберҙәрен һатҡанда, тирене лә баҙарҙа йөрөтәләр. Тик берәү ҙә алмай. Күп йөрөй торғас, быларға бер егет:

— Тирегеҙгә бесәй бирәм, алышығыҙ, — ти. Былар, тирене биреп, бесәйҙе алалар ҙа ҡайтып китәләр. Бер ҡалаға килеп инһәләр, бик оло тауыш ишетәләр: урам тулы халыҡ илаша.

—Ниндәй тауыш был? — тип һораша юлаусылар.

— Бөгөн батша ҡыҙының ҡолағын сысҡан ашарға тейеш, шуға ҡаршы һис бер әмәл юҡ, — тип яуап бирәләр быларға.

— Беҙ батша ҡыҙын күрәйек әле, бәлки әмәлен табырбыҙ.

Китәләр былар батша һарайына, сәләм биреп инәләр. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, батшаға:

— Күпме алтын бирәһең, ҡыҙыңды сысҡандан ҡотҡарабыҙ, — тиҙәр.

— Ҡотҡара алһағыҙ, көсөгөҙ еткәнсе алтын алырһығыҙ,— ти батша. Былар риза булалар.

Ҡыҙ йоҡларға инеп китә. Юлаусылар шунда уҡ уның йөҡ-лай торған бүлмәһенә бесәйҙе ебәрәләр.

Иртәнсәк инеп ҡараһалар, сысҡандар үлтерелгән, ҡыҙ сәп-сәләмәт. Батша һүҙендә тора, юлаусыларға бер тоҡ алтын бирә. Уны күтәрергә әзмәүерҙәй егеттәрҙең көсө саҡ-саҡ етә, ти.

**-63-**

Алтынды алып ҡайтып барғанда, егеттәрҙең береһе:

— Алтынды бирмәйек. Бер көтөүсегә был бик күп бит,— ти. Икенсеһе:

— Ә вәғәҙә? Ул, ҡайҙа тире хаҡы, тип һорар бит, — ти.

—Тирене алыусы булманы ла, ташланыҡ, тип әйтербеҙ,— ти теге егет. Алтынды бүлешергә булалар. Шул саҡ араларынан берәү:

— Алтынды бүлешәһегеҙ бүлешеүен дә, анау яҡтан бер ҡара болот килә бит әле, мин шул болоттан ҡурҡам, әйҙәгеҙ, кире һалайыҡ, — ти.

Алтынды йыйып тоҡҡа һалһалар, теге ҡара болот юҡҡа сыға. Былар тағы бүлешеп ҡарайҙар, теге болот тағы ла килеп сыға. Алтынды тоҡҡа һалһалар, болот ҡабат юғала. Юлаусылар өс рәт шулай эшләйҙәр, әсәһендә лә теге ҡара болот сыға ла тора.

Юлаусылар, алтынды тоҡҡа һалып, ҡайтып китәләр. Ҡайтып барған юл өҫтөнә көтөүсе ҡаршыға сыға. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашалар.

— Иә, кәсеп нисек булды? — тип һорай бабай.

—Бына һеҙгә бер тоҡ алтын, — тиҙәр юлаусылар.

— һеҙ алтынды таба белдегеҙ, ә бүлә белмәнегеҙ, — ти көтөүсе ҡарт. Ул тегеләрҙең бөтә эшен белеп торған икән. — Аманатҡа хыянат итергә ярамай бит.

Ҡарт алтынды ала, юлаусыларға күп итеп өлөш сығара. Көтөүсе ҡарт әле лә рәхәт ғүмер кисерә, ти.

**- 64 -**

II к л а с с

## ОШАҠСЫ

(Татар халыҡ әкиәте)

Бер ваҡыт арыҫлан ауырый башлаған. Бөтә януарҙар арыҫландың хәлен белергә килгәндәр. Бары төлкө генә булмаған. Бүре арыҫлан батшаға:—Эй, батшам, төлкө һине батша тип тә белмәй, хәл белер гә килеү түгел, — тигән.

Шул арала төлкө лә килеп еткән. Уға. бүренең һүҙҙәрен еткергәндәр.

Арыҫлан, төлкөнө күреп, бик ҡаты асыуланған.

Төлкө әйткән:

— Эй, солтаным, һүҙемде әйтергә рбхсәт ит әле. Мин шуның әсән һуңға ҡалдым: һинең ауырыуыңды ишеткәс, дарыуэҙләп, төрлө яҡтарға сабып йөрөнөм. Дарыу таба алманым,«әммә бүрене үлтереп, уның йылы тиреһенә уранып ятһаң,һауығырһың тигән хәбәр килтерҙем.

Арыҫлан шунда уҡ бүрене үлтергән.

## ӨС ҺОРАУ

(Татар халыҡ әкиәте)

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер етем егет. Бар ине, ти, бының өс өйө: уның береһе кешенеке, икенсеһе күршенеке, ти. Өйҙәрен һалам менән япҡан ул, таяу менән терәткән, ти.

Берҙән-бер көн бына ошо егет эш эҙләп сығып киткән. Көн китә, ти, был, тән китә, ти. Шулай бара торғас, барып етә, ти, иген сәсеп йөрөүсе бер кеше янына. Егет әйтә:

— Эштәрең шәп булһын, уңыштарың мул булһын, ағай кеше, — ти.

**-65-**

— Шулай булһын, улым, — ти теге кеше. Шунан юлсы егеттән һораша башлай. — Ҡайҙан киләһең, ҡайҙа бара-һың? — ти. Егет:

— Эш эҙләргә сыҡтым, ағай, — ти. Игенсе әйтә:

—Ярай, егет, — ти, — эш кешеһенең — эштә, юл кешеһенең юлда булыуы яҡшы, — ти. — Уйлана-уйлана барһаң, юлың ҡыҫҡараҡ булыр, мин һиңә бер-ике хикмәтле, һүҙ әйтәм, яуабын таба алһаң, килеп әйтерһең, — ти.

— Ярай, ағай, — ти егет, — әйтеп ҡара, — ти. Теге кеше, тубалын аҫып, иген сәсергә тотона. Усын тултырып орлоҡ ала ла һибеп ебәрә.

— Бына бер тапҡыр сәстем, быныһы бурысымды түләргә булыр, — ти. Икенсе мәртәбә сәсеп ебәрә лә: — Бына быныһы бурысҡа биреп тороуым,—ти. Шунан өсөйсө тапҡыр сәсеп ебәрә лә: — Быныһы ҡәҙерле ҡунаҡтар еҫен, — ти.

Егет уйға ҡала: «Был нимә булыр икән?» — ти.

— Ярай, ағай, — ти егет, — һин миңә бер аҙ ғына уйларға ваҡыт бир, — ти.

— Уйла, уйла, улым, — ти игенсе, шулай ти ҙә игенен сәсеп китә. Оҙаҡ та үтмәй, әйләнеп килеп етә лә егеттән һорай.

— Йә, хәл нисек, улым, берәй нәмә уйланыңмы? — ти.

— Ағай, — ти юлсы егет, — һинең һуң ата-әсәләрең бармы?

— Бар, — ти теге.

—Йәш сағында улар һине тәрбиәләгәндер бит? — ти егет.

— Тәрбиәләнеләр, — ти игенсе.

— Улайһа, беренсе сәскәнең уларҙы тәрбиәләү әсән булды.

— Дөрөҫ әйтәһең, улым, беренсеһен шулай бурысымды түләр әсән сәстем.

—һинең ир балаларың бармы? — ти егет.

— Бар, — ти теге кеше.

— Улай булғас, икенсе тапҡыр сәскәнең, ысындан да, бурысҡа биреп тороу була, хәҙергә һин балаларыңды тәрбиәләйһең, ашатаһың-эсерәһең, улар һиңә бурыслы булып ҡалалар,— ти.

— Быныһын да бик дөрөҫ әйттең, — ти игенсе.

— һинең ҡыҙҙарың бармы? — тип һорай егет.

— Бар.

—Улар һинең ҡәҙерле ҡунаҡтарың кеүек кенә бит, үҫеп



етеү менән, һинән китәләр бит улар, — ти егет. — Өсөнсө тапҡыр сәскәнең ана шул ҡәҙерле ҡунаҡтарың өсөн булды, — ти.

— Бик дөрөҫ әйтәһең, аҡыллы егет икәнһең, — ти игенсе, егетте маҡтап.

## ТАУЫҠ, СЫСҠАН ҺӘМ ҠОР

*(Татар халыҡ әкиәте)*

Тауыҡ, сысҡан һәм ҡор бергә йәшәй башлағандар. Бер көн тауыҡ арпа бөртөгө тапҡан да шатлығынан ҡыҭҡылдап уҡ ебәргән.

**-67-**

(1)—Арпа таптым, арпа! Уны он итеп тартырға кәрәк. Арпаны тирмәнгә кем алып бара? — тигән.

— Мин бармайым, — тигән сысҡан.

— Мин дә бармайым, — тигән ҡор.

(5)Ни эшләргә? Тауыҡ тирмәнгә үҙе киткән, арпаны тарттырырға.

— Ондо кем алып ҡайта? — тип һораған тауыҡ.

— Мин алып ҡайтмайым, — тигән сысҡан.

— Мин дә алып ҡайтмайым, — тигән ҡор.

(10)Тауыҡ ондо өйгә үҙе алып ҡайтҡан.

— Икмәкте кем баҫа? — тип һораған тауыҡ.

— Мин баҫмайым, — тигән сысҡан.

— Мин дә баҫмайым, — тигән ҡор. Тауыҡ, ондо үҙе иҙеп, ҡамыр баҫҡан да:

(15)— Мейес кем яға? — тигән.

— Мин яҡмайым, — тигән сысҡан.

— Мин дә яҡмайым, — тигән ҡор. Тауыҡ үҙе яғып томалаған.

— Мейестә икмәкте кем бешерә? — тигән.

— Мин бешермәйем, — тигән сысҡан.

(20)—Мин дә бешермәйем, — тигән ҡор.

Тауыҡ икмәкте лә үҙе бешергән. Ҡабарып, ҡыҙарып бешкән икмәктәрҙе өҫтәлгә сығарып теҙгән дә:

— Ә икмәкте кем ашар? — тип һораған.

(25)—Мин, — тигән дә, өҫтәл артына килеп ултырған сысҡан.

— Мин дә ашайым, — тип, ҡор ҙа килеп ултырған.

— Юҡ инде, эшләмәгән — ашамай, — тигән тауыҡ.

## БАТЫР ӘТӘС *(Татар халыҡ әкиәте)*

(30)Борон-борон заманда бер ауылда йәшәгән, ти, бер бабай. Был бабайҙың бер ҡыҙы, бер кәзәһенән башҡа бер кеме лә булмаған, ти. Бик ярлы булған ул.

Ҡыҙ кәзәне көн буйына болонда көтөп, кискә табан ғына алып ҡайтып, ишек алдына индереп япҡан, ти.

(35)Бабай кәзә янына сығып:

— Иә, кәзәкәйем, көнө буйына болонда булып, нимә аша ның, нимә эстең? — тип һорай икән.

(38)Кәзә быға:

**3***

**-68-**

—Бер япраҡ ашаным да, бер ҡалаҡ самаһы һыу эстем,—тип яуап биргән, ти.

Ҡарт, бер кәзәне лә туйҙырғансы ашатып ҡайта алмағанһың, тип ҡыҙына бик ҡаты асыуланған, ти.

Икенсе көндө ҡарт болонға кәзәне үҙе алып киткән. Кәзә, көнө буйына болонда йөрөп, туйғансы ашаған, ял итеп тә алған, ти, тағы тороп ашарға тотонған. Бабай, быны күреп, бик шатланған: «Ярай, үҙем алып килгәс, бик рәхәтләнеп, туйғансы ашаны әле был», — тип уйлай икән бабай. Шулай тип уйлаған да теге бабай, кис булғанды ла көтөп тормаған, кәзәһен ҡалдырып, өйөнә ҡайтып киткән, ти.

Кис булып, ҡараңғы төшөүгә, кәзә лә болондан ҡайтып килгән, ти. Бабай кәзәнән һорай:

— Нихәл, кәзәкәйем, көнө буйына болонда йөрөнөң, нимә ашаның, нимә эстең? — ти.

Кәзә уға:

— Бер япраҡ ашаным да, бер ҡалаҡ самаһы һыу эстем, —тип яуап биргән, ти.

Ҡарттың быға бик асыуы килә. «Ғәйеп ҡыҙҙа түгел, был кәзә үҙе бик ялғансы хайуан икән», — ти. Шунан һуң бабай: «Был ялғансы кәзәнән барыбер бер рәхәт тә күрмәҫһең», — тип уйлай ҙа кәзәһен һуйып ашарға була. Икенсе көндө бабай, кәзәнең ике мөгөҙөнән тотоп алып, аяҡтарын бәйләп һала. Бабай бысаҡ алырға тип өйөнә инеп киткән арала кәзә аяҡтарын ысҡындыра ла сығып ҡаса.

Китә был. Бара-бара барып етә бер кескенә өйгә. Был — ҡуяндың өйө икән. Өйгә инә. Өйҙә бер кем дә юҡ. Ҡуяндың сығып киткән ваҡыты булған, ти. .

Ҡояш байып, ҡараңғы төшә башлауға ҡуян ҡайтып инә. Инһә, ни күҙе менән күрһен, теге кәзә түр башына менеп, мөгөҙҙәрен тырпайтып, һаҡалын һелкетеп ултыра, ти. Ҡуян, быны күреп, бик ҡаты ҡурҡҡан да, алдына-артына ҡарамай, урманға табан тороп сапҡан, ти.

Урманға барып инеүгә, ҡуянға осраған, ти, бер бүре. Бүрене күреү менән, ҡуян ҡысҡырып илай башлаған. Быны күреп, бүре:

— Ниңә илайһың, һиңә ни булды? — тип һорай икән. Ҡуян быға:

—Ниңә иламаҫҡа, көнө буйына урманда йөрөп, өйөмә

**-69-**

ҡайтһам, түр башында бик ҡурҡыныс бер нәмә ултыра, күреү менән йөрәгем ярыла яҙҙы, — ти.

Быны ишетеү менән, бүре, батырланып:

— Әйҙә киттек, беҙ уны хәҙер ҡыуып сығарырбыҙ, — ти.

Китәләр. Ҡуяндың әйенә барып етеү менән, бүре үҙе лә ҡурҡа-ҡурҡа ғына ишекте аса. Ҡараңғы әйҙә ҙур мөгөҙлө, оҙон һаҡаллы кәзә башын күреү менән, бүренең дә ҡото оса, тиҙ генә өй ишеген яба ла урманға ҡарап һыҙа. Ҡуян уның артынан китә. Ҡуяндың урманға барып инеүе була, бының ҡаршыһына лап-лоп баҫып килә, ти, бер айыу. Айыуҙы күреүгә, ҡуян тағы ҡысҡырып илап ебәрә:

— Ҡотҡарығыҙ, харап булдым, өйөмә ҡурҡыныс бер нә-мә ингән, — ти.

Айыу, бик батырланып:

—Юҡҡа-барға илап күҙ йәшеңде әрәм итмә, беҙ уны хәҙер ҡыуып сығарырбыҙ, — ти икән.

Китәләр. Ҡараңғы төшөүгә ҡуян өйөнә барып етәләр. Айыу бик батырланып өй ишеген асып ебәреүгә, һике өҫтөнә менеп ултырған ҙур мөгөҙлө, оҙон һаҡаллы кәзәне күреү менән, бик ҡаты ҡурҡыуға төшә. Айыу ҙа, ҡурҡыуынан алдына-артына ҡарамай, урманға саба. Ҡуян — уның артынан..

Ҡуяндың урманға барып инеүе була, быға бер төлкө осрай. Төлкө лә бик батырланып бара. Ҡараңғы бүлмәлә ҡуҡырайып ултырған кәзәне күреү менән, төлкөнөң дә ҡото оса: сығып ҡаса был.

Ҡуян ни эшләһен, йорт-ерен ҡалдырып сығып китә урманға.

Таң атып, яҡтыра башлауға барып етә был бер урман ҡарауылсыһының өйөнә. Ҡойма башында ултыра икән, ти, бер әтәс. Әтәсте күреү менән, ҡуян тағы ла ҡысҡырып илап ебәрә, ти.

— Ниңә илайһың, ҡуянҡай? — ти әтәс.

— Минең өйөмә бер ҡурҡыныс нәмә килеп ултырҙы, уны үҙем дә, бүре менән айыу ҙа, хатта төлкө лә ҡыуып сығара алманы, — ти ҡуян.

— Юҡҡа илама, ҡуянҡай, әйҙә киттек, мин һиңә ярҙам итермен, — ти әтәс.

Китәләр. Ҡуяндың өйөнә барып етеүгә, әтәс ҡуянға әйтә:

— Миңә өй ишеген асыу ғына ҡыйын булыр, һин ишекте асып, мине индереп ебәрерһең, ҡалғанын үҙем белермен, — ти.

## -70-

Өй эргәһенә барып етеү менән, ҡуян ишекте асып ебәреүе була, этәс өй эсенә инеп, кәзә мөгөҙҙәре араһына барып ҡуйыуы була. Кәзә башына ҡуна ла был суҡый башлай кәзәнең күҙҙәрен. Кәзә бер ни ҙә эшләй алмай, сығып ҡаса ҡуяндың өйөнән. Әтәс уны бик алыҫҡа тиклем ҡыуып бара. Шулай итеп, батыр әтәс ҡуянды алдаҡсы кәзәнән ҡотҡарған, ти.

### ЯБАЛАҠ *(Татар халыҡ экиәте)*

Бер көн ябалаҡ нисектер бер сәпсекте тотоп ашамаҡсы булған. Сәпсек уға әйткән, имеш:

— Эй, батыр! Инде һин мине ашарһың, ләкин шуны ғынаәйтсе: «һинең исемең нисек? Үҙемде тотҡан батырҙың исеменбелеп үләйем», — тигән.

Ябалаҡ ауыҙын асыр-асмаҫ ҡына:

—Минең исемем Йәфәләк, — тигән.

Сәпсек:

— Юҡ, батыр, ҡолағым бик ишетмәй, ҡысҡырыбыраҡ әйтсе, — тигән.

Шул саҡта ябалаҡ, ауыҙын тулы асып:

—Минең исемем Ябалаҡ, — тигән икән, сәпсек ябалаҡауыҙынан ысҡынып осҡан да киткән, ти.

### КӘЗӘ МЕНӘНҺАРЫҠ

*(Татар халыҡ экиәте)*

Элекке заманда, йәшәгән, ти, бер бабай менән әбей. Уларҙың булған, ти, бер аты, бер үгеҙе, бер кәзәһе менән бер һарығы.

Ҡарт бик уңған, бер туҡтауһыҙ эшкә йөрөй торған бер кеше булған, ти. Ул көнө-төнө үгеҙҙе эшкә егә икән. Үгеҙ, тамам арып, ауырая башлаған. Тота ла үгеҙҙе һуя ҡарт. Элек-ке заманда крәҫтиәндең тормошо ауыр бит инде. Был ҡартты ла ярлылыҡ баҫҡандан-баҫа бара. Аҡса кәрәк була ла, атты ла һата был,

Кәзә менән һарыҡ быны күрәләр ҙә үҙ-ара һөйләшәләр: «Беҙгә лә сират етер, ахыры, үгеҙҙе һуйҙы, атты һатты, әйҙә беҙ ҡасайыҡ, булмаһа», —тиҙәр. Иртә менән хужалары йоҡо-

**-71-**

(1)нан торғансы сығып һыҙалар былар. Кәзә, мөгөҙөнә эләктереп, бер тоҡ та алып сығып киткән, ти.

Баралар-баралар былар, ҡараңғы ла тешә башлай. Бик ҡалын бер урман була. Ағас төбөнән бер бүре башы табалар (5)ҙа: «Кәрәк булыр әле!» — тип, бүре башын тоҡҡа һалып алып китәләр былар.

Урман буйлап бара торғас, бер ут яҡтыһы күрәләр. Ут янына барһалар, унда ун бүре ултыра икән. Улар күп итеп бутҡа бешергәндәр ҙә ашап ултыралар, ти. Кәзә менән һарыҡ–(10)ты күргәс, бер бүре әйтә: «Беҙгә ризыҡ үҙ аяғы менән килде, был кәзә менән һарыҡты бутҡанан һуң тотоп ашарбыҙ», — ти.

Кәзә эштең ҡайҙа барғанын аңлап ала ла, әсе тауыш менән ҡысҡырып ебәрә: «Йики-ки, мики-ки, тоҡтағы бүре башы ун ике!» Шунан ул тоҡтағы бүре башын сығарып һанай (15)башлай: «Бер бүре башы, ике бүре башы, өс бүре башы», — тип шул бер бүре башын өйләндерә лә һанай, өйләндерә лә һанай.

Бүреләр бик ҡаты ҡурҡыуға төшәләр. Шунан һуң бер ҙу-рырағы әкрен генә тороп ситкә һыҙа. Уны көтәләр-көтәләр ҙә, (20)ул ҡайтмағас, икенсеһе, өсөнсөһө... Шулай аҡрын ғына та-ялар былар. Шулай итеп, бүреләр бер-бер артлы бөтәһе лә китеп юғала, ти. Кәзә менән һарыҡ туйғансы бутҡа ашап, ут янында ятып йоҡлайҙар, ти. Иртә менән тороп: «Былай ҡасып йөрөп булмаҫ, беҙҙе генә аҫрарҙар әле», — тип уйлап, (25)хужалары янына ҡайталар. Әле һаман шулай бергә йәшәйҙәр икән, ти, былар.

**КӘЗӘ МЕНӘН ҺАРЫҠ ӘКИӘТЕ** *Ғ. Туҡай*

Борон заман бер ир менән ҡатын торған, 30)Тормоштары шаҡтай ғына фәҡир булған, Аҫрағандар бер кәзә менән бер һарыҡ, Былар булған береһенән-береһе арыҡ.

Әйтә бер көн ире: «Ҡара бында, ҡатын! Үҙең яҡшы беләһең бит бесән хаҡын, (35)Китһен сығып беҙҙән кәзә менән һарыҡ, (36)Ашап ята юҡҡа ғына улар аҙыҡ».

**-72-**

Ҡатын күнде, тине: «Ирем, ярар, ярар,
Был икәүҙе ҡыумаҡлыҡҡа булһын ҡарар,
Кәзә менән һарыҡ хәҙер китһен беҙҙән,
Уларҙы һуң аҫрап тороп ни файҙа бар?»

Ни эшләй инде меҫкен кәзә менән һарыҡ?
Булмай хужа ҡушҡанына ҡаршы тороп,
Икеһенә бер ҙур ғына ҡапсыҡ тегеп,
Китте былар ҡырға табан сәфәр сығып.

Китте былар. Бара һаман бара, бара,
Күренмәйҙер күҙҙәренә аҡ һәм ҡара,
Бара былар.Күпме барғас, алла белә,
Юл өҫтөндә бүре башын табып ала.

Ҡурҡа башты ҡуҙғатырға кәзә ҡурҡаҡ,
Күптән инде ҡурҡаҡлыҡҡа һарыҡ уртаҡ.
Баш янында былар икәү тора ҡурҡып,
Әйтешәләр бер-беренә: «һин тот, мин тот».

Кәзә әйтә: «һарыҡ ағай, һин көслөрәк»,
һарыҡ әйтә: «һин, һаҡалбай ғәйрәтлерәк».
Бүре башын ҡулға тотоп ҡуҙғатырға .
Юлдаштарҙың береһенең дә етмәй
йөрәк.

Оҙаҡ торғас шунда кәзә менән һарыҡ,
Бүре башын тоталмайса ҡулдар барып.
Башты икәү тотоп ике ҡолағынан,
йүнәлделәр ҡапсыҡтары эсекә һалып.

Бара былар, туҡтамаҫтан һаман бара,
Күрә улар алыҫ түгел бер ут яна, Утты
күргәс, иптәшенә әйтә һарыҡ: «Әйҙә, кәзә,
ҡунайыҡ бөгөн шунда барып.

Ут янына бүреләр ҙә килә алмаҫтар,
Беҙҙең унда булғанлыҡты белә алмаҫтар»,
һарыҡтың был кәңәшенә кәзә күнде:
«Әйҙә, иптәш, барһаҡ барайыҡ инде».

**-73-**

(1)Кәзә, һарыҠ ут янына яҠын барһа, Меҫкендәрҙең күҙ алдында
бына нәмә: Өс-дүрт бүре ултырғандар Ҡаршы утҠа, Тырышып,
тырышып бешерәләр улар бутҠа.

(5)Кәзә, һарыҠ күргәс был тамашаны, Ҡалды ҠурҠып һәр береһенең
ярты йәне: «Иҫәнмеһегеҙ, дуҫтар, бүре әфәнделәр!» — Тиҙәр былар
күрһәтмәҫкә ҠурҠыу хәле.

Ҡыуаналар өс-дүрт бүре быны күргәс, (10)Алдарына һарыҠ менән кәзә
килгәс: «Ашайбыҙ, — тип, — был икәүҙе тотабыҙ ҙа, Бына нисек ит
таптыҠ, — тип, — бутҠабыҙға».

Кәзә әйтә: «Ҡайғырмағыҙ, беҙҙә ит күп, Ул ит менән һәр Ҡайһыбыҙ
булырбыҙ туҠ! (15)Ни Ҡарайһың? Тиҙ бул әле, тиҙ бул, һарыҠ!
ТоҠтағы бүре башын килтер алып».

һарыҠ шунда тоғондағы башты ала, Бөтә бүре ҠурҠыуынан шашып
Ҡала. Өс-дүрт бүре хайран Ҡалып торған саҠта, (20)Кәзә һаман
ғәйрәт сәсә, асыулана.

Кәзә әйтә: «Микикики! Микикики!ТоҠтағы бүре башы бит ун ике!
Ах, уңмаған, йүләр һарыҠ, наҙан һарыҠ, Бынан ҙурыраҠ бүре башын
килтер табып!»

(25)һарыҠ тиҙ аңлап ала был алдашты, ТоҠтағы ул алып килә шул
уҠ башты. Өс-дүрт бүре, ысынлап та, ҠурҠышалар, Бер-береһенә
күҙҙәрен йөрөтөшәләр.

Түгел хәҙер бүреләрҙә ашау Ҡайғы, (30)Тиҙ-тиҙ генә был урынды ташлау
Ҡайғы, «Нисек ҠасайыҠ? Нисек табайыҠ Ҡасыу юлын?» (32)һәр бер бүре
шуға һалған бөтә уйын.

## -74-

(1)Тороп әйтә шул арала өлкән бүре —Ҡартайған һәм күп эштәрҙе күргән бүре: «Туҡтағыҙ, — ти, — мин тиҙ генә һыу килтерәм, һыу бик аҙ, беҙҙең бутҡа бешер ҡоро».

(5)Шулай итеп, өлкән бүре һыуға китә, Ҡайтмай ләкин,
оҙаҡ ҡына заман үтә, Ҡайтмай бүре, эҙе лә юҡ, еҫе лә юҡ,
Мәжлес халҡы арып бөтә көтә-көтә.

Бүреләрҙе тағы ҡаты ҡурҡыу баҫты, (10)Сөнки хәҙер башлыҡтары китеп ҡасты, Тағы береһе һыуға табан китте тороп:
«Туҡтағыҙ, мин эҙләп ҡайтайым», — тигән булды.

Мәғлүм инде, был бүре лә китә шулай, Хәйлә менән
ҡасырға юл аса шулай, (15)Ҡайтмай был да, әллә нисә сәғәт
үтә, Мәжлес халҡы көтә, һаман көтә, көтә.

Өс-дүрт бүре береһе артынан ҡаса береһе, Өсөнсөһө, унан
һуңынан дүртенсеһе; Былар ҡасҡас, кәзә менән беҙҙең һарыҡ
(20)Китә инде рәхәтләнеп, ирек алып.

Ултыралар аяҡ бөкләп ҡаршы утҡа, Былар инде тәмләп
кенә ашай бутҡа, Ашап туйып, рәхәт кенә, тыныс ҡына
Кәзә, һарыҡ был төндәрен шунда ҡуна.

(25)Иртә менән иртүк тороп, таң атҡас та, Ҡулдарында бүре
башы һалған тоҡ, Тағы былар урман буйлап сәфәр китте,
Нимә яҙайым? Әкиәтем шунда бөттө.

### АҠЫЛЛЫ ТӨЛКӨ

(30) (Татар халыҡ әкиәте)

Бер ваҡыт арыҫлан, төлкө, бүре бергәләп һунарға сыҡтылар, ти. Бер ҡыр ишәге, бер ҡыр кәзәһе, бер бурһыҡ тотто-лар. Уларҙы бүлешергә ултырҙылар. Арыҫлан бүрегә бүлергә (34)ҡушҡан: «Өсәүебеҙгә бүл быларҙы!» — ти.

**-75-**

(1)Бүре үҙенә ҡыр ишәген ала: «Был — миңә», — ти. Арыҫланға ҡыр кәзәһен бирә: «Был — Арыҫлан ағайға», — ти. Төлкөгә бурһыҡты бирә. Арыҫлан асыуланды ла бүренең башын яра һуҡты, ти.

(5)Арыҫлан төлкөгә: «һин бүл!» — тине, ти. Төлкө бүлергә Тотона. Ҡыр ишәген арыҫланға бирә: «Быныһы иртәнсәк ашарға», — ти. Ҡыр кәзәһен дә уға бирә: «Быныһы төш ашарға», — ти. Бурһыҡты бирә лә: «Быныһы кис ашарға», — ти. Өсөһөн дә арыҫланға бирә.

(10)Арыҫлан төлкөнән һорай: «Был тиклем дөрөҫ итеп бүлергә һине кем өйрәтте», — тип. Төлкө бүрегә ымлап: «Быны башына ҡыҙыл бүрек кейгән өйрәтте», — ти.

## ЭШ ТАБЫЛДЫ

Борон-борон заманда йәнлектәр бер йорт хужаһына килә(15)ләр ҙә:

— Хужа, беҙгә эш бир! — тиҙәр. Сөнки улраҙы тик йөрөү ялҡытҡан, имеш.

— Ә һеҙ нимә эшләй беләһегеҙ? — тип һорай кеше.

— Мин һабан һөрәм, йөк ташыйым, баҫыуҙа эшләй (20)алам, — ти ат.

— Мин һөт бирәм, — ти һыйыр.

— Мин йөн бирәм, — ти һарыҡ. Ә тауыҡ:

— Ә мин йомортҡа һалам.

(25)—Ярай, мин һеҙгә эш бирәм, — ти хужа.

— Ә беҙҙе иртәнсәк кем уятыр һуң? — тип һорай йәнлек тәр.

Әтәс ҡысҡырып ебәрә:

— Мин уятырмын!

(30)Шулай итеп, уларҙың һәр ҡайһыһына эш табылған. Йәнлектәр кешеләргә файҙа килтерә башлаған, ти.

## АҠҺАҠ ҠАРҒА БҮЛӘГЕ

*Т. Даянова*

Боронғо замандарҙа йәшәгән, ти, Йәмилә исемле ҡатын (35)менән Йомағол тигән ир. Улар бик татыу ғүмер һөргән. Йорт-(36)тары сыйырсыҡ ояһы кеүек бәләкәй, ыҡсым булған, баҡсала

ҙур бер тирәк үҫеп ултырған. Яҙ һайын тирәк башына ҡарға оялап, бала сығарған. Хужалар шул ҡарға балаларына ҡарап һөйөнгән. Дөрөҫ, ҡарға данлы ҡош түгел. Ләкин ул да йән эйәһе, ер йөҙөндә ҡарғаға ла урын булырға тейеш. Йомағол балсыҡтан көршәк, туҫтаҡтар эшләгән, ә ҡатыны был һауыт-һабаларға матур-матур ялан сәскәләре төшөргән, һауыттарҙы игенгә, һөт-ҡатыҡҡа алмаштырып, ҡәҙимгесә тормош кисергәндәр. Улдары йә ҡыҙҙары булмауы ғына уларҙың күңелен өйкәп торған.

Бер көндө Йомағол балсыҡтан бәпес һыны әүәләп ҡуйған. Күңел һағышы шулай көслө булған инде! Шыңғырап кипкән бәпес һынын йәмилә тән төҫөнә буяған, күҙ-ҡаш, ирен, бит алмалары кешенеке һымаҡ булып, балсыҡ һынды тере баланан айырыу ҙа ҡыйын булған. Шунан ҡатын йүргәк теккән, ир тал сыбығынан матурлап-һырлап сәнгелдәк үргән. Балсыҡ сабыйҙы ҡәҙерләп төрөп бишеккә һалып ҡуйғандар. Көндәр, аҙналар үткән... Йәнһеҙ бала ята биргән, ә тышта, шау-гөр килеп, яҙ хөкөм һөргән. Ҡарғалар, бала сығарып, балаларын туйҙыра алмай йөҙәгән. Бер ҡошсоҡ оянан лап итеп ҡолап төшкән, ти. Ҡарғаларҙың сыр-сыу килеүенә йәмилә эшләп ултырған еренән тышҡа сыҡҡан һәм аяғы^ ҡанаты һынған ҡарға балаһын күргән. Ҡатын, ауыҙын ҙур асып, әсе ҡысҡырған йән эйәһен йылы өйөнә индергән.

Аяҡ-ҡанаттарын ҡабыҡ менән ҡыҫып бәйләгәс, ҡарға балаһы тиҙ һауыҡҡан, шулай ҙа аҡһаҡ булып ҡалған. Үҙе зирәк тә икән әле. Ир менән ҡатындың һөйләшеүен отоп, хатта ке-шесә һөйләшә башлаған, ти.

Бер көндө өйҙә бер үҙе генә ҡалғас, ҡарға балаһы сәңгелдәк эргәһенә килгән һәм, башын ҡыйшайтып, бәпескә текләп тора башлаған. Балсыҡ бәпес ҡымшанмаған да. Түҙемлеге бөткән ҡарға әсе итеп: «Торрр!» — тип ҡысҡырып ебәргән. Тауышҡа ингән әсә кеше:

— Бәпесебеҙ йәнһеҙ шул, Ҡараҡай, — тигән. Йәмиләнеңкүҙенән юл-юл йәштәр тама, ти. Ҡарғаның бәләкәс кенә йөрәге, ҡотҡарыусыһын йәлләп, һулҡ-һулҡ типкән, ти.

Бәләкәс ҡарға үҙенең уй-теләктәрен оҙаҡ йәшәп, күпте күргән әсәһенә һөйләгән. Ҡауырһындарына сал ингән ҡарт ҡарға, оҙаҡ уйланғас:

— Улым,бәпесте терелтеп була! Тик ул эште башҡарырәсән батыр йөрәк, талмаҫ ҡанаттар кәрәк.

## - 77-

— Әсәй, мин эшләрмен ул эште, тик һин миңә юлын өй-рәт, — тип ярһыған ҡарға малайы.

— Ай, улым, юл бик ауыр һәм һәләкәтле. Бынан ете тау, ете диңгеҙ аша йәншишмә урғып сығып ята. Унда барыр әсән әллә нисә үлем аша уҙырға кәрәк, ә һин кесһеҙһең, — тигән әсә.

Шул көндән алып бәләкәс ҡарғаның йөрәгендә батырлыҡ уты тоҡанған.

Нисек итһә иткән, Аҡһаҡ ҡарға юлға йыйынған. Йомағол, бәләкәй генә ике балсыҡ көршәк эшләп, ҡарғаның тәпәйенә аҫҡан. Ҡарға балаһы таң һарыһы менән юлға сыҡҡан. Уны Йомағол, Йәмилә һәм инә ҡарға оҙатып ҡалған.

Тәүге ҡыҙыулыҡ менән Аҡһаҡ өс көн, өс тән осҡан. Шунан ғына.үҙенә ял биргән. Осоуының һигеҙенсе көнөндә, ҡа-лын урман аша үтеп, ҙур аҡлан ситендәге ҡоро тирәккә ҡунған. Артабан ҡорғаҡһып кибеп ятҡан ерҙәр — аждаһа ере башланған. Шул аҡлан уртаһында йәншишмә урғып килеп сыға ла, бер аҙ ағып барғас, йәйғор нурҙары балҡытып, юҡҡа сыға, ти.Ә шишмә янында, ҙур күҙҙәрен аҡайтып, аждаһа ятҡан.

Был ерҙәргә әҙәми зат түгел, ҡош-ҡорт та аяҡ баҫмаған.

Аҡһаҡ ҡарға ағас башында оҙаҡ ултырған. Ни хәл итергә һуң?..

Яҡында ғына өкө уһылдап ҡуйған. Аптырағас, ҡарға уға мөрәжәғәт итә:

— Ғәфү итегеҙ, әфәндем, — тип баш эйгән ул, — һеҙгә мөрәжәғәт итергә рөхсәт итегеҙсе, һеҙ, моғайын, ошо урманда күптән йәшәйһегеҙҙер? Был йәншишмәнән һыу алған берәй йән эйәһен хәтерләйһегеҙме? -

—Эйе... Был урманда күпме йәшәгәнемде лә онотҡанмын инде... һыуға килеүселәр кү-ү-үп булды... Ергә ҡара!

Шунда ғына ҡарға шалтырашып өйөлөп ятҡан әҙәм һәм йәнлек һөйәктәрен күргән.

— Береһе лә миңә өндәшеүҙе кәрәк тапманы. Әгәр өндәш-һәләр, хәҙерге көндә һөйәктәре бында ятмаҫ ине. Миңә өндә шеүсе булырмы тип, әллә нисә йылдар өмөт иттем, һуңыраҡ төңөлдөм. Миңә һүҙ ҡушыусы тик һин генә. йәншишмәнән һыу алыу серен мин генә беләм. Ҡартайҙым инде, әгәр үлһәм, серем дә үҙем менән китә тип ҡурҡам, — тигән.

**-78-**

—Серегеҙҙе миңә сисегеҙсе, хөрмәтле Аҡыл әйәһе!—тип үтенгән Аҡһаҡ ҡарға.

— Кемгә генә сисергә ҡала һуң миңә серемде, — тип әсенгән өкө.—Күрше аҡланда йәм-йәшел булып йомшаҡ үлән үҫер. Ул тылсымлы, иҫерткес үлән. Шул үләнде йыйып киптереп, аждаһаға эсереү юлын эҙләргә кәрәк.

Ә нисек, ниндәй юлдар табып эсерергә уға?

— Йң тәүҙә үлән йыяйым, башҡа берәй аҡыл килмәй булмаҫ, — тип уйлаған ҡарға.

Бер нисә көн эсендә ҡарға етерлек үлән киптереп тә өлгөргән, ти. Аҡыл үҙенән-үҙе килгән. Аждаһанан үрҙә, ел башында Аҡһаҡ ҡарға ҡыҙыу усаҡ яҡҡан.

— Ниндәй хуш еҫ сыға һуң? — тип, аждаһа ҡомһоҙланыпеҫкәй башлаған. Инде бер аҙҙан тәрән йоҡоға ла киткән, ти.Ә ҡарғаға шул ғына кәрәк тә. Тиҙ генә осоп барып, тәпәйҙәренә тағылған бәләкәй көршәктәргә һыу тултырған был. Өкөменән йылы хушлашып, Аҡһаҡ ҡарға ҡайтыр юлға сыҡҡан.Ҡайтыу — килеүгә ҡарағанда ла ауырыраҡ икән. Ҡарға балаһы бик арыған, ҡанаттары талған. Шулай ҙа сығып китеүге нә бер ай тигәндә, ҡайтып етеп, тыуған йорт тупһаһына йы^ғылған, ти.

Ҡанаттарын йәйеп, томшоғон асып, әлһерәп ятҡан юлсыны Йәмилә таң менән күтәреп өйгә индергән. Иң тәүҙә ҡоштоң ауыҙына бер тамсы һыу тамыҙған. Ҡарға күҙен асҡан. Бына оҙаҡ көткән мәл килеп еткән. Балсыҡ бәпесте тере һыу менән ҡойондорғандар.

Бына бәпес керпектәрен елпелдәтеп, күҙҙәрен асып, шунан аяҡ-ҡулдарын һуҙып кирелгән, ти. Шунан ике бөртөк тешен күрһәтеп йылмайған, йәмилә менән Йомағол әсән донъя нур-ға сумған. Уларҙың күңелен ҡырып торған юшҡындың эҙе лә ҡалмаған. Аҡһаҡ ҡарға был яҡшы күңелле кешеләргә үҙенең рәхмәтен ҡайтарған, уларға ҡыуаныс бүләк иткән. Изгелек ерҙә ятып ҡалмай, тип тиккә генә әйтмәй шул халыҡ.

## ҺАРЫБАЙ

Ҡасандыр йәшәгән, ти, бер әбей менән бер бабай. Уларҙың һарыбай тигән этенән башҡа бер кемдәре лә булмаған. Хужалар уны бик яратҡандар.: Ләкин бына хужа-ларҙың балалары

**-79-**

тыуа. Шул көндән башлап, һарыбайҙың ҡәҙере киткән, хужалар уны иркәләмәй, һирәк ашата башлағандар.

Берҙән-бер көндө һарыбай, хужаға эйәреп, урманға барған. Унда бүрене осратҡан.

—һарыбай дуҫ, ни булды һиңә? Бик ябыҡҡанһың, бойоҡһоң.

— Элек мин хужамдың берҙән-бер ҡыуанысы инем. Хәҙер бабайҙың улы бар. Шунан һуң миңә көн бөттө, — тигән һарыбай.

—Ҡайғырма, йәй булғас, һиңә рәхәт булыр, — тигән бүре.

Бына йәй килеп еткән. Иген өлгөрөп, ураҡҡа төшкәндәр.

Әбей менән бабай, балаларын алып, баҫыуға сыҡҡандар. Улар иген урғандар, ә бала арба аҫтында йоҡлаған, һарыбай ҙа күләгәлә ятҡан.

Шул саҡ бүре килеп сыҡҡан да баланы алып киткән. Бала ҡысҡырған тауышҡа һарыбай ҙа уянған, абалап өрә-өрә бүрене ҡыуа башлаған.

Тауышҡа әбей менән бабай йүгереп килһәләр — бала юҡ. Ҡайғыларынан илаша-илаша, һарыбай артынан киткәндәр.

һарыбай бүрене ҡыуып етеп, баланы ҡотҡарып, арба янына алып ҡайтҡан. Әбей менән бабай быға бик шатланғандар. Шундай яҡшы этте быға тиклем аслы-туҡлы тотоуҙары әсән үкенгәндәр, һарыбайҙы яҡшы тәрбиәләй башлағандар.

## АҠСӘСКӘ

*Х. Шәмсетдинова*

Борон-борон заманда булған, ти, сәскәләр батшалығы. Бе-реһенән-береһе матур, береһенән-береһе нәфис төҫтәге сәскәләр үҫкән был батшалыҡта: ап-аҡ ебәктән кейенгәндәре лә, күҙ яуын алып торған оҙон һары алҡалылары ла, күк төҫөндәге зәп-зәңгәр күҙлеләре лә. Матур, бай кейенгәндәре сәскә батшаһының үҙ ҡыҙҙары булған. Улар бер нәмә лә эшләй белмәгәндәр, үткән һәр кешегә үҙҙәренең зиннәтле нәмәләре менән маҡтанып, ғәмһеҙ рәүештә ғүмер үткәрә торған булғандар.

Батшалыҡта ярлы сәскә ҡыҙҙары ла. булған. Иртә таңдан алып кис ҡояш юғалғансы эшләгән улар. Батша ҡыҙҙарының сәстәрен тарағандар, күлдәктәрен үтекләгәндәр, улар ни ҡуш-

һа, шуны эшләгәндәр. Был сәскәләрҙең затлы кейемдәре лә, аҫылташ балдаҡтары ла булмаған.

Ялсы ҡыҙ-сәскәләр араһында айырыуса тырыш Яғымлыҡай тигән бер сәскә йәшәгән. Иптәштәренә ҡарата бик иғти-барлы, ярҙамсыл булған ул. Уның был сифаттарын көн һайын күреп торған Ҡояш һоҡланып, ҡыҙҙы эргәһенә саҡырған. Ләкин сәскәнең күккә менгеһе килмәгән. «Рәхмәт, Ҡояш, — тигән ул, башын эйеп, — мин бит ерҙә тыуҙым, ерҙә үҫтем, унан айырылһам, тамырҙарым, кибер, тип ҡурҡам».

Ҡыҙ-сәскәнең был һүҙҙәрен ишеткән Ҡояштың күҙҙәренән йәш тамған. «Мин бер нәмә лә эшләй алмайым, үҙ ихтыярың, Яғымлыҡай, риза булһаң, иҫтәлеккә һиңә иң яҡты, кешеләр һәр иртә күрергә ятраҡан төҫөмдөң бер өлөшөн ҡалдырыр инем», — тигән. Шулай итеп, Ҡояш егете, һары нурҙарының иң яҡтыһын ҡыҙға бүләк иткән. Сәскәнең йөҙө тулған ай менән бер булған. Шундай уҡ түңәрәк, шундай уҡ һап-һары.

Батша ҡыҙҙары, Яғымлыҡайҙы күреп, бик ғәжәпләнгәндәр: «Ҡара һин уны, ниндәй сибәрләнгән», — тип уйлағандар улар эстән генә, ә инде ҡыҙҙың үҙенә: «һин ниндәй йәмһеҙләнден, күлдәгең дә ниндәй иҫке», — тип көлгәндәр.

Бына бер көндө Ҡояштың күршеһе Таңъегет килгән сәскәләр батшалығына. Бында ул үҙенә сәскә һайлап алмаҡсы булған. Әммә уларҙың күплеген, матурлығын күреп, хайран ҡалған. Ҡайһыһын үҙ итергә белмәй торған. Шунда егеттең башына бер уй килгән. Ул ҡыҙҙарға ошондай шарт ҡуя: аҙна ваҡыт эсендә уларҙың һәр ҡайһыһы үҙҙәре һуҡҡан, сиккән келәмен килтерергә тейеш. Егет келәмдең ҡайһыһын иң матуры тип таба, шуның хужаһын һайлай.

Яғымлыҡайҙың да ҡатнашҡыһы килгән был бәйгелә. Келәмен дә сигер, тик бына ниндәй күлдәк кейеп барыр ул байрамға? Ҡыҙ-сәскә өмөтһөҙлөккә бирелеп ултырғанда, уның иң яҡын дуҫы, йәшел күлдәкле Япраҡҡай килеп ингән, «һис тә ҡайғырма, келәмде үҙем илтеп бирермен», — тигән ул, дуҫын йыуатып.

Сәскә эшкә тотонған. Келәмде һуға башлау алдынан, ул елтәрҙе, үҙенең йөҙөндәге Ҡояш бүләге, һап-һары нурҙарға манған. Дуҫ ҡыҙҙары, быны күреп: «Ай-һай, ай кеүек йөҙөңдө әрәм итәһең», — тип туҡтатып ҡарағандар. Ә Яғымлыҡай төҫ–тө йәлләмәй, елтәр һап-һары булғансы манған. Келәмгә Таңъ-

## -81-

егетте, уның дуҫы Ҡояшты төшөргән. Күҙ яуын алып торған келәм бер төндә әҙер булған.

Бер аҙна ваҡыт үтеп тә киткән. Билдәләнгән көндө батшалыҡтың иң матур аҡланына иртән иртүк аллы-гөллө сәскәләр ағыла башлаған, һәр кем үҙ оҫталығын күрһәтергә ынтылған. Бигерәк тә батша ҡыҙҙары тырышҡан: егеттең алдына әле бер келәмде, әле икенсеһен йәйгәндәр. Таңъегет уларҙың бөтәһен дә ҡарап сыҡҡан: келәмдәр матур, нәфис эшләнгән, тик күңелгә оҡшағаны ғына юҡ.

Егет ошолай моңһоу ғына бер ситтә баҫып торғанда, дуҫтары Яғымлыҡайҙың келәмен йәйеп ҡуялар. Сәскәләр, келәмде күреп, аһ итәләр. Таңъегет ҡарайым тип күҙен күтәреүе була, утҡа бешкән кеүек, кире сигенә.

«Келәм кемдеке?» — тип һорай егет ҡыҙҙарҙан. Батша ҡыҙҙары бөтәһе бер юлы тиерлек: «Минеке, минеке!»—тип ҡысҡыралар. «Ул ваҡытта, — ти егет, — миңә келәмде алып бирегеҙ».

Кем генә һуҙылып ҡарамай келәмгә, ләкин береһе лә яҡын килә алмай, ҡояш нурҙары уларҙың ҡулдарын көйҙөрә, күҙҙәрен ҡамаштыра.

Таңъегет келәмдең хужаһы бында юҡлығын аңлай һәм бөтә батшалыҡҡа оран һала: ул келәм хужаһын һайлай.

Яғымлыҡай, быларҙың береһен дә белмәй-ишетмәй, өйҙә-ултыра.Дуҫтары уны етәкләп тиерлек майҙанға алып киләләр.Сәскә келәмгә табан атлай, һәм ни күрһендәр, ҡояш нурҙары ҡыҙҙың йөҙөнә күсә башлай. Бына Яғымлыҡай келәмгә яҡын уҡ килеп етә, һәм Таңъегет алдында ай йөҙлө ҡыҙҙы күреп таң ҡала...Ә ҡыҙ, ерҙән әкрен генә келәмде күтәреп, егеткә һуҙа...

Батша ҡыҙҙары ғәрлектәренән ер тишегенә инерҙәй булалар. Ә был ваҡытта егет ҡыҙға ап-аҡ ебәк күлдәк бүләк итә.

Болондарҙа йөрөгәндә ап-аҡ күлдәкле, һап-һары тулған ай йөҙлө сәскәне күргәнегеҙ бармы? Ошо инде ул Аҡсәскә.

## ТЕРПЕКӘЙ

*Д. Талхина*

Ҡарт шыршы урманында ҡурҡыныс һоро Бүре йәшәгән, ти. Ҙур, тәртипһеҙ был йән эйәһенән шөрләмәгән кейек бул-

**- 82-**

маған. Кейектәр генә түгел, хатта ағастар ҙа уның алдында дер ҡалтырап торғандар, шуға күрә уңайы тура килгәндә, Бүрене төп башына ултыртыу яғын ҡарап ҡына торғандар.

Шулай, берҙән-бер көндө ас Бүре төшкө ашҡа Терпене тоторға уйлаған. Әйтергә кәрәк, ул ваҡыттарҙа Терпенең туны Ҡуян тунынан да йомшағыраҡ булған, ә ул үҙе иһә шул әлеге шикелле осло моронло, ялтырап торған мәрйендәй күҙле, бик үк шәп йүгерә алмай торған ҡыҫҡа аяҡлы бер кейек ҡиәфәтендә көн күргән.

—О-о-о! Бына ул ҡайҙа тәбиғәткә хозурланып ултыра!Ҙурыраҡ кейек артынан һунарға сығырға ялҡау килгәндә,һиндәй януар ҙа ярап ҡала ул!

Бахыр Терпекәй ҡалтыранып төшкән: бар көс-хәлен йыйып, йүгереп киткән. Тик уның аяҡтары менән Бүренән ҡасып ҡотолоу мөмкинме һуң?! Шыршылар араһында юрғалаған булған. Бүре уның артынан тотам да ҡалмай икән.

— О-һо-һо! Хәҙер тотам һине! — тип ул Терпегә һонолорға ғына иткәндә, өҫтән яңғырауыҡлы тауыш ишетеп, туҡтап ҡалған.

—Ю-у-уҡ! Тоторға ирек бирмәм!

— Кем ул һин? Кем ул мин — Бүре менән гәп һата? — һоро йыртҡыстың йәне көйгән. Шул уҡ ваҡытта уның һунарын бүлдерергә баҙнат иткән йән эйәһенә аптырап, башын өҫкә күтәргән.

Ә өҫтә башы күккә олғашҡан мөһәбәт Шыршы тора икән. Ул көслө йөнтәҫ ҡулдары мгенән Бүрене эләктереп алған да бер-ике һелкеп һалып атып бәргән.

— Ә-ә-ә-һм-һм. — Ергә ҡойолған Шыршы энәләренә барып төшкән Бүре шыңшып-шыңшып, асыулы Шыршы янынан китеп барған.

— Ах, һин, зыянһыҙ йән эйәһе! Ни эшләргә һуң һинең менән? — Шыршы, Терпекәйҙе күтәреп алып, уға оҙаҡ ҡарап торған. Бындай иғтибарҙан Терпекәйҙең күҙенән ике бөрсөк йәше тәгәрәп төшкән. Ул:

—Рәхмәт һиңә, Шыршы ағай! Рәхмәт! — тип әйтеүҙән башҡа ни тиергә лә белмәгән.

— Рәхмәттән тун тегеп булмай! Улай дерелдәмә! — Шыршы терпене һыйпаған һәм үҙенсә тынысландырырға тырышҡан. — Туҡта әле! Тун'тигәндәй.:. — Ул Терпене ергә төшөр- гән.—Мин Бүрене, елкәһенән эләктереп алып бәргәс, ул ми-

нең ҡойолған энәләргә сәнселеп, ауыртынды бит! — Шыршы ҡапыл һөйләнеүҙән туҡтап ҡалған.

— Нимә әһә? — Терпекәй, батырлығы етеп, шулай тип һораған Шыршынан.

— Әһә! Әһә! Бына һинең туның да йомшаҡ, аяҡтарың да ҡыҫҡа ғына. Дошманыңдан ҡотолоуы һиңә бик ныҡ ҡыйын. Әһә тиеүем шул. Баяғы Бүре бит, минең энәләргә сәнселгәс, ауыртыныуҙан хатта илап ебәрҙе. Әгәр, тим, һинең һоро туныңа ошо энәләрҙе ҡаҙап ебәрһәк, Бүре моғайын да, һине тотоп ашауҙан баш тартыр ине.

— Туным йәмһеҙ булмаҫмы һуң? — тип Терпекәй икеләнеп кенә һораған.

— Иә баш, йә йәм! — тип ҡырт киҫкән Шыршы.

— Баш, әлбиттә, ҡәҙерлерәк, — тип ризалашҡан Терпе.

Шул ваҡыттарҙан башлап Терпекәйҙе дуҫтары Энәкәй тип йөрөтәләр. Ә Бүре менән Төлкө терпене тотоп ашау тураһында хатта уйлап ҡына ҡарай ҙа алмайҙар, сөнки Терпегә ҡурҡыныс янай башлаһа, ул, энәләрен тырпайтып, йомарланып, йомғаҡҡа әйләнә лә ҡуя.

## ҠАРА ТАУЫҠ НИСЕК АҠ БӘХЕТ ТАПҠАН?

*Ә. Вахитова*

Бер ауылда, ти, борон,
Тыңлап киң дала йырын,
Бәләкәй генә йортта
Донъя көткән бер ҡортҡа.

Ҡортҡаның бар байлығы —
Булған ҡара тауығы.
Файҙа килтергән йортҡа —
Көн дә һалған йомортҡа.

Ә эбейҙең юҡ теше,
Ҡоймаҡ ҡойоу — бар эше.
Йомшаҡ аштан туймаған,
Тауығын да һыйлаған.

Муйыны уның һарылы,
Бик яратҡан тарыны.
Ул ситкә һис китмәгән,
Гел әҙер ем сүпләгән.

Эшләмәгән бер эш тә,
Сығармаған себеш тә.
Шулай ул донъя көткән...
Көн артынан көн үткән.

Эшһеҙ ятып бер заман
Һимергән ул бик яман.
Күҙе лә насар күргән,
Тамағын да май бөргән.

Бора алмаған башын,
Ашай алмаған ашын.
Унан файҙа ҡалмаған,
Йомортҡа ла һалмаған.

-84-

Ә хужаһы ҡартҡортҡа
Көн дә көткән йомортҡа.

— Йәшәр көнөм аҙ ҡалды,
Хәлем бик насарланды,
Тота алмайым һине,
Сығып кит йорттан! — тине.

Хужа ҡыуғас, ни сара?
Киткән тауыҡ, бисара,
Тик урамда бер ни юҡ,
Болот йөҙә, көн һыуыҡ.

Инде көн үтеп бара,
Ул һаман китеп бара.
Ә уны берәү ҙә, ти.
Саҡырмай: «Кил, әйҙә!» —
тип.

Тауыҡ күп ер тапаған,
Тик бәхетен тапмаған.
Асығып үткән көнө,
Ҡойолоп бөткән йөнө.

Бәхет килмәгән һаман.
Йөрөй торғас, бер заман
Юл тотҡан бер ауылға,
Осраған ҙур дауылға.

— Эй дауыл, дауыл, —
тигән,—
Мин аслыҡтан интегәм!
Ҡыҙған мине аҙ ғына,
Тары һипсе алдыма!

Көслөгә ҡеуәт биргән,
Уңғандарға дәрт. биргән
Ҡаты бәғерле дауыл —
Уны тыңлау ҡайҙа ул

Тотоп тауыҡ ҡанатын,
Юлдан ебәргән атып.
Тауыҡ осҡан соҡорға,
Белмәй нисек сығырға.

«Йығылып ергә аумаҫҡа,
Сүпкә күмелеп ҡалмаҫҡа!»-
Тауыҡ шулай ант итте,
Өйөлгән сүпте типте.

Тик күргәс тә бер ҡортто,
Тиҙ генә ҡабып йотто.
Бына ғәжәп — күр инде,
Тарылар ҙа күренде.

Ах, ҡара, күпме аҙыҡ! —
Тик өлгөр генә ҡаҙып.
Ошо ерҙең аҫтында
Ята икән алтын да,
Үлән дә, быяла, таш —
Бары ла ҡош-ҡортҡа аш.

Эй ҡараҡай һөйөнә,
Ҡайтып үҙенең өйөнә,
Иәш1й башлаған тағы,
Ял белмәгән аяғы.

Өйөлгән сүпте типкән,
Тамам туҙҙырып бөткән.
Ҡалмаған бер тиреҫ тә,
Оҡшап киткән был эш тә.

Көн үткәнен һиҙмәгән,
Эштән бер ҙә биҙмәгән.
Тик тамам хәлдән тайғас,
Күҙҙәре томаланғас,
Йоҡларға ята икән,
Тора икән бик иртән

-85-

(1)Көйләнгән шулай эштәр,
Сығарған ул себештәр.
Себештәре ем һорай,
Ул уларға йыр йырлай:

(5)«Гел әҙер ем көтмәгеҙ,
Үҙегеҙ ҙә эҙләгеҙ!
Тырыш булығыҙ йәштән,
Ҡурҡмағыҙ һис тә эштән.

Юҡҡа иҫегеҙ китеп,
Ҙур табыш өмөт итеп,
Ситкә китмәгеҙ бер ҙә —
Бәхет ул ошо ерҙә».

**ЙЫЛ БАБАЙҘЫҢ**
**ДҮРТ ҠЫҘЫ**

Б. *Ноғоманов*

Иыл — бер йомғаҡ.
(10)һүтелгәндә
Миҙгел һайын нур-биҙәк,
Йыл йомғағы Йыл бабайҙың
Дүрт ҡыҙында — дүрт биҙәк.

1.**Ҡарһылыу менән Яҙһылыу**
(15)Ағастың алтын алҡаһы
Өҙөлөп бөткәс елгә,
Йондоҙ иленең илсеһе —
Ҡарһылыу төштө ергә.
Елеп йөрөп, тирә-яҡҡа (20)
Ап-аҡ ынйылар һипте,
Алҡаһыҙ ҡалған ағасҡа
Аҡ шәлен бәйләп китте.
Йылтыр көҙгө—түңәрәк күл,
Кил дә ҡупшылан хәҙер.
(25)Йылғыр йылға, — юлды быума,
Күпер ҙә бына әҙер.
Йондоҙ илсеһе Ҡарһылыу
Унған да икән үҙе:
(30)Әйтерһең, мамыҡ эҫкерте —
Тигеҙ ергә тау өйҙө.
Выжлап сана, саңғыларҙа
Тау:шыуалар малайҙар.
(34)Ҡыуанышып, шау-гөр килеп,
Ҡарһылыуҙы маҡтайҙар.
Эшсән дә икән Ҡарһылыу:
Ултырып ул он иләй,
Күңелдәрҙе елкендереп,,
Моңло ғына көй көйләй..
Ҡайсаҡ шуҡланып, бәйгегә
Саҡыра елбер елде.
Ҡар тауҙарын күсерә ул,
Уйлаһаң, ғәжәп инде!..
Бына шулай айҙар буйы
Ҡарһылыу байрам ҡорҙо.
Ҡояш, ил енән Яҙһылыу
Барын күҙәтеп торҙо.

Ҡаршылар көндәр ҙә етте
Ҡояш илсеһен бына.
Яҙһылыу килде, юл һалып,
Алтын нурҙарҙан ғына.
Мөләйем генә йылмайып,
Ҡарһылыуға ҡул һуҙҙы.
Бөркә-бөркә һалҡын тынын
Ҡарһылыу башлай һүҙҙе.

Ҡ а р һ ы л ы у:

Буран туҙҙырып уйнаным,
Яптым ергә аҡ юрған.

-86-

Айҙар буйы тырышҡаным
Бушҡамы инде булған?
Ҡөҙрәтемдән ни ҡалыр һуң,
Ынйы ҡарҙарым ирер...

Я ҙ һ ы л ы у:

Ҡар тауҙары ҡеүәтенән
Ташҡын һыуҙар гөр килер.
Борсолма артыҡ, Ҡарһылыу,
Күп һинең файҙаң ергә.
Матурлығың кире ҡайтыр,
Дуҫ булһаҡ икәү бергә.

Ҡ а р һ ы л ы у:

Нисек инде?
Былдай хәлдә
Ҡалыр кем тыныс, түҙем?..
Дуҫлыҡта бар көс,
Күркәмлек,
Хаҡ булһа әгәр һүҙең...

Я ҙ һ ы л ы у:

һүҙем — алтын. Бергә
булһаҡ,
Мөғжизә беҙҙең ҡулда.
Кешеләр һине һағынып
Көтөп алырҙар йыл да.

* * *

«Улайһа, дуҫлыҡ!» —
Ҡарһылыу һуҙҙы ап-аҡ
ҡулдарын...
Ил буйлап сәфәр сыҡтылар,
Изге булһын юлдары!
Ҡар тауын гөрләүек итеп
Ҡуштылар моңло йырға.
Ағастарҙың шәлен сисеп,
Таҡтылар йәнә һырға.
Йәшәреп китте ужымдар,
Алғас ап-аҡ юрғанын.
Күпере киткәс йылғаның,
Шашып тулҡын уйнаны.
Асылды сиҙәм. Малайҙар
Аунаһындар шатлыҡтан.
Күлдең боҙҙарын ваттылар—
Тонсоҡмаһын балыҡтар.
Яҙһылыу юлынан менеп,
һабантурғайҙар һайрай.
Ер йәшел келәм ябына,
Ә урман кейем һайлай.
Тракторҙарҙың йырынан
Баҫыу өҫтө гөр килә.
Күпереп ятҡан бураҙнаға
Тос орлоҡтар күмелә.
Ҡарһылыу менән Яҙһылыу
Арттыра ерҙең ғәмен.
Нур ҙа булғас, һыу ҙа булғас,
Биҙәй тәбиғәт йәмен.
Эй ҡыуаныша кешеләр:
Ҡарһылыуҙан бик уңдыҡ,
Быйыл туйғансы эсерҙе
Ер-әсәбеҙгә дымды.
Баҫыуҙарҙа иген булып,
Ҡарһылыу сыҡты ҡалҡып.
Туғайҙарҙы ҡапланы ул
Гөл-сәскә булып балҡып.
Ҡарһылыу менән Яҙһылыу
Үткән ер булды хозур.
Ҡарһылыу бирһә ҡөҙрәтен,
Яҙһылыу өҫтәне нур.
Йәм һәм йән өләшеп улар
Бар ғәләм буйлап үтә.
Тәбиғәттә Ҡарһылыуҙың
Ғүмере дауам итә.

**2. Йәйбикә менән Көҙбикә**

Яҙһылыу ерҙе йәмләгәс,
Хуш еҫ сәскәләр һибеп,

-87-

Ҡолас йәйеп, нур бөркөтөп,
Иәйбикә килде көлөн.

Йүгереп йөрөп урман, ҡырҙы

Тағы ла ул биҙәне.

Кешеләрҙе йылға, күлгә

Көн һайын ул әйҙәне.

Рәхәтләнеп һыу ҡойондо
Балалар, сыр-сыу килеп.

Лагерҙа борғо уйнаны,
Күңелдәргә дәрт биреп.

Игенсе сыҡты баҫыуға
Мул уңыш яулар әсән,

Тәжрибә баҡсаларында

Тир түкте, бирҙе көсөн.
Тир түгелде, көс бирелде,

Ҡояш та гел балҡыны.

Баҫыу, баҡса емештәре

Ҡыуандырып ҡалҡынды.

Иәйбикәнең ҡөҙрәтелер,
Ялтланы йәшен уйнап.

Ямғыр ҡоя — Был бик кәрәк,
Ер сарсамаһын һыуһап.
Емеш-еләк быйыл уңған:

Ҡайынлыҡта — бөрлөгән;

Әйтерһең дә, сөм-ҡара күҙ —

Ҡарағат та өлгөргән.
Ә еләге ниндәй татлы,

Ауыҙҙа үҙе ирей!
Күрсе терпене! һыртына

Бәшмәктәр ҡаҙап йөрөй.
Сейәлетау итәктәре

Тағы ҡып-ҡыҙыл төҫтә,

Муйыл сөм ҡара суҡтарын
Күтәреп тора көскә.

Помидорҙар һабағында
Һутланып бешкән тоташ.

Алмалар нәҡ Иәйбикәнең

Бит алмаһына оҡшаш.

Түтәлдәргә килеп ҡара,

Тупырлап ята ҡыяр.
Иәйбикәнең табынында
йәнең теләгән һый бар...

Иәйбикәнең эше ҡыҙыу,

Көн артынан көн уҙа.

Ҡайҙандыр сығып, шаярып,

һалҡын ел иҫеп ҡуя.

Ниңә әле болот аҡһыл?
Ниңә ялтламай йәшен?

Төндә ысыҡ төшһә, иртән
Иәйбикә һөртә йәшен.

Белә ул, тиҙҙән алмашҡа

Көҙбикә килә ергә.

Тыуған ерҙән Иәйбикәнең

Киткеһе килмәй бер ҙә.

Бына бер мәл мәктәптәрҙә

Шаулатып еҙ ҡыңғырау,

' Көҙбикә лә килеп етте,
(Булды, ти, юлым урау.

һүҙ ҡуша: — һуңламаныммы,

Хеҙмәттәреңде күрәмен,

Апаҡайым, Иәйбикә?
Уңғанһың икән бик тә.
Уңыштары мул булыр.

Баҫыуҙарҙа иген үҫкән,

Алтын бөртөк—ашлыҡ менән
Келәттәр быйыл тулыр.
Йыл бабай йыйған табында

Осрашырбыҙ тағы ла...

Көҙбикә шулай, ашҡынып,

Баҫты хеҙмәт һағына.

Ул ашыҡтырҙы: Игенсе,

Йый ашлыҡты тиҙерәк.
Киләһе йыл әсән тағы

-88-

Ергә лә бит ял кәрәк.
Кешеләр алсаҡ йылмая,
Муллыҡтан бит ҡыуанып.
Игене лә уңған икән —
Тос башаҡтар йыйып алынған.
Ҡәҙерләп Тултырылған бураға...
Көҙбикә йөрөй малдарҙы
Ҡыуып йылы ҡураға.
Көш-көш, ҡошҡайҙар,
осоғоҙ, йылы яҡ һеҙҙе көтә.
йәйбикә лә шул ҡоштарҙың
Ҡанаттарында китә.
Көҙбикәбеҙ, ел уйнатып,
Япраҡтар өҙөп йөрөй.
Урын бирегеҙ, ҡалҡыр, ти,
Яҙ еткәс, яңы бөрө.
Ергә аҡ юрған ябырға
Саҡырҙы Ҡарһылыуҙы.

Йыл бабай килеп, дүрт ҡыҙын
Оло табынға йыйҙы.
Емеш, йәшелсә, сәскәләр
Тулып тора табында.
Бөтә ниғмәт — ер бүләге,
Хеҙмәт емеше бында.
Ҡуйылған йомро икмәк
Уртаһына табындың.
Ул икмәктә Ҡарһылыуҙың
Аҡ сафлығы сағылды.
Яҙһылыу һипкән хуш еҫтәр
Таралды тирә-яҡҡа.
йәйбикә уға йәй буйы
Алтын төҫтәрен яҡҡан.
Бар унда илгә көс биргән
Көҙбикәнең ҡөҙрәте.
Шул икмәктә йыл бабайҙың
Дүрт ҡыҙының хеҙмәте.

## 20)ҠОЯШБИКӘ ҺӘМ ЯМҒЫРБАЙ

*З. Ғиләжева*

һауа тигән изге күңелле ҡатындың Ҡояшбикә исемле ҡы-ҙы һәм Ямғыр исемле улы булған, ти.

Ҡояшбикә аҡыллы, асыҡ йөҙлө булһа, уның ҡустыһы Ямғыр апаһының тап киреһе — үҙ һүҙле, илаҡ, мыжыҡ булған, имеш. Ҡояшбикә үҙенең ике туған ағаһы эшһөйәр Таң менән бергә уянған. Өйҙәге эшен бөтөргәндән һуң, сәйәхәткә сығып киткән. Бигерәк тә Ерҙе үҙ иткән ул. Сөнки унда йәшәүсе бө^ тә йән эйәләре лә Ҡояшбикәне шатланып ҡаршы алғандар. Айырыуса балалар менән дуҫ булған. Йылға буйында көндәр буйына сыр-сыу килеп йөрөгән балалар, аҙ ғына тотҡарланһа ла, Ҡояш апаларын юҡһынып һамаҡлай башлайҙар:

Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,
Алтын ҡалаҡ бирермен,
Майлы бутҡа бирермен,
Алтын ҡалаҡ — баҙарҙа,
Майлы бутҡа — ҡаҙанда...

-89-

Ә ялҡау Ямғыр, апаһы сәйәхәткә сығып киткәндә,, болот юрғанын ябынып рәхәтләнеп йоҡлар булған. Ҡайсаҡ ул, иртәрәк уяныһ, апаһын ҡыуып еткән дә:

— Ниңә мине яңғыҙ ҡалдырып киттең, миңә би-и-к күңел һеҙ, — тип үпкәләп мығырларға тотонған.

Ямғырҙың кәйефе китеп, шулай иламһырап мыжыған мә-лендә аяҙ көндә кинәт кенә ямғыр яуып үтә, имеш.

Бер көн Ҡояшбикә апаһы түҙмәгән: «Эй, ҡустым, ҡустым. Шулай һытыҡ йөҙлө, илаҡ булғаның әсән берәү ҙә яратмай бит үҙенде, һин илай башлаһаң, ниндәй шат күңелле балаларҙың да кәйефтәре китә. Ана, күрәһеңме, ағас аҫтына инеп,, һинән йәшеренеп ултыралар», — тип ҡустыһын әрләп ташлаған.

Апаһының һүҙҙәренә Ямғырҙың бик хәтере ҡалған, ти. Ғәрлегенән, бүтәнсә Ергә әйләнеп тә ҡарамаҫҡа анттар итеп, үпкәләп ҡайтып киткән, ти. Ҡустыһын рәнйетеүенә Ҡояшбикә-бик үкенгән. Нисек тә Ямғырҡайҙың кәйефен күрергә тырышҡан, үҙе менән бергә сәйәхәт итергә саҡырған. Тик малай һүҙендә ныҡ торған... Ә Ҡояшбикә һәр көндәгесә сәйәхәткә йөрөгән. Бигерәк тә Ерҙе үҙ күргән ул. Көлтә-көлтә нурҙарын һибеп уны иркәләгән. Бер аҙҙан Ерҙә ҡоролоҡ башланған. Япраҡтар һарғайған, үләндәр кипкән. Кешеләр ҙә, бөркөүлектән нисек ҡотолорға белмәй, тәҙрә ҡапҡастарын япҡандар,, эстән ҡалын-ҡалын ҡорғандар ҡороп ҡуйғандар... Бар терек-лек, берәй кескәй генә болот әҫәре күренмәйме, тигән өмөт менән күккә баҡҡан. Быны күреп, ишетеп торған Ҡояшбикә, бик ныҡ үпкәләп, үҙҙәре йәшәгән Күк иленә ҡайтып киткән. Ғәҙәттәгесә тешегеп өндәшмәй ултырған ҡустыһына былай: тигән:

—Бар, илағым, Ерҙә һине көтәләр. Бөтәһенең дә телендәбер үк һүҙ, — Ямғыр ҙа Ямғыр. Күптәнме әле апайҙар, еңгәй ҙәр, ҡыҙҙар, минең нурҙарымды тотҡарламаһын тип, тәҙрәлә рен көн дә таҙартып тора торғайнылар, ә бөгөн килеп ошо кешеләр тәҙрәләрен, ишектәрен ҡаплап ҡуйҙылар.

Апаһының был һүҙҙәренән Ямғырҙың күңеле үҫеп киткән. Ул, бар булған үпкәһен онотоп, тиҙерәк Ергә ашыҡҡан.

Тәбиғәт Ямғырҙы ысынлап та шатланып ҡаршы алған. Урмандар, тауҙар, йылғалар, үләндәр, гөлдәр кинәнеп ҡойонғандар, Ямғырҙы маҡтағандар. Балалар йырғанаҡтар кисеп,

## -90-

бер-береһенә һыу сәсрәтеп уйнап мәж килгәндәр. Лыҡма һыу булған балаларын һәр саҡ ҡырыҫ холоҡло әсәләре лә тыймаған, киреһенсә, уларҙың сыр-сыу килеүҙәрен ҡыуанып ҡарап торған. Ямғырҙы иң ғәжәпләндергәне шул булған: хатта йөҙ-йәшәр ҡарттар ҙа, урамға сығып, сал һаҡалдарын һыйпап, Ямғырға рәхмәттәр уҡығандар. Был хәлде күреп ул оторо шашып киткән, көн тимәгән, төн тимәгән — яуған да яуған. Дымға туйынған Ер өҙлөкһөҙ ҡойған ямғырҙан шешенгән, үләндәр, йәнлектәр, ҡоштар күшеккән. Йылғалар, күлдәр ярҙарынан сығып яландарҙы, иген баҫыуҙарын баҫҡан. Бар булған тереклек әле генә шатланып ҡаршы алған Ямғырға асыуланған. Бигерәк тә ҡояш нурҙарын үтә яратыусы бойҙай ^башаҡтарына ҡыйын булған. Улар, Ҡояшбикә, Ҡояш апай, тип ялбарып, тос баштарын күтәрә алмай эйелгән, яйлап серегән. Быны күргән кешеләр Ямғырға уғата рәнйегән. Хатта күптән түгел генә Ямғырға рәхмәттәр уҡыған аҡ һаҡаллы ҡарт та:

— Әллә күктең төбө тишелгәнме? Биҙрәләп ҡояһы, — тип һуҡранған.

Ямғыр бик ғәрләнгән. Илай-илай апаһы Ҡояшбикә эргәһенә ҡайтып киткән. Уға үҙенең үпкәһен һөйләп биргән. Ҡустыһының һүҙҙәренә Ҡояшбикә лә бик аптыраған. Ғәләмәт кешеләр йәшәй икән ул Ерҙә. Нисек инде улай, үҙҙәре саҡырып алалар ҙа, үҙҙәре ҡыуып ебәрәләр. Төрлөсә фараз итеп ҡарағандар, бәхәсләшеп тә киткәндәр, тик бер фекергә лә килә алмағандар. Аптырағас, әсәләре һауа янына барып, бөтәһен дә уға һөйләп биргәндәр. Әсәләре уларға былай тигән:

— Эй, балалар, балалар. Йәшһегеҙ шул әле, күп нәмәне төшөнөп етмәйһегеҙ. Хәҙер мин һеҙгә Ер кешеләренең ни әсән асыуланғандарын аңлатып бирәм. Ерҙә йәшәүсе бар тереклек күҙәнәктәрҙән тора. Улар үҫһен, яңы йән эйәһе тыуһын әсән, Ҡояшбикә ҡыҙым, һинең йылы нурҙарың да, Ямғыр улым, һинең шифалы тамсыларың да берҙәй үк кәрәк. Әгәр ҙә көн дә ҡояш ҡыҙҙырһа, Ер кибә, тереклек һәләк була, ә инде бер туҡтауһыҙ ямғыр ҡойһа, Ер күпсей, үләндәр серей...

Оҙаҡ һөйләшеп ултырғандар һауа, Ҡояш, Ямғыр... һәм, ахырҙа, өсөһө лә бер уртаҡ фекергә килгәндәр, имеш: һәр нәмә үҙ ваҡытында, үҙ мәлен, самаһын белеп килгәндә генә ҡәҙерле...

## -91-

## ӨС ИҪӘР ТАҘ МЕНӘН БЕР АҠЫЛЛЫ ҠЫҘ

Бер туған өс таҙ экиәт һөйләшеп ултырғандар. Әкиәтте бүлеп, улар янына бер ҡарт килеп ингән. Таҙҙарҙың бик асыуҙары килгән.

—Ниңә һин беҙҙең экиәттең ҡойроғон өҙҙөң? Нимә биреп: ҡотолаһың? Йәнеңде бирәһеңме, ҡыҙыңды бирәһеңме? Әгәр ҡыҙыңды бирмәһәң, беҙҙән ҡотола алмайһың!—тигәндәр.

Бабай ҡыҙын бирергә риза булған.

Таҙҙың иң олоһо ҡыҙҙы алырға киткән. Таҙ барғанда, ҡыҙутын ҡырҡып тора икән.

— Әссәләмәғәләйкүм, ҡыҙ кеше! — тигән Таҙ.

— Вәғәләйкүмәссәләм, таҙ кеше! — тип сәләмгә яуап ҡайтарған, ти, ҡыҙ.

— Мин һине кәләш итеп алып китәм, — ти икән Таҙ.

—Була ул, тик бына утындың ҡойроғон тотоп тор, — га икән ҡыҙ.

— Утындың ҡойроғо буламы, иҫәр, — ти икән Таҙ,

— һин үҙең, экиәттең ҡойроғон өҙҙөң, тип атайымды ҡурҡытып ҡайтарғанһың. Әкиәттең ҡойроғо буламы ни, таҙ кеше? — тип, ҡыҙ Таҙҙы кире ҡайтарып ебәрҙе, ти.

Оло Таҙ ҡайтҡас, уртансы Таҙ килде, ти. Таҙ сәләм биргән..

— Әссәләмәғәләйкүм, ҡыҙ кеше!

— Вәғәләйкүмәссәләм, таҙ кеше!

— Атайың өйҙәме?

— Өйҙә.

—Ни эшләй?

— Сысҡан мөгөҙөнән бысаҡ һаплай.

— Бәй-бәй, сысҡандың мөгөҙө буламы ни ул? — тип аптырай икән уртансы Таҙ.

— Сысҡандың мөгөҙө булмағас, экиәттең ҡойроғо буламы, таҙ кеше?! — тине, ти, ҡыҙ.

Шулай итеп, икенсе Таҙ ҙа ҡыҙҙы ала алмай ҡайтып киткән.

Бәләкәй Таҙ үҙенең ағайҙарына:

— Барһағыҙ ҙа алып килә алмайһығыҙ, тип әйттем бит инде мин һеҙгә. Бына хәҙер үҙем барып алып киләйем әле, — тип сығып китте, ти.

Кесе Таҙ барғанда, теге һылыу ҡыҙ урамда тары төйөп тора ине, ти.

**- 92 -**

— Әссәләмәғәләйкүм, ҡыҙ кеше!

— Вәғәләйкүмәссәләм, таҙ кеше!

— Килеңдә нисә бөртөк тарың бар, ҡыҙ кеше?

— Атыңдың ялы менән ҡойроғонда нисә. бөртөк ҡылы булһа, минең килелә шунса бөртөк тары бар, таҙ кеше, — тип яуап ҡайтарҙы, ти, ҡыҙ.

Кесе Таҙ ҙа ҡайтып китте, ти. Ошо урында әкиәт тә тамам.

## КЕҪӘЛ

Бер ҡарт үҙенең танышына ҡунаҡҡа барған. Хужа уны кеҫәл менән һыйлаған. Ҡунаҡҡа был оҡшаған. Бындай нәмәне ғүмерендә тәү башлап ҡына күргәнлектән, уның нисек бешерелеүен дә, исемен дә белмәй икән. Һорашырға ҡыймаған. Шулай ҙа был тәмле аштың исемен булһа ла белеп ки-тергә булған.

— Был нәмәкәйҙең исеме нисек һуң? — тип һораған.

— Уны кеҫәл тиҙәр, — тигән хужа. Нисек бешерелеүен дә һөйләп биргән.

Ҡунаҡ хәтеренә алып ултырған. Ҡайтҡас ҡатынымдан бе-шертермен, тип уйлаған. Үҙе, исемен онотоп ҡуймайым тип, сәй эскәндә лә, йоҡларға ятҡас та:

— Кеҫәл, кеҫәл, — тип һөйләнә икән. Кейенгәндә лә:

— Кеҫәл, кеҫәл, — тип кейенгән. Атын да: '

— Кеҫәл, кеҫәл, — тип эйәрләгән.

Китер алдынан хужа менән хушлашҡанда ла, «иҫән бул!» тип әйтәһе урынға, үҙе лә һиҙмәҫтән:

— Кеҫәл бул! — тигән.

Ҡарт, кеҫәлдең исемен онотмаҫ борон ҡайтып ҡалайым, тип атын йән-фарман саптырған. Үҙе һаман ат һикерткән ың-ғайға:

— Кеҫәл, кеҫәл, кеҫәл, кеҫәл, — тип бара икән, ти.

Шулай һәйбәт кенә ҡайтып килгәндә, уйламаған ерҙә аты һөрөнөп киткән дә, ҡарт, хәтере бүленеп, «кеҫәл» һүҙен онотҡан. Шунан һуң, күпме генә баш ватһа ла, уны иҫенә төшөрә алмаған.

Ҡарт ҡайтып еткән. Ҡатыны ҡапҡа асып ҡаршы алған.Ҡарт кәйефһеҙләнеп кенә эйәренән төшкән дә ботон һуғып, күҙен йомоп уйлап ҡараған. Ҡатыны:

**-93-**

— Ни булды, ҡартым? Ниндәй ҡайғы төштө? — тип һораған. Ҡарт:

— Тел осонда ғына тора, үҙен әйтә алмайым, — тигән.

— Нимә һуң ул?

—Нимә икәнен белһәм, былай аҙапланмаған да булыр инем...

Шулай тигән дә ҡарт, атына менеп, ҡайтҡан юлы менән кире сапҡан. Аты һөрөнгән ергә барып уйлаһа, иҫенә төшә була, йәнәһе!

Ҡарт, аты һөрөнгән ергә барып, эйәренән төшкән дә:

— Бына ошонда ғына хәтеремдән сыҡты, бына ошонда ғына! — тип үҙ алдына үҙе һөйләнеп йөрөй башлаған. Уҙып барыусы бер юлсы был хәлде күреп:

— Нимә юғалттың, бабай? — тип һораған.

Ҡарт эштең дөрөҫөн әйтергә оялған.

— Улай ҙур нәмә түгел ине лә, бына ошонда ғына төшөп юғалды, — тигән булған.

— Хаталанмайһыңмы бабай, эҙләгән нәмәң кеҫәңдә ятмаймы икән? — тип һораған юлсы. Ҡарттың йөҙө асылып киткән.

—Тас үҙе! Кеҫәл! Рәхмәт, улым, һиңә, иҫкә төшөргәнеңә. Ҡунаҡта ашаған «кеҫәл»де эҙләй инем! — тигән.

Юлсы бер нәмә лә аңламай ҡалған. Ҡарт атын етәкләгән дә:

— Кеҫәл, кеҫәл, кеҫәл, — тип ҡайтып киткән, ти.

## БАЙ МЕНӘН ҺАҢҒЫРАУ

Бер ваҡыт бер һаңғырау менән бер бай дуҫлашҡан, ти. Улар шул тиклем ныҡ дуҫлашҡан, хатта бөтә тирә-яҡ халҡы хайран ҡалған, ти.

Берҙән-бер көндө бай ҡапыл ғына ауырып китә лә аяҡтан йығыла. Быны ишетеп, дуҫының хәлен белергә була, һаңғырау юлға сыға. Юлда килә ятҡанында, дуҫынан ниҙәр һорашыры, уның ни тип яуап бирере хаҡында уйланып бара икән. Ингәс тә хәлен һорашырмын инде. Ә бай ағам: «Хәлем арыу әле»,—тиер. Шунан нимә ашауын һорармын. Ул, моғайын: «Борсаҡ ашайым», — тиер, тип уйлай, ти һаңғырау. Ни әсән тигәндә, үҙе борсаҡ яратҡан, ти. Аҙаҡ кем дауалауын белешермен инде. Ә ағам: «Фәлән, фәлән табип», — тип әйтер.

**-94-**

Унығ дауаһы килешә торған. Мин уға: «Ярай, ярай, хоҙай унығ шифалы ҡулдарына ҡөҙрәт бирһен»,—тиермен.

Шулай уйланып бара торғас, бай йортона килеп тә еткән, ти.

Бына һаңғырау өйгә инә лә:

— Йә, бай ағай, хәлең нисек? —тип һорай. Бай:

— Хәлем бик насар әле, дуҫ — ти. һаңғырау, алдан уйлағанса:

— Ярай, бик һәйбәт булған, — ти. Бай ғәжәпләнә, тик өндәшмәй, һаңғырау:

— Нимә ашайһың һуң? — тип һораған бик хәстәрлекле тауыш менән.

— Саң ғына йотам.

— Ярай, ярай, бик һәйбәт, ашай бир, шифаһы тейер,— тип хуплаған һаңғырау. Байҙың быға асыуы килә. Аҙаҡ һаңғырау кем дауалауын һорай. Бай бар көсөнә:

— Ғазраил! — тип ҡысҡыра ла йән дә бирә. Ә һаңғырау:

— Ярай, ярай, хоҙай унығ шифалы ҡулдарына ҡөҙрәт бирһен, — ти. Шулай тимәй нимә тиһен, бер нәмә ишетмәгәс ни.

Шунан байҙың ауыҙы ҡыбырламаҫ булғас: «Бер ҙә үпкәләрлек һүҙ әйтмәгән һымаҡ инемсе. Аңламаҫһың был байҙар халҡын», — тип аптырап ҡарап торған-торған да боролоп сығып киткән, ти.

## ҠАБАЛАН КЕШЕ

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Бабай бик ҡыҙыу, өтөк кеше ине, ти. Бер көндө:

— Урманға барам да урманға барам, тиҙ ҙә тиҙ, — тип әбейен ашыҡтырып, теңкәһенә тейә, ти.

Әбейе яраштырған ашты ҡабалан-ҡарһалан һоғоноп, унан-бынан йыйынып, балта урынына сүместе билбауына ҡыҫтырған да был китеп тә барған. Әбей һыу һоҫайым тиһә, сүмесе юҡ.

— Аһа, бабай алғандыр,—тип йүгереп сыҡһа, бабайы байтаҡ ер китеп өлгөргән.

— Бабай, сүместе бир! — тип ҡысҡыра, ти, әбей.

Унаһы, сәй эс, тип әйтә икән, тип ишетеп:

**- 95 -**

—Эй, үҙең эс тә. Бисәләрҙең шул инде. Сәйҙән башҡа ни мә белә, — тип китә генә биргән.

Урманға барып, ағас төбөнә ултырып, тәмәке төрөп тарт-тсан да, балта алам тиһә, мә һиңә, сүмес, ти, билендә. Шунан ни эшләһен, кире ҡайтыуҙан башҡа сара ҡалмаған.

Һәр эштең үҙ мәйеле була. Ҡабалан эшләгән эштән рәт сыҡмай шул ул.

## БЕР ҠАРТТЫҢ ӨС УЛЫ

Борон бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ йәшәп ятҡан. Уларҙың өс улы булған. Бер саҡ ҡарт ауырып китә лә, күп тә үтмәй, үлеп ҡуя. Үлер алдынан түшәктә ятҡанда, ул үҙенең улдарын саҡырып ала ла, васыяттарын әйтеп, мираҫын бүлә.

— Бына һиңә, улым, шул, бына һиңә, улым, был, — тип; оло улына — бер ағас көрәк, уртансыһына — бесәй, өсөнсөһөнә һалабаш бирә.

Ҡартты күмәләр ҙә малайҙар инәләре менән йәшәй башлайҙар. Бер көн үҙ-ара һөйләшәләр. Олоһо әйтә:

— Атайым мираҫ бүлеп үлгәйне, бер ҙә файҙаһын күрмәй беҙ. Әйҙә, шуларҙы алып, донъя гиҙеп сығып китәбеҙ, — ти.

Ҡалған малайҙарға шул һүҙ етә ҡала:

— Әйҙәгеҙ.

— Әйҙәгеҙ, — тиешеп, уның менән килешәләр.

Икенсе көндө малайҙарҙың олоһо, көрәкте иңбашына һалып, сығып китә. Бара торғас, бер ҙур ғына ауылға барып етә. Элекке ваҡыт көлтәләрҙе түшәп һалып, сыбағаш менән туҡмап һуғыр булғандар бит инде. Оло малай урам буйлап китеп барғанда, шулай ашлыҡ һуғып, ашлыҡ таҙартып ятҡан кешеләр янына барып сыға. Төш ваҡыты еткән була. Ашлыҡ таҙартыусылар ашарға керергә булалар.

—Бик арығанбыҙ,сәй эсеп алабыҙ. Беҙ ашап сыҡҡансы, беҙҙең ашлыҡты ҡарап тор әле, — тиҙәр малайға. Оло малай риза булып тороп ҡала. Өйөлөп ятҡан бойҙайға ҡарап тора-тора ла, иңбашынан ағас көрәген алып, елгәрә башлай. Сүп тәре елгә оса, таҙа бойҙай ҡып-ҡыҙыл булып бер өйөмгә өйөлә бара. Бер аҙҙан ашлыҡты шулай елгәреп бөтә лә, көшөл ба шына менеп, көрәген ҡаҙап ҡуйып, үҙе ял итергә ултыра. Те ге кешеләр, ашап килһәләр, аптырап ҡалалар: сүпле ашлыҡ урынында ҡып-ҡыҙыл булып таҙа бойҙай өйөлөп ята. Тирә-

**-96-**

якка карайҙар, теге малайҙан башка бер зат юк. Көшөл башында ниндәйҙер ағас каҙалып тора.

— һин таҙарттыңмы? Нисек таҙарттың? — тип һорайҙар малайҙан.

—Мин таҙартманым. Быны минең коралым бар, шул таҙартты, — тип, көрәген күрһәтә малай.

— һатмайһыңмы?

Малай аҙырак инәлткән була. һатыулашып ала ла йөҙ тәңкәгә көрәген һатырға ризалаша. Теге кешеләр, шулай итеп, көрәкте һатып алалар. Йөҙ тәңкәне ала ла кинәнеп кайтып китә малай. Балам йүнсел, тип, инәһе лә шатлана. Ағас көрәк менән иген елгәреү һөнәре шунан калған, ти, ул.

Ағаһының йөҙ тәңкә акса алып кайткаһын күргәс, уртансыһы ла, китәм, ти башлай. Инәһе риза була. Малай бесәйен куйынына кыстыра ла сығып китә. Оҙак кына барғас, бер калаға етә. Бер өй янында күмәк халык йыйылған була.Ул шунда бара.

— Был хәтлем кеше ниңә йыйылып тора? — тип һорай.

— Бында сыскан тигән януарҙар йәшәй, уларға көн дә бер кешене ашарға бирәбеҙ, — тиҙәр быға.

Бөгөн сират бер байҙың яңғыҙ балаһына икән. Малай:

— Кана, үҙем калайым уның урынына, — тип һорай.

Кешеләр шатланып риза булып кайтып китәләр. Тышта бер кем дә калмай. Уртансы малай өйгә инеп китә. Ингәс, күп тә үтмәй, сыскандар килеп сыға. Малай куйынынан бесәйен сығара ла сыскандарға ебәрә. Бесәй тиҙ генә сыскандарҙы кыуып тотоп быуа башлай. Берәүҙе быуа, икәүҙе... Бына барыһын да быуып ташлап, өйөп куя.

Киска табан кешеләр киләләр. Малайҙы ашап бөтөргәндәрҙер инде тип, кайғырыша, ти, бөтәһе лә. Килһәләр — малай ишек алдында көлөп карап ултыра. Үлгән сыскандар өйөмөн күреп, йәнә аптырай теге кешеләр.

— Кем үлтерҙе? — тип һорайҙар малайҙан.

— Минең арысланым бар. Шул үлтерҙе.

— һат беҙгә.

— һатырғамы, юкмы? — тип елкәһен тырнап, икеләнгән кеше була ла, аҙак риза булып, йөҙ тәңкәгә һата.Аксаны һалып алып, аяғы ергә лә теймәй кайтып китә. Аксаһын инә-

**-97-**

һенә бирә. Балам йүнсел, тип, инәһе бының да арҡаһынан ҡаҡты, ти. Йортта бесәй тотоу йолаһы шул саҡтан тороп ҡалды, ти.

һалабаш алған бәләкәй малай ағайҙарының байып ҡайтҡанын күреп, сәбәләнә башланы, ти. Шунан инәһенән рөхсәт һорай ҙа ул да сығып китә. Күп көндәр бара. Ҙур бер урманды үтә, тау артылып, туғайға төшә, бер күлгә барып етә. Күл ситендәге бер ағасҡа йүкәһенең осон бәйләй ҙә ишә башлай. Әҙерәк ваҡыт үткәс, һыуҙан күл эйәһенең балаһы килеп сыға.

— Нишләйһең?

— Бына еп ишәм дә күлде күккә аҫам.

Күл эйәһенең балаһы йүгереп күлгә төшөп китә. Атаһына бара ла:

— Унда берәү оҙон-оҙон еп ишә, күлде күккә аҫам, тип эйтә, — ти.

— Бар, һин уға йүгерешәйек, тип әйт. Әгәр мине уҙһаң, күлде аҫырһың, тип әйт, — ти балаһына күл эйәһе.

Күл эйәһенең балаһы өҫкә сыға ла малайға шул һүҙҙәрҙе әйтә. Малай тыңлап тора ла:

— Минең энем бар, шуны уҙһаң, беҙ икәү йүгерешәбеҙ, — ти. — һин ана теге ҡыуаҡлыҡҡа бар. Мин сыбыртҡы шарт латһам, ул сығыр, — ти.

Күл эйәһенең балаһы малай күрһәткән ергә бара. Сыбыртҡы шартлаған тауышҡа ағас араһынан ҡуян сығып йүгерә. Күл эйәһенең балаһы уны ҡыуып ҡарай, ләкин уҙыу түгел, ҡыуып та етә алмай, хәле бөтөп, күл аҫтына төшә лә атаһына иҫе китеп һөйләй.

Атаһы уға:

— һин, әйҙә, көрәшәйек, тип әйт, — ти. Күл эйәһенең балаһы өҫкә сыға ла:

— Ағай, әйҙә көрәшәйек, — ти.

— һи, минең менән көрәшмәк булаһыңмы?! Минең-бабайым бар, кәкрәйеп бөткән. Ана тегендә, ағаслыҡта ята. Шуны еңә алһаң, икәү көрәшербеҙ, — ти.

Күл эйәһенең балаһы ағаслыҡҡа бара. Унда айыу ятҡан була. Ул бара ла, йоҡлап ятҡан айыуға төртөп:

— Әйҙә, көрәшәйек! — ти.

Айыу һикереп торған да, ашайым һине, тип ажғырып ебәргән. Күл эйәһенең балаһы бик ныҡ ҡурҡҡан, көскә ҡасып ҡотолған. Атаһына барған да һөйләп биргән:

**-98-**

—Бер ҡарт бабаһы саҡ-саҡ ҡына ашаманы,—тигән.

Күл эйәһе бик аптыраған, ҙур ҡурҡыуға ҡалған. Аҙыраҡ уйлап ултырғас, балаһына әйткән:

— Аҡса, алтын бирәйек. Бар, балам, белеп кил әле, күпме һорай икән? — тигән.

Малай быны ишеткәс, башынан эшләпәһен сисеп күрһәткән:

— Бына ошо тулғансы, — тигән.

Күл эйәһенең балаһы шатланып алтын алырға төшөп кит-кән. Шул арала малай эшләпәһенең төбөн тишкән дә аҫтына ҙур бер тоҡ ҡуйған. Эй ташый, ти, — эшләпә бер ҙә тулмай, ти. Күл эйәһе лә, уның балаһы ла бик ҙур ҡурҡыуға төшкәндәр. Ныҡыша торғас, бер саҡ тоҡ лыҡа тулған. Егет ишкән ебе менән уның ауыҙын нығытып бәйләгән дә күл эйәһенең балаһына:

— Хәҙер бына ошоно минең өйгә алып бар, — тигән.

Теге, бер тоҡ алтынды йөкләп алып алдан китә, егет арттан ҡарап килә. Аҙыраҡ барғас, юлда бер ҙур тирмән ташы осрай. Күл эйәһенең балаһы егеттән һорай:

—Ағай, был нимәкәй?

— Инәйемдең орсоҡ башы, — ти егет. Тағы бара биргәс, бер йыуан бүрәнә осрай.

— Ағай, быныһы нимәкәй?

— Инәйемдең орсоғо, — тип яуап бирә егет. Шунан бара биргәс, бер арҡан ята, ти.

— Ағай, быныһы нимәкәй тағы?

— һе, һыу мейе, шуны ла белмәй. Инәйемдең иләгән ебеГ Күл эйәһенең балаһы бик ныҡ ҡурҡыуға төшә. «Инәһенең орсоғо, орсоғоноң башы, иләгән ебе шулай булғас, үҙе ҡалай икән?» — тип уйлай.Тағы ла аҙыраҡ барғас, алыҫта ялтырап ут күренә: егеттең өйөнә етеп киләләр. Күл эйәһенең балаһы тағы ла һорай:

— Ағай, был нимәкәй?

— Инәйемдең күҙе, — тип яуап бирә егет.

Өйгә етер саҡта, ят нәмәне күреп, эттәр абалап сыға. Күл эйәһенең улы ҡурҡып ҡала.

— Ҡурҡма-ҡурҡма, былар инәйемдең бете, — ти егет.

Күл эйәһенең балаһы бөтөнләй аптырап ҡала.

Бына улар икәүләшеп өйгә барып инәләр. Егет инәһенә әйтә:

**-99-**

— Инәй, аш һал!

— Ит юҡ бит, улым.

— Нишләп? Кисә килтерҙем бер бәрей, бөгөн бер бәрей...

Быны ишеткән күл эйәһенең балаһы бер тоҡ алтынды быраҡтыр ҙа өйҙән йүгереп сығып кит! Артына ҡарай-ҡарай йүгерә. Көскә ҡайтып йығыла.

Әбей менән уландары бик байығып йәшәп китәләр.

## ӘТӘС ҺӘМ ТӨРӨК СОЛТАНЫ

*(Мадъяр халыҡ әкиәте)*

Донъяла бер ярлы ҡатын йәшәгән, ти. Уның берҙән-бер байлығы — әтәсе булған. Бер ваҡыт ул, сүп-сар араһында тибенеп йөрөгәндә, ярты алмас крейцер ' табып алған, ти.

Тап ошо мәл яҡында ғына төрөк солтаны үтеп барған булған. Ул әтәстең ярты алмас крейцерын күреп ҡалған да:

—Ярты алмас крейцерыңды миңә бир, — тигән.

Әтәс ҡабарынған, ҡағынған да:

— Юҡ, бирмәйем! Ул минең хужама ла ярап ҡалыр, — тип яуап биргән.

Ләкин төрөк солтаны әтәстән ярты крейцерҙы тартып ала ла, уны өйөнә алып ҡайтып, хазиналары һаҡланған ергә йәшереп ҡуя.

Әтәс, асыуланып, ситәнгә осоп менгән дә:

— Кик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейцерымды кире бир! —тип һөрән һалған.

Әтәстең тауышын ишетмәҫ әсән, солтан үҙенең һарайына инеп бикләнгән дә хеҙмәтселәренә бөтә ишектәрҙе лә, тәҙрәләрҙе лә яҡшылап ябып ҡуйырға ҡушҡан.

Бынан һуң әтәс тәҙрәгә осоп менгән, суҡышы менән быяланы шаҡылдата, ҡанаттарын ҡаға һәм ҡысҡыра башлаған:

—Кик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейцерымды кире бир!

Төрөк солтаны асыуланған һәм хеҙмәтсеһенә:

— Әтәсте тотоп ҡойоға ташла! —тип бойорған.

Хеҙмәтсе әтәсте ҡоҙоҡҡа ташлаған. Ләкин әтәс унда ла тыныс ҡалмаған:

---

К р е й ц е р — Австро-Венгрияла боронғо ваҡ аҡса.

**-100-**



— Һыу, һыу, минең эсемә тул, — тигән. Ҡоҙоҡтоң һыуы әтәстең эсенә инеп бөткән.

Шунан әтәс яңынан төрөк солтанының тәҙрәһенә осоп менгән дә:

— Ҡик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейцерымды кире бир! — тип ҡолаҡ ярырлыҡ итеп ҡысҡырған.

Солтан, элеккенән дә яман асыуланып, хеҙмәтсеһенә:

— Бар, әтәсте тотоп, янып торған мейескә ырғыт! — тигән.

Хеҙмәтсе әтәсте тотҡан да янып торған мейескә ырғытҡан.

-101-

Тик әтәс үҙ һүҙен иткән:

— һыу, һыу! Минән ҡойол, утҡа түгел, уны һүндер.

Күҙ асып йомғансы, һыу мейестәге утты һүндергән. Әтәс$_г$ бер ни булмағандай, тағы ла тәҙрәгә осоп ҡунған:

—Кик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейце-рымды кире бир!

Был юлы солтан тамам ярһыған:

— Хеҙмәтсе, бар, әтәсте тот та умарта эсенә ташла, балҡорттары кәрәген бирһендәр!

Хеҙмәтсе әтәсте тотҡан да бал ҡорттары янына ташлаған. Ә әтәс:

— Бал ҡорттары, бал ҡорттары! Минең ҡауырһындарым, ҡанаттарым аҫтына йәшеренегеҙ!

Бал ҡорттары әтәстең ҡауырһындары, ҡанаттары аҫтына инеп тулғандар.

Әтәс тағы ла төрөк солтанының тәҙрәһенә осоп менгән:

— Кик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейце-рымды кире бир!

Солтан артабан әтәсте ни эшләтергә лә белмәгән.

—Хеҙмәтсе! — тип аҡырған ул. — Бар, әтәсте бында килтер!..

Хеҙмәтсе, әтәсте тотоп, солтан эргәһенә алып килгән. Шул саҡ әтәс:

— Ҡауырһындар, ҡанатҡайҙар, бал ҡорттарын сығары-ғыҙ, улар төрөк солтанының кәрәген бирһендәр!

Бал ҡорттары йәшеренгән ерҙәренән осоп сыҡҡандар ҙа-солтанға ташланғандар. Солтан ултырған урынынан ырғып; торған, бейей һәм үрле-ҡырлы һикерә башлаған.

— Уй-уй, ҡәһәр һуҡҡыр әтәс! Уны хазиналарым янына;алып барығыҙ, шунан үҙенең ярты алмас крейцерын эҙләгеалһын!

Әтәсте хазиналар һаҡлана торған ергә алып барғандар. Унда ул үҙ йырын йырлаған:

— Ҡорһағым, ҡорһағым, солтандың кеше талап йыйғаю бөтә аҡсаларын үҙ эсеңә ал!

Әтәстең эсенә төрөк солтанының аҡсалар тултырған өс ялғашы инеп киткән, ти.

Әтәс уларҙы өйөнә алып ҡайтып хужаһына тапшырған. Теге ҡатын уларҙы бөтә ярлыларға таратып биргән, ти.

## (1) ӨС АЯҠЛЫ БЕСӘЙ

Бер ауылда өс сауҙагәр йәшәгән, ти. Уларҙың береһен Аҡһаҡал тип, икенсеһен Мыйыҡһыҙ, өсөнсөһөн Ялтырбаш тип йөрөткәндәр. Төрлө тауарҙарҙы — келәм, шәл, ебәк, кейем, һа-уыт-һаба һәм башҡаларҙы — был өс сауҙагәр бер келәттә һаҡлаған. Улар бурҙарҙан бик ҡурҡҡандар, ти. Шуға күрә лә байлыҡтарын һаҡларға Ани исемле бер ярлыны яллағандар.

Ләкин сауҙагәрҙәргә бөтөнләй көтмәгәндә ҡаза килгән: ҡеләткә сысҡандар эйәләшеп, тауарҙарҙы кимерә башлаған.

Был бәләнән ҡотолоу әсәң улар ҡарауылсыға берәй бесәй һатып алырға ҡушҡандар.

— Өйҙә минең үҙемдең бесәйем бар, — тигән Ани, — шуны һатып алығыҙ.

— Нихаҡ һорайһың бесәйеңә? — тигәндәр сауҙагәрҙәр Аниға.

—Күп түгел, һәр аяғы әсән берәр көмөш аҡса бирһәгеҙ, шул еткән.

Шул саҡ сауҙагәрҙәрҙең иң олоһо, иң ҡомһоҙо, иң хәйлә-ҡәре — Аҡһаҡал һүҙ башлаған.

— Әйт әле, Ани, бесәйеңдең аяғы дүртәүме?

— Дүртәү, — тип яуап биргән ҡарауылсы.

— Ә беҙгә өсәүһе лә еткән. Яҡшы бесәй өс аяҡлап та сыс-чкан тота ала. Мә, һиңә өс көмөш аҡса, бөгөн бесәйеңде алып кил, — тигән ул.

— Улайһа, бесәйҙең дүртенсе аяғы минеке була инде? — тип һораған Ани.

— Эйе, эйе, әйҙә, шулай булһын! — тигәндәр өс ҡомһоҙ сауҙагәр.

Ани бесәйен килтереп келәткә ебәргән.

Тәүге көндә үк бесәй бәхетһеҙлеккә осраған: сысҡан баҫ(1) тырып йөрөгәндә кәштәнән йығылып төшкән дә бер аяғын, һындырған.

Был хәлде ишеткәс, сауҙагәрҙәр:

— Тиҙерәк докторҙы килтер! — тип ҡысҡырғандар.

— Хәҙер барам, — тигән Ани. — Тик, хөрмәтле әфәнделәр, һеҙҙең ҡайһығыҙ докторға түләргә аҡса бирер икән?

— Мин бирмәйем,—тигән Аҡһаҡал. —Сөнки мин бесәй ҙең артҡы һул аяғын һатып алдым. Ә ул алғы уң аяғын һын дырған.



— Ә мин артҡы уң аяғы өсөн аҡса бирҙем, — тигән Мыйыҡһыҙ.

— Ә мин алғы һул аяғын һатып алдым, — тип һүҙгә ҡушылған Ялтырбай.

— Былай булғас, бесәйҙең һынған аяғы Аниҙыҡы булып

-104-

сыға, — тип һығымта яһаған Аҡһаҡал. — Докторға ул түләргә тейеш.

Ани бәхәсләшеп тормаған, бесәйен тоҡҡа һалған да ҡалаға киткән. Бында доктор бесәйҙе ҡараған, уның һынған аяғын ныҒытып бәйләгән дә:

— Бар ҡайт. Бер аҙнанан бесәйең дүрт аяғына ла баҫыр, — тип Аниҙы ҡайтарып ебәргән.

Ани бесәйҙең өс аяғын һатыуҙан килгән өс көмөш аҡсаһын докторға биргән дә ҡайтып киткән.

Ҡараңғы төшкәс, ҡарауылсы бесәйҙе йәнә келәткә япҡан. Был төндә сысҡандар бигерәк тә күп булған. Күрәһең улар бесәйҙең өс аяҡ менән ҡалғанын ишеткәндәр. Ә меҫкен бесәй, -өс аяҡлап булһа ла сысҡан артынан кәштәнән кәштәгә һикереп йөрөгәндә, янып ултырған май шәмде яңылыш ауҙарып ебәргән. Иҙәнгә төшкән шәмдән ут сығып, янғын башланған, һәм тиҙҙән келәттең дә, келәттәге тауарҙарҙың да көлө күккә осҡан.

Был хәлде ишеткәс, сауҙагәрҙәрҙең сәсе үрә торған. Улар бер тауыштан бесәйҙе ғәйепләгәндәр.

—Янғынды бесәй сығарҙы. Ләкин бесәйгә беҙ дүрт хужа. Шулай булғас Ани янған байлыҡтың дүрттән бер өлөшөн беҙгә түләргә тейеш, — тигәндәр.

— Минең ямаулы бишмәтемдән башҡа байлығым юҡ, — тигән Ани. — Хөрмәтле әфәнделәр, һеҙ минән бер ни ҙә ала алмайһығыҙ.

Сауҙагәрҙәр Аниҙы бесәйе.менән бергә судьяға алып барғандар.

Судья эргәһенә килгәс, Аҡһаҡал былай тигән:

— Судья әфәнде! һинең ғәҙеллегеңде бөтә донъя белә. Ошо бесәй сысҡан баҫтырып, шәмде ҡолатҡан һәм янғын сығып, беҙҙең бөтә тауар һәләк булды. Әйтсе, зинһар, зыян «әсән бесәйҙең хужалары бер тиң түләргә тейешме, түгелме?

— Тейеш, — тигән судья.

— Ишеттеңме, ахмаҡ, хөрмәтле судья нимә ти? — тип сауҙагәрҙәр Аниға ташланғандар. — Беҙгә аҡса түлә, юғиһә үҙеңде ҡол итеп алабыҙ.

Шул саҡ судья бесәйҙең һынған аяғын күреп ҡалған.

— Ә ни әсән уның бер аяғы бәйләнгән? Имгәндеме ни?

— Сысҡан баҫтырғанда кәштәнән ҡолап һындырғайны,—тигән Мыйыҡһыҙ. — Доктор уны дауаланы инде.

—Аҡһаҡал , әйтсе, — тип һораған яңынан судья, -г- докторға һин күпме түләнең?

— Әфәндем,бесәйҙең һынған аяғы минеке түгел, шулай булғас, мин түләмәнем.

— Ул саҡта Ялтырбаш түләгәндер?

— О, хаким әфәнде, мин бесәйҙең ул аяғын һатып алмағайным шул. Ниңә юҡҡа аҡса әрәм итергә?

— Ихтимал, докторға күпме аҡса биргәнен Мыйыҡһыҙ әйтер?

Ләкин уныһы ла баш тартҡан:

— Юҡ, юҡ, мин бушҡа аҡса сығарырға яратмайым. Бесәйҙең һынған аяғы Аниҙыҡы, докторға ул үҙе түләне.

— Аңлашылды, — тигән судья. — һынған аяҡҡа ҡарауылсы хужа була инде.

— Шулай, шулай,— тип ҡысҡырғандар сауҙагәрҙәр.

— Ҡалған өсөһө һеҙҙекеме?

— Беҙҙеке, беҙҙеке!

— Улайһа, бесәй шәмде ҡолатҡанда өс аяҡлап ҡына йөрөгән инде?

— Эйе, — тип ризалашҡандар сауҙагәрҙәр.

— Ани һеҙгә бер тин дә тейеш түгел, — тип хөкөм сығарған судья.— Бесәй сысҡанды өс аяҡлап баҫтырған. Ә уның дүртенсе аяғы, йәғни Ани хужа булғаны, һунарҙа ҡатнашмаған. Шулай булғас, сауҙагәр әфәнделәр, ҡазаны өҫөгөҙ бүлешәһегеҙ ҙә мине бүтән бимазалап йөрөмәгеҙ, — тип тегеләрҙе сығарып ебәргән.

Ани, был ғәҙел хөкөмгә шатланып, бесәйен күтәргән дә йырлай-йырлай өйөнә ҡайтып киткән.

## ЕТЕМ ТӨЛКӨ

Яҙ көндәренең береһендә айыу, бүре, эт һәм ҡуян осрашҡандар. Ҡыш көнө беҙ өшөнөк, аҙыҡ табыу ҙа ҡыйын булды, тип үҙҙәренең ауыр тормоштарынан зарланғандар.

— Әйҙә, бергәләп йәшәйек, шулай еңелерәк булыр, — тигән айыу.

Бөтәһе лә риза булғандар һәм урман уртаһында бер аҡланға бәләкәй генә өй ҡорғандар ҙа шунда тора башлағандар.

6 Заказ 433

(1)Бер ваҡыт айыу иптәштәренә:

— Дуҫҡайҙарым, ҡышҡа әҙерләнергә ваҡыт, — тигән. —Беҙгә һыйыр һатып алырға кәрәк. Эт уны көтөр, һөтөн һауып,ҡаймағын бешһәк, күр ҙә тор, ҡыш көнө ашарға беҙҙең бер(5)батман майыбыҙ булыр.

Иптәштәре айыуҙың был кәңәшен бик урынлы тапҡандар. Шул көндө үк баҙарға барып, үҙҙәре үлтергән йәнлектәрҙең тиреләрен һатҡандар ҙа шунан килгән аҡсаға бер һыйыр һатып алғандар.

(10)Эт көн һайын һыйырҙы аҡланға сығарып көтә, ә бүре кис менән һөтөн һауып ала торған булған. Ҡуян һыйырға ашатыр әсән үләндең иң яҡшыһын эҙләп таба, ә айыу бөтә хужалыҡ эштәрен башҡара икән.

Йәй үтеп, ҡара көҙ килгән. Дуҫтар ҡышҡа бер батман (15)һары май әҙерләгәндәр.

— Был майҙы сарҙаҡҡа, ҡыйыҡ аҫтына ҡуйырға кәрәк, —тигән айыу. — Хәҙергә майға берәү ҙә теймәһен. Ҡыш еткәс,аҙлап-аҙлап алырбыҙ ҙа картуф ҡурырбыҙ.

Бөтәһе лә, айыу менән килешеп, һары май тултырылған (20)батманды сарҙаҡҡа күтәргәндәр ҙә йәшереп ҡуйғандар.

Көндәрҙән бер көн, улар сәй эсеп ултырғанда, ҡапыл кемдер тәҙрә сирткән. Ҡуян ишек асҡан.

Ишек төбөндә төлкө торған: ул бер ҡулына ҡомған тотҡан, ти, ә үҙе бик йыуаш, баҫалҡы күренә икән. Төлкө башын тү-(25)бән эйеп:

— һаумыһығыҙ, ҡәҙерле дуҫҡайҙарым? Хәйерле кис, —тип һаулыҡ һорашҡан.

Хужалар уның менән иҫәнләшкәндәр ҙә сәй янына саҡырғандар.

(30)Төлкө, өҫтәл эргәһенә ултырғас, әҙәпле генә итеп һүҙ башлаған:

— Мин яҡты донъяла япа-яңғыҙ ҡалған бер үкһеҙ етем.Мине лә үҙегеҙҙең ғаиләгеҙгә алығыҙсы.

— Ярар, һине үҙебеҙҙең ғаиләбеҙгә алыу-алмау тураһын(35)да бөгөн һөйләшербеҙ, — тигән уға айыу. — Иртәгә яуабыналырға килерһең.

Төлкө сәй әсен хужаларға рәхмәт әйткән дә үҙ юлына киткән.

—Алырға кәрәк үҙен. Шундай әҙәпле, баҫалҡы ғына кү(40)ренә, — тип ҡарар иткәндәр хужалар.

**-107-**

(1)Икенсе көндө иртәнсәк төлкө тағы килгән. Тегеләр уны үҙҙәренең ғаиләһенә алырға риза булыуҙары тураһында' әйткәндәр, һәм шул көндән башлап төлкө улар менән бергә йә- шәй башлаған.

(5)Ул үҙен бик әҙәпле тотҠан, һәм, бөтәһенең дә һүҙен тыңлап, ни Ҡушһалар, шуны һүҙһеҙ үтәй биргән. Ул айыуға, бүрегә, эткә генә түгел, хатта Ҡуянға ла бөтә күңелдән ярарға тырышҠан.

Шулай баҫалҠы ғына йәшәгәндән һуң, төлкө ҠыйыҠ аҫ-(10)тында бер батман май йәшерелгәнен һиҙеп Ҡалған. Төлкө майҙы бик ярата бит инде. Ул, берәүгә лә һиҙҙермәйенсә, был майҙы бер үҙе ашағыһы килгән.

АҙаҠ килеп, ул хәйләһен тапҠан: шуның әсән дә хәйләкәр төлкө тиҙәр бит уны.

(15)Кистәрҙән бер кисте төлкө, һылтау итеп, ҠапҠа ныҠ бикләнгәнме икән, тип сығып Ҡарарға булған. Шул саҠ ул, урамға сығып, тәҙрә сирткән дә ят тауыш менән:

— Етем төлкө өйҙәме? — тип һораған.

— Әйҙә, өйҙә, хәҙер тыштан инер, — тип яуап Ҡайтарғандар уға.

— Ингәс тә, әйтегеҙ уға, хәҙер үк беҙгә бурһыҠ балаһына исем Ҡушырға барһын.

— Ярар, әйтербеҙ, — тип яуап Ҡайтарған-(20)дар өйҙән.

Төлкө, белмәмешкә һалышып, өйгә ингән.

(25)—Төлкөкәй, яңы ғына берәү килеп, һине бурһыҠ балаһына исем Ҡушырға саҠырҙы, — тигән айыу.

— Улай булғас, барырға кәрәк, — тигән төлкө.

Төлкө йәһәт кенә йыйынған да өйҙән сығып киткән. Өйҙө бер әйләнеп сыҠҠан да, һаҠлыҠ менән генә ҠыйыҠ аҫтына (30)һикереп менеп, батмандағы майҙы ашай ҙа башлаған. Туйғансы ашаған ул. Төлкө шунда ятып бер аҙ ял иткән дә өйгә ингән.

— Иә, ни менән һыйланылар үҙеңде? — тип һорағандар унан.

(35)Төлкө:

— Ҡурылған Ҡаҙ, бешерелгән тауыҠ ите, һары май менән,

— тип яуап биргән дә ирендәрен ялап Ҡуйған.

— Ниндәй исем Ҡуштың? — тип һораған эт.

(39) —Башбала, — тип яуап Ҡайтарған төлкө.

-108-

Икенсе көндө лә төлкө, миңә тағы ла исем ҡушырға барырға кәрәк, тип сығып киткән дә, сарҙаҡҡа менеп, майҙы батмандың яртыһына тиклем ашаған.

Ул ҡайтҡас, ҡуян унан:

— Яңы тыуған балаға ниндәй исем ҡуштың? — тип һораған.

— Уртансы, — тип яуап биргән төлкө.

Өсөнсө көндө тағы ла сарҙаҡҡа менгән һәм был юлы майҙы ашап бөтөргән. Ул батманды таҙартҡансы ялаған да өйгә ингән.

— Иә, ниндәй исем ҡуштың? — тип һораған унан айыу.

— Кинйә, — тип яуап биргән төлкө.

Ҡыш килеп еткән.

— Иә, дуҫҡайҙарым, бер аҙ май алып инеп, картуф ҡурырға кәрәк, — тигән айыу. Иптәштәре бик шатланып:

— Әйҙә, ҡурайыҡ! — тигәндәр.

— Бар, төлкө, һин бер аҙ май алып төш, — тигән айыу.

Бөтәһе лә соланға сыҡҡандар. Төлкө стена буйлап сарҙаҡҡа менеп ҡараған да ҡолап төшкән һәм, менә алмауына һылтау табырға тырышып:

— Бик бейек икән шул, мин унда менә алмайым, — тип зарланған.

Эт төлкөгә ярҙам итергә булған. Елкәһенә баҫтырған да сарҙаҡҡа мендергән. Шул саҡ түбәндә тороусылар төлкөнөң сыйылдап ҡысҡырғанын ишеткәндәр.

— Бында бер ниндәй май ҙа юҡ! Буш батман ғына тора!

Уға береһе лә ышанмаған. Шул саҡ төлкө буш батманды түбәнгә тәгәрәтеп төшөрөп ебәргән. Ҡараһалар, батман, ысынлап та, буш икән.

— Был майҙы ниндәй оятһыҙ ашаны икән? — тип үкергән айыу. — Хәҙер үк табырға кәрәк ул ҡараҡты!-

Ҡараҡты нисек табырға һуң, тип оҙаҡ баш ватҡандар улар. Аҙаҡ килеп, айыу:

—Әйҙә, ҡыҙыу итеп ут яғайыҡ та үҙебеҙ ут тирәләп ул-. тырайыҡ. Майҙы ашаусы булһа, ут ҡыҙыуынан уның эсендәге майы иреп тышҡа сығыр.

Ут яғып ебәргәндәр.

Ут янында ултыра торғас, улар, йылыға ойоп, йоҡлап кит-

-109-

(1)кәндәр. Ҡыштың тәүге һалҡын көндәре булғанлыҡтан, айыу бөтәһенән да ҡатыраҡ йоҡлаған.

Тик төлкө генә керпек тә ҡаҡмаған. Ул үҙенең бөтә тәне буйлап май аҡҡанын күргән. Оҙаҡ уйлап тормайынса, үҙенең (5)ғәйебен айыуға ауҙарырға булған: бөтә майҙы өҫтөнән һыпырып алған да айыуға һылаған.

Йоҡоларынан уянғас, шуны күрәләр: бөтәһе лә ҡоп-ҡоро, ә айыуҙың бөтә йөнө майлы, ти.

— Майҙы бына кем ашаған икән! — тип ҡысҡырғандар (10)йәнлектәр һәм айыуҙы язаларға уйлағандар.

— Ашыҡмағыҙ! Бында ниндәй ҙә булһа бер хәйлә бар!— тип ҡысҡырған айыу. — Утты тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғырға ла яңынан һынап ҡарарға кәрәк.

Бөтәһе лә риза булған, тик төлкө генә, кәрәкмәй, бик эҫе, (15)тип ҡаршы төшкән.

Төлкөнөң һүҙенә ҡарамайынса, тағы ҡыҙыу ут яҡҡандар ҙа ут тирәләй ултырғандар. Айыу тағы ла ғырылдап йоҡлап киткән. Ә бүре, эт һәм ҡуян юрамал йоҡлағанға һалышҡандар. Ә төлкөнән тағы ла май сыға башлаған.

(20)Төлкө, башҡа йәнлектәрҙең йоҡлағанын күргәс тә, тағы ла үҙенең өҫтөндәге майҙы һығып алып, айыуға һыларға тотонмаһынмы! Бүре, ҡуян һәм эт быны күреп ҡалғандар ҙа ҡысҡырып төлкө өҫтөнә ташланғандар:

— Бына ҡайҙа икән ул ысын ҡараҡ! Етмәһә, йыуаш ҡы (25)на етем булып ҡыланды!

Шау-шыуға айыу ҙа уянған. Уға бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп биргәндәр.

— Мин майҙы ашағаным юҡ! — тип аҡланырға тырыш ҡан төлкө.

(30)Шул саҡ улар төлкөнө тотоп бәйләгәндәр ҙә, утты тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғып, уны ут өҫтөндә тотҡандар. Май ут өҫтөнә тама башлаған.

Шунан һуң улар төлкөнө бик ныҡ туҡмағандар ҙа:

— Хәҙер үк үксәңде күтәр! Әҙең дә булмаһын! Беҙҙең та (35)тыу ғаиләлә һиңә урын юҡ! — тип ҡыуып ебәргәндәр.

Төлкө ҡомғанын алған да башы һуҡҡан яҡҡа китеп бар- (37)ған.

-110-

## ШАЯН БЕСӘЙ

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың шаян ҡара бесәйе булған, ти. Әбей бесәйҙе бик яратҡан. Ләкин әбей ҡартайып үлеп киткән.

Әбей үлгәс, бесәйҙе ашатыр-эсерер кеше булмаған. Бабай уны яратмаған. Бесәйҙең үҙенә аҙыҡ табырға тура килгән. Бесәй, күршеләрҙең мөгәрәптәренә, келәттәренә төшөп, уларҙың май, ҡаймаҡтарын ашай һәм һөттәрен урлап эсә башлаған.

Берҙән-бер ваҡыт күрше ҡатыны үҙенең һөтөн эсеп торған бесәйҙе тотоп алған да бабайға алып барған, ти.

— Бына, бабай, бесәйең! — тигән ул. — Теләһәң генә ни эшләт, тик ул ҡабат минең күҙемә күренмәһен.

Күрше ҡатындың был һүҙҙәрен ишеткәс, ҡарт ни эшләргә лә белмәгән. Бесәйҙең бурлығы тураһында һөйләп тә тораһы юҡ, тик ҡарт уны үлтерергә ҡыҙғанған. Шунан ул бесәйҙе тоҡҡа һалып алған да урманға алып киткән.

Бер-ике көн үткәндән һуң бер урман янындағы тауҙа бесәйҙе тоғонан сығарған.

— Күршеләргә күп кенә бәлә-ҡаза килтерҙең, минең йөҙөмдө ҡыҙарттың, оятһыҙ! Бына хәҙер, ошонда ҡалып, үҙ көнөңдө үҙең күр, — тигән дә ҡарт ҡайтып киткән.

Меҫкен бесәй урманда ҡалған. Көндөҙ бесәйгә бик күңелһеҙ булған, ә төн еткәс, ул бөтөнләй ҡурҡҡан. Хатта һыртындағы йөндәре тырпайып киткән. Ҡот осҡос тауыш менән мы яулап ебәргән ул. Тирә-яғына ҡарай ҙа мыяулай, ә үҙенең күҙҙәрендә йәшел уттар яна, ти. Шулай итеп йөрөй торғас, уға бер ҡуян осраған.

— Бесәй, ҡайҙа бараһың? — тип һораған унан ҡуян.

— М-мяуу, ммяу-у! Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе ашарға барам, — тип яуап биргән бесәй.

Ҡуян, ҡото осоп, мине лә ашап ҡуймаһын тип, йән-фарман сабып киткән.

Шулай ҡасып барғанда, ҡуян төлкөгә тап булған.

— Һиңә ни булды, дуҫҡайым? Ниҙән өрктөң? — тип һораған төлкө. — Былай алабарманланып ҡайҙа сабаһың, ҡупшы ҡуян?

— Ана теге тауҙа бер бесәй йөрөй. Ул: «Урмандағы бөтә

-111-

йәнлектәрҙе тотоп ашайым», — ти. Мин шунан ҡасып китеп барам...

— типяуапҡайтарған ҡуян.

Бындай ҡурҡыныс хәбәрҙе ишеткәс, төлкө лә шөрләй төшкән.

—Әйҙә бергә киттек! — тигән ул, һәм ҡуян менән икәүләпары сапҡандар.

Оҙаҡ ҡына барғас, уларға бүре осраған.

— Ҡайҙа бараһығыҙ, дуҫҡайҙар?—тип һораған бүреуларҙан.

Ҡуян менән төлкө:

— Ана тегендә бер ҡурҡыныс бесәй йөрөй, ул урмандағыбөтә йәнлектәрҙе ашап бөтөрөргә теләй, — тип яуап биргәндәр.

Бүре лә бик ныҡ ҡурҡҡан, һәм улар артабан бергәләп киткәндәр. Аҙаҡ килеп, уларҙың ҡаршыһына айыу килеп сыҡҡан.

— Былай, аҡ-ҡараны күрмәй, ҡайҙа ҡабаланып бараһығыҙ, дуҫҡайҙарым? Ни булды һеҙгә? Артығыҙҙан һунарсыҡыуып киләме әллә?

Ҡуян, төлкө һәм бүре бер тауыштан:

— Беҙгә бик уҫал бесәйҙән генә ҡасып ҡотолорға кәрәк,—тип яуап ҡайтарғандар.

— Ә ҡайҙа ҡасҡаныбыҙҙы үҙебеҙ ҙәбелмәйбеҙ.

— Ул ваҡытта мин дә һеҙҙең менән барам, — тигән айыу.

Улар дүртәүләп бик оҙаҡ сапҡандар. Шулай, ҡасып бара торғас, арып, хәлдән тайып, ағас күләгәһенә ял итергә туҡтағандар.

— Ит бешереп, бесәйҙе ҡунаҡҡа саҡырһаҡ, яҡшы булмаҫмы икән, дуҫтар? — тигән айыу.

Быға бөтәһе лә риза булған. Айыу ит табып килтергән, бүре—һыуға, төлкө утынға киткән, ә ҡуян бесәйҙе саҡырып килергә булған.

Бер аҙ ваҡыт үтеүгә, айыу бер үгеҙҙе һөйрәп килтергән, бүре һыу алып килгән, төлкө утын ташыған һәм улар күмәк-ләп ит бешерергә тотонғандар. Ит күптән инде бешкән, ә ҡуян менән бесәй һаман юҡ та юҡ, ти.

Шул саҡ улар тағы ҡурҡыуға төшкәндәр:

— Бесәй ҡуянды ашағандыр ҙа, хәҙер беҙҙең башыбыҙғаетергә киләлер, — тип уйлап, һәр ҡайһыһы ҡайҙа етте шунда йәшенә башлаған.

-112-

Айыу бейек ағас башына менеп киткән, бүре, ҡыуаҡ төбөндә соҡор ҡаҙып, шунда төшкән дә өҫтөн ҡойолған япраҡтар менән ҡаплаған, ә төлкө сытыр өйөмө аҫтына йәшеренгән.

Ҡуян бесәйҙе үҙе тәү күргән урында тапҡан.

Ҡурҡыуынан ҡалтыранып, ҡуян бесәйгә яҡын бармаған, тик алыҫтан ғына ҡысҡырған:

— Эй! Батыр Мыраубай!..

Артыҡ шөрләгәнлектән ҡуян башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алмаған.

Бесәй, ҡуяндың тауышын ишеткәс, йәшел күҙҙәрен уға текләгән дә туп-тура ҡуянға табан йүгергән.

Ә ҡуян: «Ул мине ашарға киләлер!» — тип уйлап, ҡурҡып йығылған да үлгән.

Ә бесәй ары сабып киткән. Шулай саба торғас, ул, тәмле ит еҫен һиҙеп, әлеге айыу, бүре һәм төлкө ҡунаҡ көткән ергә барып сыҡҡан.

Бесәй бешкән ит янына йүгереп килгән дә ҡомһоҙланып ашарға тотонған. Ләкин айыу алып ҡайтҡан үгеҙ ҡарт булған, бешеп етмәгән ит бик ҡаты икән. Бесәй ҡаты итте асыуланып, мыраулай-мыраулай ашай икән.

Төлкө, бесәйҙән ҡурҡып, яҡшыраҡ йәшеренергә уйлап, борғолана торғас, сытырға ҡойроғон ҡыҫтырған.

Бесәй, шытырлауҙы ишетеп, сысҡандыр, тип уйлаған да шунда ташланған.

Ә төлкө, уҫал бесәй мине өҙгәләп ташларға килә, тип уйлап, еытыр өйөмө аҫтынан сығып ҡасҡан, хатта ҡыҫылған ҡойроғо өҙөлөп ҡалған.

Ә бесәй үҙе төлкөнән ҡурҡҡан: ҡыуаҡ төбөнә атылған һәм тырнағын шул ерҙә ятҡан бүренең башына батырған.

Бүре: «Ул мине ашарға теләй!» — тип уйлап, йәшеренгән урынынан сығып ҡасҡан.

Бесәй, бүренән ҡурҡып, теге айыу ултырған ағас башына үрмәләп менеп киткән.

Айыу, үрмәләп менеп килгән бесәйҙе күреп, ҡурҡыуынан гөрһөлдәп ергә ҡолап төшкән.

Ә был йәнлектәрҙең ҡотон алған бесәй, ағас башында ултырған килеш, үҙе саҡ тын ала икән.

Айыу, бүре һәм төлкө, аҡ-ҡараны күрмәй, төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасып киткәндәр.

## -113-

(1)Бер аҙ ваҠыт үткәс, улар осрашҠандар ҙа тәрән йырын төбөнә ял итергә ултырғандар. Айыу төлкө менән бүренән:

— Иә, һеҙ нисек тере Ҡалдығыҙ? — тип һорай, ти.

— Терелеген тере лә ул, тик Ҡойроғомдо ғына бесәй өҙөп (5)алып Ҡалды шул, — тип яуап Ҡайтарған төлкө.

— Мин имен-һау Ҡалдым, — тигән бүре, — тик бына бесәйҙең тырнағынан саҠ үлмәнем: ул маңлай тиремде бөтөнләй һыҙырып алды.

— Ә һинең хәлең нисек?

(10)—Ә мин тик бесәй ағастан ҠолатҠан саҠта Ҡабырғаларымды ғына һындырҙым, — тип яуап биргән айыу.

Улар шулай һөйләшкәндәр ҙә: «Ярай әле, беҙ нисек булһа **ла** тере ҠалдыҠ, ана, Ҡуян бөтөнләй кире Ҡайтманы», — тип уйлағандар.

(15)Ә бесәй үҙенең ҙур йәнлектәрҙе шул тиклем ҠурҠытҠаны әсен уларҙан ҠысҠырып көлөр ине лә, үҙе лә шөрләгәйне шул.

### ТАПҠЫР ҠЫҘ

### I

Ҡалаға биш саҠрым ерҙә, бер ауылда, йәшәгән, ти, бер (20)Ҡарт. Иген икмәгән, егә торған ике үгеҙе, ун биш йәштәрҙәге бер Ҡыҙы ғына булған бының. Бабай көн дә урмандан бер йөк Ҡоро утын алып Ҡайта икән дә баҙарға илтеп һата икән, шуның менән көн күреп тора икән.

Шулай көндәрҙән бер көндө бабай бер йөк утын тейәп Ҡа-(25)лаға бара. Утын баҙарына барып керһә, Ҡаршыһына бер бай килеп сыға бының.

— Бабай, утыныңды һатаһыңмы? — ти бай. Бабай әйтә:

— һатам, — ти.

(30)—Ни хаҠ?

— Биш тәңкә.

— Тулайым һатаһыңмы? Бабай әйтә:

— Тулайым, — ти.

(35)Бай: «Тулайым һатам», тип өс тапҠыр әйттерә лә;

(36)—Әйҙә, етәклә үгеҙеңде, аҠса өйҙә, — ти.



Ҡитәләр былар. Байҙың ишек алдына барып керәләр. Ишек алдына барып кергәс, хужа ҡапҡаны ябып ҡуя. Унан өйгә кереп биш һум аҡса алып сыға ла бабайға бирә.

— Бабай, эшең бөттө, әйҙә йүгер, — ти. Шулай тип бабайҙы бәләкәй ҡапҡанан етәкләп сығармаҡсы була.

Бабай:

— Утынды бушатайыҡ, үгеҙҙе алып китәм, — ти. Бай:

— Үгеҙ, арба һинеке түгел, мин тулайым алдым, — ти. Бабай:

— Мин риза түгел, әйҙә ҡазыйға [1], — ти. Китәләр былар ҡазыйға.

Барып кергәс, ҡазый:

— Ни йомош менән килдегеҙ? — ти. Бабай:

— Мин быға утын һаттым, үгеҙҙе, арбаны бирмәй, — ти. Ҡазый байға:

— Ниңә бирмәйһең? — ти. Бай:

—Тулайым алдым мин, — ти, — өс тапҡыр әйттерҙем мин унан, — ти.

Ҡазый бабайға:

— Тулайым һатам, тип өс мәртәбә әйттеңме? — ти.

— Әйттем шул, — ти бабай.

—Улай булғас, бабай, ғәйеп итмә, мин ғәҙел хөкөм итәм: утының, арбаң, үгеҙең — байҙыҡы була, — ти ҡазый.

Бабай, биш тәңкәһен тотоп, илай-илай ҡайтып китә. Атаһының илап ҡайтыуын ҡыҙ тәҙрәнән күреп ҡала ла:

— Атай, ни булды һиңә? — тип ҡаршы сыға. Өйгә инәләр былар. Ингәс, ҡыҙ хәлде һораша, ә бабай әйтә:

— Бер бай мине алданы, утыным, арбам, үгеҙем биш тәңкәгә китте, ҡазый ҙа уның һүҙен дөрөҫләне, — ти.

— Атай, ҡайғырма, — ти ҡыҙ, — беҙҙең тағы бер үгеҙ бар бит әле, — ти. — Бөгөн утын тейәп төш тә иртәгәһен мине алып барырһың, үҙем һатыулашырмын, һин ситтәрәк торорһоң, — ти.

II

Бабай, үгеҙҙе егеп, урманға барып, ҡоро утын тейәп ҡайта. Иртәгәһен, ҡыҙын ултыртып, баҙарға китә был. Утын баҙарына кергәс, бабай ситтәрәк йөрөй. Ҡыҙ янына теге бай килеп сыға.

---

[1] Ҡ а з ы й — хөкөм итеүсе, судья.

## -116-

— Ҡыҙым, утыныңды һатаһыңмы? — ти.

— һатам, хаҡы биш тәңкә, — ти ҡыҙ. Теге:

— Тулайым һатаһыңмы? — ти. Ҡыҙ:

— Тулайым, тулайым, — ти. Бай:

— Әйҙә өйгә, аҡсаны өйҙә бирермен, — ти.

Өйөнә китәләр. Ишек алдына кергәс, бай ҡапҡаны яба ла, өйгә инеп, биш һум аҡса алып сыға. Унан ҡыҙға:

— Мә! — тип ҡулын һуҙа.

Ҡыҙ, бының ҡулын нығытып тота ла:

— Был аҡсаны ҡулың менән бирҙеңме? — ти. Теге:

—Ҡулым менән, — ти.

— Ҡулың менәнме?

— Ҡулым менән.

Ҡыҙ өс мәртәбә шулай әйттерә. Шунан һуң бай ҡулын тартып алмаҡсы була, ҡыҙ ебәрмәй.

—Ҡулың минеке, риза булмаһаң, әйҙә ҡазыйға, — ти.

Ҡазыйға баралар былар етәкләшеп. Ҡазый былардан:

— Ни йомош менән килдегеҙ? — тип һорай.

Ҡыҙ:

— Утын һаттым быға тулайым, — ти. — Был аҡсаны ҡулың менән бирҙеңме, тип әйткәс, ҡулым менән бирҙем, тине.Өс мәртәбә әйттерҙем. Шулай булғас, ҡул минеке булырғатейешле, ҡазый әфәнде.

Ҡазый байға:

— Ҡулым менән бирҙем, тип өс мәртәбә әйттеңме? — ти.

—Әйттем, — ти бай.

— Улай булғас, ҡулың был ҡыҙҙыҡы, хәҙер төбөнән киҫәм дә алып бирәм. Ҡулыңды ҡыҙғанһаң, мең тәңкә аҡса сығарып һал, — ти ҡазый.

Бай мең тәңкә аҡсаны өҫтәлгә сығарып һала, ғәрип булып ҡалғыһы килмәй.

-117-

## БОРСАҠ ӨҪТӨНДӘГЕ ПРИНЦЕССА

*Г. Х. Андерсен*

йәшәгән, ти, бер принц. Уға әйләнергә ваҡыт еткән. Ул үҙенә кәләш итеп тик принцессаны, тик тегендәй-бындайҙы түгел, ә бына тигән ып-ысын принцессаны ғына алырға теләгән.

Ул бөтә ер йөҙөн әйләнеп сыҡҡан, шулай ҙа үҙенә кәләш таба алмаған. Принцессалар күп булған да ул, ләкин ҡайҙан беләһең, улар ып-ысын принцессалармы, әллә түгелме?

Шулай итеп, беҙҙең принц өйөнә буш ҡул менән ҡайтҡан да ҡайғыра башлаған: уның ып-ысын принцессаға өйләнгеһе килгән шул.

Бер заман, кис булғас, ҡаты дауыл күтәрелгән. Йәшен йәшнәгән, күк күкрәгән һәм күнәкләп ямғыр ҡоя башлаған.

Ҡапыл ғына кемдер ҡапҡа шаҡыған, ҡарт король асырға сыҡҡан.

Ҡапҡа алдында принцесса баҫып тора икән. Уның ҡиәфәтен генә күрһәгеҙ ине! Һыу уның сәстәренән күлдәгенә, күлдәгенән туфлиҙарына йылға булып аға, ти. Бисараҡай шул тиклем еүешләнгән була, әйтерһең, уны хәҙер генә йылғанан тартып сығарғандар.

Шулай ҙа ул үҙен, мин ып-ысын принцесса, тип ышандыра икән.

«Шулаймы, түгелме, беҙ уныһын күрербеҙ», тип уйлаған королева, ләкин бер кемгә бер һүҙ әйтмәгән. Ул йоҡо бүлмәһенә барып, карауаттан түшәктәрҙе һәм мендәрҙәрҙе бөтөнләй алып ташлаған да ҡоро таҡта өҫтөнә бер бөртөк борсаҡ һалған. Унан һуң борсаҡ бөртөгөн егерме түшәк һәм тағы гага тигән ҡоштоң мамығынан яһалған егерме юрған менән ҡаплаған.

Бына шул урынға принцессаны йоҡларға һалғандар.

Иртәнсәк унан: «Яҡшы йоҡланыңмы?» — тип һорағандар.

— Ах, бик насар! — тигән принцесса. — Мин төнө буйы күҙ ҙә йома алманым! Алла белһен, ниндәй урын булды был! Йомро таш өҫтөндә ятам төҫлө тойолдо миңә, ә хәҙер минең бөтә тәнем күгәргән. Ах, мин бик тә, бик тә насар йоҡланым!

Шунда уның ып-ысын принцесса икәнлегенә һәр кем ышанған.

Бит ул егерме түшәк һәм егерме мамыҠ юрған аша ла бәләкәс кенә борсаҠ бөртөгөн тойған! Тик ып-ысын принцессаның ғына шул тиклем наҘлы була алыуы мөмкин.

һәм принц уға өйләнгән.

Ә борсаҠ бөртөгөн һирәк осраусы әйберҘәр һаҠлана торған урынға илткәндәр. Берәй кеше алмаған булһа, ул һаман да шунда яталыр әле.

Эйе, бына ниндәй хәлдәр Ҙә була донъяла!

## ДЮЙМОВОЧКА

*Г. Х. Андерсен*

Йәшәгән, ти, бер Ҡатын, тик уның бер Ҙә балалары булмаған. Ә ул кескенә генә балаһы булыуын бик теләй икән. Бына ул сихырсы ҠарсыҠ янына барған да:

— Мин ҠыҘым булыуын бик теләр инем, — тигән. — һин әйтмәҪһеңме, ҠайҘан алырға икән миңә уны?

— Ниңә әйтмәҪкә? — тип яуап биргән сихырсы ҠарсыҠ. Бына һиңә бер бөртөк арпа. Был арпа баҪыуҘа үҪкән, тауыҠтарға ашата торған арпа һымаҠ ябай арпа түгел, һин уны гөл һауытына ултырт, һуңынан ни булғанын үҘең күрерһең.

—Рәхмәт һиңә! — тигән Ҡатын һәм сихырсы ҠарсыҠҠа яртышар тинлек ун ике аҠса биргән.

Шунан һуң ул өйөнә ҠайтҠан да арпаны гөл һауытына ултыртып Ҡуйған. Ул уны ултыртыуы булған, арпа шунда уҠ һабаҠ та ебәргән. Ә һабаҠтан тюльпан һымаҠ Ҙур матур сәскә үҪеп сыҠҠан. Әммә сәскәнең таждары, сәскә атмаған бөрө кеүек, бер-береһенә һылашып торалар икән.

— Ниндәй гүзәл сәскә! — тигән Ҡатын һәм матур сыбар таж япраҠтарын үбеп алған.

Ул сәскә таждарын үбеүе булған, бөрөлә нимәлер шарт-лаған да, сәскә асылып та киткән. Сәскәнең йәшел емешлеге өҪтөндә бер ҠыҘыҠай ултыра икән. Ул бик бәләкәй, бары тик бер дюйм [1] оҘонлоғонда ғына булған. Шулай итеп, уға Дюймовочка тип исем биргәндәр. Әстрхан сәтләүегенең Ҡабығы уға сәңгелдәк, зәңгәр миләүшәләр—түшәк, ә розаның таж япрағы юрған булған. Төндә ул ҠабыҠта йоҠлаған, ә көндөр өҪтәл өҪтөндә уйнаған. Ҡатын өҪтәлгә тәрилкә менән һыу

---

[1] Д ю нм — оҘонлоҠ үлсәү берәмеге — 25 миллиметр самаһы.



ҡуйған, ә тәрилкә ситенә сәскәләр һалған, сәскәләрҙең оҙон һабаҡтары һыуҙа ҡойонғандар. Ҡескенә Дюймовочка өсөн һыулы тәрилкә үҙе бер күл булған, һәм ул шул күл буйлап тюльпандың таж сәскәһе япрағында кәмәлә йөрөгән кеүек йөҙөп йөрөй икән. Ишкәктәр урынына уның ике ап-аҡ ат -

ҡылы булған. Дюймовочка үҙенең матур кәмәһендә көндәр буйы йөҙөп йөрөгән, тәрилкәнең бер ситенән икенсе ситенә йөҙөп сыҡҡан да йырҙар йырлаған. Уның тауышы кеүек нәфис тауышты бер ҡасан да, бер кемдең дә ишеткәне юҡ икән. Бер ваҡыт төндә, Дюймовочка үҙенең сәңгелдәгендә йоҡлап ятҡанда, асыҡ тәҙрәнән әйгә бик ҙур бер гөбөрлә баҡа килеп ингән, ул еүеш һәм бик әшәке булған. Туп-тура өҫтәлгә һикереп төшкән дә ҡабыҡ эсенә, розаның таж сәскәһе, япраҡтары аҫтында Дюймовочка йоҡлап ятҡан ергә ҡараған.

—Бына был минең улыҡайыма яҡшы кәләш булыр! — тигән гөбөрлә баҡа.

Ул ҡыҙ йоҡлаған сәтләүек ҡабығын эләктереп алған да тәҙрә аша баҡсаға һикереп төшкән.

Баҡса аша йылға аға икән, ә уның яр буйында һаҙлыҡ булған. Бына шунда, һаҙ күләгәһендә, ҡарт гөбөрлә баҡа үҙенең улы менән йәшәгән. Улы ла еүеш һәм бик әшәке — нәҡ үҙенең әсәһе, ҡарт гөбөрлә баҡа кеүек булған.

Сәтләүек эсендәге кескенә ҡыҙыҡайҙы күргәс:

— Баҡ, баҡ, баҡ, баҡ! — тип кенә әйтә алған ул.

—Тауышланма һин! Уятырһың да, унан ул беҙҙән ҡасып китер, — тигән ҡарт гөбөрлә баҡа. — Ул бит аҡҡош мамығынан да еңел. Йылғаның иң уртаһына, томбойоҡтоң киң япрағына ултыртайыҡ әле уны — быңдай бәләкәс әсән ул үҙе бер утрау. Унан инде ул бер нисек тә ҡаса алмаҫ. Ә мин шул ваҡыт эсендә һеҙҙең әсән күләгәлә йыйнаҡ ҡына оя яһармын.

йылғала томбойоҡтар бик күп үҫә икән; уларҙың киң йәшел япраҡтары һыуҙа йөҙөп йөрөйҙәр. Иң ҙур япраҡ ярҙан башҡаларға ҡарағанда алыҫтараҡ була. Гөбөрлә баҡа шул япраҡ янына йөҙөп килә лә ҡыҙ тыныс ҡына йоҡлап ятҡан сәтләүек ҡабығын шуның өҫтөнә ҡуя.

Иртә менән иртүк Дюймовочка уяна һәм ҡапыл ғына үҙенең томбойоҡ япрағы өҫтөндә икәнен күрә; ҡайҙа ғына ҡарамаһын, тирә-яҡ һыу, ә яр алыҫтан әҙ генә күренеп тора икән. Дюймовочка бик ҡурҡа һәм илап ебәрә.

Ә ҡарт гөбөрлә баҡа, күләгәлә ултырып, үҙ өйөн ҡамыш, һары томбойоҡтар менән биҙәй — уның йәш киленгә бик ярағыһы килә. Бөтәһе лә әҙер булғас, Дюймовочканың карауатын алып йоҡо бүлмәһенә ҡуйыу әсән, гөбөрлә баҡа үҙенең әшәке малайы менән Дюймовочка ултырған япраҡ эргәһенә

-121-

йөҙөп килә. Ҡарт гөбөрлө баҡа, һыуҙа ҡыҙ алдына эйелеп, былай, ти:

— Бына минең улым! Ул һинең кейәүең булыр, беҙҙә күләгәлә һеҙ уның менән бик яҡшы йәшәрһегеҙ.

—Баҡ, баҡ, баҡс-ба-баҡс, — тип кенә әйтә ала улы.

Гөбөрлө баҡалар ҡабыҡты алалар ҙа йөҙөп китәләр, ә Дюймовочка йәшел япраҡ өҫтөндә бер үҙе ҡала һәм әсенеп-әсенеп илай — уның әшәке гөбөрлө баҡа янында бер ҙә торғоһо һәм уның ерәнгес улына кейәүгә сыҡҡыһы килмәй.

һыу аҫтында йөҙөп йөрөгән бәләкәй генә балыҡтар улы менән гөбөрлө баҡаны күрәләр һәм уның Дюймовочка тураһында һөйләгәндәрен ишетәләр.

Улар кескәй киленде күреү әсән һыуҙан баштарын сығаралар. Балыҡтар, Дюймовочканы күреү менән, шундай сибәр ҡыҙға гөбөрлө баҡалар менән торорға тура килә инде, тип, уны бик ҡыҙғаналар. Быға юл ҡуйырға ярамай! Бөтә йылға балыҡтары Дюймовочка ултырған томбойоҡ япрағы янына йөҙөп киләләр ҙә япраҡтың һабағын сәйнәп өҙәләр.

Томбойоҡтоң япрағы ағым менән ағып китә. Ағым көслө була һәм ҡыҙ ултырған япраҡ бик шәп аға. Хәҙер гөбөрлә баҡа Дюймовочканы бер нисек тә ҡыуып етә алмаясаҡ.

Ә Дюймовочка һаман да алыҫҡараҡ аға, ҡыуаҡтарҙа ултырған кескенә генә ҡошсоҡтар уға ҡарап һайрайҙар:

— Ниндәй гүзәл остоҡ ҡына ҡыҙыҡай!

Матур аҡ күбәләк һәр ваҡыт Дюймовочка тирәһендә пырылдап осоп йөрөй һәм бына ул япраҡҡа осоп төшә — кескенә ҡыҙыҡай уға бик оҡшаған икән. Шунда Дюймовочка үҙенең билбауын сисеп, бер осон күбәләккә ташлай, ә икенсеһен үҙенең япрағына бәйләп ҡуя, япраҡ тағы ла шәберәк аға башлай.

Ҡапыл ғына май ҡуңыҙы осоп уҙа. Дюймовочканы күреп ҡала ла уны эләктереп тә ала һәм ағасҡа барып ҡуна. Ә йәшел томбойоҡ япрағы ары ағып китә, уның менән бергә күбәләк тә аға: ул бит бәйләнеп ҡуйылған була, шуға күрә ыс- ҡына алмай.

Ҡуңыҙ үҙен эләктереп, ағас башына осоп киткәс, меҫкен Дюймовочка бик ҡурҡа. Ләкин май ҡуңыҙының иҫе китмәй,, ул ағас башына, юғарыға менеп ултыра, Дюймовочканы тәмле сәскә һуты менән һыйлай ҙа уға: «һин май ҡуңыҙы кеүек үк булмаһаң да, миңә бик оҡшайһың», — ти.

-122-

Уларга шул ағаста йәшәүсе башҡа ҡуңыҙҙар ҡунаҡҡа киләләр. Улар Дюймовочканы башынан аяғына тиклем тикшереп ҡарайҙар, ә ҡуңыҙ ҡыҙҙары һәрмәгестәрен. һикертеп ҡуялар. — Уның аяғы икәү генә! — тиҙәр ҡайһы берәүҙәре.

—Уның һәрмәгестәре лә юҡ! — тиҙәр икенселәре.

— Ул ниндәй нәҙек! Ул бөтөнләй кеше түгел! — тиҙәр өсөнсөләре.

Ниһәйәт, бөтә ҡуңыҙҙар: «Ул бик йәмһеҙ!» — тигән фекер- гә киләләр.

Шунда Дюймовочканы алып килгән май ҡуңыҙына ла Дюймовочка бик йәмһеҙ булып күренә башлай, һәм ул уны үҙендә башҡа тотмаҫҡа була—теләгән еренә китһен әйҙә. Ҡуңыҙ Дюймовочка менән ергә осоп төшә лә уны аҡ сәскәгә ултыртып ҡуя.

Дюймовочка сәскәлә илап ултыра: үҙенең йәмһеҙ булыуына ул бик ғәрләнә. Хатта май ҡуңыҙҙары ла уны ҡыуып ебәрҙеләр бит.

Дюймовочка бөтә йәйҙе урманда бер яңғыҙы үткәрә. Ул үләндән үҙенә сәңгелдәк үрә лә шул сәңгелдәкте, ямғыр еүешләтмәһен әсән, ҙур бер тегәнәк япрағы аҫтына элеп ҡуя. Тәмле сәскә балы ашай һәм ысыҡ һыуы эсә, ысыҡ һыуын ул иртә менән япраҡтарҙан таба.

Шулай итеп, йәй үтә, көҙ ҙә уҙып китә. һалҡын оҙон ҡыш яҡынлаша. Бөтә ҡоштар ҙа китәләр, сәскәләр шиңә, ә аҫтында Дюймовочка йәшәгән ҙур тегәнәк һарғайып ҡорой һәм торба шикелле бөгәрләнә.

Дюймовочка һалҡындан ҡалтырана: уның күлдәге йыртылып, тетелеп бөтә, ул шундай кескенә генә, нәфис кенә бу-ла — нисек туңмаһын?! Ҡар яуа башлай, ә беҙҙең әсән бер көрәк ҡар нисек күп булһа, Дюймовочка әсән бер ҡар бөртөгө шул тиклем була. Беҙ бит ҙур, ә уның буйы ни бары бер дюйм ғына. Дюймовочка ҡороған япраҡҡа төрөнөп ҡарай, ләкин ул бөтөнләй йылытмай икән, һәм Дюймовочка үҙе лә көҙгө япраҡ кеүек дерелдәй.

Шунда инде Дюймовочка урмандан китеп, үҙенә ҡышлыҡ әсән урын эҙләп ҡарарға була.

Дюймовочка йәшәгән урман артында ҙур баҫыу йәйелеп ята. Баҫыуҙағы ашлыҡты күптән инде йыйып алғандар һәм

тик ҡороған ҡыҫҡа ҡамылдар ғына ерҙән тырпайып торалар икән.

Баҫыуҙа урманға ҡарағанда ла һыуығыраҡ була һәм меҫкенкәй бөтөнләй туңа. Бына Дюймовочка ҡыр сысҡаны өңө янына килә; өңгә инә торған юл ҡороған һабаҡтар менән ҡапланған. Ҡыр сысҡаны йылыла бай ғына йәшәй: уның келәте ашлыҡ менән шығырым тулған. Дюймовочка, хәйерсе ҡыҙ шикелле, ишек янында туҡтап ҡала һәм үҙенә арпа бөртөгө биреүҙәрен һорай — ике көн инде ул бер нәмә лә ашамаған була.

— Их, меҫкенкәйем! — ти ҡыр сысҡаны (ул бик яҡшыкүңелле ҡарсыҡ була). — Иә, кил яҡынығыраҡ, йылын да минең менән бергә аша!

Дюймовочка ояға төшә, йылына һәм тамағын туйҙыра. Ҡарсыҡҡа ҡыҙ бик оҡшай, һәм ул уға былай ти:

— Миндә ҡал ҡышҡа. Мин һине туйҙырырмын, ә һин минең өйөмдө яҡшылап йыйыштырырһың һәм миңә әкиәттәрһөйләрһең — мин әкиәттәрҙе бик яратам.

Бына Дюймовочка ҡарт сысҡан ҡушҡан бөтә эштәрҙе эшләй башлай. Сысҡандың йылы өңөндә ул бик яҡшы йәшәй.

— Оҙаҡламай беҙгә ҡунаҡтар киләсәк, — ти бер ваҡытҡыр сысҡаны. — Аҙнаға бер тапҡыр минең эргәмә күршемкилеп китә. Ул бик бай һәм миңә ҡарағанда күп тапҡыр яҡшы тора. Уның ер аҫтында ҙур өйө бар, һәм ул матур ҡарахәтфә тун кейеп йөрөй. Сыҡ һин уға кейәүгә, ҡыҙыҡай! Уныңменән инде һин хур булмаҫһың. Тик шуныһы насар, ул томаһуҡыр, һине күрә алмаҫ. Ярай, уның ҡарауы, һин уға үҙең белгән иң яҡшы әкиәттәреңде һөйләрһең.

Ләкин Дюймовочканың күршегә бер ҙә кейәүгә сыҡҡыһы килмәй — ул күрше бит һуҡыр сысҡан була.

Оҙаҡ та үтмәй, һуҡыр сысҡан, ысынлап та, ҡыр сысҡанына ҡунаҡҡа килә. Ул шундай ҙур, ғалим һәм бай; уның туны хәтфәнән һәм бик матур була.

Һуҡыр сысҡандың өйө ҡыр сысҡаныныҡына ҡарағанда егерме тапҡыр ҙур була. Унда бик күп ҙур бүлмәләр һәм оҙон-оҙон коридорҙар була. Ләкин ҡояш бер ваҡытта ла уға ҡарамай, һуҡыр сысҡан ҡояшты бер ҙә яратмай, ә сәскәләрҙе күрергә лә теләмәй — ул бит уларҙы бер ҡасан да күргәне булмаған.

Дюймовочканы был ҡунаҡ әсән йырлаталар, ул ике йыр

йырлай, һәм шул тиклем матур йырлай, һуҡыр сысҡан шунда уҡ уны ярата башлай. Ләкин бер һүҙ ҙә әйтмәй — шундай дәрәжәле һәм оло кеше була инде ул.

Шунан һуң һуҡыр сысҡан үҙ өйөнән алып ҡыр сысҡаның ояһына тиклем ер аҫтынан оҙон юл ҡаҙый һәм ҡыр сысҡаны менән Дюймовочканы ошо ер аҫты юлы буйлап йөрөргә саҡыра.

һуҡыр сысҡан ауыҙына сөрөк уты ала, ҡаранғыла сөрөк уты шәм кеүек яҡтырта һәм оҙон киң коридорҙы яҡтыртып алдан бара. Ярты юлда һуҡыр сысҡан туҡтай ҙа былай ти:

— Бында ниндәйҙер ҡош ята. Ләкин һеҙ унан ҡурҡмағыҙ, ул үлгән.

Шунда һуҡыр сысҡан үҙенең киң мороно менән түбәлә тишек тишә лә ер аҫты юлына көн яҡтыһы үтеп инә, һәм Дюймовочка үлгән ҡарлуғасты күрә. Был ҡанатлы, суҡышлы ысын ҡош була, ул күптән түгел, ҡыш башында ғына үлгән һәм һуҡыр сысҡан ояһына ҡолап төшкән булһа кәрәк.

Үлгән ҡошсоҡтоң ҡанаттары тәненә ныҡ йәбешкән, аяҡтары һәм башы мамыҡ эсенә йәшеренгән. Меҫкен ҡарлуғас һыуыҡтан үлгәндер инде. Дюймовочка уны бик ҡыҙғана, ул ҡоштарҙы бик ярата — ҡоштар бит уға йәй буйы үҙҙәренең йырҙарын йырланылар. Ләкин һуҡыр сысҡан ҡарлуғасҡа үҙенең ҡыҫҡа тәпәйҙәре менән төртә лә былай ти:

— Хәҙер инде бик сыр-сыу килә алмаҫһың! Эйе, бына ошондай ҡошсоҡ булып тыуырға яҙмаһын! Ул бары шул сы-рылдауын ғына белә, ә ҡыш етһә — нимә эшләй ала һуң ул? һалҡындан һәм аслыҡтан үлергә генә ҡала. Бына минең балаларыма ҡыштан ҡурҡырға тура килмәҫ.

— Эйе, эйе! — ти ҡыр сысҡаны.

—Ул сырылдауҙан ниндәй файҙа бар һуң? Иыр менән тамаҡ туйҙырып булмай, ҡыш көнө сырылдау менән йылына алмаҫһың.

Ә Дюймовочка өндәшмәй, ләкин һуҡыр сысҡан менән ҡыр -сысҡаны был ҡошҡа арҡалары менән әйләнгәс, Дюймовочка ҡарлуғас янына эйелә лә ҡауырһындарын һыпырып, уның йомоҡ күҙҙәренән үбә.

«Бәлки йәй көнө шундай матур итеп сырылдаған ҡарлуғас шул үҙелер,—тип уйлай ҡыҙ. — Ни тиклем шатлыҡ килтергең һин миңә, ағымлы ҡошсоҡ».

Унан һуң һуҡыр сысҡан түбәләге тишекте томалай ҙа ҡар-

-125-

сыҡ сысҡан менән Дюймовочканы өйҙәренә оҙатып ҡуя.'Төндә Дюймовочка йоҡлай алмай. Ул урынынан тора, ҡороған һабаҡтарҙан ҙур балаҫ үрә лә ер аҫты юлына барып, үлгән ҡошсоҡто балаҫ менән ябып ҡуя. Унан һуң Дюймовочка сысҡандың өңөнән күренеп торған йомшаҡ мүкте алып килә лә, үлгән ҡошсоҡҡа ятырға яйлыраҡ булһын әсән, шунан бәләкәй генә урын әҙерләй.

— Бәхил бул, һөйкөмлө ҡарлуғас! — ти Дюймовочка. — Бәхил бул! Йәй көнө, ағастар әле йәшел булғанда, ә ҡояш шундай яҡшы йылытҡанда, миңә шундай күңелле итеп сырылдауың әсән рәхмәт һиңә! — һәм ул башын ҡошсоҡтоң күкрәгенә ҡуя ла ҡапыл ҡурҡып китә: ул ҡарлуғастың күкрәгендә нимәнеңдер тибеүен һиҙә. Был — ҡошсоҡтоң йөрәге тибә башлай икән — ул бөтөнләй үлмәгән, ә тик һыуыҡтан ҡатып ҡына ҡалған була. Ә хәҙер йылынғас, ул терелә.

Дюймовочка ҡурҡыуынан ҡалтырай — шундай бәләкәс ҡыҙ менән сағыштырғанда ҡош бит ҡот осҡос ҙур нәмә була инде. Ләкин шулай ҙа Дюймовочка аңын йыя, ҡарлуғасты балаҫ менән ныҡыраҡ яба, ә унан һуң йүгереп ҡайта ла үҙе ябынып йоҡлай торған бөтнөк япрағы менән ҡарлуғастың башын ҡаплай.

Икенсе төндө Дюймовочка тағы әкрен генә ҡарлуғас янына килә. Ҡарлуғас инде бөтөнләй терелгән, ләкин әле бик хәлһеҙ була, ҡыҙға ҡарау әсән ул күҙҙәрен көс-хәл менән генә аса. Дюймовочка уның алдында сөрөк уты киҫәге тотоп тора— уның башҡа фонары булмай.

— Рәхмәт һиңә, һөйкөмлө кескенәкәй! — ти ауырыу ҡарлуғас. — Мин шундай яҡшы йылындым! Тиҙҙән мин бөтөнләй терелеп етермен һәм яңынан ҡояшҡа осоп сығырмын.

—Ах, — ти Дюймовочка, — хәҙер шундай һалҡын, ҡар яуа! Үҙеңдең йылы урыныңда ҡалһаң, яҡшыраҡ булыр, ә мин һине ҡарармын.

Дюймовочка, сәскәнең таж япраҡтарына һалып, ҡарлуғасҡа һыу һәм бер нисә арпа бөртөгө килтерә. Ҡарлуғас ашап-эсеп ала ла ҡыҙға үҙенең нисек итеп ҡара ҡыуаҡҡа һуғылып, ҡанатын имгәтеүен һәм башҡа ҡарлуғастар мбнән бергә йылы яҡтарға китә алмай ҡалыуын һөйләп бирә. Ҡыш була, бик һыуыта, һәм ул ергә йығылып төшә. Ҡарлуғас башҡа бер ни ҙә иҫләмәй һәм бында, ер аҫтына, нисек килеп эләгеүен дә белмәй.

-126-

(1)Ҡарлуғас бөтә ҡышты ер аҫтында үткәрә, ә Дюймовочка уны тәрбиәләй. Һуҡыр сысҡан да, ҡыр сысҡаны ла был турала бер нәмә лә һиҙмәйҙәр. Улар бит ҡоштарҙы бөтөнләй яратмайҙар.

(5)Яҙ етеп, ҡояш йылыта башлағас, ҡарлуғас осоп китә алһын әсән, Дюймовочка түбәләге һуҡыр сысҡан тишкән тишекте аса.

Ҡарлуғас ҡыҙҙан: «Минең менән бергә осоп китәһең килмәйме? — тип һорай. — Ултыр әйҙә минең арҡама, һәм беҙ (10)йәшел урманға осорбоҙ», — ти. Ләкин Дюймовочка ҡарт ҡыр сысҡанын ҡыҙғана — үҙенән башҡа ҡарсыҡҡа бик күңелһеҙ буласағын белә ул.

— Юҡ, мин һинең менән осоп китә алмайым, — ти ҡыҙ ҡарлуғасҡа.

(15)— һау бул, һау бул, һөйкөмлө ҡыҙыҡай! — тип сырылдай ҙа ҡарлуғас иркенлеккә осоп сыға.

Дюймовочка ҡошсоҡтоң киткән юлына ҡарай һәм уның күҙҙәренән йәш тәгәрәп төшә — бик ярата шул ул ҡошсоҡто.

— Сыр, сыр, сыр! —тип ҡысҡыра ла ҡарлуғас йәшел ур (20)манға китеп юғала.

Ә Дюймовочка сысҡан ояһында ҡала. Хәҙер ул бик насар йәшәй. Ҡояшҡа сығырға уға бөтөнләй рөхсәт итмәйҙәр, ә ҡыр сысҡанының ояһы тирәһендәге баҫыу бейек йыуан башаҡтар менән ҡаплана, һәм ул Дюймовочкаға ҡуйы урман (25)кеүек күренә.

Бына бер ваҡыт ҡарт һуҡыр сысҡан килә лә Дюймовочканы яусылай.

— Йә, хәҙер һиңә бирнә әҙерләргә кәрәк, — ти ҡарсыҡ-сысҡан, — һин оло әфәндегә кейәүгә сығаһың, һәм һинең бөтә (30)әйберең дә етерлек булырға тейеш.

һәм Дюймовочкаға көндәр буйы еп иләп ултырырға тура килә.

Ҡарт сысҡан дүрт үрмәксене яллай һәм улар көнө-төнө сысҡан ояһында төрлө-төрлө туҡымалар туҡып ултыралар.

(35)Ә йыуан һуҡыр сысҡан һәр кисте ҡунаҡҡа килә лә, тиҙҙән йәй үтер, ҡояш ерҙе ҡыҙҙырыуҙан туҡтар һәм ер яңынан йомшарып, көпшәкләнеп ҡалыр, тип һөйләнеп ултыра. Бына шунда инде улар туй үткәрерҙәр.Ләкин Дюймовочка һаман бойо-ға һәм илай: уның бер ҙә йыуан һуҡыр сысҡанға кейәүгә сы- (40)ғаһы килмәй.

**-127-**

Һәр иртә, ҡояш сыҡҡанда, һәм һәр кис, ҡояш байығанда, Дюймовочка сысҡан өңөнөң алдына сыға; ҡайһы саҡта ел башаҡтарҙың остарын бер яҡҡа этә, һәм уға зәңгәр күктең бер киҫәге генә күренеп ҡала.

«Ниндәй яҡты, ниндәй рәхәт бында, иркендә», — тип уйлай Дюймовочка һәм һәр ваҡыт ҡарлуғасты иҫенә төшөрә; уның ҡошсоҡто бик күрәһе килә, ләкин ҡарлуғас бер ерҙә лә күренмәй: ул алыҫта-алыҫта, йәшел урманда оса ине булһа кәрәк.

Бына көҙ етә. Дюймовочканың бирнәһе әҙер була.

— Дүрт аҙнанан һуң һинең туйың!—ти Дюймовочкаға ҡыр сысҡаны. Ләкин Дюймовочка илап ебәрә һәм эс бошорғос һуҡыр сысҡанға кейәүгә сығаһы килмәүен әйтә.

— Йүләрлек!—ти ҡарсыҡ-сысҡан.— Кирелэнмә, юғиһә мин һине үҙемдең осло тештәрем менән тешләп алырмын. Ни эшләгән һиңә һуҡыр сысҡан ир булмаҫҡа? Король ҡатынының да уныҡы шикелле ҡара хәтфә туны юҡ әле. Унан һуң, уның мөгәрәптәре лә буш түгел. Шундай кейәү әсән аллаға рәхмәт әйт!

Ниһәйәт, туй көнө килеп етә, һәм һуҡыр сысҡан үҙенең кәләшен алырға килә. Хәҙер инде Дюймовочкаға һуҡыр сысҡан ояһына күсергә, тәрән ер аҫтында йәшәргә тура килер, һәм бер ҡасан да инде ул ҡояшты күрмәҫ — һуҡыр сысҡан бер нисек тә уға оянан сығып йөрөргә юл ҡуймаясаҡ. Ә меҫкен Дюймовочкаға яҡты ҡояш менән мәңгегә һаубуллашыу шул тиклем ауыр була, һәм Дюймовочка һуңғы тапҡыр ҡояшҡа ҡарау әсән тышҡа сыға.

Игенде инде баҫыуҙан йыйып алған булалар, ерҙән элеккесә тик ҡороған, башаҡһыҙ һабаҡтар ғына сығып тора. Ҡыҙ сысҡан ояһынан ситкәрәк китә лә ҡояшҡа табан ҡулдарын һуҙа:

— Бәхил бул, ҡояш, бәхил бул!

Унан һуң ул кескенә генә ҡыҙыл сәскәне күрә, уны ҡосаҡлай ҙа былай ти:-

—Әгәр ҙә һөйкөмлө ҡарлуғасты күрһәң, минән сәләм тапшыр һин уға, сәскәкәй!

Ҡапыл ғына уның баш осонда «Сыр, сыр, сыр!» — тигән тауыш яңғырап китә.

Дюймовочка күтәрелеп ҡарай һәм осоп барыусы ҡарлуғасты күрә. Ҡарлуғас та ҡыҙҙы күреп ала һәм бик шатлана,

-128-

ә Дюймовочка илап ебәрә лә ҡарлуғасҡа үҙенең нисек йыуан һуҡыр сысҡанға кейәүгә сығаһы килмәүен һәм уның менән бер ҡасан да ҡояш төшмәй торған тәрән ер аҫтында йәшәргә теләмәүен һөйләп бирә.

—Хәҙер инде һалҡын ҡыш килә, — ти ҡарлуғас, — һәм мин йылы яҡтарға, алыҫ-алыҫҡа осам. Теләйһеңме минең менән осорға? Ултыр минең арҡама, ләкин үҙеңде билбау менән ныҡ итеп бәйлә һәм беҙ һинең менән мөхәббәтһеҙ һуҡыр сысҡан янынан алыҫҡа, зәңгәр диңгеҙ артына, ҡояш ҡыҙыуыраҡ урынға, гел йәй булып торған һәм гүзәл сәскәләр үҫкән ергә осоп китербеҙ. Осайыҡ минең менән, һөйкөмлө кескенәкәй! һин бит яғымлы кескенәкәй! Мин ҡараңғы, һалҡын соҡорҙа туңған саҡта һин бит минең ғүмеремде һаҡлап ҡалдың.

—Эйе, эйе, мин осам һинең менән! — ти Дюймовочка.

Ул ҡарлуғастың арҡаһына ултыра, аяҡтарын ҡоштоң ҡойроғона һуҙа ла үҙен иң ҙур ҡауырһынға билбау менән бәйләп ҡуя.

Ҡарлуғас күккә уҡ шикелле күтәрелә лә ҡараңғы урмандар, зәңгәр диңгеҙҙәр һәм ҡар менән ҡапланған бейек,тауҙар өҫтөнөн осоп китә. Бында бик һыуыҡ була, ә Дюймовочка ҡарлуғастың ҡара ҡауырһындары араһына инеп йәшеренә лә үҙҙәре осҡан матур урындар менән һоҡланып барыу әсән башын ғына сығара. Бына йылы яҡтарға ла килеп етәләр! Бында ҡояш күпкә яҡтыраҡ балҡый, һауа беҙҙәгегә ҡарағанда ике өлөш юғарыраҡ була, ә канауҙар һәм кәртәләр янында иҫ киткес гүзәл йәшел виноград үҫә. Урмандарҙа лимондар һәм әфлисундар бешә, мирта һәм хуш еҫле бөтнөк еҫтәре аңҡый, ә юлдарҙа шат шүңелле балалар йүгерешәләр һәм ҙур сыбар күбәләктәрҙе аулайҙар. Ләкин ҡарлуғас һаман алыҫ-ҡараҡ оса бирә.

Бик матур зәңгәр күл буйында, йәшел бөҙрә ағастар уртаһында, боронғо аҡ мәрмәр һарай тора. Уның бейек колонналарын виноград ҡыуаҡтары солғап алған, ә юғарыла, түбә аҫтында, ҡоштар оя ҡоралар. Бына шул ояларҙың береһендә йәшәй инде ҡарлуғас

— Бына минең өйөм!—ти ҡарлуғас. — Ә һин аҫта үҙеңә иң матур сәскәне һайлап ал, мин һине шунда ултыртырмын, һәм һин бик яҡшы йәшәрһең.

-129-

Дюймовочка бик шатлана, хатта сәпәкәй сабып ебәрә.

Аҫта аҡ мәрмәр киҫәктәре ята: бер колоннаның осо емерелеп төшкән дә өс киҫәккә бүленгән, мәрмәр киҫәктәре араһында эре, аҡ сәскәләр үҫеп сыҡҡан. Ҡарлуғас төшә лә ҡыҙ-ҙы киң таж япрағына ултырта. Ләкин, бына ғәжәп хәл! Сәскәнең уртаһында кескенә генә ап-аҡ, быяла кеүек үтә күренмәле бер кеше ултыра. Унның ҡулбаштарында еңел ҡанаттар һелкенеп тора, ә башында кескенә генә таж емелдәй. Буйға ул беҙҙең Дюймовочканан ҙур түгел. Ул эльфтар короле була.

Ҡарлуғас сәскә янына осоп килгәс, эльф бөтөнләй ҡурҡып ҡала, ул шундай кескенә генә, ә ҡарлуғас шундай ҙур! Ләкин Дюймовочканы күргәс, ул бик шатлана — былдай сибәр ҡыҙҙы әле уның бер ҡасан да күргәне булмай. Ул уға баш эйә лә исемен һорай.

— Дюймовочка, — тип яуап бирә ҡыҙ.

— Гүзәл Дюймовочка, — ти Эльф, — минең ҡатыным булырға теләмәйһеңме?

Дюймовочка шунда уҡ риза була.

Шунда сәскәләрҙән эльфтар осоп сығалар һәм Дюймовочкаға бүләктәр килтерәләр. Иң яҡшы бүләк сиңерткәнеке һымаҡ үтә күренмәле ҡанат була. Уларҙы Дюймовочканың арҡаһына бәйләп ҡуялар, һәм ул да хәҙер сәскәнән сәскәгә осоп йөрөй ала. Шатлыҡ һәм күңел асыуҙар иҫ киткес шәп була!

Ә ҡарлуғас юғарыла, үҙенең ояһында, ултыра һәм, сыр-сыр килеп, белгәненсә һайрарға тырыша.

Ҡарлуғас эльфтарға ҡыш буйы күңелле итеп сырылдай, ә һалҡын илдәргә яҙ килгәс, ул тыуған иленә әҙерләнә башлай.

— һау бул, һау бул! — тип сырылдай ҙа ҡарлуғас йылы яҡтарҙан яңынан Данияға оса.

Унда матур итеп әкиәттәр һөйләй белә торған кешенең тәҙрәһе өҫтөндә генә ҡарлуғастың кескенә генә ояһы була. Ҡарлуғас шул кешегә Дюймовочка тураһында һөйләй, ә унан был хәлде беҙ ҙә белдек.

**-130-**

# ӨС АЙЫУ

Л. Толстой

Берҙән-бер көндө бәләкәй генә бер ҡыҙыҡай урманға киткән, ти. Урманда йөрөй торғас, был ҡыҙыҡай аҙашҡан,ҡай- тырға юл ҙләй башлаған, ти. Шунан урмандағы яңғыҙ бер өйгә барып сыҡҡан, ти.

Өйҙөң ишеге шар асыҡ: ҡыҙыҡай ишектән ҡараһа, өй эсен дә бер кем дә юҡ, ти. Ҡыҙ өйгә ингән. Был өйҙә өс айыу йә шәй икән. Быларҙың береһе оло айыу, уның исеме Михайло Иваныч, ти. Ул ҙур, ялбыр айыу, ти. Икенсеһе инә айыу бул ған, уныһы — бәләкәйерәк, исеме Настасья Петровна, ти. Өсөнсөһө—уларҙың балаһы булған, уныһының исеме Мишутка икән. Айыуҙар береһе лә өйҙә юҡ, улар урманға кит кән, ти.

Өйҙөң ике бүлмәһе бар икән: береһе ашау бүлмәһе, икенсеһе йоҡо бүлмәһе, ти. Ҡыҙыҡай тәүҙә ашау бүлмәһенә инә һәм өҫтәлдә ес туҫтаҡ күрә. Туҫтаҡтарға аш ҡойолған була. Беренсеһе бик ҙур туҫтаҡ — уныһы Михайло Иванычтыҡы, икенсеһе бәләкәйерәк туҫтаҡ — уныһы Настасья Петровна--ныҡы; өсөнсөһө зәңгәр туҫтаҡ — уныһы Мишутканыҡы. һәр туҫтаҡ янында берәр ҡалаҡ ята: береһе ҙур, икенсеһе бәләкәйерәк, өсөнсөһө бәләкәй генә, ти.

Ҡыҙыҡай тәүҙә, иң ҙур ҡалаҡты алып, ҙур туҫтаҡтағы ашты тәмләп ҡарай. Унан һуң, бәләкәйерәк ҡалаҡты алып, бәлә- кәйерәк туҫтаҡтағы ашты ауыҙ итә. Аҙаҡтан ул кескәй ҡалаҡты алып, зәңгәр туҫтаҡтағы ашты ашап ҡараған. Мишутканың туҫтағындағы аш уға бик тәмле тойолған.

Ҡыҙыҡайҙың ултырғыһы килгән.Ҡараһа, өҫтәл янында өс ултырғыс тора. Береһе ҙур, уныһы — Михайло Иванычты-ҡы; икенсеһе бәләкәйерәк, уныһы — Настасья Петровнаны-ҡы; өсөнсөһө бик бәләкәй, уныһына зәңгәр мендәр һалынған, быныһы Мишутканың ултырғысы икән. Ҡыҙыҡай башта ҙур ултырғысҡа менеп ултырған, унан йығылып төшкән. Унан һуң бәләкәсерәк ултырғысҡа ултырып ҡараған, уныһы ла ултырыу әсән яйһыҙ булған. Ахыр сиктә ул иң бәләкәй ултырғысҡа менеп ултырған. Бында ултырыу бик йәпле тойолған. Ҡыҙыҡай шатланып, көләп ебәргән. Ул зәңгәр туҫтаҡты алып тубығына ҡуйған да ашарға тотонған. Ашты бөтөнләй ашап бөткәс, ултырғысҡа ултырған көйө бәүелә башлаған.

Ултырғыс ватылған, ә ҡыҙыҡай иҙәнгә шатыр-шотор йығылып төшкән.

Ул тороп ултырғысты күтәреп ултыртҡан да икенсе бүлмәгә ингән.

Унда өс карауат тора икән. Береһе ҙур, уныһы Михайло Иванычтыҡы. Икенсеһе бәләкәйерәк карауат, уныһы Нас-тасья Петровнаныҡы. Өсөнсөһө, иң бәләкәй карауат, Мишут-каныҡы булған. Ҡыҙыҡай башта ҙур карауатҡа ятып ҡарай. Ул бик киң була, уныһын оҡшатмай. Унан бәләкәсерәгенә ятып ҡарай, уныһы бик бейек була. Шунан ул кескәй карауатҡа ятып ҡарай, быныһы унын буйына таман ғына була. Ҡыҙыҡай шунда уҡ йоҡлап та китә.

Айыуҙар асығып ҡайтып инәләр ҙә ашарға ултыралар.

Ҙур айыу үҙенең туҫтағын алып ҡарағас, яман тауыш ме-нән үкереп ебәргән:

— Минең туҫтаҡтағы ашты кем ашап ҡараған?!

Настасья Петровна ла үҙенең туҫтағын ҡарай ҙа нәҙеге-рәк тауыш менән:

— Минең туҫтаҡтағы ашты кем ашап ҡараған?!—тип мыжыған.

Ә Мишутка үҙенең буш туҫтағын күргән дә нәҙек кенә. тауыш менән:

— Минең туҫтаҡтағы ашты кем ашап бөткән? — тип сы йылдаған.

Михайло Иваныч үҙенең ултырғысын күреп, тағы яман тауыш менән үкереп ебәргән:

— Минең ултырғысҡа кем ултырған, уны урынынан кем ҡуҙғатҡан?!

Настасья Петровна үҙенең ултырғысына күҙ төшөргәс, нәҙегерәк тауыш менән:

— Минең ултырғыста кем ултырған, уны урынынан кем ҡуҙғатҡан? — тип ҡабатлаған.

Мишутка үҙенең ватыҡ ултырғысын күреп:

—Минең ултырғысыма кем ултырған, уны кем емергән?— тип сыйылдап ҡысҡырған була икән.

Айыуҙар өсөһө лә йоҡо бүлмәһенә ингәндәр. Михайло Иваныч уҫал итеп үкереп ебәргән:

— Минең урынға кем ятҡан, уны кем болартҡан?!

Настасья Петровна нәҙегерәк тауыш менән:

-132-



— Минең урынға кем ятҡан, уны кем боларҡан?! — тип ҡысҡыра икән.

Ә Мишутка, бәләкәс кенә ширлеккә баҫып, карауатына менгән дә нәҙек кенә тауышы менән ҡапыл әсе итеп ҡысҡырып ебәргән:

— Минең урыныма кем ятҡан?!

Шул арала айыу балаһы карауатта йоҡлап ятҡан ҡыҙыҡайҙы күреп ҡалған да тағы ла әсерәк тауыш менән сыйылдарға тотонған:

132

-133-

(1) — Бына ул! Тот, тот!

— Бына ул! Бына ул! А-й-й-й! Тот!

Айыу балаһы ҡыҙыҡайҙы тешләп алмаҡсы була. Ҡыҙыҡай тауышҡа күҙен асып ебәрһә, эргәһендә өс айыуҙы күреп ҡал- (5)ған. Шунан был ҡыҙыҡай һикереп торған да тәҙрәнән сығып» та ҡасҡан. Айыуҙар, ни хәтле йүгереп ҡараһалар ҙа, уны ҡы-(7)уып етә алмағандар.

# SÖZLÜK

# A (a)

| | | |
|---|---|---|
| **aġas** | **:** ağaç | : (14.3) |
| **aġar-** | **:** ağarmak,beyaz | : (24.8) |
| **aġıw** | **:** zehir | : (14.34) |
| **aḳsa** | **:** para, akçe | : (46.1) |
| **aḳtar-** | **:** araştırmak | : (46.25) |
| **aḳır-** | **:** anırmak | : (101.20) |
| **al-** | **:** almak,tutmak | : (6.34) |
| **añla-** | **:** anlamak | : (14.32) |
| **aptıray** | **:** hayret etmek | : (36.12) |
| **aralaş** | **:** karışmak | : (30.30) |
| **arba** | **:** araba | : (79.13) |
| **arış̱lan** | **:** arslan | : (56.2) |
| **arıw** | **:** yorulmak | : (93.34) |
| **as-** | **:** açmak | : (69.39) |
| **astır-** | **:** açtırmak | : (5.38) |
| **asıḳlaw** | **:** açıklamak | : (47.27) |
| **asıl-** | **:** açılmak | : (118.30) |
| **aşaw** | **:** yemek | : (73.29) |
| **atay** | **:** baba | : (60.20) |
| **atlaw** | **:** yürümek,atlamak | : (28.19) |
| **awıl** | **:** köy | : (67.30) |
| **awır** | **:** ağır | : (41.7) |
| **awırtıw** | **:** acımak,ağrı hissetmek | : (23.35) |
| **awnaw** | **:** yuvarlanmak | : (37.1) |
| **ayır-** | **:** kesmek,ayırmak | : (43.17) |
| **ayırıl-** | **:** ayrılmak,kopmak | : (18.25) |
| **ayıw** | **:** ayı | : (69.34) |

# B (Б)

| | | |
|---|---|---|
| **baķıw** | **:** bakmak | : (89.26) |
| **bala** | **:** çocuk | : ( 13.34) |
| **bäläkäy** | **:** küçük | : (27.31) |
| **balķıw** | **:** parlamak | : (20.36) |
| **bar-** | **:** varmak | : (128.22) |
| **başıw** | **:** basmak | : (39.36) |
| **baştır-** | **:** bastırmak | : (27.21) |
| **başlaw** | **:** başlamak | : (24.24) |
| **bat-** | **:** batmak | : (7.27) |
| **batır** | **:** yiğit,kahraman | : (36.12) |
| **batırıw** | **:** batırmak | : (70.13) |
| **batırlıķ** | **:** yiğitlik,kahramanlık | : (13.24) |
| **batşa** | **:** padişah | : (62.26) |
| **bayıġ** | **:** zengin olmak | : (38.8) |
| **bazar** | **:** pazar | : (106.7) |
| **bäyläü** | **:** bağlamak,örmek | : (35.6) |
| **bäḫäs** | **:** münakaşa | : (90.25) |
| **bäḫäsläşew** | **:** tartışmak | : (33.24) |
| **bel-** | **:** bilmek | : (5.38) |
| **belderew** | **:** bildirmek | : (56.32) |
| **besay** | **:** kedi | : (12.31) |
| **beşer-** | **:** yemek pişirmek,hazırlamak | : (9.5) |
| **beş-** | **:** pişmek | : (74.4) |
| **bıl** | **:** bu | : (13.25) |
| **bir-** | **:** vermek | : (17.26) |
| **bolot** | **:** bulut | : (32.19) |
| **boron** | **:** eski | : (26.9) |
| **borow** | **:** çevirmek,döndürmek | : (45.29) |
| **bozow** | **:** bozmak | : (29.9) |
| **bökläü** | **:** bükmek ,kıvırmak | : (74.21) |
| **börkäü** | **:** örtmek,kaplamak | : (85.28) |
| **böt-** | **:** bitmek,sona ermek | : (3.9) |
| **bötör-** | **:** bitirmek | : (6.12) |
| **buyaw** | **:** boyamak | : (20.29) |

# D (Д)

| | | |
|---|---|---|
| **dala** | **:** bozkır | : (83.23) |
| **dan** | **:**şan,ün | : (31.24) |
| **dawa** | **:** deva | : (94.1) |
| **dawam** | **:** sürme devam etme | : (10.21) |
| **diñgez̧** | **:** deniz | : (38.25) |
| **doşman** | **:** düşman | : (83.6) |
| **döröş̧** | **:** doğru,dürüst | : (65.29) |

# Ä (Ә)

| | | |
|---|---|---|
| **ägär** | **:** eğer | : (7.36) |
| **apay** | **:** abla | : (23.24) |
| **äsä** | **:** anne | : (28.7) |
| **äylan-** | **:** dönmek | : (33.16) |

# E - Í(yí)

| | | |
|---|---|---|
| **ebär-** | **:** göndermek | : (35.16) |
| **el** | **:** yel,rüzgar | : (28.31) |
| **emer-** | **:** kırmak,yıkmak | : (129.2) |
| **eñ-** | **:** yenmek,mağlup etmek | : (12.24) |
| **ësew** | **:** içmek | : (4.13) |
| **eşlä-** | **:** çalışmak | : (39.3) |
| **et-** | **:** etmek | : (29.5) |
| **ëy-** | **:** eğmek | : (12.13) |

# F (Ф)

| | | |
|---|---|---|
| **fäķir** | **:** yoksul,fakir | : (71.31) |
| **faraz** | **:** faraza,diyelim ki | : (90.24) |
| **fayẕa** | **:** yarar,fayda | : (16.2) |

# Ġ (Ғ)

| | | |
|---|---|---|
| **ġäẕätläneü** | **:** alışmak | : (44.36) |
| **ġäjäplän-** | **:** şaşmak,hayret etmek | : (9.5) |
| **ġäyrät** | **:** gayret | : (12.5) |

# H (h)

| | | |
|---|---|---|
| **haġın-** | **:** özlemek | : (86.23) |
| **haķal** | **:** sakal | : (60.10) |
| **haķlan-** | **:** saklanmak | : (99.21) |
| **haman** | **:** hemen | : (32.13) |
| **hapla-** | **:** saplamak | : (91.26) |
| **harıķ** | **:** koyun | : (3.6) |
| **haray** | **:** saray | : (35.24) |
| **hat-** | **:** satmak | : (115.30) |
| **hıypa-** | **:** okşamak | : (82.36) |
| **hıw** | **:** su | : (121.10) |
| **hiker-** | **:** atlamak | : (56.33) |
| **hin** | **:** şahıs zamiri,sen | : (6.31) |
| **hiẕmä-** | **:** sezmek | : (126.3) |
| **hiẕäl-** | **:** sezilmek | : (44.15) |
| **hora-** | **:** sormak | : (93.33) |

| | | |
|---|---|---|
| **höjüm** | **:** hücum | : (13.22) |
| **höt** | **:** süt | : (27.38) |
| **höykömlö** | **:** sevimli | : (9.16) |
| **höylä-** | **:** söylemek | : (26.25) |
| **höyläş-** | **:** söyleşmek | : (5.1) |
| **huġ-** | **:** vurmak | : (35.7) |
| **huş** | **:** nefes | : (13.14) |
| **hulış** | **:** soluk,nefes | : (15.22) |
| **huẕılma** | **:** uzatma | : (16.14) |
| **hütel-** | **:** sökülmek | : (85.10) |
| **hüẕ** | : söz | : (77.37) |

# Ḫ (X)

| | | |
|---|---|---|
| **ḫäbär** | **:** haber | : (56.33) |
| **ḫäl** | **:** durum,hal | : (53.33) |
| **ḫalıķ** | **:** halk | : (8.26) |
| **ḫäsrät** | **:** hasret | : (32.11) |
| **ḫaywan** | **:** hayvan | : (28.2) |
| **ḫäyer** | **:** hayır,yarar | : (44.9) |
| **ḫäylä** | **:** hile,tuzak | : (5.14) |
| **ḫäyläkär** | **:** sahtekar | : (44.20) |
| **ḫeẕmät** | **:** hizmet,emek | : (27.25) |
| **ḫoloķ** | : huy | : (33.17) |
| **ḫozur** | **:** huzur | : (82.10) |
| **ḫököm** | **:** hüküm | : (76.17) |
| **ḫuja** | **:** efendi,sahip | : (75.25) |

# I (Ы)

| | | |
|---|---|---|
| **ız̤ala-** | **:** eziyet,işkence etmek | : (44.29) |
| **ısın-** | **:** dürüst | : (7.14) |
| **ısķındır-** | **:** kaçırmak | : (68.25) |
| **ışan-** | **:** inanmak | : (10.1) |

# İ (И)

| | | |
|---|---|---|
| **ike** | **:** iki | : (21.10) |
| **ikmäk** | **:** ekmek | : (21.5) |
| **iz̤eü** | **:** ezmek | : (21.36) |
| **ilaw** | **:** ağlamak | : (49.4) |
| **iläü** | **:** elemek | : (25.33) |
| **im-** | **:** emmek | : (5.34) |
| **in-** | **:** girmek | : (6.21) |
| **inder-** | **:** sokmak | : (27.14) |
| **integäm** | **:** intikam | : (84.26) |
| **inä** | **:** dişi | : (14.20) |
| **irek** | **:** özgürlük | : (7.31) |
| **irew** | **:** erimek,çözülmek | : (29.1) |
| **it-** | **:** etmek | : (4.10) |
| **işet-** | **:** işitmek, duymak | : (23.1) |
| **işäk** | **:** eşek | : (10.4) |

# K (К)

| | | |
|---|---|---|
| **keyen-** | **:** giyinmek | : (12.1) |
| **kem** | **:** kim | : (33.11) |
| **keskäy** | **:** küçük | : (4.26) |
| **kil-** | **:** gelmek | : (123.22) |
| **kileşew** | **:** geçinmek | : (29.8) |
| **kimer-** | **:** kemirmek | : (12.32) |
| **kiş-** | **:** kesmek | : (15.30) |
| **kit-** | **:** gitmek | : (53.15) |
| **kölöw** | **:** gülmek | : (80.20) |
| **kön** | **:** gün | : (82.9) |
| **kötöw** | **:** beklemek | : (83.25) |
| **kuyan** | **:** tavşan | : (21.20) |
| **kül** | **:** göl | : (28.35) |
| **küm-** | **:** gömmek | : (48.39) |
| **kümel-** | **:** gömülmek | : (84.7) |
| **kür-** | **:** görmek | : (49.13) |
| **kürşe** | **:** komşu | : (47.1) |
| **kütärew** | **:** kaldırmak,çekmek | : (4.7) |
| **käzä** | **:** keçi | : (3.2) |
| **käm-** | **:** azalmak | : (120.1) |
| **käräk** | **:** gerekli,lazım | : (24.12) |

# Ḳ (Қ)

| | | |
|---|---|---|
| **ḳabatlaw** | **:** tekrar etmek,yinelemek | : (31.29) |
| **ḳaġıw** | **:** çakmak,kakmak | : (47.35) |
| **ḳazıw** | **:** kazmak | : (115.6) |
| **ḳayġır** | **:** kaygılanmak | : (27.7) |
| **ḳaynaw** | **:** kaynamak | : (29.1) |
| **ḳaytıw** | **:** dönmek | : (27.6) |
| **ḳaldırıw** | **:** koymak,bırakmak,saklamak | : (27.1) |
| **ḳalıw** | **:** kalmak | : (3.23) |

| | | |
|---|---|---|
| **ķaplaw** | **:** kaplamak | : (7.2) |
| **ķaraw** | **:** bakmak | : (9.1) |
| **ķart** | **:** ihtiyar,koca kart | : (47.2) |
| **ķasan** | **:** ne zaman | : (120.4) |
| **ķasıw** | **:** kaçmak,uzaklaşmak | : (4.9) |
| **ķır** | **:** yaban | : (4.27) |
| **ķırķıw** | **:** kesmek | : (45.5) |
| **ķırmışķa** | **:** karınca | : (24.29) |
| **ķısķır-** | **:** bağırmak | : (4.36) |
| **ķış-** | **:** sıkmak | : (36.1) |
| **ķıwıw** | **:** kovmak | : (27.17) |
| **ķızar-** | **:** kızarmak | : (67.21) |
| **ķoyow** | **:** dökmek,koymak | : (12.18) |
| **ķolaġ** | **:** kulak | : (51.25) |
| **ķort** | **:** solucan,kurt | : (84.19) |
| **ķosaķla-** | **:** sarmak,kucaklamak | : (6.33) |
| **ķotķarıw** | **:** kurtarmak | : (7.34) |
| **ķoyaş** | **:** güneş | : (13.29) |
| **ķoyol** | **:** sararmak | : (3.24) |
| **ķurķıw** | **:** korkmak | : (44.4) |
| **ķuyıw** | **:** koymak | : (32.30) |

# L (Л)

| | | |
|---|---|---|
| **lager** | **:** kamp | : (87.9) |
| **läkin** | **:** ama | : (6.11) |

# M (M)

| | | |
|---|---|---|
| **maķtaw** | **:** övmek | : (11.29) |
| **mal** | **: I.**hayvan | : (35.26) |
| **matur** | **:** güzel,yakışıklı | : (9.25) |

| | | |
|---|---|---|
| **menew** | **:** binmek | : (11.18) |
| **min** | **:** ben | : (13.7) |
| **miẕgel** | **:** mevsim | : (20.9) |

# N (H)

| | | |
|---|---|---|
| **nasar** | **:** kötü,fena | : (3.14) |
| **neskä** | **:** ince | : (37.39) |
| **nimä** | **:** ne | : (42.4) |
| **nindäy** | **:** ne gibi,nasıl | : (4.24) |
| **niñä** | **:** nasıl | : (6.29) |
| **nisä** | **:** kaç,ne kadar | : (25.39) |

# O (O)

| | | |
|---|---|---|
| **oẕaķ** | **:** uzun süre,çok | : (69.23) |
| **oẕatıw** | **:** uğurlamak | : (17.17) |
| **oẕon** | **:** uzun | : (24.4) |
| **oyow** | **:** pineklemek,uyumak | : (108.39) |
| **oķşaw** | **:** andırma,benzemek | : (121.40) |
| **olo** | **:** büyük | : (27.26) |
| **olow** | **:** ulumak | : (5.15) |
| **onotow** | **:** unutmak | : (16.1) |
| **osorow** | **:** fırlatmak | : (14.26) |
| **osow** | **:** uçmak | : (10.5) |
| **osraw** | **:** rastlamak,buluşmak | : (26.13) |
| **oşo** | **:** bu,şu | : (18.25) |
| **oya** | **:** yuva | : (31.8) |
| **oyalıw** | **:** utanmak,sıkılmak | : (76.1) |

# Ö (Θ)

| | | |
|---|---|---|
| **ögöt** | **:** öğüt | : (17.36) |
| **ömöt** | **:** umut | : (77.36) |
| **öndäş-** | **:** konuşmak | : (6.23) |
| **öröw** | **:** havlamak | : (13.20) |
| **ös** | **:** üç | : (18.6) |
| **ösön** | **:** için | : (15.31) |
| **öşö-** | **:** üşümek | : (51.5) |
| **öy** | **:** ev | : (4.34) |
| **öykäw** | **:** vurmak | : (76.9) |
| **öyräk** | **:** ördek | : (8.25) |
| **öyränew** | **:** öğrenmek | : (14.26) |
| **öyrät-** | **:** öğretmek | : (25.4) |
| **öz̳öw** | **:** koparmak | : (57.18) |

# P (П)

| | | |
|---|---|---|
| **pomidor** | **:** domates | : (87.37) |
| **padişah** | **:** sultan,padişah | : (12.16) |

# R (P)

| | | |
|---|---|---|
| **rähät** | **:** zevk,tat,lezzet | : (20.5) |
| **rähätlän-** | **:** zevklenmek | : (13.5) |
| **räḫmät** | **:** teşekkür etmek | : (22.26) |
| **röḫsät** | **:** izin,müsaade | : (27.3) |

# S (C)

| | | |
|---|---|---|
| **sabıw** | **:** biçmek,tırpanlamak | : (28.14) |
| **saġıw** | **:** sokmak,dalmak | : (18.35) |
| **saḳ** | **:** vakit,çağ | : (3.19) |
| **saḳırıw** | **:** çağırmak,seslenmek | : (18.17) |
| **salıw** | **:** boğazlamak,kesmek | : (28.27) |
| **säġät** | **:** saat | : (74.15) |
| **säns-** | **:** batırmak | : (83.1) |
| **säse** | **:** ekim yapmak | : (104.18) |
| **säskä** | **:** çiçek | : (86.24) |
| **säy** | **:** çay | : (26.35) |
| **säynäw** | **:** çiğnemek | : (44.29) |
| **sebeş** | **:** civciv | : (83.26) |
| **sibär** | **:** güzel | : (11.22) |
| **sisew** | **:** çıkarmak | : (37.31) |
| **soḳow** | **:** açmak,kazmak | : (47.14) |
| **suḳıw** | **:** gagalamak | : (29.30) |
| **sumıw** | **:** dalmak | : (78.30) |
| **sıġ-** | **:** çıkmak | : (3.10) |
| **sıġar-** | **:** çıkarmak | : (85.2) |
| **sısḳan** | **:** fare,sıçan | : (26.20) |

# Ş (Ш)

| | | |
|---|---|---|
| **şaḳılda-** | **:** çalmak,takırdatmak | : (5.8) |
| **şalḳan** | **:** şalgam | : (17.21) |
| **şaltır-** | **:** çalmak,telefon etmek | : (77.33) |
| **şat** | **:** sevinç,mutluluk | : (15.26) |
| **şatlıḳ** | **:** neşe,şenlik | : (86.2) |
| **şawla-** | **:** gürültü etmek | : (87.20) |
| **şayan** | **:** yaramaz | : (110.3) |

| | | |
|---|---|---|
| **şaytan** | **:** şeytan | : (46.4) |
| **şäkär** | **:** şeker | : (33.31) |
| **şäp** | **:** hızlı çabuk | : (64.28) |
| **şeş-** | **:** şişmek,kabarmak | : (41.38) |
| **şıbırla-** | **:** fısıldamak | : (36.29) |
| **şırşı** | **:** köknar | : (82.27) |
| **şul** | **:** o,şu | : (4.25) |
| **şulay** | **:** böyle,şöyle | : (4.22) |

# T (T)

| | | |
|---|---|---|
| **taban** | **:** ayak | : (14.36) |
| **tal** | **:** söğüt | : (39.20) |
| **talaw** | **:** soymak,yağmalamak | : (78.19) |
| **talıw** | **:** dalmak | : (28.10) |
| **tam-** | **:** damlamak | : (80.10) |
| **tanıw** | **:** tanımak | : (13.36) |
| **tap-** | **:** bulmak | : (17.9) |
| **tapaw** | **: I.**çiğnemek,ezmek | : (25.31) |
| **tapḳır** | **:** kez,defa,kere | : (3.11) |
| **tarı** | **:** darı | : (91.37) |
| **tartıw** | **: I.**tartmak,kilo çekmek | : (7.37) |
| **taş-** | **:** taşmak | : (7.17) |
| **taw** | **:** dağ | : (4.26) |
| **tawıḳ** | **:** tavuk | : (11.14) |
| **tawış** | **:** ses | : (36.11) |
| **tayıw** | **:** ayağı kaymak | : (22.4) |
| **teläw** | **:** dilemek | : (9.36) |
| **terpe** | **:** kirpi | : (15.18) |
| **teş** | **:** diş | : (4.32) |
| **teşlä-** | **:** ısırmak | : (24.9) |
| **tey-** | **:** değmek | : (7.35) |
| **tınıs** | **:** sessiz,sakin | : (74.24) |
| **tıñlaw** | **:** dinlemek | : (84.32) |
| **tırış** | **:** çalışkan | : (5.17) |

| | | |
|---|---|---|
| **tırışıw** | : özenmek | : (13.22) |
| **tıw-** | : doğmak | : (14.5) |
| **tıyıw** | : yasaklamak | : (90.3) |
| **ti-** | : demek | : (16.5) |
| **tikşer-** | : araştırmak | : (46.24) |
| **tir** | : ter | : (51.17) |
| **tiş-** | : delmek,deşmek | : (90.19) |
| **toman** | : sis,duman | : (67.17) |
| **torġoẕow** | : kaldırmak | : (13.11) |
| **tor-** | : durmak | : (14.30) |
| **toton-** | : tutunmak | : (4.7) |
| **totow** | : tutmak | : (4.24) |
| **toy-** | : duymak | : (50.37) |
| **tölkö** | : tilki | : (51.24) |
| **tön** | : gece | : (4.13) |
| **törköm** | : küme,öbek,grup | : (10.4) |
| **török** | : Türk | : (99.13) |
| **tört-** | : vurmak,dürtmek | : (29.10) |
| **tös** | : renk | : (41.21) |
| **töşön-** | : düşünmek | : (90.28) |
| **töşör-** | : indirmek,sarkıtmak | : (92.34) |
| **töşöw** | : inmek,düşmek | : (93.16) |
| **tukmaw** | : dayak atmak,dövmek | : (53.11) |
| **tuḳta-** | : durmak,duraklamak | : (70.27) |
| **tuḳtat-** | : durdurmak,çevirmek | : (62.15) |
| **tul-** | : dolmak | : (33.19) |
| **tultır-** | : doldurmak | : (5.27) |
| **tuñ-** | : donmak | : (41.25) |
| **tuyıw** | : doymak | : (5.27) |
| **tuyẕır-** | : doyurmak | : (5.36) |
| **tüg-** | : dökmek | : (51.17) |
| **tügel** | : değil | : (52.22) |
| **tüşä-** | : sermek,yaymak,döşemek | : (95.25) |
| **tüẕäm** | : sabır | : (4.13) |

## U (W)- (У)

| | | |
|---|---|---|
| **uḳı** | **:** okumak | : (36.34) |
| **ular** | **:** onlar | : (9.24) |
| **ultır-** | **:** oturmak | : (69.34) |
| **urman** | **:** orman | : (81.36) |
| **uran-** | **:** sarınmak | : (64.17) |
| **urtansı** | **:** ortanca | : (18.29) |
| **ut** | **:** ateş | : (43.30) |
| **utın** | **:** odun | : (45.5) |
| **uy** | **:** düşünce | : (57.26) |
| **uyan-** | **:** uyanmak | : (34.27) |
| **uyat-** | **:** uyandırmak | : (33.36) |
| **uyla-** | **:** düşünmek,aklından geçirmek | : (30.10) |
| **uyna-** | **:** oynamak | : (35.14) |

## Ü (Y)

| | | |
|---|---|---|
| **üb-** | **:** öpmek | : (124.36) |
| **ügäy** | **:** üvey | : (59.27) |
| **ül-** | **:** ölmek | : (7.33) |
| **ülter-** | **:** öldürmek | : (57.1) |
| **üpkälä-** | **:** gücenmek | : (89.27) |
| **üs** | **:** öç | : (6.34) |
| **ütäw** | **:** geçmek,yol almak | : (33.14) |
| **ütkär** | **:** geçirmek,kaçırmak | : (122.19) |
| **üẕ** | **:** kendi,öz | : (6.24) |
| **üẕgärt-** | **:** değiştirmek | : (43.1) |

# V (B)

| | | |
|---|---|---|
| **vaķ** | **:** ufak,küçük | : (27.33) |
| **vaķıt** | **:** zaman,vakit | : (43.20) |
| **vasıyat** | **:** vasiyet | : (95.12) |
| **vat-** | **:** kırmak,bozmak | : (92.34) |

# Y (Й)

| | | |
|---|---|---|
| **yäbeş-** | **:** yapışmak | : (7.28) |
| **yänlek** | **:** vahşi | : (28.22) |
| **yäş** | **: I**.genç | : (38.19) |
| **yäş** | **: II**.göz yaşı | : (80.10) |
| **yäşä-** | **:** yaşamak,ikamet etmek | : (81.36) |
| **yäşel** | **:** yeşil | : (35.36) |
| **yäşlek** | **:** gençlik | : (48.17) |
| **yıġılıw** | **:** düşmek,yıkılmak | : (7.7) |
| **yıyıw** | **:** toplamak | : (11.26) |
| **yılġa** | **:** nehir,ırmak | : (23.25) |
| **yılġır** | **:** çevik,kıvrak | : (85.25) |
| **yılı** | **:** ılık,sıcak | : (88.9) |
| **yılıw** | **:** ısınmak | : (122.34) |
| **yır** | **:** şarkı | : (21.21) |
| **yırlaw** | **:** (şarkı) söylemek,okumak | : (4.4) |
| **yırtıw** | **:** yırtmak | : (23.16) |
| **yıwat-** | **:** yıkatmak | : (9.33) |
| **yıwıw** | **:** yıkamak | : (18.36) |
| **yoķlaw** | **:** uyumak | : (3.27) |
| **yolķow** | **:** yolmak | : (7.38) |
| **yomarlan-** | **:** yuvarlanmak | : (15.18) |
| **yomow** | **:** yummak | : (43.36) |
| **yonsow** | **:** yorulmak,yorgun düşmek | : (29.12) |
| **yotow** | **:** yutmak | : (13.10) |

| | | |
|---|---|---|
| **yöröw** | **:** yürümek,gitmek | : (5.30) |
| **yäy-** | **:** yaymak,sermek | : (13.31) |

# Yu (Ю)

| | | |
|---|---|---|
| **yul** | **:** yol | : (4.6) |
| **yuġal-** | **:** kaybolmak | : (13.30) |
| **yuġarı** | **:** yüksek | : (12.9) |
| **yuḳ** | : yok | : (22.40) |
| **yurġan** | **:** yorgan | : (117.29) |

# Ya (Я)

| | | |
|---|---|---|
| **yabay** | **:** kolay | : ( 34.14) |
| **yab-** | **:** kapamak,kapatmak | : (31.4) |
| **yaġ-** | **:** yakmak | : (14.12) |
| **yaha-** | **:** yapmak,etmek | : (20.36) |
| **yaḳşı** | **:** iyi,güzel | : (18.15) |
| **yaḳtırt-** | **:** aydınlatmak | : (124.9) |
| **yalġan** | **:** yalan | : (68.20) |
| **yalḳaw** | **:** tembel | : (23.6) |
| **yalḳıt-** | **:** bıkmak,usanmak | : (75.16) |
| **yamġır** | **:** yağmur | : (16.26) |
| **yanaw** | **:** tehdit etmek | : (20.36) |
| **yanıw** | **:** yanmak | : (9.29) |
| **yañġıẕ** | **:** yalnız | : (6.33) |
| **yañġıra-** | **:** çınlamak,ötmek | : (8.11) |
| **yar** | **:** kıyı,kenar | : (8.19) |
| **yarat-** | **:** sevmek | : (20.4) |
| **yarẕam** | **:** yardım | : (16.4) |

| | | |
|---|---|---|
| **yatıw** | **:** yatmak | : (14.29) |
| **yawap** | **:** cevap | : (18.3) |
| **yawız** | **:** kötü | : (3.4) |
| **yaẕıw** | : yazmak | |

## Z (З)

| | | |
|---|---|---|
| **zaman** | **:** vakit,zaman | : (11.14) |
| **zinhar** | **:** rica ederim,lütfen | : (57.10) |
| **zar** | **:** zarar ,hastalık | : (49.23) |
| **zat** | **:** şahıs | : (96.2) |

## Ẕ (Ҙ)

| | | |
|---|---|---|
| **ẕur** | **:** büyük | : (7.1) |
| **ẕurlaw** | **:** büyütmek | : (32.1) |
| **ẕurlıḳ** | **:** büyüklük | : (25.32) |

# KAYNAKÇA


ARAT,R.R.,(1987):"*Türk şivelerinin tasnifi*", Makaleler, TKAE Yay.c.I, Ankara.

ATALAY, B.(1985):Kaşgarlı Mahmut,*Divanü Lügat'it-Türk*,TDK.yay.,521,c.I.,Ankara.

BANGUOĞLU, T.(1995):*Türkçenin Grameri*,TDK. yay.,Ankara.

Başkurtsa-Russa hüzlik(1958),Ankara.

BENZİNG, Johannes.(1959):"Das Baschkirische",PhTF I,s.421-434,(çev.Mustafa ARGUNŞAH),"Başkurt Türkçesi",*Türk Dünyası Araştırmaları*, İstanbul.

COŞKUNARSLAN,H.(2002):*İdil-Ural Ülkesinde Rus Kolonizasyonu ve Tatar-Başkurt Ayaklanmaları,* Selçuk Üniversitesi Sosyal Bilimler Enstitüsü Basılmamış Yüksek Lisans Tezi,Konya.

DEMİR,B.(2002):*Başkurdistan:Tarihi,Nüfusu,Etnopolitik Durumu ve Milli gelişmeler*, Türkler,c.20,Yeni Türkiye yay.Ankara:s.73-80

ERCİLASUN,Ahmet B. v.d.(1992): "*Başkurt Türkçesinin kısa grameri*",*Karşılaştırmalı Türk lehçeleri sözlüğü,*c.I.,Ankara.

ERCİLASUN,Ahmet B.(1996): *Örneklerle Bugünkü Türk Alfabeleri*, 281, V.bsk., K.B.yay. Ankara.

ERGİN,M.(1993):*Türk Dil Bilgisi,*Bayrak yay.,İstanbul.

ERSOY,Yazıcı H.(2007):*Başkurt Türkçesinde kip,*Gazi Üniversitesi Sosyal Bilimler Enstitüsü Basılmamış Doktora tezi,Ankara.

GABAİN,A.V.(1995):*Eski Türkçenin Grameri(çev.Mehmet Akalın)*,TDK.yay. , Ankara.

GÖKÇE,H.(1999):*Başkurt Türkçesinin Karşılaştırmalı SesBilgisi ,* Ankara Üniversitesi Basılmamış Yüksek Lisans Tezi,Ankara.

HACIEMİNOĞLU, N.(1991):*Türk Dilinde Yapı Bakımından Fiiller,*Kültür Bakanlığı yayınları,Ankara.

İNAN A.,(1987):*“Makaleler ve İncelemeler I*”,TTK. yay.,Ankara.

İBRAHİMOV,Gaynislâm(1996):*Türkçe Başkurtça Konuşma Klavuzu*, Türksoy yay., Ankara.

KARA,M.vd.(2006): *Karşılaştırmalı Türk Lehçeleri Grameri I–Fiil* , TDK. yay. 879 , Ankara.

KARAMANLIOĞLU, A.F.(1994):*Kıpçak Türkçesi Grameri*,TDK. yay., Ankara.

KESKİN, R.(2004):*Başkurt Türkçesinde Zarf-Fiiller*, Gazi Üniversitesi Sosyal Bilimler Enstitüsü Basılmamış Yüksek Lisans Tezi, Ankara.

KORKMAZ Z.(1995):*Türkçede -acak/-ecek gelecek zaman ekinin yapısı üzerine,Türk Dili Üzerine Araştırmalar*, TDK yay.c.1, Ankara:s.3-11.

KORKMAZ, Z.(2003):*Türkiye Türkçesi Grameri*(Şekil Bilgisi),Ankara.

KURAT,Aktes,N.(1992):*IV-XVIII yy. Karadeniz Kuzeyindeki Türk kavimleri ve Devletleri”*,Ankara.

ÖNER M.,(1998):*Bugünkü Kıpçak Türkçesi*, TDK. Yay.,Ankara.

POPPE,Nicholas.(1964):*Bashkir Manual*, (Desariptive Grammar and Texts With A Bashkir-English Glossary),Indiana University,Bloomington.

RUDENKO,Sergey İ.(2001):*Başkurtlar*,(çev.Roza-İklil Kurban),Kömen yay,Konya.

TAYMAS, Abdullah B.(1988): *Kazan Türkleri,* TKAE yay.Ankara.

TERZİ, M.(1999):*Başkurtça'da Haber Kipleri ve Zaman Kaymaları*,Çanakkale 18 Mart Üniversitesi (Yüksek Lisans Tezi),Çanakkale.

TOGAN, Zeki V.(1993):*İslâm Ansiklopedisi*, Başkırt maddesi.2.cilt,s.328-332

TOKATLI, S.(1994):*Başkurt Türkçesi Grameri*,Erciyes Üniversitesi Basılmamış Doktora Tezi,Kayseri.

TOKATLI,S.(2002):*Başkurt Türkleri*,Türkler,c.20, Yeni Türkiye yay.Ankara:s.81-87.

YÜKSEL, Z.(1992):*Kırım,Kazan ve Başkurt Türkçelerinde Fiil*,Gazi Üniversitesi Basılmamış Doktora Tezi,Ankara.

ZÄYNULLİNA,G.D.(1996):*Töröksä-Başkortsa,Başkortsa–Töröksä hüzlek,*Başkortostan kitap näşriäte,Ufa.

ZEYNULLİN,M.V.(2002): Sovremennıy Başkurskıy Literaturnıy Yazık Morfologiya , Ufa.